Башкортостан республикаһы Бөрйән районы
Аҫҡар урта мәктәбе муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеһының
Брәтәк филиалы мәктәпкәсә төркөмө

Раҫлайым
Аҫҡар урта мәкәбе директоры
_______ Йәрмөхәмәтов И.И
Приказ №_130_ «_30_»_08_2022г

Мәктәпкәсә дөйөм белем биреү программаһы

Килешелде
Аҫҡар урта мәктәбенең
педагогтар кәңәшмәһендә
Протокол №_1_ «_30_»_08_2022г

Инеш һүҙ

Программа мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында Федераль дәүләт мәктәпкәсә белем биреү стандарты (артабан - ФДМББС) талаптарына ярашлы балаларҙы аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү процесы башҡорт телендә ойошторолған балалар баҡсаһында Мәктәпкәсә белем биреү программаһын үҙ-аллы төҙөүҙә ярҙам итеү маҡсатында төҙөлдө.

В.В. Давыдовтың, В.А. Петровскийҙың һәм башҡаларҙың заман талаптарын сағылдырған «Мәктәпкәсә белем биреү фәнни концепцияһы»нда баласаҡ осор – кеше тормошонда үтә лә мөһим урын биләгән дәүер икәнлеге билдәләнә. Ошо концепцияға таянып, баланың шәхес булып формалашыуында аң-белемдең үҫтереүсе көс булыуы программала төп урын ала һәм педагог ошо йүнәлештә баланың шәхси һәм йәш үҙенсәлектәренән сығып тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеү эшен ойошторa.

Программа төп дидактик принциптарҙың береһе булған үҫтереүсе уҡытыу принцибына һәм Л.С.Выготскийҙың «дөрөҫ ойошторолған аң-белем биреү - баланың үҫешен етәкләй» тигән фекеренә таянып ҡоролған. В.В.Давыдов фекеренсә, тәрбиә һәм психик яҡтан үҫеш бер-береһенән айырылғыһыҙ ике процесс, ләкин шулай ҙа “тәрбиә - бала үҫешенең бөтә яҡтан да кәрәкле булған формаһы” тип һанала. Шулай итеп, программала иң беренсе урында баланың шәхес булараҡ үҫеше күҙ уңында тора.

Программаның йөкмәткеһе тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеүҙе мәҙәнилек (культуросообразность) принцибына таяна: тәрбиә эше халыҡтың тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, традициялары нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Аң-белемгә өйрәтеү барышында баланы кешелектең донъяуи рухи һәм әхлаҡи үҙкиммәттәре менән таныштырыу, улар тураһында ябай ғына төшөнсәләр биреү, көндәлек йәшәйештә уларҙы күҙәтергә, яҡшыны насарҙан, матурлыҡты йәмһеҙлектән, дөрөҫлөктө алдаҡсылыҡтан һ.б. айырырға, уларға ҡарата үҙ фекерен билдәләп, асыҡлап, аңлата белергә күнектереү тора. Шулар нигеҙендә балала шәхси холоҡ-фиғел һыҙаттарын формалаштырыу ҡарала.

Программала баланың белем кимәленә аныҡ талаптар ҡуйылмай һәм шул уҡ ваҡытта айырым предметты өйрәтеүгә лә өҫтөнлөк бирелмәй. Ғалимдар А.Н.Леонтьев,А.В.Запорожец, Д.Б. Эльконин, һ.б. ғилми хеҙмәттәрендә иҫбат ителгән тәғлимәт - баласаҡта уйын баланың төп эшмәкәрлеге - программала төп урынды ала.

Программа:

- баланы аң-белемгә өйрәтеүҙә һәм шәхес итеп формалаштырыуҙа үҫтереүсе уҡытыу принцибына таяна;
- фәнни ҡаҙаныштар нигеҙендә ҡоролоп, ысынбарлыҡта практик рәүештә үҙҙәренең һөҙөмтәлелеген күрһәткән методик алымдарҙы ҡулланыу мөмкинлеген бирә;
- тәрбиәләү, баланы һәр яҡлап үҫтереү һәм аң-белемгә өйрәтеү маҡсаттарының һәм бурыстарының балалар баҡсаһында һәм ғаиләлә уртаҡ булыуын күҙаллай;

- баланың йәш айырмалыҡтары һәм шәхси үҙенсәлектәре нигеҙендә белем биреү өлкәләренең йөкмәткеһе үҙ-ара үрелеп, ҡушылып, аралашып, йәғни интеграция шарттарында ойошторолоуҙы талап итә;

- тәрбиәләү һәм белем биреү процесын комплекслы-тематик принципҡа таянып ойоштороу бурысын ҡуя;

- көн тәртибе буйынса баланың үҙ-аллы эшмәкәрлегендә һәм ололар менән бергә ойошторолған сараларҙа мәктәпкәсә белем биреүгә һәм тәрбиәләүгә хас булған алымдарҙың ҡулланылыуын талап итә;

- тәрбиәләү һәм белем биреү процесының баланың йәш кимәле үҫешенә тап килтерелеп һәм уйын формаһында ойошторолоуҙы беренсе урынға ҡуя;

- төбәк-ара һәм балалар баҡсаһы үҙенсәлектәренә ярашлы аң-белем биреү һәм тәрбиәләү эшендә төрлө вариатив формалар ҡулланыу мөмкинлеген бирә;

- йәш кимәле буйынса айырмаһы булған төркөмдәр араһында, шулай уҡ башланғыс мәктәп һәм балалар баҡсаһы алдында торған бурыстарҙың йөкмәткеһендә бәйләнеште һәм күсәгилешлекте һаҡлай.

Программаның төҙөлөшө Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы Дөйөм белем буйынса федераль уҡыу-методик берләшмәнең ҡарарына тап килтереп төҙөлгән (20.05.2015 й. №2/15 һанлы протокол).

Программа өс бүлектән тора:

1. Билдәләнгән маҡсаттар (целевые ориентиры) бүлеге.

2. Аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиә эше йөкмәткеһе бүлеге.

3. Аң-белем һәм тәрбиә эшен ойоштороу бүлеге.

Билдәләнгән маҡсаттар бүлеге программаның маҡсатын һәм бурыстарын, уның йөкмәткеһенең эстәлеген, шулай уҡ программаның үтәлеше буйынса планлаштырылған һөҙөмтәләрҙең кимәлен асыҡлай. Планлаштырылған һөҙөмтәләр булып баланың үҙенең *йәш кимәленә тап килгән социаль-норматив үҫеше* тора.

Аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиә эшенең йөкмәткеһе бүлегендә баланың дөйөм үҫешен билдәләгән биш төрлө йүнәлештәге белем биреү өлкәләренең («Социаль-коммуникатив үҫеш», «Тирә-йүнде танып-белеү үҫеше», «Телмәр үҫеше», «Художество-эстетик яҡтан үҫеш», «Физик үҫеш») эстәлеге күрһәтелә.

Аң-белем һәм тәрбиә эшен ойоштороу бүлегендә программаның йөкмәткеһен үҙләштереү өсөн тейешле шарттар булдырыуға талаптар, ҡуйылған маҡсаттарға (ориентирҙарға) ярашлы планлаштырылған һөҙөмтәләргә ирешеү саралары асыҡлана:

- психологик һәм педагогик шарттарҙың үҙенсәлектәре, аң-белем биреү процесын кадрҙар менән, финанс һәм матди-техник яҡтан тәьмин итеү шарттары;

- үҫтереүсе предметлы-арауыҡ мөхите булдырыуға талаптар;

- белем биреү һәм тәрбиәләү эшмәкәрлеге төрҙәре үҙенсәлектәренә нигеҙләнеп эш итеү;

- баланың үҙ-аллығын һәм ижадилығын үҫтереүгә йүнәлтелгән эш алымдарын һәм йүнәлештәрен ҡулланыу;

- педагогик коллективтың ата-әсәләр менән берлектә эшләүен тәьмин итеү;

- балаларҙың йәш һәм үҫеш кимәлдәренә ярашлы һәм уларҙың шәхси

ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында көн тәртибен ойоштороу һәм тормошҡа ашырыу һ.б.

Программала мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн ойошторолған психологик һәм педагогик эштең йөкмәткеһе белем биреү өлкәләре буйынса («Социаль-коммуникатив үҫеш», «Тирә-йүнде танып-белеү үҫеше», «Телмәр үҫеше», «Художество-эстетик яҡтан үҫеш», «Физик үҫеш») бирелә. Һәр белем биреү өлкәһенең төп маҡсаты, бурыстары һәм йөкмәткеһе балаларҙың йәш төркөмдәренә ярашлы тематик блоктарҙа күрһәтелә.

Баланы шәхес итеп үҫтереүгә программала төп урын бирелә. Балала үҙ-үҙенә ышаныу, тормошҡа ҡарата әүҙем ҡарашлы булыу, тормош ҡыйынлыҡтарын еңел сисергә ынтылырға тырышыу, һәр нәмәгә ҡарата үҙ фекерле булыу һәм уны яҡлай белеү һәләтен тәрбиәләү тора.

Программа йөкмәткеһендә тыуған илгә ҡарата һөйөү, уның үткәне, бөгөнгө ҡаҙаныштары менән ғорурланыу тойғолары тәрбиәләүгә, күп милләтле халыҡтар дуҫ булып йәшәгән, матур тәбиғәтле, донъяла танылған илдәр Рәсәй һәм Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәр ҙур урын бирелгән.

Программала кескәйҙәрҙе әхлаҡи һәм рухи яҡтан тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелә: ата-әсәләргә ҡарата һөйөү, яратыу тойғолары уятыу, ололарҙы хөрмәтләү, кескәйҙәргә ярҙамсыл булыу кеүек һыҙаттарҙы тәрбиәләү ҡарала.

Уҡыу, белем алыу – тормошта иң кәрәкле ҡиммәттәрҙең береһе икәнлеген төшөндөрөү аша программала балала аң-белемгә ҡарата ынтылыш тәрбиәләүгә, донъяны танып-белеүгә, йәшәү дәүерендә үҙенең шәхси үҫешен, профессионал кимәлен үҫтереүгә һәр саҡ теләк булыуына йүнәлеш бирелә.

Программаның төп йүнәлештәренең береһе булып баланың һаулығын һаҡлау һәм нығытыу эшен ойоштороу тора. Балаларға ябай ғына кимәлдә һаулыҡтың кеше өсөн ҙур байлыҡ булыуын, һаулыҡты һаҡлау өсөн дөрөҫ һәм хәүефһеҙ итеп йәшәргә өйрәнеү, файҙалы әҙәп ҡағиҙәләрен үҙләштереү, дөрөҫ туҡланыу, көн тәртибен тейешенсә ойоштороу һәм үтәү, физик яҡтан сынығыу, хәрәкәтләнеү кәрәклеген төшөндөрөү һәм программаға ярашлы уларҙы формалаштырыу күнекмәләренә өйрәтеү бурысы ҡуйыла.

Программа һәр бер баланың йәшәйеше психологик яҡтан уға ҡулайлы булған шарттарҙы үтеүен тәьмин итеү маҡсатында уның көн тәртибен һәм ололар менән аралашыу ысулдарын баланың шәхси үҙенсәлектәренә ҡулайлаштырып ойоштороуҙы күҙаллай.

Психологик-педагогик эштең йөкмәткеһе тематик блоктар менән һәр йәш төркөмө өсөн айырып бирелә. Программаның ошо рәүешле ҡоролошо аң-белем процессының һәр йүнәлеше буйынса баланың үҫеш кимәлен күҙәтергә, программа йөкмәткеһе өҫтөндә ижади эш итергә һәм өҫтәлмә рәүештә вариатив материалдарҙы ҡулланырға мөмкинлек бирә.

Программала психологик һәм педагогик эш йөкмәткеһе түбәндәге **йәш төркөмдәре өсөн** бирелә:

- иртә йәштәге кескәйҙәрҙең беренсе төркөмө (1 йәштән 2 йәшкә тиклемге осор);
- иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклемге осор);

- кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклемге осор);
- уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклемге осор);
- өлкән төркөм (5 йәштән 6 йәшкә тиклемге осор);
- мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклемге осор).

Программа йөкмәткеһенең тематик блоктарға бүленеп бирелеүе балалар баҡсаһының Мәктәпкәсә белем биреү программаһын үҙ-аллы ҡорғанда ойошманың төрөн, өҫтөнлөклө йүнәлештәрен һәм милли-төбәкте сағылдырған үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып эш итеү мөмкинлеген бирә. Мәҫәлән, балалар баҡсаһы ҡайһы бер блоктарҙың йөкмәткеһен үҙ-аллы төҙөргә йәки билдәле авторҙың парциаль программаһы менән алмаштыра ала. Тик төп шарт булып уларҙың стандарт талаптарына тура килеүе тора.

Мәктәпкәсә белем биреү стандартында уйын айырым рәүештә баланы үҫтереү һәм аң-белемгә өйрәтеү буйынса билдәләнгән өлкәләрҙең береһенә лә индерелмәгән, сөнки уйын баланың төп эшмәкәрлеге булараҡ балалар баҡсаһы эшенең һәр бер төрөндә мотлаҡ рәүештә ойошторолған булыуҙы күҙаллай. Бала үҫешендә уйындың үтә лә мөһим урын алыуын билдәләп, программала уйынға бағышланған ҡушымта бирелә (ҡушымта № 2 **"Уйын эшмәкәрлеге үҫешенә талаптар").**

Программала ғаиләнең бала тәрбиәләү өлкәһендәге яуаплылыҡты һәм һөҙөмтәлекте юғары кимәлгә күтәреү маҡсатында **ата-әсәләр менән эште ойоштороуға** айырым бүлек бирелә.

Программала шулай уҡ сәләмәтлек мөмкинселектәре сикләнгән мәктәпкәсә йәштәге балалар менән ҡатнаш йүнәлештәге (комбинированные) төркөм шарттарында тәрбиәләү һәм аң-белемгә өйтәреү эштәренең үҙенсәлектәренә ҙур урын бирелә. Коррекция-үҫтереү программаларын төҙөү, уларҙы һәр бер белем биреү өлкәһе буйынса тормошҡа ашырыу буйынса ҡыҫҡаса күҙаллау бирелә.

Программаның төп өҫтөнлөгө булып, уның йөкмәткеһенең эҙмә-эҙлекле булыуы һәм балалар баҡсаһы эшмәкәрлегендә киң ҡуллана алыу мөмкинлеген биреүе тора. Программаны тормошҡа ашырыу өсөн ниндәйҙер айырым шарттар тыуҙырыу, материаль-техник яҡтан өҫтәлмә сығымдар планлаштырыу һәм педагогтарҙың профессиональ кимәлен махсус рәүештә әҙерләү талап ителмәй. Башҡорт балалар баҡсаһында эшләүсе хеҙмәткәрҙәргә төп талап булып – башҡорт телендә аралаша, башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен, көнкүреш үҙенсәлектәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын белеү мотлаҡ тип һанала.

Программала һәр бер эшмәкәрлек төрө буйынса ҡушымта итеп яҡынса исемлек бирелә. Уларҙың ошо рәүешле бирелеүе программаны ҡыҫҡарта һәм уның йөкмәткеһен уҡып төшөнөүҙе еңеләйтә. Шул уҡ ваҡытта яҡынса исемлектәрҙе сағыштырып, баланың йәш айырмаһына ярашлы йөкмәткенең нисек үҙгәреүен күҙәтергә мөмкин.

Программа эстәлеге ике өлөштән тора: беренсе өлөшөндә балалар мотлаҡ үҙләштерергә тейешле булған (60%) федераль кимәлдә тәкдим ителгән һәм федераль реестрға ингән Төп мәктәпкәсә белем биреү өлгө программаһы материалдарына ярашлы алынған (Н.Е.Веракса, Т.С.Комарова, М.А.Васильева редакцияһындағы "Тыуғандан – мәктәпкә тиклем" программаһы) йөкмәтке бирелә.

Икенсе өлөшөндә (40%) белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар бирелә. Һәр ике өлөштә бирелгән материалдар бер-береһенең йөкмәткеһен тулыландырып, асыҡлап, балаларға тирә-йүнде танып-белергә, улар нигеҙендә үҙ-аллы төрлө һығымталар яһарға һәм шул рәүешле уларҙың аҡыл-зиһен кимәлен үҫтерергә ярҙам итеүҙе күҙаллай.

БИЛДӘЛӘНГӘН МАҠСАТТАР

Аңлатма яҙыу

Программаның **төп маҡсаты** булып кескәйҙәргә бала саҡ дәүерен ошо осорға хас булған рәүештә йәшәп үткәреү өсөн тейешле шарттар тыуҙырыуҙы күҙ уңында тота. Кешенең шәхес булараҡ формалашыуына бала саҡта нигеҙ һалына, ул балалыҡтан ҡыуаныс, шатлыҡ, илһам, дәрт алып, физик һәм психик яҡтан үҫергә, тирә-йүнде танып-белергә һәм аң-белем даирәһен үҫтерергә, кешеләр менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡорорға, йәшәйештә үҙ урынын таба белергә өйрәнә. Был маҡсаттар кескәйҙәр эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәрендә: уйында, үҙ-ара аралашыуҙа һәм һөйләшеүҙә, хеҙмәттә, танып-белеүҙә-эҙләнеүҙә, эшмәкәрлектең емешле (продуктив) төрҙәрендә (художество-эстетик үҫештә, ҡоролмалар төҙөүҙә һ.б.), музыкала, нәфис әҙәбиәт менән танышыуҙа тормошҡа ашырыла.

Программаның маҡсаттарына ирешеү өсөн түбәндәге бурыстарҙы хәл итеү кәрәк:

- баланың һаулығын һаҡлауҙы, кескәйҙәрҙең бер-береһе һәм ололар менән ыңғай мөнәсәбәттә булыуҙы һәм уларҙың төрлө яҡлап үҫеш кимәлен тәьмин итеүҙе ойоштороу;
- балаларҙы асыҡ күңелле, алсаҡ, ҡыҙыҡһыныусан, әүҙем, тырыш, эскерһеҙ итеп тәрбиәләү өсөн төркөмдәрҙә уларҙың бер-береһенә һәм ололарға ҡарата ихтирамлы һәм мөләйем ҡарашлы мөнәсәбәттә булыуын ойоштороу;
- тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеү эшенең һөҙөмтәһе нәтижәле булһын өсөн балалар эшмәкәрлеген төрләндереү һәм уларҙы берләштереп үткәреү;
- балалар баҡсаһында тәрбиә һәм аң-белем биреү процесын ижади рәүештә ойоштороу;
- тәрбиә һәм аң-белем биреүҙә дидактик материалдарҙың төрлөлөгө һәм уларҙы ҡулланыу ысулдары балаларҙың шәхси һәләтен асырға һәм ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерергә ярҙам итеүҙе ойоштороу;
- баланың ижад емешен хөрмәт менән ҡабул итеү;
- ғаилә менән балалар баҡсаһы тәрбиә һәм аң-белем биреү эшендә бер үк талаптар ҡуйып, берҙәм һәм бергә эш итеү;
- балалар баҡсаһы һәм башланғыс мәктәп эшендә күсәгилешлекте һаҡлап эш итеү;

Программала билдәләнгән бурыстарҙың һәм маҡсаттарҙың үтәлеше педагогтың бала һәм ата-әсәләр менән беренсе көндән үк эҙмә-эҙлекле һәм

маҡсатлы рәүештә әүҙем эшләүенән тора. Баланың үҫеш кимәле, әхләҡи сифаттарының ныҡлығы һәр тәрбиәсенең һөнәри оҫталығынан, уның мәҙәнилегенән, балаларҙы яратыуынан тора.

Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының белгестәре ғаилә менән берлектә, баланың һаулығын ҡайғыртып, уның психик һәм физик яҡтан үҫешенә төрлө яҡтан заманса алымдар, ысулдар аша тәьҫир итеп, бала саҡтың бәхетле үтеүенә ынтылырға тейеш. Кескәйҙәргә аң-белем биреү – донъя мәҙәниәтен (белем, этика, мораль, мәҙәниәт, хеҙмәт) аңларға, һиҙемләргә төшөндөрөүҙе үҙ эсенә ала.

Программа йөкмәткеһе буйынса йыйылған материалдар, әҫәрҙәр стандартта күрһәтелеүенсә «тәрбиәүи ҡиммәткә эйә, юғары художестволы кимәлдә булыуҙы талап итәләр һәм баланың тәбиғәттән һалынған төрлө йүнәлештәге һәләттәрен асырға һәм үҫтерергә ярҙам итергә тейештәр». Ошо уҡ фекерҙәр мәктәпкәсә белем биреү өлкәһендә ғилми тикшеренеүҙәр үткәргән ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә лә ҙур урын алған (Е.А.Флерина, Н.П.Сакулина, Н.А. Ветлугина, Н.С. Карпинская).

ПРОГРАММАНЫ ҮҘЛӘШТЕРЕҮ БУЙЫНСА ПЛАНЛАШТЫРЫЛҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘР

Бала үҫеше йүнәлештәре буйынса ҡуйылған билдәләнгән маҡсаттар (целевые ориентиры)

Бала саҡтың үҙенсәлекле булыуы (нервы системаһының һығылмалылығы, зирәклеге; бала күңеленең эскерһеҙлеге, тәбиғилеге; холоҡ-фиғел сифаттарының формалашыу кимәленең төрлөсә булыуы) мәктәпкәсә йәштәге баланан конкрет белем һөҙөмтәләренә эйә булыуҙы талап итмәй, шунлыҡтан Программаны бала тарафынан үҙләштерелеүе тик уның психик һәм физик үҫешенә ҡарата ҡуйылған маҡсаттарҙың үтәлеүе, йә үтәлмәүе менән билдәләнә.

ФДМББС-да һәр бер йүнәлеш буйынса бирелгән маҡсаттар баланың йәш кимәленә ярашлы уның социаль-норматив үҫешен билдәләй. Был маҡсаттар ата-әсәләр һәм педагогтар өсөн баланы аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү эшмәкәрлегендә төп маҡсат (ориентир) булып торалар.

ФДМББС талаптары буйынса, бала үҫешенең йүнәлештәре буйынса ҡуйылған маҡсаттар Рәсәй Федерацияһында мәктәпкәсә аң-белем биреү даирәһе өсөн дөйөм тип һанала. Тик һәр бер Өлгө программа үҙ үҙенсәлектәренән сығып, бала үҫешендәге ниндәйҙер өлкәгә, йәғни йүнәлешкә өҫтөнлөк бирә һәм үҙ маҡсаттарын ҡуя. Ләкин улар стандарт талаптарын инҡар итмәй, киреһенсә, ҡуйылған маҡсаттар нигеҙендә был йүнәлештәрҙең тәрәнерәк, киңерәк өйрәтелеүен күҙаллай.

Шулай итеп, был Программала ҡуйылған *маҡсаттар (ориентирҙар)* стандарт талаптарына таянып бирелә һәм үҙ эсенә ике йәш осорҙо ала:

- иртә йәштәге кескәйҙәр төркөмө (1 йәштән 3 йәшкә тиклемге осор);
- кескәйҙәрҙең икенсе төркөмөнән башлап балаларҙың мәктәпкә китеү ваҡытын (3 йәштән 7 йәшкә тиклемге осорҙо).

Иртә йәштәге кескәйҙәр төркөмө балаларын аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү буйынса ҡуйылған маҡсаттар (ориентирҙар) (1 йәштән 3 йәшкә тиклемге осор):

- бала үҙен уратып алған предметтар менән ҡыҙыҡһына һәм уларҙы көндәлек йәшәйештә әүҙем ҡуллана; уйынсыҡтар һәм предметтар менән бирелеп, күңелен һалып уйнай, үҙенең эш-хәрәкәтендә һөҙөмтәле уңыштарға ирешергә тырыша һәм ныҡышмалыҡ күрһәтә;

- көнкүреш кәрәк-яраҡтарының тәғәйенләнешен белә (ҡалаҡтар, тараҡтар, ҡәләмдәр һ.б.) һәм уларҙы йәшәйештә дөрөҫ ҡуллана. Үҙ-үҙен хеҙмәтләндереү буйынса ябай ғына күнекмәләргә эйә; көнкүреш һәм уйын эшмәкәрлегендә үҙ-аллылыҡ күрһәтергә ынтыла; бөхтәлек һәм йыйнаҡлыҡ һыҙаттары үҫешә башлай;

- тупаҫлыҡҡа, һаранлыҡҡа ҡарата үҙенең кире ҡарашын белдерә;

- ябай ғына булған әҙәп ҡағиҙәләрен үтәй (өйҙә, төркөмдә үҙ-аллы, йә булмаһа ололар ярҙамы менән «рәхмәт, һаумыһығыҙ, һау булығыҙ, тыныс йоҡо» һүҙҙәрен ҡуллана; балалар баҡсаһында, өйҙә, урамда үҙ-үҙен дөрөҫ тотоу ҡағиҙәләрен белә һәм уларҙы үтәргә тырыша;

- аралашыуҙа әүҙем телмәргә эйә; ололарҙың телмәрен аңлай, уларға һорауҙар һәм үтенестәр менән мөрәжәғәт итә белә; тирә-яҡтағы предметтарҙың һәм уйынсыҡтарҙың атамаларын әйтә. Баланың телмәре башҡалар менән тулыһынса аралашыу сараһы булып китә.

- ололар менән аралашырға ынтыла һәм эш-хәрәкәттә уларға оҡшарға тырыша; ҡайһы бер уйындарҙа ололарҙың холоҡ-фиғелен һәм аралашыу ысулдарын ҡабатлап күрһәтә; ололар тәҡдим иткән уйынға ыңғай ҡарашта була һәм уйындың маҡсатын дөрөҫ ҡабул итә;

- тиҫтерҙәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныуы бар; уларҙың эш-хәрәкәтен күҙәтә һәм уларға оҡшатып ҡабатлай;

- тиңдәштәренә ҡамасауламайынса бергәләп уйнай белә; бәләкәй генә төркөмдәргә бүленеп уйнауға ла ҡыҙыҡһыныуын күрһәтә;

- тирә-яҡ тәбиғәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныуы бар, миҙгел үҙгәрештәрен күҙәтеүҙә ҙур теләк менән ҡатнаша;

- шиғыр, йыр, әкиәттәрҙе тыңлауға, һүрәттәрҙе ҡарауға ҡыҙыҡһыныу күрһәтә; музыкаға ярашлы хәрәкәтләнергә тырыша, мәҙәниәт һәм сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата ыңғай ҡарашын белдерә;

- ҡурсаҡ театры геройҙарының уйнауын бирелеп ҡарай; театрлаштырылған һәм сюжетлы-ролле уйындарҙа теләп ҡатнаша;

- продуктив эшмәкәрлеккә (һүрәт төшөрөү, әүәләү, ҡоролмалар төҙөү, йәбештереү) ҡыҙыҡһыныу күрһәтә;

- баланың эре моторикаһы үҫешкән, ул төрлө төр хәрәкәттәрҙе үҙләштерергә ынтыла (йүгереү, шыуышыу, аша атлау һ.б.). Ябай йөкмәткеле булған төрлө хәрәкәтле уйындарҙа ҡыҙыҡһынып ҡатнаша.

Мәктәпкәсә аң-белем алыуҙы тамамлаған балаларҙың үҫешен билдәләүгә ҡуйылған маҡсат ориентирҙары (7 йәшлек):

- бала көнкүрештә ҡулланылған һәм үҙ-үҙен хеҙмәтләндереү буйынса йәмғиәттә ҡабул ителгән эш-хәрәкәттәргә эйә була, төрлө эшмәкәрлектең башҡарыу

ысулдарын үтәгәндә булдыҡлылыҡ һәм үҙаллылыҡ күрһәтә. Төрлө эшмәкәрлектә - уйында, аралашыуҙа, танып-белеү-эҙләнеү эшмәкәрлегендә, ҡоролмалар төҙөүҙә һ.б., үҙенә оҡшаған эш төрөн башҡара һәм үҙенә бергәләп эш итеү өсөн иптәш һайлай белә;

- бала донъяны (төрлө эш төрҙәрен, кешеләрҙе, үҙен, һ.б.) ыңғай ҡараш менән ҡабул итә; ололар һәм тиңдәштәре менән яҡшы мөнәсәбәт тыуҙырып, әүҙем аралаша, шул уҡ ваҡытта үҙенең абруйын һаҡлай белә;

- башҡа балалар менән һөйләшеп, үҙ-ара килешә белә, башҡаларҙың теләген, күңел торошон һәм хис-тойғоларын иҫәпкә ала, ҡыйын саҡта бергә ҡайғыра, уңыштарға шатлана. Хис-тойғоларын, эске кисерештәрен холоҡ-киәфәте аша дөрөҫ сағылдыра, үҙ-үҙенә ышаныу тойғоһо нигеҙҙәре үҫешкән. Төрлө бәхәстәрҙе ыңғай сисергә ынтыла;

- берҙәм эшмәкәрлек барышында әйҙәүсе булараҡ та, башҡарыусы булараҡ та хеҙмәттәшлек итергә һәләтле;

- милли һәм социаль сығышына, матди яҡтан булған хәленә, ғаиләлә ҡабул ителгән дини айырмаға, физик һәм психик яҡтан үҫеш үҙенсәлектәренә ҡарамаҫтан бөтә кешеләрҙең дә бер тигеҙ икәнлеген аңлай;

- башҡа кешеләрҙе ишетергә һәм уларҙы аңларға тырышыу оҫталығын күрһәтә.

- төрлө эшмәкәрлектең һөҙөмтәһен алдан күҙаллауы үҫешкән, ул бигерәк тә уйын барышында асыҡ күренә; төрлө уйындарҙы уйнай, уларҙың үткәреү формаларын белә; шартлы һәм ысынбарлыҡта булған хәлдәрҙе айыра; төрлө социаль нормаларға һәм ҡағиҙәләргә буйһона, үтәй белә. Көнкүрештәге төрлө хәл-ваҡиғаларҙы таный һәм баһалай белә;

- баланың һөйләү телмәре бай, телмәр аша үҙенең фекерҙәрен, уйҙарын һәм теләктәрен аңлата белә. Һүҙҙәрҙә өндәрҙе айыра,уларҙан һүҙҙәр, һөйләмдәр төҙөй, грамоталыҡ нигеҙҙәре формалашҡан;

- баланың эре һәм ваҡ моторикаһы үҫешкән; ул хәрәкәтсән, сыҙамлы, төп хәрәкәттәргә эйә, үҙенең хәрәкәттәрен контролдә тота, үҙ теләгенә буйһондора белә;

- бала ихтыяр көсөнә эйә, төрлө эшмәкәрлектә йәшәйештә ҡабул ителгән әхлаҡи һәм әҙәп ҡағиҙәләрен үтәй, ололар һәм тиҫтерҙәре менән үҙ-ара ыңғай мөнәсәбәт булдыра ала, шәхси гигиена күнекмәләрен һәм хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәй;

- башлаған эшен аҙағына еткереп тамамларға тырыша, уның өсөн яуаплы икәнлекте аңлай;

- бала ҡыҙыҡһыныусанлығын күрһәтә, ололарға һәм тиңдәштәренә һорау бирә, кешенең холоҡ-ҡылыҡтарына һәм үҙен уратып алған тәбиғәт күренештәренә яуап бирергә тырыша; күҙәтергә, тәжрибәләр эшләргә ярата. Үҙе, тәбиғәт һәм үҙе йәшәгән социаль донъя тураһында башланғыс белемгә эйә; балалар әҙәбиәте ижады менән таныш, йәнле тәбиғәт, математика, тарих һ.б. фәндәр өлкәһендә башланғыс белемдәре бар;

- киләсәктә мәктәптә, юғары уҡыу йортонда уҡырға тигән ниәт менән белем алырға ынтыла;

- ғөмүмән йәшәйешкә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт, хөрмәт күрһәтә;

- профессиональ сәнғәт әҫәрҙәрен (музыка, бейеү, театр эшмәкәрлегенә, ижади эшмәкәрлеккә һ.б.), халыҡ ижадын, тирә-яҡ мөхиттең матурлығын шатланып ҡабул итә;

- илһөйәрлек тойғолары нигеҙе бар, иле һәм уның ҡаҙаныштары менән ғорурлана белә, уның географик төрлөлөгө, күп милләтлелеге, мөһим тарихи хәлдәре тураһындағы башланғыс күҙаллауға эйә;

- үҙе, ғаилә, уның үҙҡиммәттәре, гендер үҙенсәлектәре тураһында ябай ғына төшөнсәләре бар; үҙенә һәм икенсе енескә ҡарата хөрмәт тойғоһо күрһәтә;

- йәшәйештә ҡабул ителгән ябай ғына ҡағиҙәләрҙе, әхлаҡи нормаларҙы үтәй, «нимә яҡшы һәм нимә насар» тигән тәғлимәтте үтәргә тырыша; өлөләргә ҡарата хөрмәт, ә кескәйҙәргә ҡарата хәстәрлек күрһәтә;

- һаулыҡты донъялағы иң ҙур байлыҡ итеп ҡабул итә һәм үҙ тормошонда хәүефһеҙ йәшәү ҡағиҙәләрен үтәргә тырыша.

Программаны үҙләштереү һөҙөмтәләрен баһалау системаһы

Мәктәпкәсә йәштәге балалар баҡсаһында ФДМББС-на ярашлы, баланың үҫеш йүнәлештәре маҡсаттары үтәлешенә туранан-тура педагогик диагностика үткәрелмәй, баһаланмай һәм уның ысынбарлыҡтағы уңыштары менән сағыштырылмай. Программаның үҙләштерелеүен тикшереү маҡсатында аттестация ла үткәрелмәй.

Стандартҡа ярашлы баланың үҫеш йүнәлештәре буйынса ҡуйылған маҡсаттар үтәлеше түбәндәге идара итеү сараларына ла тәьҫир итмәй:

белгестәрҙең аттестация үтеүенә;

аң-белем биреү сифатын баһалауға;

балалар үҫеше кимәлен төрлө ваҡыт аралығында (бер төркөмдән икенсе төркөмгә күсереүгә, айырым эшмәкәрлектә һ.б.) йәки дөйөм үҫеш кимәлен билдәләүгә (мониторинг, тест эшләү, күҙәтеү һ.б. аша);

балалар баҡсаһының дөйөм эшен баһалауға;

ойошмалағы хеҙмәткәрҙәрҙең хеҙмәтен дәртләндереүсе түләү фондын билдәләүгә.

Педагог аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү эше барышында диагностиканы һәр баланың үҫешен уға шәхси яҡтан ғына хас булған саралар, алымдар аша ойоштороорға тейеш. Бала үҫешен күҙәтеү һәм дөрөҫ яҡка уны ҡулайлау маҡсатында, шулай уҡ үҙ эшенә төрлө уңышлы алымдарҙы кәрәкле ваҡытта индереү өсөн педагогҡа һөҙөмтәле баһалау системаһын ҡулланыу тәҡдим ителә.

Программаның үҙләштерелеү күрһәткестәре һөҙөмтәһен билдәләүҙә ошоға тиклем тестар булды. Тестар һәр баланың үҫешен башҡа йәштәштәре менән менән сағыштырыу мәғлүмәттәре аша алынған һөҙөмтәләрҙе күрергә ярҙам итә. Шуға күрә бындай тестар педагогик яҡтан хәүеф янаған балаларҙы асыҡлауҙа ҡулланыла. Тестар менән баһалауҙың төп етешһеҙлеге булып балаларҙың көндәлек тормошон сағылдырмаған яһалма эштәр тора, шуға күрә мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың ысынбарлыҡтағы мөмкинлектәрен тулыһынса күрһәтмәй. Тест алымы балаларҙың социаль мөхитендәге үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алмай.

Бөгөнгө көндә заман талаптарына тап килгән аутентик баһалауға ҙур урын бирелә. Аутентик (authenticos) – грек теленән «оригинальный», «подлинный», «настоящий», «главный», йәғни «ысын», «төп», «ысынбарлыҡҡа тап килгән» тигән төшөнсәне аңлата һәм баланың үҫешен дөрөҫ билдәләү мөмкилеген бирә.

Төп, ысын (аутентик) баһа биреүҙең нигеҙендә киләһе принциптар ята:

беренсенән, улар махсус алдан әҙерләнгән эш төрҙәрен үтәү һөҙөмтәһендә түгел, ә бала тәртибенең дөрөҫлөгөн анализлау нигеҙендә төҙөлә. Мәғлүмәт баланың тәртибен күҙәтеү аша беркетелә. Педагог күҙәтеүҙәрҙең һөҙөмтәһен, ғәҙәти тестарҙа ҡулланылған һәм уйлап сығарылған ваҡиғалар аша түгел, ә тәбиғи мөхиттә ала (уйын барышында, режим моменттарына, дәрестәрҙә);

икенсенән, тестарҙы махсус белемле һөнәр эйәләре (психологтар, медицина хеҙмәткәрҙәре һ.б.) үткәреп баһалауға ҡарағанда, бала менән бергә күп ваҡытын үткәргән һәм уның тәртибен һәйбәт белгән тәрбиәселәр генә *дөрөҫ* баһа бирә ала. Былдай осраҡта, педагогтың тәжрибәһе баһалап бөткөһөҙ ҡиммәт;

өсөнсөнән, (аутентик) *төп, ысын* баһа һәр яҡтан уйлап, бала үҫешенең бөтә яҡтарын да иҫәпкә алып ҡоролған. Әгәр күп осраҡта ата-әсәләр тест баһаһы аша алынған мәғлүмәттәрҙең мәғәнәһен аңламаһа, балалар менән тест үткәреүгә кире ҡараштарын белдерәләр, ә (аутентик) төп баһа улар өсөн аңлайышлы булып тора. Ата-әсәләр, теге йәки был һорауҙарға яуап эҙләүҙә, баланың үҫешенә ыңғай үҙгәрештәр индереү маҡсатында төҙәтмәләр индергәндә педагогтарҙың партнерҙары булып ҡатнашалар.

Педагогик диагностика. Тәҡдим ителгән программа баланың шәхси үҫешен баһалауҙы фараз итә. Былдай баһаны тәрбиәсе педагогик диагностика ярҙамында билдәләй. Педагогик диагностика махсус ойошторолған эшмәкәрлектә баланың әүҙемлеген күҙәтеү барышында үткәрелә.

Педагогик диагностика өсөн ҡулланма булып баланың үҫешен күҙәтеү картаһы тора. Унда бала үҫешенең һәр яҡлап алға барыуын күрһәткән шәхси динамиканы билдәләүгә ярҙам иткән күрһәткестәр алына:

- ололар һәм йәштәштәре менән аралашыу (һөйләшеү ысулдарының һәм сараларының киңәйеүе, бергәләп дөрөҫ ҡарарға килеүҙә, бәхәстәрҙе сисеү юлдарын эҙләүҙә алдынғылыҡ күрһәтә);
- уйын эшмәкәрлегендәге әүҙемлеге;
- аң-белеү эшмәкәрлеге (бала һәләттәренең үҫеш кимәле һәм танып-белеү процесындағы әүҙемлеге);
- проект эшмәкәрлеге (баланың үҙ-аллылығы, яуаплылығы, үҙенең эшмәкәрлеген ойоштора белеүе нисек үҫешә);
-әҙәби эшмәкәрлек (нәфис эшмәкәрлек);
- физик яҡтан үҫеше.

Педагогик диагностика һөҙөмтәләре түбәндәге аң-белем биреү һәм тәрбиәләү бурыстарын хәл иткәндә ҡулланылырға мөмкин:

- аң-белемгә өйрәтеүҙе шәхсиләндереп, һәр бер балаға үҙенең махсус траекторияһын төҙөү һәм уның үҫеш кәмселектәрен төҙәтеү яғынан ярҙам итеү маҡсатында;

- балалар төркөмөндә эш төрҙәрен төрләләндереү, яңы методик алымдар ҡулланыу өсөн. Белем биреү эшмәкәрлеге барышында педагогтар, баланың шәхси үҫеш динамикаһын баһалау маҡсатында, диагностик хәл-ваҡиғалар булдырырға һәм үҙенең эш-хәрәкәтенә төҙәтмә индерергә тейеш.

Бала үҫеше йүнәлештәренә ярашлы тәрбиәләү һәм аң-белемгә өйрәтеү эшмәкәрлеге

(2 йәштән алып мәктәпкә барғансы осор)

2-7 йәшлек балалар менән психологик һәм педагогик эштең йөкмәткеһе түбәндәге белем биреү өлкәләрендә бирелә: «Социаль – коммуниктив үҫеш», «Танып-белеү өлкәһе», «Телмәр үҫтереү», «Художество –эстетик үҫеш», «Физик үҫеш».

Эштең йөкмәткеһе балаларҙың ололар менән берлектә, шулай уҡ үҙ-аллы эшмәкәрлек барышында махсус ойошторолған дәрестәрҙә һәм башҡа төрлө режим ваҡыттарында алып барыла.

«СОЦИАЛЬ-КОММУНИКАТИВ ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

"Социаль-коммуникатив үҫеш" баланың йәмғиәттә ҡабул ителгән ҡағиҙәләрҙе һәм нормаларҙы өйрәнеүен; социаль һәм әхләҡи үҙкиммәттәрҙе дөрөҫ ҡабул итеүен; үҙ-ара һәм ололар менән ыңғай мөнәсәбәттә аралаша белеүен; үҙ-аллылыҡҡа өйрәнеүен; алдына ҡуйған маҡсаттарға ирешә белеүен; характерында социаль һәм эмоциональ сифаттарҙы формалаштырыуын; ярҙамсыл, иғтибарлы, ихтирамлы булыуын; йәштәштәре менән бергә дөйөм эшмәкәрлектә әүҙем ҡатнашыуын; хеҙмәткә һәм ижадҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныуын; тирә-яҡ мөхиттә, тәбиғәттә үҙен дөрөҫ тотоу күнекмәләрен күҙаллай.

Төп маҡсаттар һәм бурыстар

Йәмғиәттә йәшәй белеү күнекмәләре, аралашыу үҫеше һәм әхләҡи тәрбиә. Йәмғиәттә ҡабул ителгән әхләҡи нормаларҙы һәм үҙкиммәттәрҙе өйрәнеү, тиҫтерҙәренең һәм үҙенең холоҡ-фиғеленә дөрөҫ баһа бирә белеү сифатын формалаштыра башлау.

Балаларҙың аралашыу, ололар һәм балалар менән хеҙмәттәшлек итеү һәләтен үҫтереү.

Тирә-яҡҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныусан һәм ыңғай ҡарашлы булырға, тәбиғәтте һаҡлау, ҡайғыртыу тойғоларын тәрбиәләү. Балаларҙың бер-береһенә ҡарата дуҫ һәм татыу булыуҙы, килеп сыҡҡан аңлашылмаусанлыҡтарҙы үҙ-аллы хәл итергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Бала ғаиләлә һәм кешелек йәмғиәтендә. «Мин» образын формалаштырыу, бер-береңде хөрмәт итеүҙе, ғаилә ҡаҙаныштары менән ғорурлана белеүҙе, енси яҡтан тәрбиә нигеҙҙәрен формалаштырыуҙы дауам итеү.

Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү, үҙ-аллылыҡ һәм хеҙмәт тәрбиәһе. Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү күнекмәләрен үҫтереү. Үҙ-аллылыҡҡа, үҙ-үҙенә маҡсат ҡуя белеүгә, эш-хәрәкәттәрҙәрҙе маҡсатҡа ярашлы ҡулайлап эш итеүгә нигеҙ һалыу.

Әхлаҡи һәм гигиена ҡағиҙәләренә өйрәтеү.

Хеҙмәт төрҙәренә һәм ижадҡа ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү. Үҙеңдең, башҡа кешеләрҙең хеҙмәтен һәм эштең һөҙөмтәһен күреп, шатлыҡ хисе кисереү һәләтен үҫтереү.

Хеҙмәттең йәмғиәттә һәм тормошта тотҡан роле һәм төрлө һөнәр эйәләре тураһында мәғлүмәттәр биреү.

Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен формалаштырыу. Тирә-йүндә, тәбиғәттә, социумда үҙ-үҙеңде дөрөҫ тотоу ҡағиҙәләрен өйрәнеү, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен аңлы рәүештә үтәү.

Кеше һәм тәбиғәт өсөн ҡурҡыныслы булған хәүефле осраҡтарҙа үҙ-үҙен ҡурсылай һәм һаҡлай белергә өйрәтеү.

Ябай ғына кимәлдә юл хәрәкәтендә хәүефһеҙлек сараларын үтәү тураһындағы төшөнсәләрҙе формалаштырыу.

ПСИХОЛОГИК ҺӘМ ПЕДАГОГИК ЭШТЕҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ
Йәмғиәттә йәшәй белеү күнекмәләрен үҙләштереү, аралашыуҙың үҫеше һәм әхләҡи тәрбиә

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Баланың ололар менән әүҙем аралашыу осоро. Бала ололар телмәрен аңлай, һүҙ ярҙамында үҙенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә башлай. Предметлы мөхиттә иркен йөрөп, төрлө әйберҙәр менән таныша. Былар бөтәһе лә баланың тирә-йүнде өйрәнеүҙең сифатын юғары күтәрә.

Ололар менән аралашыуҙа бала үҙен ҡыҙыҡһындырған әйберҙәр тураһында белергә тырыша. Өлкәндәрҙең башҡарған эшенә, әйткән һүҙенә, үҙҙәренең теге йәки был осраҡта нисек тотоуына, хис-тойғоларының сағылышына иғтибарлы була башлай һәм уйында уларға оҡшарға тырышып, ошоларҙы ҡабатлай башлай.

Баланың кеше тураһындағы төшөнсәләре үҙе аралашҡан яҡындары аша формалаша. Кеше тураһындағы төшөнсәләре бала аңында әкренләп дөйөмләшә башлай: бала «атай», «әсәй» һүҙҙәрен аңлатҡан төшөнсәләр уның ата-әсәһенә генә ҡағылмай, ә башҡа балаларҙың да ата-әсәһе барлығын аңлай башлай. Һуңғараҡ бала үҙенең яҡындары араһындағы бәйләнештәргә әкренләп төшөнә башлай: өләсәйе менән әсәйе, апайы менән үҙе, әсәһе араһындағы һ.б.

Бала ололар һәм балалар араһындағы айырманы һиҙемләй башлай: ололар кескәйҙәрҙе ярата, улар тураһында ҡайғырта. Кескәйҙәр уларҙы тыңларға, уларға оҡшарға тырышалар.

Өсөнсө йәшкә сыҡҡан бала кешенең физик торошон (ауырта, асыға, арый), эмоциональ яҡтан торошон (илай, көлә, шатлана, үпкәләй) һәм теләген (йоҡларға, ашарға, эсергә теләй) аңлай һәм һүҙҙәр менән әйтә белә. Шуға ла балала кешене йәлләү, уға ярҙамлашыу, ҡурсылау теләге уяна башлай һәм бала үҙе булдыра алғансы ярҙам ҡулы һуҙырға тырыша.

Ике йәшлек бала ололар ярҙамында ҡулъяулыҡ менән һөртөнә белә, аяҡ, өҫ, баш кейемдәрен тейешле тәртиптә йыйып ҡуя башлай. Төркөм бүлмәһендә тәртип һаҡларға тырыша. Үҙенең физиологик ихтыяждарын үҙ-аллы башҡара ала.

Ябай әҙәп ҡағиҙәләренә өйрәтеү алып барыла: өҫтәл артына таҙа ҡулдар менән ултырырға һәм үҙен әҙәпле тоторға, бүлмәлә ҡысҡырмаҫҡа, йоҡо бүлмәһендә

ҡысҡырып һөйләшмәҫкә, ололарҙы тыңларға, уларҙың үтенесен, әйтеүен башҡарырға күнектереү.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Балалар баҡсаһында, өйҙә, урамда коллективта үҙ-үҙеңде тотоу күнегеүҙәрен нығытыу. Нимә яҡшы, нимә насар төшөнсәһе менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаларға әхлаҡи яҡтан тәрбиәләү өсөн шарттар булдырыу. Тиңдәшеңде яҡлау, ҡурсалау, ярҙам итеү теләге уятыу. Яҡшы һәм насар ҡылыҡтарға баһа бирә белеү, бер-береңә ҡарата һәйбәт мөнәсәбәт булдырыу.

Бер-берең менән дуҫ-татыу йәшәү; уйынсыҡтар, китаптар менән уртаҡ бүлешеү, бер-береңә ярҙам итеү теләге уятыу.

Балаларҙы әҙәпкә өйрәтеү (һаулыҡ һорашыу, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү һ.б.).

Төркөмдөң ҡабул итеү, йыуыныу, йоҡо бүлмәһендә, ашау урынында үҙ-үҙен тоторға, әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәтеү.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Баланың үҙенең булмышын аңлауға һәм холоҡ-фиғелен әхлаҡи яҡтан дөрөҫ тәрбиәләүгә йүнәлтелгән уйындар һәм күнекмәләр үткәреү. Улар балалар араһында ыңғай мөнәсәбәттәр булдырырға һәм бер-береһе өлгөһөндә бала тәртибен, холҡон яҡшы яҡҡа үҫтереүгә ярҙам итә.

- уй-фекерҙе һәм хис-тойғоно һүҙҙәр менән билдәләргә, телмәрҙә эмоциональ торошто аңлатҡан һүҙҙәрҙе ҡуллана белергә өйрәтеү;
- ым-ишараның тасуирлығын үҫтереү. Улар ярҙамында матур мөнәсәбәттәр урынлаштырып булыуҙы аңлатыу;
- дуҫлыҡ, дуҫлашыу, дуҫ төшөнсәләренең айышын аңларға өйрәтеү;
- үпкәләшеү, асыуланышыу кеүек насар сифаттарҙы бөтөрөү юлдарына өйрәтеү (ғәфү үтенеү, йылмайыу, арҡанан һыйпау һ.б.);
- тиҫтерҙәренең һәм өлкәндәрҙең кәйеф торошон һиҙемләй, аңлай белергә өйрәтеү, кәрәк ваҡытта ярҙам итә белеү һәләтен тәрбиәләү;
- асыуланышҡан саҡта һүҙ ярҙамы менән генә түгел, ым-ишара аша ла килешеп булыуҙы төшөндөрөү.

Балаларҙа бөхтәлеккә, үҙенең тышҡы ҡиәфәтендә матурлыҡ, таҙалыҡ һаҡлауға ынтылыш тәрбиәләүҙе дауам итеү.

Үҙаллы йыуынырға, аш алдынан, бәҙрәфтән һуң һабын менән ҡулдарҙы йыуып, ҡоро итеп үҙ таҫтамалына һөртөргә ғәҙәтләндереү.

Тараҡ, ҡулъяулыҡ менән ҡулланырға күнектереү. Йүткергәндә, сөскөргәндә икенсе яҡҡа әйләнеп, ауыҙ-морондо ҡулъяулыҡ менән ҡапларға өйрәтеү.

Ашағанда өҫтәл артында үҙ-үҙен тотоу һәм ашау ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәүҙе нығытыу: аҙыҡты әҙләп алыу, ауыҙҙы йомоп сәйнәү, ҡалаҡты, сәнскене, бысаҡты, салфеткаларҙы дөрөҫ ҡулланыу. Ашағас, ауыҙ сайҡатырға күнектереү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Баланың үҙе тураһындағы төшөнсәләрен әүҙем үҫтереү. Үҙенең хис-тойғоларын һиҙемләп, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

Тиҫтерҙәре араһында үҙ урынын табырға, үҙенең «мин-минлеген» иҫбатларға, башҡаларҙан үҙенең нимә менән айырылыуын һәм оҡшашлығын табырға ярҙам итеүсе саралар үткәреү.

Башҡаларҙың үҙен ҡабул итеүе, дөрөҫ мөнәсәбәттә ихтирамлы, хөрмәтле булыуы - уның үҙенең тәртибенә, холоҡ-ҡылығына, әйткән һүҙҙәренә бәйле икәнлекте төшөндөрөү.

Социаль яҡтан шәхси үҫештә хис-тойғоноң тотҡан урынын төшөндөрөү. Был эште өс йүнәлештә үткәреү:

1. «Мин башҡалар араһында» - балаға үҙ-үҙен асыу, өйрәнеү өсөн яҡындары, яратҡан дуҫтары, әйберҙәре, уйынсыҡтары, шөғөлө, хис-тойғолары тураһында һөйләргә өйрәтеү. «Мин кем?», «Мин ниндәй?», «Беҙ нимә менән оҡшашбыҙ, нимә менән айырылабыҙ?», «Беҙ – төрлөләр», «Минең кәйефем», «Кәрәк булһа – өйрәнәм», «Мин һәм минең ғаиләм», «Минең хыялдарым», «Үҙем тураһында», «Минең яратҡан шөғөлөм» һәм башҡа темаларға дәрестәр үткәреү.

2. «Мин нимә эшләй алам?» Был бүлектә һиҙеп-тойоу ағзалары аша донъяны танып-белеүгә бағышланған дәрестәр үткәреү ҡарала. Дәрестәрҙә әкиәт донъяһына сәйәхәт рәүешендә үткәреү: ҡом, һыу, боҙ, әкиәт терапияһы һәм башҡалар ҡулланыу. «Үткер күҙ Бөркөт иленә» - күҙҙәр һәм улар эшмәкәрлеге тураһында, «Тылсымлы өндәр утрауына» - телмәр ағзалары төҙөлөшө һәм эшмәкәрлеге, «Һиҙгер ҡолаҡ Ҡуянҡай» - ишетеү һәләте тураһында, «Һиҙгер танау Аҡбай» - еҫтәрҙе һиҙеү һәм айырыуға бағышланған һәм башҡа дәрестәр үткәреү.

Шатлыҡ, күңелһеҙлек, ҡурҡыу, асыу кеүек эмоциональ торошторға төшөнөргә өйрәтеү.

3. «Мин һәм башҡалар». Бергәләп эш иткәндә, уйнағанда балаға үҙ урынын табырға, башҡалар менән тигеҙ, тыныс мөғәләмәлә булырға ярҙамлашыу. «Һин ниндәй?», «Улар кемдәр?», «Мин ниндәй яҡшы эш башҡара алам?», «Батырлыҡ», «Үсекләшеү – яҡшымы?», «Кемде яҡларға?» һәм ошондай башҡа темаларға дәрестәр үткәреү.

Тән, кейем-һалым таҙалығына иғтибарлы һәм бөхтәлеккә ынтылыш тәрбиәләүҙе дауам итеү: үҙаллы теш таҙарта, тырнаҡтарҙы тәрбиәләргә, сәсте тарап йөрөргә, ҡулъяулыҡ менән ҡуллана белергә.

Тиҙ һәм билдәле тәртиптә сисенергә һәм кейенергә, кейемдәрҙе үҙ урынына ҡуйырға, үҙенең йоҡлаған урынын йыйыштыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Ашағанда кәүҙә торошон кәрәкле рәүештә тота, ашау ҡағыҙәләрен үтәй, ашау кәрәк-ярағын (ҡалаҡ, сәнске, бысаҡ) дөрөҫ ҡулланырға күнектереү.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Алты йәшлек баланың бөгөнгө заман тормошона тулы хоҡуҡлы йәмғиәт ағзаһы булып инеп китеүен тәьмин итеү өсөн балалар баҡсаһында түбәндәге бурыстар ҡуйыла:

- баланың социаль яҡтан шәхси үҫешен уның предметлы донъяны һәм кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе үҙләштереү эшмәкәрлеге аша башҡарыу;

- баланың тирә-йүндәге предметтарҙы, күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы хис-тойғо аша ҡабул итә алыуына ирешеү;

- һәр төр эшмәкәрлекте үҙе теләп, үҙ ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында башҡарырға ынтылыу теләген уятыу;

- бөтә төр эшмәкәрлектәрҙе бергә ҡушып, бер маҡсатта башҡарыу;

- бала ҡыҙыҡһыныуының бөтә төрҙәренә лә таянып (яңы асышҡа ынтылыу, хис-тойғо, үҙенең практик тәржибәһе аша) эш итеү;

- балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәренең, ата-әсәләрҙең, мәктәп уҡытыусыларының берлектә эш итеүенә ирешеү;

- төрлө педагогик баһалауҙы ҡулланыу;

-баланың социаль яҡтан үҫеш кимәлен йәш, енси, шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып күҙәтеп барыу һәм кәрәкле төҙәтмәләр индереү.

Социаль яҡтан шәхси үҫеште тәьмин итеү йүнәлештәре:

Минең хис-тойғоларым (нимәгә шатланам, ҡыуанам, ҡайғырам, үпкәләйем, илайым);

Мин үҙем тураһында нимәләр беләм? (йыр яратам, рәсем төшөрәм, бәләкәй туғанымды яратам, атайым-әсәйем менән һөйләшергә, уйнарға яратам, олатайым-өләсәйем менән осрашырға ынтылам, уларға ярҙамлашам);

Аралашыу саралары (һүҙ менән, күҙ ҡарашы, тышҡы ҡиәфәт, йыр-моң аша һ.б.);

Беҙ бер-беребеҙҙе ниндәй итеп күрәбеҙ? (аҡыллы, тәртипле, уҫал, хәйләкәр, ярҙамсыл, йомарт, тырыш, уңған);

Башҡалар араһында үҙеңде нисек тотаһың? (үсекмәй, үпкәләмәй, ыҙғышмай, тыныс, мөләйем, урын бирәм, ярҙам итәм, йәлләйем, яҡшы һүҙҙәр әйтәм, йыуатам һ.б.);

Үҙ-ара аралашыу мәҙәниәте (ихтирамлы, иғтибарлы булып, йылмайып, тылсымлы һүҙҙәр ҡулланып, ололап, тыныс тауыш менән өндәшеп һ.б.).

Тиҙ һәм дөрөҫ итеп үҙ-аллы йыуына, ҡоротҡансы һөртөнә, тешен таҙарта, ашағандан һуң ауыҙ сайҡата, йоҡо алдынан аяҡтарын йыуа белергә күнектереүҙе дауам итеү.

Шәхси гигиена әйберҙәрен (тараҡ, теш щеткаһы, таҫтамал, ҡулъяулыҡ һ.б.) тотона белеүҙе нығытыу. Үҙенең тышҡы ҡиәфәтенә иғтибарлы булып, бөхтәлек, таҙалыҡ һаҡлап, кейемендәге етешһеҙлектәрҙе үҙ-аллы йүнәтә белергә күнектереүҙе дауам итеү.

БАЛА ҒАИЛӘЛӘ ҺӘМ КЕШЕЛЕК ЙӘМҒИӘТЕНДӘ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2-3 йәшкә тиклем)

«Мин» образы. Үҙеңдең исемде әйтә белеү. Балалар баҡсаһына килгәс, үҙеңдең социаль статусыңдың үҙгәреүе, ғөмүмән, үҙең тураһында элементтар күҙаллауҙы формалаштырыу. Һәр бер балаға уны яраталар, уның тураһында ҡайғырталар, теләктәренә, ихтияждарына ихтирам менән ҡарайҙар тигән тойғоно күңелдәрендә һалыу.

Ғаилә. Ата-әсәйҙәренә, яҡындарына ҡарата иғтибарлы ҡараш тәрбиәләү. Ғаилә ағҙаларының исемдәрен дөрөҫ әйтә белеүҙәрен хуплау.

Балалар баҡсаһы. Балаларға балалар баҡсаһының ыңғай яҡтарын атау, өй менән оҡшаш (йылы, уңайлы, һ.б) һәм өйҙән айырмалы яҡтарын атау (дуҫтар күберәк, үҙ-аллыҡ һ.б.).

Балаларҙың иғтибарын, төркөмдең ниндәй таҙа, ҙур, яҡты, уйынсыҡтарҙың күплегенә, сағыу төҫлө булыуҙарына, карауаттарҙың нисек итеп йыйыштырылыуына йүнәлтеү. Майҙансыҡта йөрөгәндә үҫемлектәрҙең күплегенә; уйнарға һәм ял итергә уңайлы булған уйынсыҡтар менән таныштырыу.

Төркөмдә һәм майҙансыҡта дөрөҫ ориентир (йүнәлеш) табырға өйрәтеү.

Кескәйҙәр төркөмө (3-4 йәшкә тиклем)

«Мин» образы. «Мин» образын формалаштырыуҙы дауам итеү. Балаларға туранан-тура уларға ҡағылған төрлө мәғлүмәтте хәбәр итеү (һин малай, һинең күҙҙәрең һоро, һин уйнарға яратаһың һ.б.), һәм шулай уҡ уларҙың үткәнен (үҙ-аллы атлай алмай инең, һөйләшә белмәй инең; шешәнән ашай инең) һәм улар менән булған үҙгәреште (хәҙер инде үҙеңде өҫтәл артында дөрөҫ тотаһың, һүрәт төшөрә беләһең, бейей беләһең; «тылсымлы» һүҙҙәр әйтә беләһең һ.б.).

Ғаилә. Балалар менән уларҙың ғаилә ағзалары тураһында әңгәмәләшеү (исемдәре нисек, нимә менән шөғөлләнәләр, бала менән нисек уйнайҙар һ.б.)

Балалар баҡсаһы. Балаларҙа балалар баҡсаһына ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү. Уларҙың иғтибарын төркөм, сисенеү бүлмәһенең матур биҙәлеүенә һәм уңайлы итеп йыһазландырылыуына йүнәлтеү (яҡты тәҙрәләр, матур шаршауҙар, уңайлы йыһаз, яңы уйынсыҡтар, китап мөйөшөндә ипле итеп теҙелгән сағыу рәсемле китаптар).

Балаларҙы майҙансыҡ менән таныштырыу: уның матурлығы, уңайлылығы, төрлө төҫлө буяуҙар менән биҙәлеүе, һ.б.

Шулай уҡ баларҙың иғтибарына майҙансыҡта үҫеп ултырған үҫемлектәргә, уларҙың матурлығына һәм төрлөлөгенә йүнәлтеү.

Балаларҙы төркөм тормошона йәлеп итеү, төркөмдә тәртип һәм таҙалыҡ булдырыуға ынтылыш тәрбиәләү; уйынсыҡтарға, китаптарға, шәхси әйберҙәргә ҡарата һаҡсыл булырға күнектереү. Балалар коллективының мөһимлеге, һәр баланың төркөмдә ҙур урын биләүен төшөндөрөү.

Бинала, төркөмдә, балалар майҙансығында дөрөҫ йүнәлеш табыуҙы камиллаштырыу.

Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәренә (музыка етәксеһе, шәфҡәт туташы, мөдир, өлкән тәрбиәсе һ.б) ҡарата яҡшы мөнәсәбәт булдырыуҙы формалаштырыу. Уларҙың хеҙмәтен хөрмәт итеү, уларҙың исемен, атаһының исемен хәтерҙә ҡалдырыу.

Уртансылар төркөмө (4 йәштән-5 йәшкә тиклем)

«Мин» образы. Баланың үткәне, хәҙергеһе, киләсәге (мин бәләкәй инем, мин үҫәм, мин ҙур булам) тураһында төшөнсәләр формалаштырыу.

Балаға уның хоҡуҡтары һәм башҡалар алдында торған бурыстары тураһында ябай ғына кимәлдә башланғыс төшөнсәләр биреү (балалар баҡсаһында, өйҙә,

урамда, уйын ваҡытында, башҡаларға ҡарата мөнәсәбәт, белем алыу һ.б.; үҙ-аллы ашау, кейенеү, уйынсыҡтарҙы йыйыштырып ҡуйыу һ.б.) Һәр бер балала ул яҡшы, уны яраталар тигән ышанысты формалаштырыу.

Гендер тәрбиәһен биреү (малайҙар ҡыйыу, көслө; ҡыҙҙар наҙлы, күркәм, нәзәкәтле).

Ғаилә. Ғаилә, ғаилә ағҙалары тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Туғанлыҡ, туғандар араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында төшөнсәләр биреү (ул, ҡыҙ, әсәй, атай һ.б.).

Балаларҙың өйҙә шәхси башҡарыла торған бурыстары тураһында ҡыҙыҡһыныу (уйынсыҡтарҙы йыямы, һауыт-һаба йыуырға ярҙамлашамы һ.б.).

Балалар баҡсаһы. Балаларҙы балалар баҡсаһы, уның хеҙмәткәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балалар баҡсаһы бинаһы эсендә дөрөҫ йүнәлеш (ориентир) табыуҙы камиллаштырыу. Төркөмдәге майҙансыҡта әйберҙәргә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, уларҙы кәрәкле ваҡытта һәм урында ҡулланыу һәм кире урынына алып ҡуйыу.

Балалар баҡсаһының традициялары менән таныштырыу. Балаға уның коллективтың ағзаһы булыуын, унда үҙ урыны булыуын аңлатыу. Төркөмдөң, залдың, майҙансыҡтың биҙәлешендәге үҙгәрештерҙе күрергә өйрәтеү (сағыу, матур, биҙәлгән уйынсыҡтар нисек матур күренә, балаларҙың һүрәттәре һ.б). һәм уларҙы биҙәгәндә балаларҙы әүҙем ҡатнашырға күнектереү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

«Мин» образы. Баланың үҫкән һайын йәмғиәттә тотҡан урынының үҙгәреү төшөнсәһен киңәйтеү (бәләкәйҙәр өсөн яуаплы, ололарға хөрмәт һәм ярҙам итеү һ.б.).

Балаларҙың үҙҙәренең үткәне, хәҙергеһе, киләсәге тураһында символик һәм образлы саралар менән белемдәрен тәрәнәйтеү.

Гендер төшөнсәһен йәмғиәттә ҡабул ителгән белемдәр аша киңәйтеү. Тиңдәштәренә ҡарата (ҡыҙҙар малайҙарға, малайҙар ҡыҙҙарға) ыңғай мөнәсәбәт тәрбиәләү.

Ғаилә. Балаға ғаилә, ғаилә ҡанундары, тарихы тураһында тәрәнерәк мәғлүмәт биреү. Үҙҙәренең ғаилә тарихына таянып шәжәрә төҙөргә өйрәтә башлау. Ата-әсәләренең эш урындары, башҡарған хеҙмәттәре һәм уларҙың ни тиклем мөһим икәнен тәрәнерәк өйрәнеү. Балаларҙы төрлө ғаилә байрамдарына әҙерләнергә һәм ойоштороуҙа ҡатнашырға өндәү һәм дәртләндереү. Ғаиләлә баланың даими башҡара торған эштәрен үтәргә күнектереү.

Балалар баҡсаһы. Тирә-яҡ мөхит менән ҡыҙыҡһыныуҙы дауам итеү: балалар баҡсаһында, өйҙә, баланың үҙендә матурлыҡты, күңел күтәренкелегенә тәьҫир иткән үҙгәрештәрҙе табып, күрһәтеп, баланың иғтибарын ошоға йүнәлтеү.

Бинаның биҙәлешендәге үҙгәрештәргә иғтибар итеү: был үҙгәрештең сәбәбен төшөндөрөү, үҙгәрештәргә ҡарата үҙенең уй-фекерен һәм тәҡдимдәрен әйтә белергә күнектереү. Балаларҙы тирә-йүндәге күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы баһалай белергә өйретеү.

Төркөмдө тәртиптә һәм таҙалыҡта тотоуға өндәү, сәнғәт әҫәрҙәре һәм һүрәттәр менән биҙәү. Байрамдарға төркөм бүлмәһен балалар ҡулы менән эшләнгән әйберҙәр менән биҙәү, һүрәттәр йәбештереү (ҡошсоҡтар, күбәләктәр, ҡар бөртөктәре, ағас ботаҡтар һ.б.).

Балаларға коллектив ағзаһы булыуын төшөндөрөү, бергә булған эшмәкәрлекте әүҙем тормош позицияһы аша ойоштороу; башҡа йәштәге балалар менән үҙ-ара килешеп балалар баҡсаһының тормошонда ҡатнашыу. Балалар баҡсаһында үткән сараларҙа ата-әсәләр менән бергә ҡатнашыу(спектаклдәрҙә, спорт байрамдарында, төрлө күңел асыуҙарҙа, балалар күргәҙмәләрендә).

Мәктәпкәсә йәштәге балалар (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

«Мин» образы. Кешенең тормошонда үҙе үҫкән һайын үҙгәреүҙәр була; кескәйҙәр балалар баҡсаһына йөрөй, уҡыусы мәктәптә уҡый, оло кеше эшләй, ҡарт кеше үҙенең тәжрибәһен йәштәргә өйрәтә. Баланың үткән, бөгөнгө һәм киләсәктәге тормошо тураһындағы төшөнсәләрҙе тәрәнәйтеү.

Гендер төшөнсәһе тураһындағы белемдәрен киңәйтеү. Балаларҙа ҡыҙҙарға һәм малайҙарға ғына хас булған һыҙаттарҙы үҫтереү.

Ғаилә. Ғаилә тарихи тураһындағы мәғлүмәттәрҙе тыуған ил тарихына бәйләп тәрәнәйтеү (һәр бер быуындың ил тарихында ҡалдырған эҙе). Балаларға ата-әсәйҙәрҙең, олатай-өләсәйҙең хәрби наградалары тураһында һөйләү.

Өй адресын, телефон номерын, ата-әсәләрҙең исем-шәрифтәрен, телефон номерҙарын, һөнәрҙәрен хәтерҙә ҡалдырыуҙы нығытыу.

Балалар баҡсаһы. Тирә-яҡ мөхит тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү (бинаны, бүлмәне, уйын майҙансығын, балалар баҡсаһын биҙәү, һ.б.). Балаларҙы матур, сағыу әйберҙәргә иғтибар итеп, уларҙы айырып күрһәтергә өйрәтеү (стенаның буяуына, йорт йыһаздарына, уйын майҙансығының ҡоролмаларына һ.б.).

Балаларҙың үҫешенә булышлыҡ итеүсе мөхит булдырыу эшенә уларҙың үҙҙәрен йәлеп итеү (мини-музей, күргәҙмәләр, библиотека, төҙөүселәр, эҙләнеү-тикшеренеү, тәжрибәләр үткәреү үҙәге һ.б.). Уратып алған мөхитте биҙәлеше яғынан баһаларға өйрәтеү; үҙ фекерен дәлилләй белеү.

Балаларға коллективтың әүҙем ағзаһы тигән төшөнсәне аңлатыу: балалар баҡсаһы тормошонда кескәйҙәр һәм ата-әсәләр менән төрлө эшмәкәрлектә ҡатнашыу аша, проект эштәр үтәү барышында (кескәйҙәр төркөмөн балалар баҡсаһына өйрәтеү, байрамдарға әҙерләнеү, ярыштарҙа ҡатнашыу һ.б.) күмәк файҙалы эш башҡарыла.

ҮҘ-ҮҘЕНДЕ ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮ, ҮҘ-АЛЛЫЛЫҠ, ХЕҘМӘТ ТӘРБИӘҺЕ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө
(2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү. Тәүҙә тәрбиәсе күҙәтеүе аҫтында, һуңынан – үҙ-аллы ҡул йыуырға, үҙ таҫтамалына һөртөнөргә өйрәтеү.

Үҙ-үҙен бөхтә, таҙа тоторға өйрәтеү. Көндәлек шәхси кәрәк-ярағтарҙы ҡулланыу ҡағиҙәләре менән таныштырыу (ҡулъяулыҡ, таҫтамал, тараҡ, көршәк).

Кейенергә, сисенергә өйрәтеү: төймәләрҙе ысҡындырырға, аяҡ кейемен сисеп, матур итеп ултыртырға һ.б. Билдәле бер тәртиптә сиселгән кейемдәрҙе урынлаштырырға күнектереү.

Ашау ваҡытында үҙ-аллылыҡ тәрбиәләү, ҡалаҡты уң ҡул менән тотоп ашарға өйрәтеү.

Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү. Өлкәндәр ярҙамында сисенеү, кейенеү, аяҡ кейемен һала белеү күнекмәләренә өйрәтеү. Көндөҙгө йоҡоға сисенгәс, кейемдәрҙе бер урынға ҡуйырға, өҫ кейемдәрен ултырғысҡа элергә, аяҡ кейемен ултырғыс аҫтына ҡуйырға кәрәклеген өйрәтеү. Ҙур төймәләрҙе элергә тырышыу, кейемдәге тәртипһеҙлекте күрә белергә һәм өлкәндәр ярҙамында төҙәтергә ынтылыу, йыйнаҡ булыу теләге уятыу.

Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте. Өлкәндәр хеҙмәтен күҙәтеп, уларға оҡшарға тырышыуҙы хуплау. Ярҙамлашыу, эшкә ҡушылыу теләге уятыу. Уйынсыҡтарҙы таратып һалып ҡуймаҫҡа, уйнап бөткәс, йыйырға, ултырғысты урынына ҡуйырға өйрәтеү.

Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү. Өлкәндәр хеҙмәтен күҙәтеү. Тәрбиәсе майҙансыҡты сүп-сарҙан таҙарта, ҡоро япраҡтарҙы йыйып ала, ҡар көрәй, ҡоштар ашаһын тип, тағараҡҡа ем һала һ.б. Әйләнә-тирәләге һәр хеҙмәткә кескәйҙәрҙең иғтибарын йәлеп итеү, эш барышын аңлатыу, һөҙөмтәләрен күрһәтеү.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү.Үҙ-үҙен бөхтә, таҙа тоторға өйрәтеүҙе дауам итеү. Көндәлек шәхси кәрәк-ярағтарҙы ҡулланыу ҡағиҙәләре менән таныштырыу (ҡулъяулыҡ, таҫтамал, тараҡ, көршәк); һабын менән ҡулланырға, бит-ҡулды, ҡолаҡтарҙы йыуырға һәм ҡоротҡансы һөртөргә күнектәреү. Ашау ваҡытында үҙ-аллылыҡ тәрбиәләү, аш һәм балғалаҡ, сәнске, ҡулъяулыҡ (салфетка) менән ҡулланырға күнектереү; икмәкте ваҡламаҫҡа, ашамлыҡты ауыҙ йомоп сәйнәргә, ашағанда һөйләшмәҫкә өйрәтеү.

Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү. Үҙ аллы сисенергә һәм кейенергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Ҙур төймәләрҙе элергә, аяҡ кейеме бауҙарын бәйләргә, кейемде матур итеп бөхтәләп һалырға, ултырғыс башына элергә, кейемдең тиҫкәреһен уңға әйләндерергә, кейенеп бөткәс, көҙгөгә ҡарап, сәсте һыйпап төҙәтергә, яғаларҙы рәтләргә, кейемдәге етешһеҙлектәрҙе төҙәтергә, бөхтәлеккә, таҙалыҡҡа ғәҙәтләндерергә өйрәтеү. Шәхси шкафта һәр нәмәнең үҙ кәштәһе булыуын белдереү мотлаҡ. Тиҫтерҙәренә төймәләрен элешергә, башлыҡтарын кейергә ярҙамлашыу теләге тәрбиәләү.

Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте. Уйнап бөткәс, уйынсыҡтарҙы урынлаштырып ҡуйырға, ашап бөткәс, тәрилкәләрҙе ҡатлап, ҡалаҡты эсенә һалырға, һәр төрлө шөғөлдәр тамамланғас, эш урынын тәртипкә килтерергә, ултырғысты урынына ҡуйырға өйрәтеүҙе дауам итеү. Эш һөҙөмтәләрен күрһәтергә, эшсән, әрһеҙ балаларҙы дәртләндерергә. Йылдың икенсе яртыһында аш өҫтәлен сервизлау, шөғөлдәргә әҙерләү өсөн дежур итеү күнекмәләренә өйрәтеү.

Тәбиғәттәге хеҙмәт. Тәрбиәсегә эйәреп, уйын майҙансыҡтарын сүп-сарҙан, ҡоро япраҡтарҙан, эскәмйәне ҡарҙан таҙартыу теләге уятыу. Сәскәләргә һыу һибеү, ҡоштарға ем биреү эштәрен өлкәндәр ярҙамында башҡарырға булышлыҡ итеү. Сәскәләрҙең орлоҡтарын йыйырға ярҙамлашыуға ылыҡтырыу.

Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү. Ололарҙың хеҙмәтенә ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү. Балаларға аңлайышлы һөнәрҙәр тураһында һөйләү (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, музыка етәксеһе, табип, һатыусы, ашнаҡсы, шофер, төҙөүсе). Уларҙың хеҙмәте һәм эштәренең һөҙөмтәләре тураһында белемдәрен үҫтереү, киңәйтеү, байытыу.

Таныш булған һөнәрҙәргә ҡарата хөрмәт, ихтирам хистәре тәрбиәләү. Ололарға ҡарата ярҙам итеү теләге уятыу, уларҙың эштәренең һөҙөмтәләренә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү. Балаларҙа бөхтәлеккә, үҙенең тышҡы ҡиәфәтендә матурлыҡ, таҙалыҡ һаҡлауға ынтылыш тәрбиәләүҙе дауам итеү.

Үҙ-аллы йыуынырға, аш алдынан, бәҙрәфтән һуң һабын менән ҡулдарҙы йыуып, ҡоро итеп үҙ таҫтамалына һөртөргә ғәҙәтләндереү.

Тараҡ, ҡулъяулыҡ менән ҡулланырға күнектереү. Йүткергәндә, сөскөргәндә икенсе яҡҡа әйләнеп, ауыҙ-морондо ҡулъяулыҡ менән ҡапларға өйрәтеү.

Ашағанда өҫтәл артында үҙ-үҙен тотоу һәм ашау ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәүҙе нығытыу: ашамлыҡты аҙлап алыу, ауыҙҙы йомоп сәйнәү, ҡалаҡты, сәнскене, бысаҡты, салфеткаларҙы дөрөҫ ҡулланыу. Ашағас – ауыҙ сайҡатырға күнектереү.

Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү. Сисенеү һәм кейенеү – үҙенә күрә бер хеҙмәт. Эҙмә-эҙлекле сисенеү һәм кейенеү - үҙе бер һөнәр. Был эште етеҙ башҡара белеүҙең һәйбәт сифат икәнлеген аңлатыу.

Көҙгөгә ҡарап өҫ-башты төҙәтә белеүҙе дауам итеү. Кейем бысранһа, төймә өҙөлһә, аяҡ кейеме еүешләнһә йәки бауы сырмалһа, өлкәндәр ярҙамында етешһеҙлекте бөтөрөү сараһын күрергә өйрәтеү.

Йыйнаҡлыҡҡа һәм бөхтәлеккә өйрәтеүҙе дауам итеү. Ярҙамсыл булыу сифаттары тәрбиәләү.

Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте. Үҙ-аллылыҡ, хеҙмәттән йәм табыу сифаттары тәрбиәләү маҡсатында, иртәнге мәлдәрҙә һәр балаға бәләкәй булһа ла айырым эш йөкмәтеү, һөҙөмтә ниндәй булырға тейешлеген аңлатыу.

Ҡайһы бер эште өлкәндәр әйтмәһә лә, эшләй белергә тейешлекте төшөндөрөү. 2-3 бала бер эште эшләгәндә, мәҫәлән, бүлмә гөлдәрен тәрбиәләгәндә (һыу һибеү, төптәрен йомшартыу, япраҡтарын һөртөү), үҙ-ара килешеп эшләү матур һөҙөмтә биргәнлеген иҫбатлау.

Балалар һәр төрлө йәки көндәлек эштән ялҡмаһын өсөн, эште йәнләндерергә, төрлө методик һәм тәрбиә ысулдары ҡулланып төрлөләндереү, яҡшы эш һөҙөмтәһен күрһәтеп, балаларҙы дәртләндереү.

Төркөм бүлмәһе, уйын майҙансығы тәртиптә тотолорға, ҡурсаҡтар кейеме таҙа, китаптар йыртылмаған, йыртылһа – йәбештерелгән булырға тейеш.

Төҙөлөш материалдары менән уйнап ялҡҡас, йәшниктәргә һалып ҡуйырға, уйынсыҡтарҙы тәртип менән урынлаштырырға өйрәтеү.

Һәр әйбергә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Тәбиғәттәге хеҙмәт. Тәбиғәт ул – кеше өсөн хеҙмәтхана. Тимәк, кеше тәбиғәткә хеҙмәт итергә бурыслы икәнлекте аңлатыу. Уйын майҙансығы таҙа булһын өсөн, сүп-сарҙы йыйып алырға, һеперергә (ҡарҙан таҙартырға) кәрәклеген төшөндөрөү.

Мөхит таҙа һауалы, йәйен эҫелә күләгә булһын өсөн ағас үҫтерергә, матурлыҡ һәм зауыҡ өсөн сәскәләр сәсергә, улар үҫһен өсөн һыу һибергә, ҡомда уйнау өсөн уны йомшартып торорға; ҡоролмаларҙы боҙмаһаң, улар оҙаҡ хеҙмәт итәсәген, ҡоштарҙы яратып, ем биреп торһаң, тәбиғәт хозур буласағын, ғөмүмән, кеше тәбиғәтте хеҙмәте менән матурларға тейешлекте өйрәтеү.

Һөҙөмтәле эшкә өлгәшеүҙе, ярҙамсыл булырға тырышыуҙы хуплау.

Хеҙмәт тураһында әйтем, мәҡәлдәр, йомаҡтар, әкиәттәр. Халыҡ ижадынан миҫалдар ҡулланыу.

Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү. Яҡындарының һөнәре менән таныштырыу. Ата-әсәләрҙең профессияһына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү. Тән, кейем-һалым таҙалығына иғтибарлы булыу һәм бөхтәлеккә ынтылыу тәрбиәләү: үҙ-аллы теш таҙарта, тырнаҡтарҙы тәрбиәләргә, сәс тарап йөрөргә, ҡулъяулыҡ менән ҡуллана белергә күнектереү.

Тиҙ һәм билдәле тәртиптә сисенергә һәм кейенергә, кейемдәрҙе үҙ урынына ҡуйырға, үҙенең йоҡлаған урынын йыйыштыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Ашағанда кәүҙә торошон кәрәкле тотоп, ашау ҡағиҙәләрен үтәп, ашау кәрәк-ярағын (сәнске, бысаҡ) дөрөҫ ҡулланырға күнектереү.

Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү. Эҙмә-эҙлекле сисенә һәм кейенә белеүҙе, шәхси кейемде һаҡлап, таҙа һәм бөхтә йөрөргә, аяҡ кейемен таҙарта белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Шкафтарҙа кейем матур эленеп торорға, һәр нәмә үҙ урынында булырға тейешлекте, матур, зауыҡ менән кейенеү - мәҙәнилекте билдереүҙе аңлатыу. Тиҫтерҙәренә, кескәйҙәргә, тәрбиәсегә, өлкәндәргә ярҙамлашыу теләге уятыу.

Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте. Һәр эш һөҙөмтәле булырға тейешлеген аңлатыу. Төркөм бүлмәһендәге, уйын майҙансығындағы таҙалыҡ, бөхтәлек – күңел күтәренкелеге, ҡыуаныс биреүен күрһәтеү.

Һәр хеҙмәтте үҙеңә һәм башҡаларға шатлыҡ булһын өсөн еренә еткереп башҡарыу зарур. Уйынсыҡтарға, беҙҙе уратып алған кешеләргә хеҙмәт иткән әйберҙәргә һаҡсыл ҡараштa булыу эште еңеләйтә: китапты йыртмаһаң – ул матур көйө ҡала, уйынсыҡ хайуандарҙың ҡул-аяғы теүәл ҡалһа – шәберәк «йүгерәләр» һ.б.

Дежур балаға эштең айышына төшөнөргә өйрәтеү, һөҙөмтәһен күрһәтеү. «Күмәк эш – күңелле эш» мәҡәлен ысынбарлыҡта иҫбатлау. Бәләкәй генә эште лә намыҫ менән башҡарырға ғәҙәтләндереү.

Тәбиғәттәге хеҙмәт. Тирә-йүндә, мөхиттә һәр ваҡыт тәртип булдырырға ғәҙәтләндереү. Һәр эште яуаплы, намыҫлы башҡарыу: бүлмә гөлдәренә һыу һибеү, төптәрен йомшартыу, япраҡтарын йыуыу, аквариумдағы балыҡтарҙы ашатыу,

тутыйғош йәки терпене нисек дөрөҫ тәрбиәләүҙе дауам итеү. Һуғанбаш, гөл бүлбеләрен айырып ултыртырға өйрәтеү, ағас һәм ҡыуаҡ төптәрен йомшартыу, эш ҡоралдарына һаҡсыл ҡараш, уларҙы таҙа тоторға, айырым урынға ҡуйырға кәрәклекте төшөндөрөү.

Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү. Ололар хеҙмәтенең йәмғиәттә тотҡан урыны, һөҙөмтәһе тураһында һөйләү. Кеше ҡулы менән эшләнгән әйберҙәргә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү. Тиҙ һәм дөрөҫ итеп үҙ-аллы йыуына, ҡоротҡансы һөртөнә, тешен таҙарта, ашағандан һуң ауыҙын сайҡата, йоҡо алдынан аяҡ йыуа белергә күнектереүҙе дауам итеү.

Шәхси гигиена әйберҙәрен (тараҡ, теш щеткаһы, таҫтамал, ҡулъяулыҡ) тотона белеүҙе нығытыу. Үҙенең тышҡы ҡиәфәтенә иғтибарлы булып, бөхтәлек, таҙалыҡ һаҡлап, кейемендәге етешһеҙлектәрҙе үҙ-аллы йүнәтә белергә күнектереүҙе дауам итеү.

Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү. Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереүҙең бөтә төрҙәрен тайпылышһыҙ үтәү мотлаҡ, был хеҙмәттә үҙ-аллылыҡ, йыйнаҡлыҡ, таҙалыҡ, бөхтәлек, эшсәнлек зарур икәнлеген аңлатыу. Йәшәү һәм эш урынын һәр саҡ тәртиптә тотоуҙы ғәҙәткә индерергә өйрәтеү.

Хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте. Балаға хеҙмәттә үҙ-аллылыҡ мөмкинлеге биреү: бүлмә гөлдәренә һыу һибеү, төптәрен йомшартыу, япраҡтарын һөртөү, йыуыу; балыҡтарҙы ашатыу, аквариумда һыу яңыртыу; тутыйғош, терпе, йорт ҡуянын тәрбиәләү; шөғөлдәргә ҡулланмалар, әсбаптар таратыу; иртәнге, төшкө, киске ашҡа өҫтәл әҙерләү; китаптарҙы «дауалау», уйынсыҡтарҙы йыуыу, бәләкәй көрәк менән ҡар таҙартыу; уйын майҙансығын сүп-сарҙан таҙартыу, һепереү һ.б.

«Эшең файҙа өсөн, өйрәнеүең үҙең өсөн», тип иҫкәртеп тороуҙың һәйбәт һөҙөмтәләре. Күмәк эштә әүҙем булырға ғәҙәтләндереп, баланы тәрбиәле, мәҙәниәтле, ата-әсәһе, халҡы, йәмғиәт өсөн эшһөйәр һәм файҙалы кеше булып үҫтереү сараларын ҡулланыу.

Тәбиғәттәге хеҙмәт. Тәбиғәт мөйөшөндә, уйын майҙансығында дежурлыҡ бурыстарын үҙ-аллы намыҫ менән башҡарырға күнектереү.

Йәшелсә-емеш, сәскәләр өсөн түтәлдәр әҙерләү, үрсетмәләрҙе күсереп ултыртыу, уларҙы тәрбиәләү ысулдарын башҡарырға өйрәтеү.

Ҡышлаусы ҡоштарға ниндәй тәрбиә кәрәклеген ысынбарлыҡта күрһәтеү.

Күмәк хеҙмәттә һәр бер балаға эш бүлеп биреп, уның башҡарылыу һөҙөмтәһен күрергә, баһаларға ғәҙәтләндереү.

Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәтләү. Ололарҙың хеҙмәте һәм йәмғиәттәге роле тураһында һөйләү. Эшләгән кешеләргә ҡарата хөрмәт хисе тәрбиәләү.

Төрлө профессия һөнәрҙәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, бигерәк тә атай-әсәй һөнәрҙәренә һәм уларҙың эшләгән урындарына хөрмәт тәрбиәләү.

ХӘҮЕФҺЕҘ ЙӘШӘҮ НИГЕҘҘӘРЕН ФОРМАЛАШТЫРЫУ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө
(2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен һаҡлау. Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде хәүефһеҙ тотоу элементтары менән таныштырыу (таныш булмаған хайуандарға яҡын бармаҫҡа, уларҙы һыйпамаҫҡа, үҫемлектәрҙе өҙмәҫкә, ауыҙға ҡапмаҫҡа).

Юл хәрәкәтендә хәүефһеҙлек һаҡлау. Транспорт төрҙәре тураһында тәүге төшөнсәләр биреү. Машина, юл, урам тураһында тәү төшөнсәләрҙе формалаштырыу.

Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү. Тирә-йүндәге предметтар менән яҡындан таныштырыу, улар менән эш иткәндә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәтеү. «Мөмкин», «ярамай», «хәүефле» төшөнсәһе менән таныштырыу. Майҙансыҡта һаҡ уйнау (һыу эсмәҫкә,ҡом менән бәрешмәҫкә).

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен һаҡлау. Тере һәм йәнһеҙ тәбиғәттең бер-береһе менән бәйләнешле булыуын аңлатыу. Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде дөрөҫ тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу (үҫемлектәрҙе өҙмәҫкә, ағастың ботаҡтарын һындырмаҫҡа, хайуандарға ҡағылмаҫҡа һ.б.).

Юл хәрәкәтендә хәүефһеҙлек һаҡлау. Юлдың машиналар һәм йәйәүлеләр йөрөй торған өлөштәре (тротуар) менән таныштырыу; светофорҙың ҡыҙыл, һары һәм йәшел төҫтәренең мәғәнәләрен аңларға ярҙам итеү. Юл сигналдары ярҙамында урамда йөрөргә өйрәтеү.

Ябай ғына юл ҡағиҙәләрен өйрәтеү. Транспорт саралары тураһында белемдәрен формалаштырыу.

Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү. Балалар баксаһында, өйҙә ҡурҡыныс тыуҙырған предметтар һәм улар менән эш иткәндә башҡарыла торған иң ябай ҡағиҙәләр менән таныштырыу (ҡайнар һыу, ут, киҫә һәм сәнсә торған осло предметтар, электр приборҙары, баҫҡыстан төшөү, тәҙрәне, ишекте асыу һ. б.).

Бәләкәй предметтар менән уйнағанда хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә күнектереү (ауыҙға алмаҫҡа, ҡолаҡҡа, танауға тыҡмаҫҡа һ.б.).

Ярҙам кәрәк саҡта ололарға өндәшергә өйрәтеү.

Ҡом, һыу, ҡар менән уйнағанда хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәй белеү күнекмәләрен формалаштырыу.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү. Тәбиғәттә үҙеңде нисек хәүефһеҙ тотоу, хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһы, тере булмаған тәбиғәт күренештәре менән таныштырыуҙы дауам итеү.

«Ашарға яраҡлы», «ағыулы», «дарыу үләндәре» тигән төшөнсә менән таныштырыу.

Кеше өсөн хәүефле булған бөжәктәр һәм ағыулы үләндәр менән таныштырыу.

Юл хәрәкәтендә хәүефһеҙлек һаҡлау. Төркөм бүлмәһендә, уйын майҙансығында, яҡындағы арауыҡта йүнәлеш билдәләй белеү, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү.

Светофорҙың ҡыҙыл, һары, йәшел төҫтәренең урынлашыу тәртибе һәм аңлатҡан мәғәнәләре менән таныштырыу. Светофор сигналына ярашлы хәрәкәт итергә күнектереү. Юл хеҙмәткәре - полиция хеҙмәткәренең эшен күҙәтеү һәм аңлатыу.

Йәмәғәт транспорттары төрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү (троллейбус, автобус, трамвай, поезд, самолёт, теплоход һ. б.). Транспорт туҡталышы тураһында төшөнсәләр биреү (маршрут автобусы, троллейбусы, трамвайы) туҡталышы. Яҡындағы урамда уларҙың урынын билдәләү. Автобус йәки троллейбус туҡталышын аңлатыусы юл билдәләре менән таныштырыу. Йәмәғәт транспортына ултырыу һәм унан сығыу ҡағиҙәләренә иғтибар итеү.

Балаларҙың махсус транспорт саралары тураһындағы төшөнсәләрҙе һәм ҡулланышы («Ашығыс ярҙам» машинаһы, «Полиция» машинаһы, «Янғын һүндереү» машинаһы һ. б.) тураһындағы белемдәрен асыҡлау; улар биргән сигнал тауыштарына иғтибар итергә, айыра белергә өйрәтеү; ҡайһы бер айырым осраҡтарҙа махсус транспорт сараларының юл йөрөү ҡағиҙәләрен боҙоу мөмкинлегенә иғтибар иттереү.

Юлдарҙа ҡурҡынысһыҙ йөрөү ҡағиҙәләрен өйрәнеү процессына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү. Көндәлек режим барышында хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрҙе үтәү күнекмәләрен нығытыу (уйында, тикшереү-эҙләнеү тәжрибәләре башҡарғанда, уйын майҙансығында һ.б.).

Көнкүрештәге электр приборҙары менән таныштырыу, улар менән эш иткән ваҡытта ниндәй хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә кәрәклекте өйрәтеү.

Велосипедта йөрөү ҡағиҙәләре менән таныштырыу.

Янғын һүндереүселәрҙең эше менән таныштырыу. Ут сыҡмаһын өсөн ниндәй ҡағиҙәләрҙе белергә кәрәклекте төшөндөрөү.

Көнкүрештә ҡурҡынысһыҙлыҡ нигеҙҙәре тураһында белемдәрҙе үҙләштереүҙе дауам итеү, һаҡлыҡ, һиҙгерлек хисе тәрбиәләү. Ҡайсы, бысаҡ, осло предметтар менән эш итеүҙә, спорт инвентары, быяла предметтар ҡулланғанда һаҡ булырға күнектереү. Балаларҙы тормошта яңы, улар өсөн ғәҙәти булмаған осраҡтарҙа, таныш булмаған кешеләр менән осрашҡанда үҙ-үҙҙәрен дөрөҫ тоторға өйрәтеү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү. Тәбиғәттә үҙеңде нисек хәүефһеҙ тотоу кәрәклеген һәм экологик мәҙәниәт нигеҙҙәрен формалаштырыу.

Үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһына зыян килтермәҫкә кәрәклекте аңлатыу, сөнки тәбиғәттә бөтә нәмә бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә тора.

Тере булмаған тәбиғәт күренештәре менән таныштырыу (йәшен йәшнәү, күк күкрәү, йәйғор). Йәшен ваҡытында үҙеңде нисек тоторға.

Балаларҙы имгәнгәндә йәки бөжәк тешләгәндә нисек беренсе ярҙам күрһәтергә өйрәтеү.

Юл хәрәкәтендә хәүефһеҙлек һаҡлау. Балаларҙы юл элементтары менән таныштырыу (машиналар йөрөгән өлөшө, йәйеүлеләр юлды аша сығыу өсөн күрһәтелгән өлөш, тротуар - кешеләр генә йөрөй торған өлөшө);

Балалар баҡсаһы һәм бала йәшәгән йорт урынлашҡан урамдар менән таныштырыу.

Машиналар, кешеләр һәм велосипедсылар хәрәкәтләнгәндә үтәлә торған юл ҡағиҙәләрен ҡабатлау, нығытыу.

Юл билдәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү («Балалар», «Хәрәкәт тыйыла», «Автобус туҡталышы», «Йәйәү юлды аша сығыу», «Тәүге медицина ярҙамы күрһәтеү пункты», «Туҡланыу пункты», «Тороу урыны», «Машина менән инеү тыйыла», «Юл эштәре», «Велосипед өсөн юл».

Йәмәғәт урындарында, юл хәрәкәтендә кешеләрҙең һәм үҙ-үҙеңде нисек тоторға кәрәклекте иҫкә төшөрөү, күҙәтеү, сағыштырыу, һығымта яһау, уларға баһа бирә белеү күнекмәләрен үҫтереү; юлда хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәмәгән осраҡта килеп сыҡҡан күңелһеҙ хәлдәрҙең сәбәптәрен, һөҙөмтәләрен аңлатыу.

Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү. Балаларҙа тормошта хәүефһеҙ йәшәй белеү нигеҙҙәрен формалаштырыу.

Йылдың һәр миҙгелендә төрлө эшмәкәрлек ваҡытында хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәй белергә күнектереү (һыу ингәндә, велосипедта йөрөгәндә, санала, конькилә, саңғыла шыуғанда һ.б.).

Көнкүрештә ҡурҡыныс сығанаҡтары булған предметтар тураһындағы белемдәрен киңәйтеү (үтек, газ плитәһе, электр приборҙары һ.б.). Уларҙы һаҡ ҡулланыу ҡағиҙәләрен нығытыу.

Янғын сығыу сәбәптәрен аңлатыу, көнкүрештә янғын булдырмаҫ өсөн ниндәй талаптарҙы үтәү кәрәклеген төшөндөрөү. Янғын ваҡытында үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре. МЧС хеҙмәте менән таныштырыу. Ҡурҡыныс янағанда ололарға ярҙам һорап шылтыратыуға кәрәкле телефон номерҙарын өйрәтеү: «01», «02», «03», «112»".

Үҙенең исем, фамилияһын, йәшен, өй адресын, ата-әсәһенең телефон номерын яттан әйтә белеүенә өлгәшеү.

Таныш булмаған кешеләр менән осраҡлы осрашыуҙар һәм аралашыу барышында балаларға үҙҙәрен нисек тоторға кәрәклеге тураһында аңлатыу.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү Үҙеңде нисек тәбиғәттә хәүефһеҙ тотоу ҡағиҙәләрен ҡабатлау һәм нығытыу.

Экологик мәҙәниәт нигеҙҙәрен формалаштырыуҙы дауам итеү. «Ҡыҙыл китап» менән таныштырыу. Ҡыҙыл китапҡа ингән айырым хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһы менән таныштырыу. Тәбиғәт күренештәре тураһындағы белемдәрен киңәйтеү (йәшен, күк күкрәү, йәйғор, ел-дауыл, ҡойон, һ.б). Ундай осраҡтарҙа үҙеңде нисек тоторға кәрәклекте өйрәтеү.

Юл хәрәкәтендә хәүефһеҙлек һаҡлау. Балаларҙың урам төҙөлөшө һәм юл хәрәкәте тураһындағы белемдәрен системаға һалып ҡабатлатыу һәм нығытыу. «Майҙан», «Проспект», «Бульвар» төшөнсәләре менән таныштырыу.

Хәрәкәтләнеүҙә юл билдәләрен, маршруттарҙы, план-схемаларҙы файҙаланып, арауыҡта йөрөргә өйрәтеү.

Тыйыусы билдәләр: «Һулға (уңға) боролоу тыйыла», «Хәрәкәт тыйыла», «Йәйәүлеләргә юл ябыҡ», «Инеү тыйыла», «Туҡталыу тыйыла» һ. б. менән танышыуҙы дауам итеү. Балалар рәсемдәрендә юл билдәләре сағылышын хуплау. Бойороусы билдәләр: «Тура барырға», «Һулға (уңға) барырға», «Түңәрәк буйынса барырға» һ. б. менән таныштырыу. Юл хәрәкәтендә ҡабул ителгән символик билдәләрҙең мәғәнәләренә төшөнөргә булышлыҡ итеү. Мәғлүмәт биреүсе-күрһәтеүсе билдәләр: «Бер яҡлы хәрәкәтле юл», транспорттың барыу тиҙлеге «40», «70» һ.б.

Балаларға сервис билдәләренең: «Ашау-эсеү пункты», «Яғыулыҡ ҡойоу станцияһы», «Телефон», «ЮХИДИ -ГИБДД посты», «Ял итеү урыны» һ. б.-ҙың ни өсөн ҡулланылышын аңлатыу.

Балаларҙы юлдар төҙөүсе махсус техника төрҙәре, төҙөүселәр һөнәре хеҙмәте менән таныштырыу. Хәүефһеҙ хәрәкәт итеү юлдарҙың сифаты менән бәйле булыуҙы) төшөндөрөү.

Балаға өйҙән балалар баҡсаһына, йорт эргәһендәге йәмғиәт биналарына (магазин, почта, поликлиника һ.б.) ололар оҙатыуында бара-ҡайта белеүҙе төшөндөрөү һәм күнектереү.

Йәшәйештә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү. Балаларҙың балалар баҡсаһында, өйҙә, йәмәғәт урындарында үҙ-үҙҙәрен әҙәпле тотоу ҡағиҙәләрен үтәй белеүҙәрен нығытыу; башҡаларҙан да был ҡағиҙәләрҙең үтәлеүен талап итергә өйрәтеү. Кәрәк булған осраҡта, ашығыс ярҙам саҡырыу телефоны номерын йыйырға өйрәтеү.

Көнкүреш приборҙары менән дөрөҫ ҡуллана белеүҙе нығытыу.

Төрлө уйындарҙа һәр бер йыл миҙгелендә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә күнектереү. Ҡурҡыныс тыуған осраҡтарҙа ярҙам һорап ололарға мөрәжәғәт итергә өйрәтеү. «Өйҙә яңғыҙ», «Юғалдым», «Аҙаштым», «Сит кеше осраны» тигән осраҡтарҙа үҙ-үҙенде тота белеү күнекмәләрен нығытыу.

ҒХМ (Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы), янғындан ҡотҡарыу хеҙмәте, ашығыс медицина ярҙамы хеҙмәте тураһында белемдәрҙе киңәйтеү. Ярҙам һорап мөрәжәғәт итеү телефондарын ҡабатлау, ятлау.

Үҙенең исем, фамилияһын, йәшен, өй адресын, ата-әсәһенең телефон номерын яттан әйтә белеүенә өлгәшеү.

«ТАНЫП-БЕЛЕҮ ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

«Танып-белеү үҫеше» өлкәһе йөкмәткеһе балаларҙың тирә-йүнде тәрәнерәк өйрәнеү, төшөнөү, ҡыҙыҡһыныу теләген ҡәнәғәтләндерә; аң-зиһендең үҫешен, ижади әүҙемлекте, хыял, фараз итеүҙе үҫтерә; баланың үҙе һәм башҡа кешеләр, тирә-яҡ донъя, ундағы предметтар, объекттар, улар араһындағы мөнәсәбәттәр һәм үҙенсәлектәр (формаһы, төҫө, үлсәме, материалы, тауышы, ритмы, темпы, һаны, киҫәге-бөтөнө, бәләкәй һәм ҙур һ.б.) тураһында ябай ғына кимәлдә белемдәрен формалаштыра; тыуған ил, социаль-мәҙәни ҡиммәттәр, традициялар, йолалар һәм байрамдар, Ер шарының кешеләрҙең дөйөм өйө булыуы, Ерҙәге тәбиғәттең

үҙенсәлеге, илдәрҙең, халыҡтарҙың күп төрлөлөгө һ.б. тураһында төшөнсә биреүҙе күҙаллай.

Төп маҡсаттар һәм бурыстар

Башланғыс ябай математик төшөнсәләр. Элементар математик төшөнсәләрҙе формалаштырыу. Тирә-яҡтағы объекттарҙың төп үҙенсәлектәре һәм улар араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында ябай ғына төшөнсәләр биреү: формаһы, төҫө, үлсәме, күләме, һаны, бүлеме, ваҡыт һәм арауыҡтағы йүнәлештәре.

Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше. Балаларҙың танып-белеү ҡыҙыҡһыныусанлығын үҫтереү, тирә-йүндә ориентирҙы дөрөҫ табырға өйрәтеү, сенсор яҡтан үҫтереү (объекттың үҙенсәлектәрен тойомлап, һиҙеп аңлау, төшөнөү).

Тирә-йүнде өйрәнеүҙә ижади әүҙемлекте һәм фантазияны үҫтереү.

Тирә-яҡ мөхиттәге объекттар һәм предметтар тураһында тәү төшөнсәләр биреү, улар араһындағы бәйләнештәрҙе һәм үҙенсәлектәрҙе өйрәнеү ысулдарын үҙләштереү (формаһы, төҫө, күләме, материалы, яңғырашы, ритмы, темпы, сәбәбе һәм һөҙөмтәһе һ.б.).

Балаларҙың объекттарҙы, предметтарҙы дөрөҫ ҡабул итеү һәләтен, иғтибарын, хәтерен, күҙәтеүсәнлеген, уларҙы анализлай, сағыштыра белеүен, предметтың йәки тирә-йүндәге ниндәйҙер бер объекттың тик үҙенә генә хас булған билдәләрен асыҡлай, таба белеүен формалаштырыу. Предметтар һәм тәбиғәт күренештәре араһындағы ябай ғына бәйләнештәрҙе табып, һығымта яһарға өйрәтеү.

Тирә-йүндәге предметтар менән таныштырыу. Тирә-яҡтағы әйберҙәр, предметтар менән таныштырыу (исем-атамаһы, башҡарған функцияһы, тәғәйенләнеше, үҙенсәлеге, сифаты).

Тирә-йүндәге предметтарҙың кеше уй-фекере һәм хеҙмәте ярҙамында барлыҡҡа килеүен төшөндөрөү. Эшләнгән әйберҙәр һәм предметтар кешеләр өсөн уңайлы, кәрәкле, көндәлек йәшәйеште тағы ла еңеләйтһен өсөн һәр саҡ үҙгәртелеп, яңыртылып тороуҙы аңлатыу.

Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең бер-береһе менән бәйләнешле булыуын ябай ғына кимәлдә аңлатыу.

Социаль донъя менән таныштырыу. Баланы уратып алған социаль донъя менән таныштырыу, балаларҙың тирә-йүнде танып-белеү даирәһен киңәйтеү, донъяны бер бөтөн итеп ҡабул итеүен формалаштырыу.

Бәләкәй һәм ҙур тыуған ил тураһындағы тәүге төшөнсәләрҙе биреү; Рәсәй һәм Башҡортостан халҡының мәҙәниәте, традициялары һәм байрамдары менән таныштырыу.

Граждандыҡ тойғоларын тәрбиәләү. Тыуған илгә, ергә, милләтенә, халыҡҡа ҡарата мөхәббәт, яратыу тойғолары, тарихы, мәҙәниәте, ҡаҙаныштары менән ғорурланыу хистәре тәрбиәләү.

Кешелектең дөйөм өйө - Ер шары һәм унда йәшәгән төрлө халыҡтар, илдәр тураһында элементар төшөнсәләр биреү.

Тәбиғәт донъяһы менән таныштырыу. Тәбиғәт күренештәре менән таныштырыу. Ер планетаһында тәбиғәттең күп төрлө булыуын аңлатыу.

Элементар экологик төшөнсә биреү, кеше тәбиғәттең бер өлөшө, ул уны һаҡларға, яҡларға тейешлекте, тәбиғәттә бөтә нәмә бер-береһе менән бәйле һәм

Ерҙә кешенең тормошо, тәбиғәт торошо тирә-яҡ мөхиттең таҙа, яҡшы булыуына бәйле икәнлекте аңлатыу.

Тәбиғәттә үҙеңде дөрөҫ тоторға өйрәтеү. Тәбиғәткә ҡарата һөйөү тойғоһо уятыу, уны һаҡларға теләк уятыу.

ПСИХОЛОГИК ҺӘМ ПЕДАГОГИК ЭШТЕҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Башланғыс ябай математик төшөнсәләр

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Күплек төшөнсәһе менән таныштырыу. Ваҡ предметтарҙы күпләп бергә йыйыу (уска, һауытҡа, йәшниккә һ.б.), бер һауыттан икенсеһенә - күпләп, аҙаҡ бөртөкләп бушатыу, йә төҫөнә ҡарап һайлап алыу.

Предметтарҙың күп икәнлеген күрә белеү (өҫтәлдә, иҙәндә, келәмдә) һәм уларҙы тәрбиәсе ҡушыуы буйынса күпләп бер рәткә теҙеп, йә төҫтәре, ҙурлыҡтары буйынса парлап һала белеү.

Тәрбиәсенең әйтеүенсә, рәттән беренсе һәм аҙаҡҡы предметтарҙы алып, күплектең сиктәрен билдәләй белеү.

Тирә-йүндәге бер үк төрлө предметтарҙың күплеген таба һәм күрһәтә белеү (күп ҡурсаҡтар, күп машиналар һ.б.).

Дәүмәл, ҙурлыҡ төшөнсәһе менән таныштырыу. Тирә-йүндәге төрлө дәүмәлдәге предметтарҙы әйтә һәм күрһәтә белеү (ҙур – бәләкәй һ.б.).

Ҡул менән тирә-йүндәге предметтарҙың оҙонлоғон (таҫма, балаҫ), киңлеген (карауат, келәм), бейеклеген (ултырғыс, өҫтәл) һ.б. күрһәтә белеү.

Форма төшөнсәһе менән таныштырыу. Шарҙы, кубты, кирбесте башҡа предметтарҙан айыра белергә, уларҙың атамаһын әйтергә һәм улар менән төрлө хәрәкәттәр башҡарырға өйрәнеү: тәгәрәтеү, бер-береһенең өҫтөнә ҡуйыу. «Түңәрәк», «тәгәрәмәй», «тәгәрәй», «куб» төшөнсәләрен аңлау һәм әйтә белеү.

М. Монтессори дидактик материалдарын ҡулланыу.

Арауыҡ тураһында төшөнсә. Төркөм бүлмәһендә йүнәлештәрҙе билдәләй, аңлай белеү: алыҫ - яҡын, аҫта - өҫтә, бында - тегендә.

Өҫтәлдә киҫмә һүрәттәрҙе, кубиктарҙы теҙә, предметтарҙың (ҡурсаҡ, уйынсыҡ) өлөштәрен һәм шулай уҡ предметтарҙың хәрәкәт итеү йүнәлештәрен күрһәтә белеү.

Үҙенең кәүҙә өлөштәрен күрһәтә белергә өйрәтеү (баш, бит, ҡулдар, аяҡтар, арҡа).

Тәрбиәсе артынан билдәле йүнәлештә хәрәкәтләнә белеү.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Һан. Төркөмләнгән предметтарҙың дөйөм сифатын күреп аңларға өйрәтеү (бөтә туптар ҙа түңәрәк, тәгәрәй; былары - күк төҫтә, ә былары - ҡыҙыл һ.б.

Төрлө төркөм предметтарын сағыштырыу ярҙамында «күп - бер», «аҙ», «бер үк», «берәү ҙә», «тигеҙ», «ни тиклем - шул тиклем», «ҡарағанда күберәк, аҙыраҡ» тигән төшөнсәләрҙе аңлап, ул предметтарҙы береһе өҫтөнә икенсеһен һалып ҡарап, йә парлап алып, төҫө, дәүмәле, формаһы буйынса төркөмләү.

Бер төркөмдән икенсе төркөмгә предметтарҙы берәмләп ҡушыу, йә киреһенсә алыу юлы менән, ике төркөмдә лә уларҙы тигеҙләй белеү: «Тигеҙме?» тигән һорауҙы аңлауына ирешергә. «Нимә артыҡ?» (кәм?) һорауына яуап бирә белеү: «Мин һәр түңәрәккә бәшмәк һалдым. Түңәрәктәр күп, бәшмәктәр аҙ». Йәки «Бәшмәктәр шулай уҡ түңәрәктәр кеүек».

«Бер», «ике» һандары менән таныштырыу.

Дәүмәл. «Буй», «киңлек», «бейеклек» төшөнсәләрен аңлай һәм ҡулдар ярҙамында уларҙың дәүмәлен күрһәтә белеү.

Контраст йәки бер үк дәүмәлле предметтарҙы сағыштырып, «оҙон-ҡыҫҡа», «киң-тар», «бейек-тәпәш», «ауыр- еңел» төшөнсәләрен аңларға, айырырғаа, әйтергә һәм тирә-йүн предметтарында уларҙы таба белергә өйрәтеү.

Геометрик фигуралар тураһында төшөнсәләр. Түңәрәк, квадрат, өсмөйөш менән таныштырыу. Уларҙың оҡшашлығын һәм айырмаһын таба белеү. Шундай уҡ формалы предметтарҙы тирә-йүндә ҡараш йәки бармаҡтар менән тикшереп таба белеү.

Арауыҡтағы йүнәлеш. Баланың арауыҡта үҙенең кәүҙә торошо йүнәлештәрен аңлай, әйтә һәм күрһәтә белеүе: уң, һул ҡул, өҫкә - аҫка, алға - артҡа, алда - артта, аҫта, эсендә, эргәлә, өҫтөндә һ.б.

Төркөм бүлмәһендә һәм балалар баҡсаһы майҙансығында йүнәлештәрҙе билдәләй, таба, ҡуллана белеүе. Уң һәм һул ҡулдарын айыра белә.

Ваҡыт төшөнсәләре. Тәүлек өлөштәре: кис - иртә, көн - төн менән таныштырыу һәм ул ваҡыттарҙа кешеләр ниндәй эшмәкәрлек менән шөғөлләнеүен баланың һөйләй белеүе.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Һан һәм иҫәпләү. Балаларға күплек төшөнсәһен һәр төрлө сифаттары буйынса айырылған предметтарҙан тороуҙы төшөндөрөү: төрлө төҫтәге, формалағы, дәүмәлдәге предметтарҙы һанамайынса (бында түңәрәктәр күп- ҡыҙылдары, күктәре, ҙурҙары бар) күпме, аҙмы - билдәләү. Күплек эсенә ингән предметтарҙы парлап һалып (һанамайынса) предметтарҙың тигеҙлеген йәки тигеҙ булмауын билдәләргә өйрәтеү. Балалар телмәренә «Бында түңәрәктәр күп. Ҡыҙылдары бында, ә былары - күк. Ҡыҙыл түңәрәктәр күктәргә ҡарағанда күберәк». Йәки: «Күк түңәрәктәр ҡыҙыл түңәрәктәргә ҡарағанда аҙыраҡ». Йәки: «Ҡыҙыл түңәрәктәр менән күк түңәрәктәр бер тигеҙ».

Ике төркөм предметтарҙы сағыштырыу аша, «бер» һанын ҡушыу, йә алыу юлы менән 5 эсендәге һандарҙың барлыҡҡа килеүен аңлау һәм һанай белеү.

5-кә тиклем төп һәм рәт һандарын һанарға өйрәнеү. Һанағанда аҙаҡҡы һанды иҫәпләгән предметтар төркөмөнә бәйләп әйтә белеү (бер, ике, өс - бөтәһе өс ҡуян).

«Нисәнсе?», «Һан буйынса нисәнсе?» һорауҙарына яуап бирә белеү.

Предметтарҙы һаны яғынан, «1»-ҙе ҡушып, йә алып, тигеҙләй белеү. Уларҙы төҫө, формаһы, дәүмәле, һаны буйынса төркөмләү.

Рәттә, түңәрәктә, диагоналдә, периметрҙа урынлашҡан предметтарҙы һанай белеү.

Дәүмәл. Ике предметты дәүмәле (буйы, киңлеге, бейеклеге) буйынса сағыштыра белеү. Арта, йә кәмей барыу рәүешендә 5 – кә тиклем теҙә һәм теҙеү тәртибен һандар ярҙамында әйтә белеү.

Йәнәш торған төрлө төҫтәге предметтарҙы дәүмәле (бейеклек, киңлек) буйынса сағыштыра белеү (һары таҫма ҡыҙылынан оҙонораҡ, ә ҡыҙыл таҫма һары таҫманан ҡыҫҡараҡ).

Предметтарҙы дәүмәлдең киңлеге - тарлығы, оҙонлоғо - ҡыҫҡалығы, бейеклеге - тәпәшлеге буйынса сағыштырыу (һары таҫма йәшеленә ҡарағанда оҙонораҡ һәм киңерәк, ә йәшел таҫма һарыһынан ҡыҫҡараҡ һәм тарыраҡ).

Ҡалынлыҡ - йоҡалыҡ төшөнсәләре менән таныштырыу (ҡалын, ҡалыныраҡ, нәҙек, йоҡа).

Геометрик фигуралар һәм формалар. Тура дүртмөйөш, овал, цилиндр менән таныштырыу һәм уларҙы таныш фигуралар менән сағыштырып, оҡшашлығын, айырмаһын табыу.

Геометрик фигураларға билдәләмә бирә белеү (квадрат - бөтә яғы ла тигеҙ булған фигура).

Ҡатмарлы формалы предмет өлөштәренең геометрик фигуралар менән ниндәй бәйләнештә (оҡшашлыҡта) булыуын күрә, аңлай белеү. Таныш булған 3-4 геометрик фигураны үҙ-ара сағыштыра, логик фекерләү аша уларҙың оҡшашлығын һәм айырмаһын таба белеү.

Арауыҡтағы йүнәлеш. Баланың үҙенән ситтә булған арауыҡтағы йүнәлештәрҙе әйтә, аңлай һәм күрһәтә белеүе: һулда - уңда, өҫтә - аҫта, алда - артта.

Үҙ кәүҙәһенә ҡарата арауыҡта урынлашҡан предметтарҙың урынын билдәләй һәм әйтә белеү.

Билдәләнгән йүнәлештә хәрәкәт итә белеү. «Араһында, эргәһендә, алдында» төшөнсәләре менән танышыу.

Өҫтәл яҫылығында йүнәлеш билдәләй белеү (дежур булғанда).

Балалар баҡсаһы бинаһында һәм үҙе йәшәгән урамда дөрөҫ хәрәкәт итә белеү.

Ваҡыт төшөнсәләре. Тәүлек өлөштәрен дөрөҫ әйтә белеү: иртә, көн, кис, төн. Кеше эшмәкәрлегенә ҡарап, уларға билдәләмә бирә белеү. «Тәүлек» төшөнсәһен аңлатыу һәм уның өлөштәрен айыра, һанай белеү.

«Кисә, бөгөн, иртәгә» төшөнсәләрен аңлатыу. Моделдәр ярҙамында тәүлек өлөштәре менән таныштырыу.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Һан һәм иҫәп. Төрлө төҫтәге, дәүмәлдәге, формалағы, ҡулланышы, тәғәйенләнеше менән айырылып торған предметтарҙы бергә ҡушып күплек (множество) төшөнсәһен аңлатыу. Күплектәге предметтарҙы төркөмдәргә бүлеү һәм яңынан ҡушыу. Бер бөтөн күплектә предметтар өлөштәргә бүленгән төркөмдәрҙекенә ҡарағанда күберәк. Уларҙы һанап күрһәтергә мөмкин. Күплектең өлөштәрен сағыштырып, ҡайҙа предметтар күберәк, ҡайҙа аҙыраҡ – шуны билдәләү йәки ике өлөштө лә тигеҙләү.

Ике предметтың оҙонлоғон, киңлеген, бейеклеген өсөнсө предмет (шартлы үлсәү) ярҙамында билдәләү. Шартлы үлсәү сағыштырылған предметтың береһенә тиң булырға тейеш.

Күҙ үлсәмен үҫтереү, күҙ ҡарашы аша предметтарҙы шартлы үлсәү ярҙамында сағыштырып, дәүмәлдәрен билдәләү: оҙонораҡ - ҡыҫҡараҡ, киңерәк - тарыраҡ, бейегерәк - тәпәшерәк.

Предметты (ҡағыҙ битен, таҫманы, түңәрәкте, квадратты һ.б.) бер нисә өлөшкә бүлергә өйрәтеү. Бүленгән өлөштәрҙе бөтөн предмет менән сағыштырып, өлөштәрҙең нисек аталыуын аңлатыу (яртыһы, йәки ике, өс, дүрт өлөшкә бүлдек), уның һәр саҡ бөтөн предметтан кәм икәнен төшөндөрөү.

Өс һәм унан да күберәк булған (төркөм) предметтарҙы сағыштырып, улар араһындағы һан яғынан булған бәйләнеште табып, «1», йә «2» һанын ҡушыу, йә алыу юлы менән 10 эсендәге һандарҙың барлыҡҡа килеүен аңлатыу.

10-ға тиклем төп һәм рәт һандарын иҫәпләргә (һанарға) өйрәтеү.

Һан башы итеп теләгән бер предметты алып, төрлөсә урынлашҡан предметтарҙы төрлө йүнәлештә һанарға өйрәтеү.

Бирелгән һан буйынса предметтарҙы төркөмләй белеү.

10 һаны эсендәге предметтарҙы (2, 3, 4, 5) төркөмгә бүлә белеү, килеп сыҡҡан төркөмдәрҙе һәм төркөм эсендәге предметтарҙы һанай белеү; «Бөтәһе нисә төркөм?», «Һәр төркөмдә нисә предмет?» һорауҙарына яуап бирә белеү.

10 һаны эсендәге йәнәш торған һандарҙың үҙ-ара бәйләнешен аңлау (5 дүрттән ҙур, ләкин 6-нан 1-гә кәм).

5 эсендәге һандарҙың нисә берәмектән тороуын аңлатыу.

1-ҙән 5-кә тиклемге цифрҙар менән таныштырыу.

Ябай арифметик мәсьәләләр сисеү һәм уларҙы һүрәт ярҙамында яҙыу (төшөрөү); «артыҡ», «кәм», «тигеҙ була» билдәләре менән таныштырыу.

Дәүмәл. Предметтарҙы дәүмәле буйынса арта, йә кәмей барған рәүештә 10-ға тиклем теҙә һәм теҙеү тәртибен һанап, әйтә белеү.

Бер рәттә ятҡан йәнәш предметтарҙы бер-береһе менән һәм шулай уҡ алдан һәм арттан килгән рәттәге предметтар менән сағыштыра белеү (һары таҫма күгенән оҙонораҡ, ләкин йәшел таҫманан ҡыҫҡараҡ; һары таҫма ҡыҙыл, аҡ, күк таҫмаларҙан оҙонораҡ, ләкин йәшел, алһыу, һорғолттарынан ҡыҫҡараҡ).

Күҙ самаһы менән предметтарҙы дәүмәле буйынса өлгөгә ҡарап һайлай белеү.

Предметтарҙы, ауырлығына ҡарап, үлсәү ярҙамында сағыштыра белеү. Ауырлығы артыуына, йә кәмеүенә ҡарап, предметтарҙы (6-ға тиклем) бер рәткә теҙә белеү. Теҙеү тәртибен аңлата белеү.

Бер предметты шартлы үлсәм итеп алыу юлы менән ике предметты дәүмәле буйынса сағыштырыу.

Арауыҡтың өс үлсәмле булыуын, күләм төшөнсәһен аңлатыу.

Геометрик фигуралар һәм формалар. Конус, брус, цилиндр, пластина менән таныштырыу, уларҙың атамаларын дөрөҫ әйтергә өйрәтеү. Тура һәм өҙөк һыҙыҡ тураһында төшөнсә биреү.

Күпмөйөш һәм дүртмөйөштәр менән таныштырыу, уларға билдәләмә биреү. «Сиге», «түбәһе», «эске яғы» төшөнсәләре менән таныштырыу һәм уларҙы тирә-йүндәге предметтарҙан таба, күрә, әйтә белергә өйрәнеү.

Аралыҡта йүнәлеш билдәләү. Предметтарҙың бер-береһенә ҡарата урынлашҡан урынын билдәләй белеү.

«Эргәлә, һулғараҡ, уңғараҡ, уртала» төшөнсәләрен киңәйтеү.

Ҡағыҙ битендә йүнәлеш билдәләй белеү, ҡағыҙ бите мөйөштәренең урындарын әйтә, күрһәтә белеү.

Урамда йөрөү ҡағиҙәләре менән таныштырыу һәм иҙәндәге, ҡағыҙ битендәге схемала юл йүнәлешен билдәләй, күрһәтә белеү.

Ваҡыт төшөнсәләренең айышына төшөү. Аҙна көндәрен эҙмә-эҙлекле әйтә белеү, бөгөн ниндәй көн, кисә, иртәгә аҙнаның ниндәй көн булыуын әйтә белеү.

«Ай» тураһында төшөнсә, йыл эсендә нисә ай, миҙгел барлығы тураһында төшөнсә биреү. Календарь тураһында аңлатыу.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Һан һәм иҫәп. 3 һанын ҡушыу һәм алыу юлы менән 10 эсендәге һандарҙың барлыҡҡа килеүен аңлатыу.

Теләгән һандан башлап 10 эсендә кире һәм ыңғай һанау.

Тиҫтәләп һәм йөҙәрләп һанарға өйрәтеү.

0-дән 9-ға тиклемге цифрҙар менән таныштырыу. Теләгән цифрҙың алдынан һәм артынан килгән цифрҙы таба, әйтә, күрһәтә белеү.

10 һанына ингән теләгән бер һанды төҙөй белеү.

Тәңкә аҡсалар менән таныштырыу, улар ярҙамында 10 эсендәге төрлө һандарҙы табыу.

«Ҡушырға», «алырға», «тигеҙ була» билдәләре менән танышыу.

Һандар һәм билдәләр (тамғалар) ярҙамында ябай мәсьәләләр сисеү.

Дәүмәл. Рәт эсендәге бер үк төҫтә булған предметтарҙы үҙ-ара дәүмәле буйынса һәм шулай уҡ алдан һәм арттан килгән рәттәге предметтарҙы һандары буйынса сағыштыра белеү.

Шартлы үлсәм ярҙамында предметтарҙың оҙонлоғон, киңлеген, бейеклеген үлсәргә өйрәтеү.

Шыйыҡ һәм һибелеүсән эсемлектәрҙең ауырлығын билдәләп, ауырлыҡтың массаһын әйтә белеү.

Предметтарҙы һәм фигураларҙы 2 һәм 4 тигеҙ өлөшкә бүлеү, уларҙы үҙ-ара бөтөн менән сағыштыра һәм дәүмәлдең атамаларын әйтә белеү (яртыһы, өсөнсө, дүртенсе өлөшө).

Геометрик фигуралар менән таныштырыу. Күпмөйөштәр менән таныштырыу. Төрлө күпмөйөштәрҙе танып, әйтә белеү.

Төрлө геометрик фигураларҙы бер нисә бәләкәй фигураларға бүлә белеү (бөкләү, киҫеү ярҙамында).

Ҡағыҙҙа төрлө геометрик фигуралар төшөрөү.

Яҫылыҡтағы нөктә, нур төшөнсәләре.

Тура, өҙөк, тулҡын һыҙыҡтар менән таныштырыу.

Арауыҡтағы йүнәлеш. Бер-береңә ҡарата урынды, йүнәлеште аңлай, таба белеү (Мараттың алдынан тор, Зиләнең уң ҡулын ал).

Уйынсыҡтарҙың, предметтарҙың яҫылыҡтағы урындарын билдәләй белеү.

Юл ҡағиҙәләрен өйрәнеүҙе дауам итеү.

Өй адресын белеү, балалар баҡсаһына барған юлды таный, аңлатып һөйләй белеү, яҡын-тирәләге йәмәғәт биналарын (почта, магазин, мәктәп) белеү.

Дәфтәр, китап битендәге йүнәлештәрҙе аңлай, таба белеү. Шаҡмаҡ һәм тура һыҙыҡлы дәфтәр битендә юлдарҙы һ.б. билдәләрҙе таба белеү.

Схема, шаблон (ҡалып), линейка, трафарет менән таныштырыу.

Ваҡыт төшөнсәләре. Йыл һәм миҙгел айҙарының атамаларын белеү, йыл төшөнсәһен аңлатыу.

Сәғәт, һауа температураһын билдәләүсе термометр менән таныштырыу.

Календарь тураһында төшөнсә. Мөсәл календары тураһында мәғлүмәт биреү.

ТИРӘ-ЙҮНДЕ ТАНЫП-БЕЛЕҮ ҺӘМ ТИКШЕРЕП ӨЙРӘНЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлегә үҫеше. Балаларҙың тирә-йүнде һиҙеп-тойоу, күреү, еҫкәү, ишетеү аша танып-белеүен үҫтереү. Баланы төрлө эшмәкәрлектә предметтарҙы һиҙеп-тойоп, тотоп-һәрмәп, ҡапшап, һыйпап, күҙ ҡарашы менән тоҫмоллап, сағыштырып танып-белеү тәжрибәһен байытыу.

Сенсор тәрбиә. Предметтарҙы өйрәнгәндә уларҙың формаһын, дәүмәлен, төҫөн айыра белергә өйрәтеү.

Бер үк һүҙ менән әйтелгән предметтар араһындағы оҡшашлыҡты һәм айырманы табырға, күрергә өйрәтеү. Мәҫәлән, ҡалаҡ: ҙур ҡыҙыл ҡалаҡ; бәләкәй ялтыр ҡалаҡ. Улар менән ашайҙар.

Предметтарҙың сифаттарын танырға, әйтергә өйрәтеү.

Дидактик уйындар. Дидактик уйындарҙа балаларҙың предметтарҙың дәүмәле, формаһы, төҫө, ҙурлығы тураһындағы белемдәрен нығытыу: төрлө ҙурлыҡтағы 5-8 дүңгәләктән торған пирамиданы йыйыу; 4 өлөшкә ҡырҡылған киҫмә һүрәттәрҙән, йыйылма кубиктарҙан бер бөтөндө йыйыу; оҡшашлығы йәки айырмаһы буйынса предметтарҙы төркөмләү һ.б.

Иғтибарҙы һәм хәтерҙе үҫтереүсе дидактик уйындар үткәреү: «Нимә юҡ булды?», «Нимә ҡысҡыра?», «Ниндәй музыка ҡоралы тауышы?» һ.б.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлегә үҫеше. Балаларҙы системаға һалынған сенсор эталондар һәм махсус әҙерләнгән перцептив (предметты тойоу-һиҙеү аша ҡабул итеү) алымдар ярҙамында тирә-йүндәге обьекттарҙы тикшерергә өйрәтеү.

Балаларҙы ололар менән берлектә тикшереү һәм тәжрибә эштәренә ылыҡтырып, өйрәнелгән предметтарҙың һәм күренештәрҙең йәшерен үҙенсәлектәрен асырға йәлеп итеү.

Эҙләнеү-тикшереү эшмәкәрлегенең маҡсатына һәм ҡуйылған бурыстарына ярашлы балаларҙы моделдәр ҡороп эш итеү ысулдарына өйрәтеү.

Сенсор тәрбиә. Балаларҙың һиҙеү-тойоу органдары аша аң-белемде өйрәнеүен үҫтереү, танып белгән предметтарҙы, күренештәрҙе телмәрендә сағылдырырға күнектереү. Образдар аша уларҙы күҙ алдына килтереүҙе үҫтереү һәм предметтарҙы һүрәтләгәндә сағыштырыуҙар һәм эпитеттар ҡулланырға өйрәтеү.

Балаларҙы төҫтәр, форма, дәүмәл һәм предметтарҙың башҡа үҙенсәлектәре менән таныштырыуҙы дауам итеү һәм уның өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу;

Музыка ҡоралдары (ҡурай, ҡумыҙ, һыбыҙғы, һ.б.) һәм туған башҡорт телендә яңғыраған ауыҙ-тел ижады һәм әҙәби һәм музыкаль әҫәрҙәр менән таныштырыу.

Бер үк предметтарҙы бер нисә үҙенсәлеге буйынса (дәүмәле, формаһы, төҫө) төркөмләргә өйрәтеү.

Предметтарҙың айырмаһын һәм оҡшашлығын таба белеүҙе нығытыу. Форманы аңлатҡан һүҙҙәрҙе әйтергә өйрәтеү (түңәрәк, өсмөйөш, дүртмөйөш, квадрат).

Предметтарҙы һиҙеп-тойоу аша танып, уларҙы һүҙ ярҙамында әйтә белергә өйрәтеү. Предметтарҙы төрлөсә тикшереп ҡарау ысулдары менән таныштырыу.

Дидактик уйындар. 2-3 төҫтәге ҙур, уртаса һәм бәләкәй шарҙарҙы, предметтарҙы төҫө һәм дәүмәле буйынса төркөмләргә, дүңгәләктәре кәмей барған һәм уларҙы 2-3 төҫө буйынса билдәле бер тәртиптә пирамида йыйыу.

4-6 өлөштән торған киҫмә һүрәттән бөтөндө йыйыу («Һауыт-һаба», «Уйынсыҡтар» һ.б.).

Ҡағиҙәһе ҡатмарлана барған уйындарҙы уйнауҙы планлаштырыу.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше. Сенсор эталондар һәм махсус ҡоролған перцептив алымдар ярҙамында балаларҙы төрлө обьекттарҙы тикшереү ысулдары менән таныштырыуҙы дауам итеү.

Яңы объектты тикшереп өйрәнеү барышында уның тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр алыуҙы формалаштырыуҙы дауам итеү.

Ҡуйылған бурыстарға һәм эшмәкәрлекте башҡарыу алгоритмына ярашлы эҙмә-эҙлекле эш-хәрәкәт итергә күнектереү.

Ололар тәҡдим иткән танып-белеү-эҙләнеү эшмәкәрлеге моделдарын аңларға һәм ҡулланырға өйрәтеү.

Сенсор тәрбиә. Төрлө эшмәкәрлектә предметтарҙы уларҙың тышҡы сифаттары буйынса һиҙеп-тойоп, күҙ алдына килтереп, сағыштырып һ.б. танып-белеү һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү.

Предметтарҙы тикшереүҙең яңы ысулдары менән таныштырыу, балаларҙың тирә-йүнде үҙаллы өйрәнергә теләүен хуплау.

Предметтарҙы, тирә-йүн күренештәрен барлыҡ һиҙеү-тойоу органдары ярҙамында әүҙем ҡабул итеүҙе үҫтереү һәм нығытыу. Өйрәнгән асыштарын телмәрҙә сағылдыра белергә күнектереү.

Төҫ, форма, дәүмәл, ауырлыҡ, оҙонлоҡ һ.б. кеүек эталон төшөнсәләрҙе көнкүрештә ҡуллана, бер-ике сифаты буйынса предметтарҙы һайлай белергә өйрәтеү.

Геометрик фигуралар (түңәрәк, өсмөйөш, квадрат, овал, тура дүртмөйөш), төҫтәр (ҡыҙыл, күк, йәшел, һары, ҡыҙғылт һары (оранжевый), миләүшә (фиолетовый), аҡ, һоро (серый) таныштырыу.

Һиҙеү, тойоу һәләтен үҫтереү. Төрлө материалдарҙы бармаҡтар менән һәрмәп, устар менән һыйпап уларҙың йомшаҡлығын, шымалығын, ҡытыршылығын, ҡатылығын, сәнскелеген, һибелеүсәнлеген, йәбешкәкселеген билдәләү.

Предметтарҙы йәшәйештәге нимәгәлер оҡшатып ҡабул итергә өйрәтеү (ай ҡоймаҡ кеүек, әтәс кикереге тараҡҡа оҡшаған һ.б.).

Предметтарҙы тышҡы яҡтан характерлаған эталондар (төҫ, форма, дәүмәл, ауырлыҡ һ.б.) уларҙың йәшәйештә бөтәһе тарафынан да ҡабул ителгән сифаттары һәм үҙенсәлектәре тип ҡабул итергә күнектереү.

1-2 сифаты йәки үҙенсәлеге буйынса предметтарҙы һайлап ала белеү.

Проект эшмәкәрлеге. Тикшеренеү-эҙләнеү һәм проект эшмәкәрелектәрҙе үтәү өсөн балаларға башланғыс мәғлүмәттәр биреү. Ата-әсәләр менән берлектә ул эштәрҙе үтәргә өйрәтә башлау, эштең һөҙөмтәләрен башҡаларға күрһәтеү һәм аңлатыу өсөн ярҙамлашыу һәм тейешле шарттар булдырыу.

Дидактик уйындар. Предметтарҙы сифаттары һәм үҙенсәлектәре буйынса сағыштырып, төркөмләүҙе, йәки айырыуҙы нығытыуға бағышланған уйындар уйнарға өйрәтеү. Предметтың өлөштәренән бөтөндө йыйыу уйындары уйнатыу (кубиктар, мозаика, пазлдар).

Балаларҙың ишетеп, тәмләп ҡарап, тире аша һиҙеп предметтарҙы таныу һәләттәрен үҫтереү: «Һәрмәп, тәмләп, тыңлап таны!».

Күҙәтеүсәнлекте һәм иғтибарҙы үҫтереү: «Нимә үҙгәрҙе?», «Кемдә яулыҡ?» һ.б.).

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше Махсус системаға һалынған сенсор эталондар һәм перцептив алымдар ярҙамында объекттарҙы өйрәнеүҙең, тикшереүҙең дөйөм ысулдарын, алымдарын камиллаштырыу. Аң-белемгә өйрәнеү маҡсатында уларҙы һайлай һәм ҡуллана белергә өйрәтеү.

Төрлө саралар аша предметтар, объекттар, тәбиғәт күренештәре араһындағы бәйләнеште табырға, үҙ-аллы тәжрибә үткәрергә һәм яңы обьект тураһында мәғлүмәттәр алырға өйрәтеү.

Ололар ярҙамында моделдар төҙөргә һәм танып-белеү эшмәкәрлегендә урынлы ҡуллана белеүҙе формалаштырыу.

Сенсор тәрбиә. Предметтарҙы, уларҙың сифаттарын, бер-береһе араһындағы бәйләнеште сағыштыра, уларҙы ниндәйҙер бер сифаты буйынса парлау, төркөмләү.

Төҫтәр менән таныштырыуҙы дауам итеү.

Төҫтәрҙең төп төҫтән ҡайтышыраҡ, йәғни ағыраҡ, йәки ҡуйыраҡ (аҡһыл, ҡыҙғылт, ҡыҙылыраҡ, ҡып-ҡыҙыл, һ.б.) икәнлекте аңлатыу һәм һүҙҙәр менән уларҙы атай белергә өйрәтеү.

Төҫтәр спекторы менән таныштырыуҙы дауам итеү: ҡыҙыл, ҡыҙғылт-һары, һары, йәшел, зәңгәр, күк, миләүшә. Былар хроматик төҫтәр (грек теленән «төҫлө» тигән мәғәнәне аңлата). Улар төҫтәр спекторын барлыҡҡа килтерә. Спекторҙың бөтә төҫтәрен ҡыҙыл, һары, күк төҫтәрҙе төрлө пропорцияла ҡушыу аша килтереп сығарыуҙы аңлатыу. Ахроматик (грек теленән «төҫһөҙ») төҫтәр (аҡ, ҡара, һоро) төҫтәр менән таныштырыу.

Төрлө геометрик фигуралар менән таныштырыуҙы дауам итеү, шартлы эталон итеп ялпаҡ һәм күләмле формалы предметтарҙы ҡулланырға өйрәтеү.

Төрлө формалағы предметтарҙы ҡулдар менән һыйпап, тикшерергә өйрәтеү. Предметтарҙың тышы ҡабарынҡы йөнлө, йомшаҡ, тигеҙ, шыма, ҡытыршы, сәнскеле һ.б. булыуын аңлатыу. Күҙ үлсәүе менән самалауҙы үҫтереү.

Ҡыҙыҡлы тәжрибәләр, фокустар аша балала төрлө эҙләнеү эштәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Проект эшмәкәрлеге. Балаларға өс төрҙәге проекттар башҡарыу өсөн шарттар булдырыу:

1) эҙләнеү-тикшереү проекты. Предметтың йәки тәбиғәт күренешен ныҡлап тикшереү, өйрәнеү. Проект һөҙөмтәләрен башҡаларға күрһәтеп, һөйләргә өйрәтеү;

2) ижади проекттар. Улар баланың шәхси һәләттәре менән бәйле;

3) норматив проекттар - баланың коллективта әҙәп һәм әхлаҡи тәртип нормалары уйлап сығарып башҡаларға тәҡдим итеүе.

Проект эшмәкәрлегендә тәүге күнекмәләрҙе башҡарырға өйрәтеү, артабан үҫтереү; ирешелгән һөҙөмтәләрҙе телмәр ярҙамында һөйләргә өйрәтеү, презентацияны яҡларға шарттар булдырыу. Тәжрибә үткәреү эшмәкәрлегендә ата-әсәләрҙе лә йәлеп итеү.

Дидактик уйындар. Балаларҙың сенсомотор һәләттәрен үҫтереүҙе дауам итеү.

Уларҙы 2-4 баланан торған төркөмдәргә бүлеп уйнатыу; уйын ҡағиҙәләрен үтәргә күнектереү.

Балаларҙың иғтибарын нығытыу, ҡарап, ишетеп, һиҙеп-тойоп хәтерҙә ҡалдырыу һәләтен үҫтереү маҡсатында предметтарҙы тышҡы үҙенсәлектәре аша ғына түгел, 2 сифаты, тәғәйенләнеше буйынса төркөмләүгә уйындар үткәреү.

Өлөштәрҙән бөтөндө төҙөүҙе, предметтың айырмаһын, оҡшашлығын айыра белеүгә уйындар ойоштороу.

Балаларҙың төрлө дидактик уйынсыҡтар һәм уйындар (халыҡ, компьютер уйындары һ.б.) менән уйнау теләген ҡәнәғәтләндереү

Ябай ғына күренештәрҙең бер-береһе менән бәйле икәнлегенә төшөндөрөүҙе дидактик уйындар аша дауам итеү. Уйында үҙ-аллыҡ күрһәтергә, уйын ҡағиҙәләренә бойһонорға күнектереү.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше. Махсус системаға һалынған сенсор эталондар һәм перцептив алымдар ярҙамында объекттарҙы өйрәтеү төрҙәрен дөйөмләштереү, танып-белеү маҡсаттарына ярашлы һайлап алыу.

Таныш булмаған объекттарҙы өйрәнгәндә үҙ тәжрибәһенә таянырға, өйрәнелгән төрлө тикшеренеү ысулдарын ҡулланырға күнектереү.

Проект эшенең шарттарына һәм маҡсаттарына ярашлы кәрәкле мәғлүмәттәрҙе эҙләү, табыу ысулдарын билдәләргә өйрәтеү.

Бирелгән алгоритм буйынса үҙ-аллы эш итергә өйрәтеү: маҡсат ҡуйыу, уға ирешеү өсөн эҙмә-эҙлекле эш төрҙәрен башҡара белергә күнектереү. Әгәр һөҙөмтәнең ҡуйылған маҡсатҡа тура килмәгәнлеге асыҡланһа, уны төҙәтеү өсөн үҙ эшен үҙгәртә алыу һәләтен үҫтереү.

Балаларҙы танып-белеү маҡсатында эҙләнеү эштәре башҡарыу өсөн үҙ-аллы уның моделдәрен ҡоророға һәм башҡарырға өйрәтеү.

Сенсор тәрбиә. Һиҙеү-тойоу органдарының һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү (ҡарау, ишетеү, еҫкәү, тәмләү, тейеп, һәрмәп тойоу).

Ҡулдарҙың һәм күҙҙәрҙең хәрәкәтләнеү һәләтен, етеҙлеген үҫтереү, ҡул суҡтары һығылмалылығын, ваҡ предметтарҙы һәрмәп тотоу, сүпләү эштәрен башҡара белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Тирә-йүндәге күренештәргә, предметтарға иғтибар йүнәлтә, уларҙың айырмаһын, оҡшашлығын таба, төрлө үҙенсәлектәре буйынса (формаһы, дәүмәле, төҙөлөшө, төҫө, тауышы һ.б.) төркөмләй, матур төҫтәрҙең сағылышы менән һоҡлана белеү һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү.

Төҫтәр спектрын нығытыуҙы һәм төп төҫтәрҙең сағылышын билдәләй белеүҙе, предметтарҙы тормошта ҡабул ителгән эталондары буйынса айыра белеүҙе (форма, төҫ, материал төрө һ.б.) дауам итеү.

Дөйөм сифаттары (форма, төҫ, төҙөлөшө, дәүмәле, ауырлығы һ.б.) буйынса предметтарҙы төркөмләй белеү.

Балаларҙың хроматик һәи ахроматик төҫтәр тураһындағы белемдәрен нығытыу.

Проект эшмәкәрлеге. Проект эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен дә үҫтереү, мәғлүмәттәр сығанағының дөрөҫлөгөнә иғтибар биреү, проекттың ыңғай һәм кире һөҙөмтәләрен күрә белеү.

Норматив проект өҫтөндә эшләгәндә уның һөҙөмтәләре тураһында фекер алышырға өйрәтеү.

Дидактик уйындар. Балаларҙы бер-береһе менән ярышып уйнарға өйрәтеүҙе дауам итеү (лото, мозаика, домино, шашки). Уйындарҙы ойоштора белергә һәм алып барыусы ролен башҡарырға өйрәтеү.

Уйында баланың хәл-хәрәкәтен алып барыусының һәм башҡа уйнаусыларҙың башҡарған хәрәкәттәренә тап килтерә белергә өйрәтеү.

Уйын һайлағанда һәм уның маҡсатына ирешеү юлдарын эҙләгәндә үҙ-аллылыҡ һәм тапҡырлыҡ күрһәтеү мөмкинлеген биреү.

Өҫтәл-баҫма уйындарында ҡағиҙәләрҙе тәрбиәсе күрһәтеүенә оҡшатып, үҙ-аллы уйнарға күнектереү.

Ҡайһы бер дидактик уйындарҙы әҙерләгәндә балаларҙы был эшкә йәлеп итеү «Тауышынан тап!», «Һәрмәп, атамаһын әйт!».

Уйынды бергәләп, ойошҡан рәүештә тамамлау һәм уйын аҙағында бергәләп һәр кемдең уйынына баһа биреү һәләтен формалаштырыу.

ТИРӘ-ЙҮН ПРЕДМЕТТАРЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Балаларҙа яҡын тирәләге предметтарға (уйынсыҡтар, һауыт-һаба, кейем-һалым, аяҡ кейемдәре, йорт йыһаздары, транспорт, һ.б.) ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Бала үҙен уратып алған әйберҙәр, уларҙың өлөштәре, сифаттары менән танышыуҙы дауам итә. Ябай төҙөлөшлө, сағыу буяулы, ҙурлығы буйынса уларҙы таный белергә, әйтергә өйрәнә:

- төҫө, ҙурлығы, нимәнән эшләнеүе буйынса (ҡағыҙ, ағас, сепрәк, балсыҡ), файҙаланыу маҡсаты буйынса уларҙы һайлап алып төркөмләргә;

- оҡшаш һәм ҡапма-ҡаршы сифаттары буйынса улар араһындағы бәйләнештәрҙе табырға, таныш предметтарҙы сағыштыра белергә; (төрлө бейәләйҙәр, аяҡ кейемдәре, ултырғыстар һ.б.), предметтарҙы төрлөсә ҡулланыу ысулдарын өйрәнәләр.

- бөтөндө һәм уның өлөштәрен таба белергә;

- әйберҙәрҙе төркөмләгәндә дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙе аңлап, ҡуллана белергә *(кейем-һалым, һауыт-һаба, йорт йыһаздары һ.б.);*

- әйберҙең ни өсөн кәрәклеген аңлап, дөрөҫ ҡулланырға (ҡалаҡ менән ашайҙар, сынаяҡтан сәй эсәләр).

Транспорт тураһында тәүге мәғлүмәт биреү.

Кеше тураһында башланғыс төшөнсәләр биреү, кеше һәм уның торлағы (өйө), тыуған ере, йәшәгән төбәге, урыны беҙ йәшәгән ҡала (ауыл), урам, күршеләр, яҡын туғандар. Улар йәшәгән урам.);

- кеше һәм уның хеҙмәтенең емеше, нәтижәһе *(ашарға әҙерләй, өй йыйыштыра, машина йөрөтә);* шофер, летчик профессияһы тураһында төшөнсә биреү;

- кеше һәм тәбиғәт *(кеше үҫемлектәрҙе, йорт хайуандарын ҡарай, тәрбиәләй, үҫтерә);*

- ғаилә ағзаларының хеҙмәте һәм баҡса хеҙмәткәрҙәренең эше менән таныштырыу. Уларҙың эшенең йөкмәткеһен һәм уны дөрөҫ итеп әйтә белергә өйрәтеү *(әсәйем һыйыр һауа - һауынсы; апайым мәктәптә уҡый - уҡыусы; тәрбиәсе балалар менән эшләй; ашнаҡсы аш бешерә);*

- ололар эшләгән әйберҙәргә, уларҙың хеҙмәт нәтижәләренә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Балаларҙы тирә-йүндәге предметтар, (уйынсыҡтар, йорт кәрәк-яраҡтары, транспорт төрҙәре һ.б.), уларҙың башҡарған функциялары һәм ҡулланышы менән таныштырыуҙы дауам итеү.

Көнкүрештәге предметтарҙың ҡайһы бер үҙенсәлектәрен (өлөштәре, дәүмәле, формаһы, төҫө) айыра белергә өйрәтеү, уларҙың төҙөлөштәре һәм функциялары араһындағы бәйләнеште төшөндөрөү. Предметтың бер генә өлөшө етмәһә лә, уны тормошта ҡулланып булмаясағын аңлатыу.

Балаларҙың предметтың билдәләре (ныҡ, ҡаты, йомшаҡ) һәм эшләнгән материалдары (ағастан, балсыҡтан, ҡағыҙҙан) тураһындағы белемдәрен киңәйтеү. Ябай ғына тәжрибәләр ярҙамында предметтарҙы тикшереү ысулдарына өйрәтеү (бата-батмай, йыртыла-йыртылмай). Таныш булған предметтарҙы дөйөмләштереү (һауыт-һаба, аш-һыу) һәм төркөмләү (кейем-һалым, һауыт -һаба).

Предметтарҙың ҡайһы берҙәрен кеше үҙ ҡулы менән эшләүен (йорт йыһаздары, һауыт-һаба), ә ҡайһы берҙәре тәбиғәттә (таш, тубырсыҡ) барлыҡҡа килеүен аңлатыу. Кеше предметтарҙы үҙе һәм башҡалар көнкүрештә ҡулланһын өсөн эшләгәнлеген төшөндөрөү.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Балаларҙы уратып алған объекттар тураһындағы мәғлүмәттәрҙе киңәйтеү.

Эшмәкәрлектең бөтә төрҙәрендә лә (уйын, хеҙмәт, һынлы сәнғәт) ҡулланырға кәрәк булған предметтар менән таныштырыу.

Йәмәғәт транспорттары тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү (автобус, самолет, поезд).

Предметтарҙы билдәләре, төҫө, ҙурлығы, ауырлығы һәм эшләнгән материалы буйынса (быяла, пластик, металл, резина) айыра белергә өйрәтеү. Һәр бер предметтың айырым бер материалдан эшләнелеүе тураһында (машинаның корпусы металдан, тәгәрмәсе резинанан) аңлатыу.

Уйынсыҡтар һәм тормош кәрәк-яраҡтарының барлыҡҡа килеү тарихы миҫалында кеше хеҙмәте төрҙәренең үҙгәреп тороуо тураһында һөйләү.

Тормош-көнкүреш әйберҙәре, йорт йыһаздары менән таныштырыу (һыуытҡыс, газ плитәһе, саң һурҙырғыс, радио, компьютер, телевизор һ.б.). Уларҙы формаһына, күләменә, ҙурлығына, төрөнә, төҙөлөшөнә ҡарап, төркөмләргә өйрәтеү. Электр лампаһы, электр энергияһы тураһында мәғлүмәт биреү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Предметтар доньяһы тураһындағы белемдәрҙе байытыу. Таныш булмаған предметтарҙың ҡулланышы менән таныштырыу. Кеше тормошон еңеләйткән әйберҙәр (миксер, кер йыуыу машинаһы, ит үткәргес), йортҡа йәм биреүсе предметтар (картина, ковер, люстра һ.б.) тураһындағы төшөнсәләрҙе формалаштырыу.

Предметтың тиҙ боҙолмауы һәм оҙаҡ хеҙмәт итеүе унын ниндәй материалдан эшләнеүен, унын сифаттарына бәйле булыуын аңлатыу. Предметтың ниндәй материалдан эшләнеүен, төҙөлөшөн, тышҡы-киәфәтен, ҡатылығын, йомшаҡлығын үҙ-аллы билдәләргә өйрәтеү. Предметтарҙы үҙенсәлектәре буйынса (ҡулланышы, төҫө, формаһы, эшләнгән материалы) сағыштырып, төркөмләргә өйрәтеү, мәҫәлән: һауыт-һаба фарфорҙан, быяланан, керамиканан, пластмассанан эшләнгән булырға мөмкин.

Предметтарҙың барлыҡҡа килеүендә кеше хеҙмәтенең ҙур роль уйнауы тураһында аңлатыу: «Был өҫтәл ҡайҙан килгән?», «Ҡартатайым түбәтәйе», «Өләсәйемдең еләне», һ.б.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Предметтар доньяһы тураһындағы белемдәрҙе байытыу. Транспорт төрҙәре тураһында белемдәрен киңәйтеү (һыу, һауа, ер өҫтө, ер аҫты транспорттары).

Кешеләрҙең көнкүрешен еңеләйтеүсе предметтар (компьютер, робот, станок, телефон, микротулҡын мейесе һ.б) тураһындағы төшөнсәләрҙе формалаштырыу. Тормошта йәшәүе еңел һәм уңайлы булһын өсөн предметтарҙың яңынан-яңы үҙгәртеп торолоуы тураһында аңлатыу. Предметтарҙың барлыҡҡа килеү тарихы менән таныштырыу.

Тәбиғәт обьекттары һәм кеше ҡулы ярҙамында эшләнгән предметтар менән һоҡлана белеү тойғоһо тәрбиәләү. Тәбиғәттә булмаған предметтарҙы кеше үҙенең хеҙмәте менән барлыҡҡа килтергән: ҡанатһыҙ оса алмағас, самолет уйлап сығарған. Буйы тәпәш булып, бейектә эштәр башҡара алмағас, кран эшләгән. Былар барыһы ла кешенең аҡыл һәм ҡул көсө хеҙмәте һөҙөмтәһе икәнлекте аңлатыу.

Предметтың билдәләре һәм материалдарының сифаттары тураһындағы төшөнсәләрҙе дөйөмләштереү. Нимәлер эшләү өсөн кеше тәбиғәттәге төрлө материалдарҙы ҡулланырға өйрәнә.

Тәбиғәттә булмаған объекттарҙы ҡул эше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килтереүҙе аңлатыу һәм унда кеше хеҙмәтенең ҙур роль уйнауы тураһында һөйләү. Предметтарҙы тикшереүҙә төрлө ысулдарҙы, алымдарҙы ҡуллана белергә өйрәтеү (эргәһенә һалып, терәтеп ҡуйып, өҫтөнә һалып сағыштырыу һ.б.).

СОЦИАЛЬ ДОНЪЯ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Бала йәшәгән ҡала атамаһы менән таныштырыу.

Яҡындарының хеҙмәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Ҡайһы бер эш-хәрәкәттәрҙе танырға өйрәтеү (тәрбиәсе ярҙамсыһы һауыт-һаба йыуа, бүлмәне йыйыштыра, ашарға алып килә һ.б.). Ололар үҙ эштәрен яратып, тырышып башҡаралар. Балаларға ла тиҙерәк үҫергә, ҙурайырға, күп кенә эш-хәрәкәттәрҙе үҙ-аллы башҡара белергә өйрәнергә кәрәклекте һөйләү.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Балалар әҙәбиәте әҫәрҙәрен кескәй генә спектаклдар ҡуйыу, уйындар формаһында сәхнәләштереү аша театр менән таныштырыу.

Баланы үҙе йәшәгән яҡын-тирә менән таныштырыу: йорт, урам, магазин, дауахана, бөҙрәхана.

Тыуған ере һәм иле тураһында тәүге төшөнсәләр биреү: ҡаланың/ауылдың исемен иҫкә төшөрөү, уның иҫтәлекле урындары менән таныштырыу.

Балаларға таныш булған һөнәрҙәр (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, музыка етәксеһе, табиб, һатыусы, ашнаҡсы, машина йөрөтөүсе, төҙөүсе һ.б.) тураһында һөйләү; уларҙың ниндәй эш-хәрәкәт башҡарыуҙары һәм эш һөҙөмтәләре тураһында тулыраҡ мәғлүмәт биреү. Һәр һөнәр эйәһенең үҙ эшендә кешеләргә ҡарата иғтибарлы, яғымлы булыуын, башҡарған эшен етеҙ, тейешле итеп үтәүен аңлатыу.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Йәмғиәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре тураһындағы мәғлүмәттәрҙе киңәйтеү.

Йәмғиәт транспорттары тураһындағы белемдәрҙе (автобус, поезд, самолет) артабан тәрәнәйтеү.

Мәктәп тураһында тәүге төшөнсәләр биреү.

Мәҙәни тәрбиә үҙәктәре булған учреждениелар (театр, цирк, музей, зоопарк, күргәҙмә, кинотеатр, библиотека) һәм уларҙың атрибуттары, унда барғас, ниндәй тәртип ҡағиҙәләрен үтәү кәрәклеге, эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙең башҡарған эш-шөғөлө менән таныштырыу.

Бала йәшәгән ҡаланың, ауылдың матур, иҫтәлекле урындары менән таныштырыу. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт байрамдары тураһында ябай ғына мәғлүмәттәр биреү. Тыуған илде һаҡлаусы хәрбиләр (сик һаҡсылары, моряктар, осоусолар), Рәсәй армияһы һалдаттары тураһында һөйләү.

Ҡалалағы һәм ауылдағы тормош һәм хеҙмәт шарттары, уларҙың айырмаһы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе балаларҙың үҙ тәжрибәләренә таянып төшөндөрөү.

Төрлө һөнәрҙәр менән таныштырыуҙы дауам итеү (шофер, хат ташыусы, һатыусы). Уларҙың хеҙмәте, эш ҡоралдары, башҡарған эш-хәрәкәттәре, хеҙмәттәренең һөҙөмтәләре тураһында аңлатыу. Балаларҙы аҡса һәм уның ҡулланылышы менән таныштырыу. Тыуған илгә ҡарата һөйөү хисе тәрбиәләүҙе дауам итеү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Балаларҙа профессия тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү.

Төрлө уҡыу йорттары тураһындағы белемдәрен формалаштырыу (балалар баҡсаһы, мәктәп, колледж, институт). Кешеләрҙең төрлө эшмәкәрлектәре (фән, ижад, сәнғәт, сәнәғәт, ауыл хужалығы) менән таныштырыу.

Мәҙәниәт үҙәктәренең (музей, театр, цирк һ.б.), эше, атрибуттары, уларҙа ҡабул ителгән тәртип ҡағиҙәләре, йәмғиәт тормошонда тотҡан урындары, һөнәри эш башҡарыусы белгестәр менән таныштырыуҙы дауам итеү.

Аҡса һәм уның файҙаһы (кешегә хеҙмәт хаҡын биргәндә, ниндәйҙер әйбер һатып алғанда түләр өсөн) кәрәклеген аңлатыу. Семья бюджеты, уны нисек йыйыу һәм тотоноу.

Кешелек тарихы (Боронғо донья, Урта быуат, хәҙерге йәмғиәт) тураһында башланғыс төшөнсәләрҙе донъяуи мәҙәниәт әҫәрҙәре (һынлы сәнғәт, скульптура, донъя халыҡтары риүәйәттәре, легендалары, эпостары) һәм төрлө заманда йәшәгән кешеләрҙең йәшәү рәүешен өйрәнеү аша (кейем-һалымы, көнкүреш йыһаздары, йолалары, йыһаздары) таныштырыуҙы дауам итеү. Башҡортостан халыҡтарының кәсептәре.

Балаларға тәрбиәсе, уҡытыусы, табип, төҙөүсе, ауыл хужалығы, траспорт, һатыу итеү, бәйләнеш тармағы һ.б. төрлө сәнәғәт хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре тураһында төшөндөрөүҙе дауам итеү, улар эшенең мөһимлегенә һәм халыҡ өсөн кәрәклегенә баҫым яһау. Һәр эште башҡарыуҙа төрлө техника ҡулланыла, улар менән эшләй белеү өсөн белем һәм тәжрибә кәрәк. Ниндәй шәхси һәм һөнәри сифаттар кәрәк һәр бер һөнәр эйәһенә - уны балаларҙың тәжрибәһенә һәм үҙләштерелгән аң-белеменә таянып аңлатыу ҡарала.

Ижады һөнәр кешеләре (рәссамдар, яҙыусылар, композиторҙар, халыҡ кәсептәре оҫталары) һәм уларҙың эштәре менән таныштырыу. Кешенең хеҙмәтенә ҡарата рәхмәтле булыу тойғоһон тәрбиәләү.

Тыуған ер (Башҡортостан, тыуған ауыл/ҡала), ил (Башҡортостан, Рәсәй) тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Балаларға Тыуған яҡтың мәҙәниәте, йолалары, иҫтәлекле урындары тураһында һөйләү, арҙаҡлы шәхестәре менән таныштырыу.

Тыуған ил, дәүләт байрамдары (8 март, Ватанды һаҡлаусылар көнө, Яңы йыл, Сөмбәлә, Һабантуй, Ҡарға бутҡаһы, Ураҙа байрамы һ.б.) тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Тыуған илгә ҡарата ғорурлыҡ хисе тәрбиәләү. Рәсәй дәүләте бөйөк, күп милләтле ил тигән төшөнсәне формалаштырыу. Рәсәйҙең башҡалаһы - Мәскәү, Рәсәйҙең флагы, гербы, гимны менән таныштырыу.

Башҡортостан – башҡорттар йәшәгән ер. Уның башҡалаһы – Өфө, Башҡортостандың флагы, гербы, гимны менән таныштырыу.

Рәсәй армияһы тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Тыуған илде һаҡлаусыларға ҡарата хөрмәт һәм ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләү, Тыуған илдең тыныслығын һәм хәүефһеҙлеген һаҡлау ни тиклем ауыр, яуаплы икәнлеген аңлатыу. Бөйөк Ватан һуғышы тураһында һөйләү, балалар баҡсаһына ветерандарҙы һәм хәрбиҙәрҙе саҡырыу. Балалар менән хәрби темаға ҡағылған картиналар, репродукциялар, альбомдар ҡарау.

Һуғыш һәм тыл ветерандары тураһында һөйләү. Уларға ҡуйылған һәйкәлдәр менән танышыу.

«Үлемһеҙ полк» сараһында ҡатнашыу.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Китапхана һәм музейҙар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Мәктәп, колледж, юғары уҡыу йорттары тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Мәктәпкә экскурсия ойоштороп уҡыусылар, уҡытыусылар, ғөмүмән, мәктәп тормошо менән таныштырыу.

Балаларҙы кеше эшмәкәрлеге өлкәләре (фән, сәнғәт, ауыл хужалығы, сәнәғәт, һ.б.) һәм уларҙың көнкүрештә, шулай уҡ баланың ғаиләһе, балалар баҡсаһы тормошонда тотҡан урыны, әһәмиәте тураһында аңлатыу.

Тәжрибә һәм практик эшмәкәрлек аша танышылған һөнәрҙәрҙең ябай ғына эш-хәрәкәттәрен башҡарып ҡарау (һыу, һауа, магнит менән ябай ғына тәжрибәләр үткәреү, бергәләп һүрәт төшөрөү, композиция әүәләү, бәләкәй төркөм балаларын кейендерешергә ярҙам итеү һ.б.).

Төрлө һөнәр кешеләренең эштәре тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Һәр һөнәр эйәһе үҙ эшен үтәгәндә сифатлы итеп эшләргә, үҙенең эшенә яуаплы ҡарарға, эшенән кешеләр ҙә, үҙе лә шатлыҡ, ҡыуаныс кисерергә тейеш икәнлекте төшөндөрөү.

Ябай ғына кимәлдә экономика нигеҙҙәре тураһындағы белемдәрен киңәйтеү (аҡса, уның тарихы, йәмғиәттәге роле, ғаилә бюджеты, кешеләрҙең материал һәм финанс яҡтан төрлө кимәлдә булыуы, һ.б.)

Башҡортостан һәм Рәсәй тураһындағы белемдәрҙе байытыу, үҫтереү. Иҫтәлекле урындар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың флагы, гимны, гербы тураһындағы белемдәрҙе нығытыу. Рәсәй һәм Башҡортостан бөйөк һәм күп милләтле ил тигән төшөнсәне үҫтереү. Башҡортостандың арҙаҡлы кешеләре.

Дәүләт байрамдары һәм Рәсәйҙең баш ҡалаһы - Мәскәү тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Ю.А.Гагарин һәм башҡа йыһан геройҙары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Рәсәй армияһы тураһындағы белемдәрҙе тәрәнәйтеү.

Башҡортостан - бай тарихлы һәм мәҙәниәтле республика, ул Рәсәй Федерацияһына инеүсе иң беренсе республика.

“Урал батыр” эпосы – донъя кимәлендәге әҙәби ҡомартҡы.

Ерҙең эволюцияһы тураһында ябай ғына төшөнсәләрҙе формалаштырыу (Ер шарының барлыҡҡа килеүе, үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһының эволюцияһы һ.б.). Тәбиғәттә һәм йәмғиәттә кешенең тотҡан урыны, төрлө халыҡтарҙың барлыҡҡа килеүендәге фараздар. Башҡорт ҡәбиләләре.

Сәнғәт ижады, уйын, продуктив эшмәкәрлектәр аша кешелек донъяһының тарихы менән таныштырыу. Балаларға Ер шары - беҙҙең дөйөм йортобоҙ һәм унда төрлө милләт халыҡтарының дуҫ йәшәүе тураһында һөйләү. Һәр халыҡтың мәҙәниәтен, телен, тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын хөрмәт итергә кәрәклекте аңлатыу. Башҡортостанда йәшәгән халыҡтар, уларҙың мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, милли кейемдәре, аштары һ.б.

Ерҙә йәшәгән һәр кем кешелек донъяһының ағзаһы икәнлекте төшөндөрөү. Башҡа илдәрҙә йәшәүсе балаларҙың тормошо менән таныштырыу. Балаларҙың хоҡуғы, уны яҡлаусы ойошмалар (опека, ЮНЕСКО) тураһында мәғлүмәттәр биреү. Донъяла һәм кем ирекле шәхес булып үҫешергә тейешле аңлатыу.

Тыуған илебеҙ Башҡортостан, балалар йәшәгән төбәк (ҡала/ауыл) менән, уларҙың тәбиғәте, халҡы, мәҙәниәте, иҫтәлекле урынлары, тарихы һәм йолалары менән таныштырыуҙы тәрәнәйтеү, киңәйтеү.

ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Баланы ябай ғына кимәлдә тәбиғәт күренештәре менән таныштырыу.

Ысынбарлыҡта, һүрәттә, уйынсыҡтарҙа йорт хайуандарын һәм ҡоштарын (бесәй, эт, һыйыр, тауыҡ һ.б.) һәм уларҙың балаларын танырға, атамаларын әйтергә өйрәтеү. Һүрәттән ҡайһы бер ҡыр хайуандарын (айыу, ҡуян, төлкө һ.б.) танырға һәм атарға өйрәтеү.

Тәрбиәсе менән бергәләп аквариумдағы балыҡтарҙы, майҙансыҡтағы ҡоштарҙы күҙәтеү һәм ашатыу, гөлдәргә һыу һибеү;

Үҫенсәлектәрен иҫтә ҡалдырып, үләнде, сәскәне, ағасты танырға өйрәтеү (үлән – тәпәш, ағас бейек булып үҫә, сәскәләр – төрлө-төрлө, матур төҫтә, хуш еҫле булалар).

Гел йәшел энәле булған шыршыны танып, башҡа ағастарҙан айыра белеү.

Ҡайһы бер бүлмә гөлдәренең исемдәрен, уларҙың һабағын, япрағын, сәскәһен айыра белергә өйрәтеү (яран гөлө, фикус сәскәһе).

Үҫемлектәрҙе тәрбиәләүҙә өлкәндәргә ярҙам итеү теләге уятыу һәм уларға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү (ағастарҙы һындырырға, түтәлдәге сәскәләрҙе өҙөргә, тапарға ярамай).

Тышҡы күренештәре буйынса емештәрҙе (алма, груша, әфлисун һ.б.) һәм йәшелсәләрҙе (ҡыяр, кишер, кәбеҫтә, помидор һ.б.) бер-береһенән айырырға өйрәтеү.

Хайуан кәүҙәләренең өлөштәрен (башы, ҡойроғо, аяҡ-тояҡтары) таба, әйтә һәм ошо атамаларҙы телмәрҙә файҙалана белеү;

Хайуандарҙы яратыу, уларҙы һаҡлау һәм тәрбиәләүгә ярҙам итеү теләге уятыу.

Ҡырағай йәнлектәр һәм урман ҡоштары менән таныштырыу.

Тәбиғәт күренештәренең, көн торошоноң бер-береһе менән бәйле булыуын төшөндөрөү (ҡар яуа, ҡояш яҡтырта; ҡояш сыҡһа, көн яҡтыра; ҡояш булмаһа, ҡараңғы төшә. Ямғыр яуһа, тышта бысраҡ - тышҡа сығырға ярамай. Ҡар һыуыҡ - уны ашарға ярамай - ауырыта).

Һыу һәм уның үҙенсәлектәре тураһында төшөнсәләрҙе киңәйтеү, нығытыу: һыу аға; йылғала һыу инәләр. Һыуҙа кешенең йөҙө, әйберҙең күләгәһе сағыла. Һыуҙа тимер бата, ағас йөҙә. Туңһа, һыу боҙға әйләнә (тәжрибәләр үткәреү).

Йыл миҙгелендәге үҙгәрештәрҙе аңлатыу:

Көҙ: һалҡын, япраҡтар һарғая, ҡойола, сәскәләр шиңә. Көҙөн йәшелсәләр өлгөрә, уларҙы йыялар.

Ҡыш: ағастар яланғас ҡала, япраҡтары ҡойола, ҡар яуа. Балалар саңғыла, санала шыуалар, ҡарҙан төрлө фигуралар әүәләйҙәр.

Яҙ: ҡар ирей, ҡояш йылыта, ағастар япраҡ яра, үлән сыға, бөжәктәр күренә;

Йәй: ҡояш ныҡ ҡыҙҙыра, эҫе, бөтә ерҙә йәшеллек, сәскәләр күп үҫә, күбәләктәр оса.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Йәнле тәбиғәттең кешеләрҙән, үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһынан торғанлығын аңлатыу. Уларҙы күҙәтергә һәм өйрәнергә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.

Тәбиғәттә бөтә нәмә тын ала, туҡлана, үҫешә, ишәйә. Уларҙың йәшәүе өсөн кәрәкле шарттар булыуы мотлаҡ (яҡтылыҡ, йылылыҡ, һауа, аҙыҡ).

Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт үҙ-ара тығыҙ бәйле. Тәбиғәткә бәйләнешле йола байрамдары тураһында төшөнсәләр биреү. «Ҡарға бутҡаһы», «Ҡар һыуына барыу».

Балаларға 2-3 ағас төрө (ҡайын, шыршы, саған) һәм бүлмә гөлдәре тураһында башланғыс белем биреү. Ағас олонон, япраҡтарын, ботағын, үләндең һабағын, япрағын, сәскәһен танырға һәм уларҙың нисек әйтелеүен белергә өйрәтеү.

Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре (юл япрағы, мәтрүшкә, кесерткән, миләш, балан) менән таныштырыу.

Емеш-йәшелсәләрҙе төҫө, тәме, ҙурлығы буйынса айыра һәм исемен әйтә белеү *(кишер – ҡыҙыл төҫтә, тәмле).* Бала уларҙы тикшереп ҡарарға өйрәнә *(һыйпай, тәмләй, һәрмәй, бармаҡ менән ныҡ итеп баҫып ҡарай, еҫкәй).*

Ҡайһы бер орлоҡтарҙың тышҡы күренеше *(борсаҡ, ҡыяр, ҡабаҡ, кишер һ.б.)* һәм уларҙы сәсеү, тәрбиәләү ысулдары менән таныштырыу.

Ҡырағай һәм йорт хайуандары, уларҙың балалары тураһындағы төшөнсәләр тәрәнәйтелә: кеше эргәһендә һәм урманда йәшәүҙәре, ниндәй файҙа килтереүҙәре һ.б. Уларҙың тышҡы ҡиәфәттәрен, кәүҙә төҙөлөшөн, ҙурлығын, хәрәкәтләнеү ысулдарын, туҡланыуын, йәшәү шарттарын, ҡылыҡ-ғәҙәт үҙенсәлектәрен айыра белеү. Бала төрлө төркөм хайуандарҙың уларға ғына хас сифаттарын таный башлай *(ҡоштарҙың - ҡанаттары, суҡыштары, ҡаурыйҙары; балыҡтарҙың - тәңкәләре, йөҙгөстәре; һыйыр - мөгөҙлө, кәзә - һаҡаллы, ат - яллы, ҙур оҙон ҡойроҡло була һ.б.).*

Балаға йорт малдарының кешегә файҙа килтереүен төшөндөрөү (һыйыр – һөт, ҡаймаҡ, май, ҡорот; кәзә - мамыҡ, һөт бирә һ.б.).

Ҡайһы бер йәнлек тауыштарын отоп алып, ҡабатлау (*серәкәй, кәкүк, һыйыр, бәрәс).*

Температура үҙгәреү сәбәпле матдәләрҙең бер хәлдән икенсегә күсеүен күҙәтеү, аңлатыу (ҡар - һыу - боҙ). Тәжрибәләр үткәреү.

Балаларҙың күк есемдәре тураһындағы мәғлүмәттәре киңәйтелә (ҡояш, ер һәм ай араһындағы бәйләнештең тәүлек эсендә көн менән төндөң алмашыныуына килтереүе. Был күренештең даими ҡабатланып тороуы).

Ҡар һәм боҙҙоң үҙенсәлектәре менән таныштырыу (ҡар – һыуыҡ, еңел, боҙ – ҡаты, үтә күренеүсән).

Ҡом һәм балсыҡтың үҙенсәлектәрен үҙ теләгең менән үҙгәртеп булыу (ҡом – дымлы, ҡоро, таралып, ҡойолоп тора, балсыҡ – ҡамыр һымаҡ әүәләнә, кипһә, таш кеүек ҡата).

Һауа торошон билдәләп, уны тулыраҡ итеп һүрәтләү: һыуыҡ, йылы, эҫе; ямғыр яуа (ҡойоп, һибелеп); ел иҫә (талғын, көслө). Уларҙың үҙ-ара бәйләнеше: көслө ел иҫкәндә, көндөң һалҡыныраҡ булыуы.

Йыл миҙгелендәге үҙгәрештәрҙе аңлатыу:

Йыл миҙгелдәре, уларҙың бер-бер артлы ҡабатланыуы һәм кеше тормошона йоғонтоһо төшөндөрөлә. Йыл миҙгелдәрен уларҙың үҙҙәренә хас үҙенсәлектәре буйынса билдәләп, бәйләнешле телмәр аша тасуирлай белергә өйрәтеү. Йыл миҙгелдәре хаҡында халыҡ һынамыштары менән таныштырыу.

Көҙ: көндәр болотло һәм ямғырлы була. Кешеләр куртка һәм плащ кейә. Япраҡтар һарғая һәм ергә ҡойола. Ҡоштар йыйылышып, тупланып йылы яҡҡа осоп китәләр. Кешеләр баҡсаларҙа һәм ҡырҙарҙа уңыш йыя.

Ҡыш: көндәр ҡыҫҡара һәм һыуына. Иртә ҡараңғы төшә. Ағастар япраҡһыҙ тора. Һыу туңып, боҙға әйләнә. Ҡар яуа. Кешеләр йылы кейемдәрен кейә. Балалар саңғы, сана шыуа, ҡышларға ҡалған ҡоштарға ем ашата.

Яҙ: ҡояш яҡтыраҡ яҡтырта. Көндәр йылына башлай, ҡар ирей. Гөрләүектәр аға. Тәүге сәскәләр, үләндәр үҫеп сыға, ағастарҙың бөрөләре бүртә, япраҡ ярыла. Күбәләктәр, бөжәктәр күренә башлай. Кешеләр ҡышҡы кейемдәрен сисеп, еңел кейем кейәләр. Баҡсаларҙа һәм баҫыуҙарҙа яҙғы эштәр башлана.

Йәй: ҡояш ныҡ яҡтырта һәм ҡыҙҙыра. Төрлө-төрлө сәскәләр күпләп үҫеп сыға. Кешеләр йылғала һыу инә. Баҡсала, урманда, паркта төрлө ҡоштар һайрай. Еләк-емеш бешә.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Тыуған яҡтың ағастарын (ҡайын, имән, ҡарағай, саған һ.б.), ҡыуаҡтарын (сирень, сейә, акация һ.б.) таный һәм исемен әйтә белеү. Ағас һәм ҡыуаҡтың айырмаларын сағыштырыу, ылыҫлы һәм япраҡлы ағастарҙың үҙенсәлектәре менән таныштырыу.

Бүлмә гөлдәренең ике яңы төрө (бегония, бальзамин) менән таныштырыу. Уларҙың тышҡы төҙөлөшө (тамыр, һабағының урынлашыуы, япраҡтар формаһы, сәскәләре, орлоҡтары) менән таныштырыу. Балаға үҫемлектең һәр өлөшө үҙенә хас эш башҡарғанын аңлатыу (тамыры уны тупраҡта (ерҙә) тотоп тора, һабағы ерҙән кәрәкле файҙалы матдәләрҙе япраҡ, сәскәләргә бирә, япрағы яҡтыны тота, күләгә төшөрә. Үҫемлектәргә үҫер өсөн йылылыҡ, дым, ҡояш яҡтыһы, тупраҡ кәрәк).

Емеш-йәшелсәнең яңы 2-3 төрөн (шалҡан, сөгөлдөр, ҡурай еләге, крыжовник) танып, исемдәрен әйтергә, үҙенсәлектәрен табырға өйрәтеү. Уларҙы дөйөм һүҙ - «йәшелсә», «емеш» тип атарға өйрәтеү.

Үҫемлектәрҙең орлоҡтан сәсеп үҫтерелеүе, уны тәрбиәләү (утау, һыу һибеү, төбөн йомшартыу) тураһында аңлатыу.

Баҫыуҙа үҫкән башаҡлы үҫемлектәр (бойҙай, һоло, арпа) һәм уларҙан он, ярма әҙерләүҙе, был продукттарҙан бешерелгән ризыҡтарҙы таныу: икмәк, бутҡа, печенье һ.б. (башҡорт милли аштары - ҡурмас, талҡан, һалма һ.б.). Болонда, туғайҙа үҫкән үҫемлектәрҙе белеү һәм таныу (аҡ сәскә, ҡыңғырау сәскә, андыҙ һ.б.).

Ашарға яраҡлы (ер еләге, ҡурай еләге, ҡыҙыл көртмәле) һәм ярамай торған (эт муйылы, бүре еләге, артыш) еләктәрҙе белдереү.

Ашарға ярамай торған (тырҡыш, ағыулы бәшмәк, ялған башлы бәшмәк) һәм ашарға яраҡлы бәшмәктәр (аҡ бәшмәк, гөрөздә, ҡайын бәшмәге) менән таныштырыу.

Ҡырағай һәм йорт хайуандары, уларҙың балалары тураһындағы белемде тәрәнәйтеү, йорт хайуандарының улар тураһында ҡайғыртыуға мохтаж булыуын (торлаҡ эшләү, аҙыҡ әҙерләү, тәрбиәләү һ.б.) аңлатыу.

Ҡырағай хайуандарҙы уларҙың үҙенсәлекле сифаттары буйынса таный белеү (холҡо, йәшәү урыны, ашарға табыу юлы, дошмандан һаҡланыу төрҙәре буйынса).

Йәнлектәрҙең йәшәү шарттары (ер өҫтөндә, һыуҙа-ерҙә, ерҙә һәм һауала, тупраҡта), ошо шарттарға ярашлы уларҙың тән төҙөлөшө тураһында мәғлүмәт биреү.

Йәнлектәрҙең йыл миҙгелдәрендәге үҙгәрештәргә яраҡлашыуы (ҡышҡы йоҡоға талыу, йөнөн ҡойоу (яҙын, көҙөн), йылы яҡтарға осоп китеү. Өйөр, көтөү (хайуандар), туп (ҡоштар), эркеү (балыҡтар) төшөнсәләрен үҙләштереү.

2-3 ҡошто танырға һәм исемен әйтергә өйрәтеү (турғай, кәкүк, һандуғас, ҡарға); ҙурлығы, тауышы, ҡаурыйҙарының төҫө һ.б. билдәләре буйынса ҡоштарҙы таныу.

Аквариум – балыҡтарҙың йәшәгән урыны (мөхите) икәнлеген аңлатыу. Унда таҙа һыу, ҡом, ҡырсынташ, һыу аҫты үҫемлектәре барлығын асыҡлау. Аквариумда йәшәгән балыҡтарҙы төрҙәре буйынса танып, атамаларын әйтә белеү.

Төрлө бөжәктәр, уларҙың тышҡы ҡиәфәттәре, тауыштары тураһында төшөнсәләр биреү (күбәләк, ҡуңыҙ, ҡырмыҫҡа, бал ҡорто, сиңерткә). Уларҙы кәүҙә төҙөлөшө (ҡанаты бар, юҡ), хәрәкәтләнеүе (шыуыша, оса, һикерә), йәшәгән урыны (һыуҙа, ерҙә) һ.б. билдәләре буйынса сағыштырыу.

Тәлмәрйен менән таныштырыу, уның тышҡы ҡиәфәте, кәүҙәһенең төҙөлөшө, аяҡ остарының төҙөлөшө, уларҙың ерҙә һәм һыуҙа хәрәкәтләнеүгә яраҡлашыуын төшөндөрөү.

Быуа, күл, йылға – йәнлектәрҙең һәм үҫемлектәрҙең йәшәү урыны икәнлеге, Башҡортостандың ҙур күлдәре, йылғалары, унда йәшәгән йәнлектәр, балыҡтар менән таныштырыу.

Балаға күк есемдәре (ҡояш, ай, йондоҙҙар) һәм башҡа күренештәр тураһында аңлатыуҙы дауам итеү *(ҡояш ҡалҡыу, байыу, таң атыу, йондоҙ атылыу һ.б.).* Ҡояштың

ер йөҙөнә яҡтылыҡ, йылылыҡ биреүе һәм тормош сығанағы булып тороуы хаҡында аңлатыу. Миҙгел байрамдары: «Науруз», «Нардуған», «Ҡарға бутҡаһы» һ.б.

Һауа торошон билдәләй һәм аңлата белергә өйрәтеү. Һауа торошо тураһында халыҡ һынамыштары менән таныштырыу.

Йыл миҙгелдәренең үҙгәреүе кешегә, үҫемлеккә, йәнлектәр донъяһына тәьҫире итеүе тураһында белешмә биреү.

Миҙгел билдәләрен асыҡлауҙы камиллаштырыу.

Көҙ: һалҡынайта, йыш ҡына быҫҡаҡлап ямғыр яуа. Күктә ҡара ауыр болоттар ағыла. Үтә һуғып торған ел иҫә. Япраҡ ҡойола. Кешеләр баҡсала һәм яланда уңыш йыя.

Ҡыш: ҡар яуа, буран сыға. Көндәр һалҡын тора. Йылғалар боҙ менән ҡаплана. Көндәр ҡыҫҡа. Кешеләр йылы кейемдәрен кейә.

Яҙ: ҡояш ерҙе йылыта, яҡтырта. Ҡар ирей. Йылғалар боҙҙан асыла. Үләндәр үҫә башлай. Ағастар япраҡ яра, сәскәләр сыға. Бөжәктәр уяна. Ҡоштар йылы яҡтан ҡайта. Кешеләр йылы кейемдәрен сисә.

Йәй: күк йөҙө аяҙ, сыуаҡ. Ҡояш ҡыҙҙыра. Йылы ямғырҙар яуа, күк күкрәй. Үҫемлектәр шаулап үҫә. Йылғала һыу йылына, кешеләр һыу инәләр, балыҡ тоталар, еләк-емеш йыялар.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Башҡортостан тәбиғәте тураһындағы белемдәрен киңәйтеү, тәбиғәткә һаҡсыл һәм аңлы ҡараш тәрбиәләү. Кешеләрҙең тәбиғәтте һаҡлау эшмәкәрлеге менән таныштырыу: ағас ултыртыу, ҡышын ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе ашатыу. Балыҡтар тураһында хәстәрлек күреү. Ҡурсаулыҡтар тураһында төшөнсә биреү. Башҡортостан ҡурсаулыҡтары, Шүлгәнташ, Асылыкүл, Ғәҙелшә шарлауығы һ.б. менән таныштырыу.

Үҫемлектәрҙең үҫеүе өсөн кәрәкле шарттар тураһында төшөнсә киңәйтелә: тупраҡ, дым, ҡояш яҡтыһы һәм йылыһы. «Үҫемлек» тигән дөйөм төшөнсә үҙләштерелә (үҫемлектәр ҙә кеше кеүек йәнле: уның тамыры, һабағы, япрағы, сәскәһе, орлоғо була. Үҫемлектәр – ағастар, ҡыуаҡтар, үләндәр һ.б.).

Бүлмә гөлдәре менән танышыу: төҙөлөшө, тышҡы күренеше, уларҙың ниндәй ихтыяжға мохтаж булыуы (һыу, ашлама һ.б. кәрәклеге), үрсетеү (ботаҡ, тамыр, орлоҡ менән) һәм тәрбиәләү ысулдары. Һабаҡтары үрмәләп, ергә йәйелеп, һуған һымаҡ үҫкән үҫемлектәр.

Үҫемлектәрҙе ботаҡ, мыйыҡтар, япраҡ һәм орлоҡ сәсеү юлы менән үрсетеү; яҡтылыҡ һәм күләгә, дым яратҡан, ҡороға сыҙамлы үҫемлектәр тураһында мәғлүмәт биреү.

Болон үҫемлектәре менән танышыу дауам итә (клевер, меңьяпраҡ, туғай яраны, муллаян үләне).

Культуралаштырылған үҫемлектәр – арыш, бойҙай, һоло; уларҙы үҫтереү ысулдары менән таныштырыу. Һабағына һәм ботағына ҡарап, уларҙы айыра белеү. Ҡый үләндәрен таный, айыра белеү.

Һыуҙа үҫеүсе үҫемлектәр менән таныштырыуҙы дауам итеү (томбойоҡ, һыу боросо).

Йәшелсә-емеш тураһында дөйөмләштерелгән төшөнсәләрҙе белеү (улар үҫемлектәрҙең бер өлөшө һәм шул уҡ ваҡытта уларҙың емеше лә була).

Урман, болон, ялан-ҡыр тураһындағы белемдәрҙе нығытыу: ундағы үҫемлектәрҙең бер-береһе менән бәйле булыуы.

Ағасты, ҡыуаҡты айыра белеү.

Баҡсала һәм урманда үҫкән, ашарға яраҡлы еләктәр тураһындағы белемде киңәйтеү (ҡыҙыл ҡөртмәле, ҡурай еләге, бөрлөгән, ҡарағат, балан).

«Йорт хайуандары» тигән дөйөм төшөнсәне түбәндәге сифаттар буйынса билдәләй белеү: кеше эргәһендә йәшәй, уға файҙа килтерә, кеше уның тураһында хәстәрлек күрә (ҡарай, ашата һ.б.).

Ҡырағай хайуандарҙы урманда йәшәү, ашарға үҙҙәре табыу, торлаҡты үҙҙәре хәстәрләү сифаттары аша билдәләү.

Йәнлектәрҙең дошмандан һаҡланыу ысулдарын, төрҙәрен белеү (төҫөн үҙгәртә, шәп йүгерә, йәшеренә, ҡойроғо менән эҙен һеперә һ.б.). Уларҙың киләсәк быуын тураһындағы хәстәрлеге менән таныштырыу.

Ҡош кәүҙәһенең төҙөлөшөндәге дөйөм билдәләре (баш, аяҡ-тәпәй, ҡанат, ҡойроҡ); тәнен мамыҡ, ҡаурый ҡаплауын, айырмалы билдәләрен (суҡышының төҙөлөшө, йөндәренең төҫө һ.б.) белеү.

Ҡоштарҙың һиҙеү органдары (ишетеү, күреү, тойоу, тәмләү), тәпәйҙәр менән ҡанаттарҙың хәрәкәтләнеүгә яраҡлашыуы тураһында белеү (ҙур ҡанатлы – оса, көслө аяҡлы – йүгерә, бармаҡтары ярылы – йөҙә).

Йорт ҡоштарын һәм уларҙың бәпкәләрен таный һәм айыра белеү. Уларҙың тышҡы ҡиәфәттәре, холоҡтары, туҡланыуы, үрсеүе тураһында мәғлүмәт алыу (тауыҡ, өйрәк, ҡаҙ, күркә).

Ҡышлай торған (ҡарға, һайыҫҡан, турғай, сәпсек) һәм йылы яҡҡа осоп китә торған күсер ҡоштар (ҡарлуғас, торна, сыйырсыҡ, сәүкә) тураһында төшөнсә биреү. Уларҙың йылы яҡҡа осоп китеү сәбәбен аңлатыу.

Балыҡтарҙың ыуылдырыҡ сәсеп һәм бала тыуҙырып үрсеүе менән танышыу. Балыҡ селбәрәләрен аквариумда үҫтереү шарттарын төшөндөрөү (өҫтәлмә яҡтылыҡ, һыуҙы йылытыу, аэрация һ.б.).

Болонда *(сиңерткә, бал ҡорто, һагыҙаҡ, ҡуңыҙ)*, һыуҙа *(һыу ҡуңыҙы, салҡан ҡандала, йомро сеңәүсендәр)* йәшәүсе бөжәктәр тураһында һөйләшеү.

Имеҙеүселәр төркөмө *(йорт ҡуяны, терпе, тейен, алйырҙан)*, һөйрәлеүселәр төркөмө *(ташбаҡа, кеҫәртке, йылан)*, уларҙың тышҡы күренеше, хәрәкәтләнеүе, туҡланыуы, холоҡтары, үрсеү юлдары, йәшәү үҙенсәлектәре менән танышыу.

Тәбиғәт күренештәре тураһында балаларҙың белеме тәрәнәйтелә:

- һыуҙың төрлө хәлдә булыуына ҡарап, тәбиғәт күренештәрен әйтә белеү (һибәләп яуған һалҡын ямғыр, ысыҡ, томан, ҡар, бәҫ, боҙ, тамсылар). Һыуҙың кешеләр, йәнлектәр, үҫемлектәр өсөн әһәмиәте;

- ҡар тураһында төшөнсәләрҙе киңәйтеү (һыуыҡ көндә – ҡар күҙе булып, йылытҡанда – ябалаҡлап, көслө һыуыҡ елдә – энә һымаҡ ырашҡы яуа; ҡар шығырлай, һибелә, әүәләнә һ.б.);

- бо̧ҙҙоң үҙенсәлектәрен артабан өйрәнеү (шыма, тайғаҡ, һыуыҡ, ныҡ, ҡаты, үтә күренеүсән, мурт, ватылыусан һ.б.);

- һауа тураһында төшөнсәләр байый (ҡыҫыла, ауырлығы бар). Уларҙы таба белеү ысулдары тураһында мәғлүмәт бирелә.

- яҡтылыҡтың үҙенсәлектәре менән танышыу (тура һыҙыҡ булып тарала, ҡаплаһаң – күләгә төшә һ.б.), йәнле тәбиғәт өсөн әһәмиәтен асыҡлау;

- магнит, уның ҡапма-ҡаршы полюстары, металдарҙы үҙенә тартыуы һәм этеүе тураһында белешмә биреү;

- ҡайһы бер металдар һәм минералдар өлгөһө менән танышыу (тимер рудаһы, алюмин, таш күмер, тоҙ). Уларҙың үҙсәнлектәре, кеше өсөн әһәмиәте. Башҡортостандың файҙалы ҡаҙылмалары;

- әйберҙәрҙең (машина, ҡояш, болот, автобус) хәрәкәте тураһында башланғыс төшөнсә (тиҙ, әкрен, шәп). Уның башланғыс нөктәһен, хәрәкәт юлын күҙәтә, тиҙлекте сағыштыра белергә өйрәтеү;

- Ер шары һәм уның юлдашы Ай тураһындағы белемдәрҙең артабан тәрәнәйеүе. Уларҙың йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәткә йоғонтоһо. Глобус һәм карталар менән таныштырыу.

Миҙгелдәрҙе йәнһеҙ һәм йәнле тәбиғәттәге, шулай уҡ кешеләр тормошондағы үҙгәрештәр буйынса билдәләргә өйрәтеү:

Көҙ: көндөң оҙонлоғо кәмей. Һыуыта. Күк йөҙө йонсоу, болотло, оҙаҡҡа һуҙылған һалҡын, һибәләмә ямғыр яуа, киҫкен һалҡын ел иҫә. Иртәнсәк ысыҡ, ҡырау, томан төшә. Үҫемлектәрҙең ер өҫтөндәге өлөшө һулый. Ағас һәм ҡыуаҡ япраҡтары төҫөн үҙгәртә. Бөжәктәр юғала. Күсер ҡоштар йылы яҡҡа осоп китә, йәнлектәр, кешеләр ҡышҡа әҙерләнә.

Ҡыш: иң ҡыҫҡа көндәр һәм иң оҙон төндәр. Ҡояшлы көндәр бик аҙ. Ҡояш түбән генә тора. Тышта һалҡын. Ҡаты һыуыҡтар тора. Ер өҫтөн ҡар ҡаплаған. Йылға-күлдәр боҙ менән ҡапланған. Үтә һуғып торған әсе ел өрә. Үҫемлектәр донъяһы тәрән йоҡоға сумған.

Яҙ: көн оҙая бара. Ҡояш нығыраҡ йылыта, ҡар, боҙ ирей. Тамсылар тама, гөрләүектәр аға, ҡарҙан асылған (әрселгән) ер күренә, үҫемлектәргә үҫер өсөн уңайлы шарттар тыуа, бөжәктәр уяна, ҡоштар йылы яҡтан ҡайта. Кешеләр яҙғы эшкә әҙерләнә.

Йәй: иң оҙон көндәр. Эҫе, ҡояш ҡыҙҙыра, йылы һипмә ямғыр яуа, йәйғор ҡалҡа. Үҫемлектәр шаулап үҫә, сәскә ата. Бөжәктәр, йәнлектәр бала сығара. Йылға-күлдәрҙә һыу йылына, кешеләр һыу инә.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Көн һәм төн тураһында төшөнсәләр биреү, уларҙың Ерҙең Ҡояш һәм үҙе тирәләй әйләнеүенә бәйле булыуын аңлатыу. Һауа торошон тәбиғәт миҙгеленә бәйләп асыҡларға өйрәтеү.

Үҫемлектәр һәм йәнлектәр, тере организм булғанлыҡтан, тын алалар, туҡланалар, үҫәләр, үрсейҙәр. Һәр йән эйәһенең үҙ йәшәү мөхите бар: кешеләр – ауыл-ҡалаларҙа, үҫемлектәр, йәнлектәр – ялан-ҡырҙарҙа, болондарҙа, урманда, йылға-күлдәрҙә йәшәй.

Үҫемлектәр донъяһы тураһындағы төшөнсәләр формалашыуҙы нығытыу: уларға ҡояш яҡтыһы, йылылыҡ, дым, тупраҡ, ашлама кәрәк. Үҫемлектәр тупраҡта, һыуҙа үҫә; ҡышҡы шарттарға яраҡлаша (япраҡ ҡоя, тынлыҡ хәленә күсә).

Тәбиғәт мөйөшөндәге һәм тәбиғәттәге үҫемлектәрҙе тышҡы күренеше, төҙөлөшө буйынса айыра, әйтә белеү (ҡабығы, олоно, ботағы, япрағы һ.б.).

Туғайҙа үҫкән үләндәр, башаҡлы һәм шифалы үҫемлектәр менән танышыу дауам итә. Баҡсалағы сәскәләр тураһында, ҡый үләндәре тураһында аңлатыу.

Йәшелсә, емеш-еләк тураһында дөйөмләштерелгән төшөнсәләр, уларҙы үҫтереү, тәрбиәләү, уларҙың үҫеш стадиялары, тышҡы күренештәре, килтергән файҙалары тураһында әңгәмәләр.

Урман еләктәре, бәшмәктәре, уларҙың ашарға яраҡлы һәм ярамай торғандары тураһында төшөнсәләрҙе нығытыу.

Йылға-күл, урман, болон, яландарҙың, балалар баҡсаһы ихатаһы, урамының үҫемлектәр мөхите менән бәйләнешен аңлатыу.

Характерлы үҙенсәлектәре һәм сифаттары буйынса йорт һәм ҡыр хайуандары тураһындағы төшөнсәләрҙе системалаштырыу.

Төрлө йәнлектәрҙең ҡышлауға төрлөсә әҙерләнеүе (аҙыҡ туплау, май йыйыу, йөн ҡойоу (ташлау) һәм алмаштырыу, йоҡоға китеү, ҡоштарҙың йылы яҡҡа осоп китеүе, кеше торлаҡтары эргәһенәрәк урынлашыуы, балыҡтарҙың һыу төбөнә төшөүе, бөжәктәрҙең ағас ҡайырылары араһында ҡатып ҡалыуы һ.б.) менән таныштырыу.

Башҡортостандан башҡа ерҙәрҙә йәшәгән экзотик хайуандар менән таныштырыу *(дөйә, фил, ишәк).* Уларҙың тышҡы күренештәре, кәүҙә төҙөлөшө, кешенең файҙаланыу ысулдары аша таный һәм айыра белеү.

Ҡош төрҙәре тураһында дөйөм төшөнсәләр биреү: биҙәү өсөн (декоратив ҡош), йорт ҡоштары, ҡышлаусы, күсер ҡоштар. Уларҙы тышҡы күренештәре, холоҡтары, туҡланыу, үрсеү ысулдары һ.б. үҙенсәлектәре буйынса таный белеү.

Аквариум – балыҡтарҙың йәшәү урыны, мөхите. Ундағы балыҡтар менән танышыуҙы дауам итеү.

Бөжәктәр тураһындағы төшөнсәләр киңәйә: уларҙың туҡланыу төрҙәре (үҫемлектәр, сәскә һуты, бөжәктәр менән). Уларҙы төркөмләй, бер-береһенән айыра белеү.

Миҙгелдәрҙе йәнһеҙ һәм йәнле тәбиғәттәге, шулай уҡ кешеләр тормошондағы үҙгәрештәр буйынса билдәләргә өйрәнеү:

Көҙ: сентябрь айы көҙҙөң беренсе айы тигән төшөнсәне хәтерҙә нығытыу. Көҙ миҙгеленең башҡорт халҡының һынамыштары аша билдәләй, үҙгәрештәрен күрә белергә өйрәнеү (һыуытты; ҡырау төшә, ер , йыйылып торған һыуҙар туңа башлай, япраҡтар ҡойола).

Баҡса ҡыуаҡтарының ботаҡтарын киҫеү, ниңә шулай эшләргә кәрәклеген аңлатыу. Көҙҙән ултыртып ҡалдыра торған үҫемлектәрҙе ултыртыу (һарымһаҡ, йәшел һуған, кишер).

Тәбиғәт материалдарын йыйырға өйрәтеү (орлоҡтар, тубырсыҡтар, сәтләүектәр, япраҡтар).

Ҡыш: тәбиғәттәге миҙгел үҙгәрештәре тураһында белемдәрен үҫтереү (төн оҙон, көн ҡыҫҡа, һыуыҡ, һалҡын, боҙлауыҡ һ.б.)

Балаларҙың иғтибарын оҙаҡ емештәрен ҡоймай ултырған ағастарға (миләш, балан, һ.б.) йүнәлтеү. Был емештәрҙең ҡош-ҡортҡа ризыҡ булыуын аңлатыу.

Ҡарҙың үҙенсәлеген билдәләргә өйрәтеү (һыуыҡ, ҡабарып торған, йомшаҡ, ҡойола, йәбешә һ.б.).

Февраль айында һауа торошоноң үҙгәреүен билдәләп үтеү (йә ҡояш яҡтырта, йә ел иҫә, йә булмаһа ҡар яуырға тотона, өй ҡыйыҡтарында боҙлауыҡ барлыҡҡа килә).

22 декабрь - иң ҡыҫҡа көн икәнлеген аңлатыу.

Яҙ: балаларға тәбиғәттең яҙ миҙгелендәге үҙгәрештәре тураһында һөйләү (ҡояш йышыраҡ яҡтырта һәм йылыта, умырзаялар сыға башлай, ағастар һәм ҡыуаҡтар бөрөләнә, боҙ китергә йыйына; тәлмәрйендәр, кеҫәрткеләр уяна; ҡоштар оя ҡора; күбәләктәр килеп сыға, ҡырмыҫҡалар уяна).

Термометр менән таныштырыу (бағаналағы терегөмөш һауа торошона ҡарап күтәрелергә һәм төшөргә мөмкин). Ағас-ҡыуаҡтарҙы ултыртҡанды уларҙың ботаҡтарын киҫкәнде күҙәтеү.

Тәбиғәт мөйөшөндәге үҙгәрештәрҙе күҙәтеү (бүлмә гөлдәре япраҡ бирә, сәскә ата һ.б.) Сәскәләрҙе тәрбиәләргә өйрәнеү.

Балаларҙы башҡорт халыҡ һынамыштары менән таныштырыу: «Оҙон боҙбармаҡ - оҙон яҙға» һ.б.

Йәй. Тәбиғәттә булған үҙгәрештәрҙе асыҡлау (оҙон көндәр, ҡыҫҡа төндәр, йылы, эҫе; ҡойма ямғыр, йәшен, йәйғор). Йәй көнө үҫемлектәргә үҫергә уңайлы шарттар булыуын аңлатыу.

Башҡорт халыҡ һынамыштары менән таныштырыу: «Ямғырҙан һуң йәйғор оҙаҡ торһа – һауа боҙолоуға, тиҙ юғалһа – яҡшы һауа торошона», «Кис серәкәйҙәр күп булһа-көн йылытыуға».

22 июнь – иң оҙон көн тип атала, был көндән һуң төн оҙоная, ә көн ҡыҫҡара башлай.

Кешеләрҙең баҡсалағы, баҫыуҙағы эштәре менән таныштырыу. Ололарға ярҙам итеү теләге уятыу.

«ТЕЛМӘР ҮҪЕШЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

Телмәр үҫеше: телмәрҙе аралашыу һәм тирә-йүнде өйрәнеү сараһы итеп ҡабул итергә күнектереү. Балаларҙың һүҙ байлығын, грамматик яҡтан дөрөҫ ҡоролған бәйләнешле телмәрен, уның диалог һәм монолог формаларын үҙләштереүен ойоштороу; өндәр мәҙәниәтен тәрбиәләү һәм тауыш менән идара итә белеү өҫтөндә эш алып барыу.

Ижади телмәр нигеҙҙәрен, фонематик ишетеү һәләтен үҫтереүҙе, китап мәҙәниәте һәм балалар әҙәбиәте, әҫәрҙең төрлө жанрҙары менән таныштырыуҙы, өндөң аналитик-синтетик әүҙемлеге аша грамотаға өйрәтеүҙе формалаштырыу.

Төп маҡсаттары һәм бурыстары

Телмәр үҫтереү. Ололар һәм балалар менән ирекле аралашыу телмәрен конструктив алымдар менән үҙләштереү һәм тирә-йүндең йоғонтоһо булараҡ үҫтереү. Балаларҙың һөйләү телмәрен, грамматик яҡтан төҙөлөшөн, бәйләнешле телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын үҙләштереү, һүҙлек байлығын, өндәрҙең дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен үҫтереү.

Нәфис әҙәбиәт. Нәфис әҙәбиәткә һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, әҙәби телмәрҙе үҫтереү, әҙәби әҫәрҙәрҙе теләк менән тыңларға һәм әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙы тойғолар аша кисерә белергә өйрәтеү.

ПСИХОЛОГИК ҺӘМ ПЕДАГОГИК ЭШТЕҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Телмәр үҫтереү

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Телмәр үҫтереүсе мөхит. Балаларға үтәргә төрлө эштәр ҡушып (Ҡара, кем килде! Әминә ҡурсағын кәштәгә һалдымы?), уны башҡа балалар һәм тәрбиәсе менән һөйләшергә мәжбүр итеү. Өс йәшендә баланың тиҫтерҙәре менән ярайһы ғына кимәлдә аралаша алыуына ирешеү.

Китаптан, альбомдан һүрәттәр ҡарап, һорауҙарға аңлы рәүештә яуаптар бирергә өйрәтеү. Персонаждарҙың эмоциональ торошона иғтибар итеү (шатлана, ҡайғыра, илай, көлә, асыулана һ.б.).

Һүҙлек эше. Тирә-йүндәге предметтар, уларҙың үҙенсәлектәре һәм сифаттары менән таныштырыу һәм уларҙы аңлатҡан һүҙҙәрҙе өйрәтеү. Уйынсыҡтарҙы, кейем-һалымды, һауыт-һабаны айыра, атамаларын дөрөҫ әйтә белеү. Уларҙың төрҙәрен дөйөмләштерергә өйрәтеү: кейем - *бүрек, пальто, тун, күлдәк, итек, быйма*; йорт йыһаздары – *өҫтәл, карауат, ултырғыс*; һауыттар – *сәйнүк, сынаяҡ, ҡалаҡ, тәрилкә*; уйынсыҡтар – *ҡурсаҡ, айыуҡай, машина, туп.*

Предметтарҙың, әйберҙәрҙең өлөштәрен айырып әйтеү: *сынаяктың тотҡаһы, өҫтәлдең аяҡтары.*

Физик сифаттарҙы һәм үҙенсәлектәрҙе әйтергә өйрәтеү: *йылы, һыуыҡ, йомшаҡ, шыма, өҙөлә, ватыла, тәмле, татлы, әсе.*

Йыуыу, һөртөү, сисеү, кейеү, йәйеү, кейендереү кеүек хәрәкәттәрҙе аңлатҡан һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөргә һәм әйтергә өйрәтеү. Быны өсөн балаларҙы күберәк хәрәкәт иттереп, шул хәрәкәттәрҙе бергәләп башҡарып, уйындар уйнатып аңлатыу.

Ҡапма-ҡаршы мәғәнәне аңлатҡан ҡылымдарҙы ҡулланырға өйрәтеү: *ас - яп, тор - ултыр, бир - ал, ят - тор һ.б.*

Кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе һәм хис-тойғоларҙы аңлатҡан ҡылымдар менән таныштырыу: *ҡосаҡлай, ярата, һыйпай, көлә, шатлана, илай, ҡыуана, үсегә, илай.*

Төҫтө, дәүмәлде, тәмде, температураны аңлатҡан сифаттар менән таныштырыу: *ҡыҙыл, күк, тәмле, әсе, һыуыҡ, һалҡын, эҫе, йылы, ҙур, бәләкәй, матур, насар һ.б.*

Арауыҡта торошто билдәләүсе һәм башҡа рәүештәрҙең мәғәнәһе һәм улар аңлатҡан һүҙҙәрҙең әйтелеше менән таныштырыу: *аҫта, өҫтә, алыҫ, яҡын, аҙ, күп, шәп, тиҙ һ.б.*

Өндәр өҫтөндә эш. Балаларҙың телмәр ағзалары мускулдарын нығытыу, үҫтереү. Өндәрҙең дөрөҫ әйтелешенә күнегеүҙәр башҡарыу: уларҙы тиҙ, яй, әкрен, көслө тауыш менән әйтеү. өноҡшаш һүҙҙәр менән уйындар үткәреү.

Телмәр ағзаларының үҫешенә, һығылмалығына, дөрөҫ тын алыуға, өндәрҙе ишетеп ҡабатлай белеү һәләтен үҫтереүгә күнегеүҙәр үткәреү. Һуҙынҡы өндәрҙе тауыштың көсөн, тембрын үҙгәртеп йырлатыу.

Башҡорт теленә хас булған өндәр ҡушымтаһын айырырға, дөрөҫ әйтергә өйрәтеү: *ҡул – кул, ҡор - көр, тор - төр, мал – мәл һ.б.* һүҙҙәрҙе тәрбиәсе менән бергәләп, аҙаҡ – баланың үҙенән айырым ҡабатлап әйтергә күнектереү.

Саф һауала күҙәтеүҙәрҙә, уйын ваҡытында, төҫлө һүрәттәр ҡарағанда һәм башҡа көн тәртибенә ярашлы эшмәкәрлектә һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелеү өлгөһөн биреп, уларҙы ишетеп, ҡабатлап әйтә белеү һәләтен үҫтереү. Бармаҡ уйындарының һүҙҙәрен әйтеп уйнарға өйрәтеү.

Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү. Исемдәрҙе алмаш менән алмаштырырға өйрәтеп, телмәрҙә ҡулланыу үрнәктәре биреү. Ябай ғына һорауҙар бирергә өйрәтеү, уларҙы тауыш менән күрһәтә белеү. Телмәрҙә предметтарҙың торошон билдәләгән һүҙҙәрҙе ҡуллана белеү күнекмәләре үткәреү.

Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Ололарҙың һорауын аңлап, яуап бирергә өйрәтеү. Бәләкәй генә дидактик хикәйәләрҙе күргәҙмәлелекһеҙ аңларға өйрәтеү. «Был нимә?», «Был кем?», «Нимә эшләй?» һорауҙарына яуап бирергә өйрәтеү.

Ҡатмарлыраҡ булған «Кем нимә кейгән?», «Кемгә бирә?», «Ҡайҙа?», «Ҡайсан?», һорауҙарының мәғәнәһенә төшөндөрөү.

Ике йәш ярымлыҡ балаларҙың үҙ-аллы йәки тәрбиәсе тәҡдиме буйынса уйынсыҡ тураһында йәки һүрәт буйынса һөйләргә маташыуын хуплау.

Диалог формаһында һөйләшеү өлгөләре биреп, уларҙы бала телмәрендә ҡулланырға өйрәтеү. Ябай ғына фразаларҙы ҡабатлатып, хәтерҙә ҡалдырырға тырышыу. Ике йәш ярымлыҡ балаларҙан ҡурсаҡтар ярҙамында бәләкәй генә әҫәр өҙөктәрен уйнатып, телмәр өлгөләрен хәтерҙә ҡалдырыу.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Телмәр үҫтереүсе мөхит. Телмәр үҫешенә тәьҫир итеүсе мөхит булдырыу өҫтөндәге эште дауам итеү: балаларҙы тиҫтерҙәре һәм уларға таныш ололар менән төрлө йомоштар аша аралашыуҙы үҫтереү (һора, әйт, ярҙам ит, рәхмәт әйт һ.б.)

«Ҡарағыҙ әле, беҙгә кем килгән?», «Был кемдең ҡурсағы?», «Уйынсыҡтар ҡайҙа, кем таба?» һ.б.

Уйнағанда үҙ-ара килешеп, бер-береһен ҡыйырһытыу, рәнйетеү осраҡтары килеп сыҡмаһын өсөн алдан өйрәтелгән телмәр үрнәктәрен ҡулланырға өйрәтеү: «Саматҡа ярҙам ит? », «Кирбесте машинаға икәүләп һалығыҙ?», «Һин ҙур, аҡыллы малай, улай эшләмә?» һ.б.

Үҙ-аллылыҡ үҫтереү һәм аҡыл-зиһен кимәлен үҫтереү маҡсатында балаларға китаптар, һүрәттәр ҡарарға, төрлө тәбиғи предметтар (таш, ҡабырсаҡ, сәтләүек, ағас ҡайрылары, кипкән япраҡтар һ.б.) менән үҙ-аллы уйнау мөмкинлеген тыуҙырыу.

Балаларға аңлайышлы, фәһемле, уларға ҡыҙыҡ булған әкиәттәр уҡыу, саф һауала йөрөгәндә күҙәтеүҙәр ойоштороу, улар тураһында бергәләп һөйләшеү һ.б.

Һүҙлек эше. Өҫ, аяҡ, баш кейемдәрен, һауыт-һабаны, бүлмә йыһаздарын, транспорт төрҙәрен аңлатҡан һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә һәм тәғәйенләнешенә төшөндөрөүҙе дауам итеү.

Предметтарҙың өлөштәрен айыра һәм әйтә белергә өйрәтеү (мәҫәлән, күлдәктең еңе, яғаһы, кеҫәһе, төймәләре, итәге бар), сифаттарын (төҫ һәм уның сағылыштары, формаһы, дәүмәле); тышҡы яҡтан үҙенсәлектәре (шыма, йомшаҡ, ҡытыршы һ.б.); ҡайһы бер материалдар һәм уларҙың сифаттары тураһында төшөнсәләр биреү (ҡағыҙ йыртыла, һыулана; быяла ярыла; резина әйберҙәр ҡыҫыла, ебәрһәң – яңынан элекке формаһын ала); урынлашҡан урынын аңлатҡан һүҙҙәр (тәҙрә артында; өҫтәл өҫтөндә; юғары, бейек, алыҫ, карауат аҫтында һ.б.).

Балалар иғтибарын ҡайһы бер предметтың ҡулланыу буйынса оҡшаш булыуҙарына йәлеп итеү: *тәрилкә, сынаяҡ аҫты, сеүәтә һ.б.* – ашау өсөн кәрәкле әйберҙәр; *ултырғыс, диван, эскәмйә* – ултырыу өсөн кәрәкле йыһаздар һ.б.

Дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙе әйтергә һәм уларҙың мәғәнәһенә төшөнөргә өйрәтеү: *кейем-һалым, һауыт-һаба, йорт йыһаздары, емеш-еләк, йәшелсәләр, ҡоштар һ.б.*

Тәүлек өлөштәрен әйтергә өйрәтеү: *иртәнсәк (иртән), көндөҙ (төш), кис, төн.*

Тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап йорт хайуандарын һәм уларҙың балаларын айырырға, әйтергә өйрәтеү.

Күҙ ҡарашы менән йәшелсәләрҙе һәм емеш-еләкте таный һәм атамаһын әйтә белергә өйрәтеү.

Өндәр өҫтөндә эш.

Башҡорт теленең бөтә һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрен дә дөрөҫ әйтергә өйрәтеү.

Өндәр әйтелешендәге кәмселектәрҙе асыҡлау. Һәр бала менән айырым эш алып барыу.

Тын, һулыш менән идара итә белергә өйрәтеү. Фонематик ишетеү һәләтлеген үҫтереүгә күнекмәләр үткәреү.

Ҡ-к, ғ-г, ҙ-з, ҫ-с, һ-ф, һ-х, а-ә, у-ү, о-ө өндәренең айырмаһын ишетә, дөрөҫ итеп әйтә белергә күнектереү.

Телмәр тасуирлығын (баҫым, тауыш тембры, темпы, көсө) тәрбиәләү.

Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү.

Телмәрҙә исемдәрҙе һәм ҡылымдарҙы (терминды әйтмәйенсә) берлектә һәм күплектә ҡуллана белергә өйрәтеү.

Исемдәрҙе алмаштар менән алыштырып һөйләргә күнектереү. Эйәлек заты ялғауын дөрөҫ ҡулланырға, бирелгән һорауҙарға тулы яуап бирергә күнектереү.

Ябай һөйләмдәргә тултырыусы, аныҡлаусы һәм хәлде, урынды белдереүсе һүҙҙәр индереп һөйләргә тырышыуҙы хуплау, һөйләм өлгөләре биреп, уларҙы хәтерҙә ҡалдыртырға өйрәтеү.

Төрлө һүҙҙәр уйлап табып, уларҙы рифмаға һалыуҙы ҡеүәтләү.

Бәйләнешле телмәр үҫтереү.

Һөйләмдә һүҙҙәрҙе бер-береһенә бәйләп, килеш ялғауҙарын дөрөҫ ҡулланып, уй-фекерҙе эҙмә-эҙлекле, йөкмәткеле итеп һөйләргә өйрәтеү.

Балалар тормошонан ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы һөйләү. Уйындар уйнағанда ябай ғына һөйләмдәр төҙөү, ҡапма-ҡаршы һөйләшеүҙәр ойоштороу.

Бала телмәрендәге «ижади асыштар»ҙы хуплау. Шиғырҙар ятлатыу, әкиәтте ҡабатлатып һөйләтеү, йомаҡтар ҡойоу.

Китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Сәхнәләштерелгән уйындарға ылыҡтырып, тасуири һөйләү мәҙәниәтен үҫтереү.

Үҙ ғаиләһе тураһында һөйләргә өйрәтеү.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Телмәр үҫтереүсе мөхит. Тирә-йүндәге күренештәрҙе, предметтарҙы өйрәнеүҙе, үҙләштереүҙе тәрәнәйтеү аша балаларҙың һүҙ байлығын арттырыу.

Телмәр үҫтереүгә ярҙам итеүсе шарттар булдырыу: төркөмдә китапхана мөйөшө ойоштороу; өҫтәлмә мәғлүмәттәр алырлыҡ төрлө ҡыҙыҡлы әйберҙәр (глобус, карталар, ер шарындағы төрлө хайуандар, йәнлектәр, үҫемлектәр, бөжәктәр, транспорт төрҙәре, тәбиғәт ҡомартҡылары һүрәтләнгә фотолар, журналдар, төрлө халыҡтың милли кейемдәре, эш ҡоралдары, һүрәттәр менән биҙәлгән һүҙлектәр, белешмәләр йыйынтығы һ.б.) урынлаштырылған мөйөш; тикшереү-эксперимент үткәреү мөйөшө ойоштороу.

Аралашҡанда бер-береһе менән ыңғай мөнәсәбәттә булырға өйрәтеү, «тылсымлы һүҙҙәр»ҙе ҡулланырға күнектереү.

Баланы ҡыҙыҡһындырған күренештәрҙең айышына төшөнөргә, төрлө һорауҙарын яуапһыҙ ҡалдырмаҫҡа тырышып, ярҙам итеү.

Һүҙлек эше. Һүҙлеккә яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр индереү (исем, сифат, ҡылым, рәүеш, алмаш, һан һ.б.).

Һүрәттән һәм ысынбарлыҡтан кейем-һалым (күлдәк, бүрек, яулыҡ, түбәтәй һ.б.), уйынсыҡ (ҡурсаҡ, айыуҡай, ат, туп, бесәй, ҡуян, һ.б.), һаут-һаба (сәйнүк, сынаяҡ, ҡалаҡ, тәрилкә, самауыр һ.б.), йәшелсә (ҡыяр, кишер, һуған һ.б.), еләк-емеш (алма, сейә, еләк һ.б.), бүлмә йыһаздары-өҫтәл, ултырғыс, карауат, һике һ.б.; ауыл, ҡала йорттары айырмаһын (ҙур, бейек һ.б.);

ғаилә ағзалары һәм яҡын кешеләренең (атай, әсәй, ҡусты, һеңле, апай, ағай, олатай, өләсәй, ҡартатай) нисек аталыуын;

кеше кәүҙәһе өлөштәре (кеше, ҡул, аяҡ, баш, бармаҡтар);

предметтарҙың сифаттары: төҫтәре (ҡыҙыл, күк, йәшел, аҡ, ҡара); сифаты, дәүмәле (ҙур, бәләкәй, бейек, тәпәш, таҙа, бысыраҡ); миҡдары (әҙ, күп, әҙерәк, күберәк); бер, ике, өс һандары төшөнсәләрен;

көнкүреш һөм уйын хәрәкәттәрен аңлаткан (йыу(-а, -алар, -ҙы, -ына), аша (-а, -й, -ҙар), эс (-ә, -ләр), кей (-ә, -ен, -әләр) сис (-ә, -енә, -ендек, -енделәр), йоҡлай, йөрөй, ултыра, атлай, ята, кил, баҫ, бир, мә, ал, тор, алып бир, һәм башҡа хәҙерге һәм үткән заман ҡылымдары, уларға күплек ялғауҙары ҡушыуҙы: (йыуҙы (-лар), ашаны (-лар);

балаларҙың үҙ-үҙҙәрен нисек тотарға кәрәклеген аңлата торған һүҙҙәр: ярай, ярамай, кәрәк, кәрәкмәй, яҡшы, насар, теймә, ташла, алма, тапама, түкмә һәм башҡалар;

предметтың урынын билдәләй белеү *(уңда, һулда, арала, эргәлә, янында, тегендә, бында*); тәүлек ваҡытын *(иртә, кис, төш, төн, кис, таң);*кешенең кәйеф торошон билдәләүсе *(асыулы, күңелһеҙ, шат, бойоҡ);* һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөндөрөү;

телмәрҙә предметтарҙың өлөшөн, сифатын, ниндәй материалдан эшләнгәнде аңлатҡан һүҙҙәрҙе, кеше һөнәрҙәре һәм улар башҡарған эш-хәрәкәтте аңлатыусы һүҙҙәрҙе ҡулланырға өйрәтеү;

Телмәрҙә дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙән һуң тиң киҫәктәрҙе теҙә белеү (мал-тыуар: *һарыҡ, кәзә, ат, һыйыр, тана, үгеҙ, быҙау, бейә, айғыр, ҡолон* һ.б.; кейем-һалым: *башлыҡ, бүрек, кәпәс, ҡолаҡсын, шәл, яулыҡ, пальто, тун, быйма, итек, калуш, бейәләй һ.б.).*

Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә ҡулланырға өйрәтеү: *йыуан-нәҙек, таҙа-бысраҡ, төҙ-ҡыйыш, ҡаты-йомшаҡ.*

Бер үк төрлө әйтелгән, ләкин төрлө мәғәнә аңлатҡан һүҙҙәр менән таныштырыу: *май, баҫма, тартма, ҡала.*

Өндәр өҫтөндә эш.

Башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү өҫтөндә даими эш алып барыу. Өндәр әйтелеше ирен, тел һәм тештәрҙең торошона бәйле булыуын аңлатыу һәм күрһәтеү.

Башҡорт теленең үҙенсәлекле һуҙынҡы (ә, ө, ү) һәм тартынҡы (ç, һ, ҙ, ғ ,ң, ҡ) өндәрен дөрөҫ әйтергә күнегеүҙәр үткәреү.

Кескәйҙәрҙең телмәр аппаратын (ирендәр, тештәр, тел, тамаҡ) төрлө позицияларға ҡуйып, күнегеүҙәр үткәреү, уларҙы дөрөҫ итеп тын алырға өйрәтеү, тынды кәрәгенсә сығара белергә өйрәтеү.

Тауыш менән идара итә белергә өйрәтеү.

Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылыарҙың айырмаһын ишетә, айыра белеүҙе, уларҙың әйтелешен үҙләштереүҙе нығытыу. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең әйтелешен нығытыу. Өндөң һүҙҙә урынын билдәләргә өйрәтеү (башында, аҙағында).

Рус теленән ингән *ц, ч, ш, щ* өндәренең әйтелешен үҙләштереү һәм нығытыу.

Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү.

Эйәлек заты ялғауын дөрөҫ ҡулланыуҙы үҙләштереү: минең әсәйем (ҡурсағым, ҡалағым, бармағым һ.б.).

Ҡыҙыл туп, татыу ғаилә, тәпәш тәрилкә, һ.б. ошоларға оҡшаш һүҙбәйләнештәрҙә исемдәрҙең сифатын аңлаткан һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәтеү.

Эйә менән хәбәрҙе яраштыра белеү: мин уйнайым, ашайым, ҡоям, бирәм һ.б. Мин әсәйемде яратам (атайымды, ағайымды, өләсәйемде, ҡурсағымды, бесәйемде һ.б.)

Күплек ялғауҙарының яңғырашына һәм дөрөҫ ҡулланышына иғтибар йүнәлтеү.

Ябай ғына һүҙъяһалыш ысулдары менән таныштырыу: ҡурай - ҡурай – сы (һүҙ яһаусы ялғау ярҙамында); билбау, Аҡъяр (һүҙҙәрҙе ҡушып; матур-матур (һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән).

Бәйләнешле телмәр үҫтереү.

Балаларҙы ябай һәм ҡушма һөйләмдәр ярҙамында әйтелгән үтенестәрҙе аңларға һәм үтәргә өйрәтеү: *Зифаға ҡурсағыңды биреп тор, уның да уйнағыһы килә. Гүзәлгә ярҙам ит, ул бәләкәй генә әле.*

«Мин, һин, беҙ, һеҙ, ул, улар» алмаштарының һәм «Унда, бында, аҫта, өҫтә» рәүештәренең мәғнәләрен аңлы рәүештә һөйләмдә ҡуллана белергә өйрәтеү.

Балаларҙы уларҙың үҙҙәре күҙәткән, күргән ваҡиғалар хаҡында һәм шулай уҡ сюжетлы һүрәттәр буйынса өлкәндәрҙең хеҙмәте тураһында ябай ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү.

Телмәрҙә 3-4 һүҙле һөйләмдәр ҡуллана, алмаштар, сифаттар, рәүештәр һәм һандар индереп, һөйләмдәр төҙөй белергә өйрәтеү.

Диалогик телмәр үҫтереү өҫтөндә даими рәүештә эш алып барыу.

Уйынсыҡтар менән бер-ике күренештән торған кескәй генә әҫәрҙе, йә уның өҙөгөн уйнарға өйрәтеү.

Балаларҙы нәфис әҙәбиәт һәм ауыҙ-тел ижады өлгөләре менән таныштырыу.

Уйынсыҡтар йәки һүрәттәр ярҙамында еңел аңлашыла торған, бәләкәй күләмле хикәйәләрҙе, шиғырҙарҙы, әкиәттәрҙе тыңларға һәм уларҙың йөкмәткеһен аңларға күнектереү, яттан һөйләргә өйрәтеү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Телмәр үҫтереүсе мөхит. Аралашыу аша телмәр үҫтереүгә булышлыҡ итеү. Ололар һәм тиңдәштәре менән аралашыу-һөйләшеү мөмкинлеге тыуҙырыу өсөн балаларға төрлө эштәр ҡушыу: («Сисенеү бүлмәһенә сығып ҡара әле, кем килгән», «Апайҙан һора һәм миңә һөйлә! », «Таһирға нимә тип әйттең?. Ул һиңә нимә тип яуап бирҙе? ».

Баланың тәрбиәселәр менән үҙенең күргәне, уҡығаны, кемдер менән бергә аралашҡандағы тәъҫораттары тураһында әңгәмәләшергә теләүен хуплау.

Телмәр үҫтереү маҡсатында балаларға башҡорт халҡының кәсептәре (бал ҡорто, йылҡы малы һ.б. үрсетеү); биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәре эшләү (мамыҡ шәл бәйләү; нағыш сигеү; ҡашмау, селтәр һ.б. тегеү, көмөштән алҡа, беләҙек, балдаҡ сүкеү); милли аштар төрө (ҡымыҙ, ҡорот, ҡатыҡ, сәк-сәк, бауырһаҡ һ.б.) милли кейем төрҙәре (сарыҡ, камзул, елән һ.б.), музыка ҡоралдары (ҡурай, ҡумыҙ, думбыра) менән таныштырыу.

Баланың телмәрен байытыуға Башҡортостан һәм Рәсәй тарихындағы иҫтәлекле ваҡиғалар (Башҡортостандың Рәсәйгә үҙ-аллы ҡушылыуы, 1812 йылда, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышында бергәләп күрһәткән батырлыҡтары һ.б.), «Урал батыр» эпосында һүрәтләнгән күренештәр, республика сәнәғәтенең үҫеше (нефть табыусы һәм эшкәртеүсе заводтар, файҙалы ҡаҙылмалар табыу, ауыл хужалығындағы уңыштар, мәҙәниәт өлкәһендәге ҡаҙаныштар һ.б. мәғлүмәттәр менән таныштырыу ярҙам итә. Тыуған ерҙең тәбиғәте, халҡының йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, йыр-бейеүҙәре, ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре һ.б. был юҫыҡта әүҙем ҡулланылырға тейеш.

Балаларға күргәҙмә материал булараҡ ололар һәм үҙ-ара аралашыу өсөн үҙ-аллы өйрәнергә китаптар, һүрәттәр, уйынсыҡтар тәҡдим итеү.

Балаларға ҡыҙыҡлы ваҡиғалар һөйләү (мәҫәлән, йорт хайуандарының ҡылыҡтары тураһында кешеләрҙең һәм хайуандарҙың хәл-торошон аңлатҡан һүрәттәр күрһәтеү (шатлана, моңһоулана һ.б.).

Һүҙлек эше. Тирә-йүндәге өйберҙәр, ваҡиғалар һәм күренештәр тураһында төшөнсәләр биреү аша балаларҙың һүҙ байлығын арттырыуҙы һәм әүҙемләштереүҙе дауам итеү.

Әйберҙәрҙең ҡайҙа, нисек урынлашыуын (артында, алдында, юғарыла, түбәндә, аҫта, өҫтә, уңда, һулда), тәүлектең ҡайһы ваҡыты булыуын (иртә, кис, көндөҙ, төнөн), кешеләрҙең хәлен (шатланыу, ҡыуаныу, үпкәләү) белдерә торған һүҙҙәрҙе әйтә һәм һөйләшкәндә ҡуллана белеү.

Предмет өлөштәренең исемдәрен әйтеп, уларҙың үҙенсәлеген белдерә торған сифаттарҙы, рәүештәрҙе һәм ялғауҙарҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү. Үҫемлектәр, ҡоштар, емештәр, иген кеүек дөйөм төшөнсә белдерә торған һүҙҙәрҙе аңларға һәм һөйләмдә ҡулланырға өйрәтеү.

Балаларҙың һүҙлеген *ташсы, тракторсы, табиб, таусы, осоусы, малсы, уҡытыусы, кейем тегеүсе* һөнәрҙәрен аңлата торған һүҙҙәр; *һыуытҡыс, саңһурғыс, үтек, компьютер, кеҫә телефоны, кер йыуғыс, ит турағыс, ҡар таҙартҡыс* кеүек көнкүреш техникаһы исемдәре; көрән, *зәңгәр, яҡты, ҡараңғы, әсе, шифалы, күңелһеҙ, йомшаҡ* кеүек сифаттар; *уңған, оҫта, батыр* кеүек рәүештәр; кешенең эш-хәрәкәтен, хеҙмәт эшмәкәрлеген белдерә торған ҡылымдар иҫәбенә байытыу һәм ҡулланыуға индереү.

Мәғәнәһе яғынан бер булған (синоним) һүҙҙәрҙе ҡулланыу буйынса күнегеүҙәр үткәреү, ябай ғына кроссвордтар сисеү.

Һүҙ яһаусы ялғауҙарҙы, күплек ялғауҙарын, дөйөмләштереүсе һәм ҡушма һүҙҙәрҙе, алмаш, һандарҙы телмәрҙә урынлы ҡулланырға өйрәтеү.

Өндәр өҫтөндә эш. Балаларҙың артикуляция аппаратын нығытыу, фонематик ишетеү һәләттәрен үҫтереү, өндәрҙе дөрөҫ әйтеү йүнәлешендә элек башланған эштәрҙе дауам итеү.

Теге йәки был өндөң яһалышында ҡатнаша торған телмәр органдары тураһында төшөнсә биреү. Һүҙҙәрҙәге айырым өндәргә баҫым яһатып, уларҙы асыҡ һәм дөрөҫ әйттереү күнекмәләре булдырыу (*ааа-т, а-ттт, ббб-ал, бааа-л, ба-ллл*).

Өндәрҙе һәм һүҙҙәрҙе, шул һүҙҙәр ингән һөйләмдәрҙе, балаларҙың асыҡ тауыш менән дөрөҫ итеп әйтә белеүҙәренә өлгәшеү. Балаларҙың үткән йылдарҙа (төркөмдәрҙә) өйрәнгән һуҙынҡыларҙы һәм тартынҡыларҙы дөрөҫ итеп әйтә һәм уларҙы бер-береһенән айыра белеүҙәренә өлгәшеү.

Өндәрҙең һүҙ яһауҙағы әһәмиәтен асыҡ миҫалдар аша төшөндөрөү.

Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү. «Ҡайсан?», «Нисәнсе?», «Был нимәнән эшләнгән?», «-мы, -ме, -мо, -мө» һорау киҫәксәләрен ҡушып, һорау бирә белеү.

«Ошо, шул, теге, был» күрһәтеү алмаштарын, рәт һандарын (беренсе, икенсе) ҡуллана белеү.

Һүҙҙәргә күплек (-лар, -ләр, -тар, -тәр, -дар, -дәр, ҙар, -ҙәр) һәм эйәлек заты һәм килеш ялғауҙарын ҡушырға (әсәйем, атайым, ҡурсағым һ.б.), сифат һәм ҡылымдар менән яраштырып, һөйләмдәр төҙөү;

ҡылымдарҙың хәҙерге, үткән, киләсә заман формаларын дөрөҫ ҡулланырға өйрәтә башлау (ашай, ашаны, ашар);

тәрбиәсе үрнәге буйынса тамырҙаш һүҙҙәр төҙә белеү; *ҡояш - ҡояшҡай, ҡояшлы; тау-тауҙар, таулы, тауҡай;*

һүҙъяһалыштың төрлө ысулдары менән таныштырыу. Ижад итеү мөмкинлеген биреү һәм хуплау.

Балаларҙы өлгө буйынса ябай һөйләмдәр төҙөргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Балаларҙың диалогик һәм монологик телмәрен үҫтереүҙе дауам итеү: уларҙың әңгәмәгә ҡатнаша белеүҙәренә ирешеү, бер-береһенә һорауҙар бирҙертеү, шул һорауҙарға яуап ҡайтара белергә өйрәтеү. Яуап ҡайтарғанда, һүҙҙәрҙе асыҡ һәм башҡалар аңларлыҡ итеп, тамамланған һөйләмдәр менән әйтергә күнектереү.

Ябай һәм ҡушма һөйләмдәр төҙөп, һөйләргә өйрәтеү. Ҡыҙыҡлы әңгәмәләргә йәлеп итеп, балаларҙың ижад итеү һәләте үҫешенә булышлыҡ итеү.

План йәки өлгө буйынса үҙ-аллы берәй предмет тураһында яңы ишеткән һәм уҡылған бәләкәй күләмле хикәйәне, йә әкиәтте эҙмә-эҙлекле һәм тасуири һөйләй белергә өйрәтеү. Һүрәт буйынса хикәйәләр, әкиәттәр төҙөү. Телмәрҙә тура һәм ситләтелгән телмәрҙе ҡулланыу.

Кескәй күләмле әҫәрҙәрҙе сәхнәләштергәндә тура һәм ситләтелгән телмәр ҡуллана белергә өйрәтеү.

Әҙәби һәм халыҡ ижады әҫәрҙәрен уҡыу. Китапҡа ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү тәрбиәләү.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Телмәр үҫтереүсе мөхит. Телмәр саралары аша һөйләшеүҙе, аралашыуҙы үҫтереүҙе дауам итеү. Балаларға тирә-яҡ донъяның күп төрлө булыуы тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү.

Халыҡ кәсептәре әйберҙәре, мини-коллекциялар (төрлө материалдарҙан эшләнгән открыткалар, маркалар, тәңкәләр, уйынсыҡтар йыйылмаһы), иллюстрациялы китаптар (төрлө рәссамдар төшөрөүендәге әкиәттәр һүрәттәре), электрон аң-белем биреү саралары аша башҡорт телендәге видеояҙмалар, роликтар, йырҙар, спектаклдәр ҡарау һ.б. аша башҡортса һөйләшеү, аралашыу телмәрен үҫтереү.

Башҡортостандың, тыуған яҡтың (ҡаланың/ауылдың) иҫтәлекле урындарын сағылдырған фотолар, презентациялар, альбомдар; Өфөнөң, Мәскәүҙең элекке тормошон сағылдырған картиналар, һүрәттәр, музей экспонаттары менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

Баланың төрлө информация сығанаҡтарынан алған тәьҫораттары (телетапшырыу, яҡындарының һөйләүе, күргәҙмәләргә барып, балалар өсөн ҡуйылған спектаклдәр ҡарап), улар тураһында ябай ғына кимәлдә үҙ фекерен әйтергә өйрәтеү.

Көндәлек тормошта, уйнағанда балаларҙың бер-береһенә ҡарата яғымлы мөнәсәбәттә булырға өйрәтеү (ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү, хуплау әйтеү).

Балаларҙы төрлө бәхәстәрҙе, конфликтлы моменттарҙы дәлилләп, аңлатып сисергә өйрәтеү.

Яңы һүҙҙәр үҙләштереп, телмәрҙе байытыу.

Һүҙлек эше. Тирә-йүнде күҙәтеү аша кейем-һалым (көҙгө, яҙғы, ҡышҡы, йәйге кейемдәр), кешеләрҙең өйҙәге көндәлек эштәре (мал ҡарау, аш-һыу әҙерләү, өй йыйыштырыу), өлкәндәрҙең баҡсауҙа, фермала, заводта, фабрикала башҡарған хеҙмәттәре атамаларын, сифатын, эш-хәрәкәтен, эшләү рәүешен аңлатҡан һүҙ-төшөнсәләрҙе дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү.

«Ҡыш», «Яҙ», «Йәй», «Көҙ» темаларына үткәрелгән күҙәтеүҙәр балаға миҙгелдең төп билдәләрен белдергән һүҙҙәрҙе төшөнергә һәм ҡулланырға ярҙам итә.

Телмәрҙә (терминдың үҙе менән таныштырмайынса) бер үк мәғәнәле һүҙҙәр-синонимдар (яғымлы, һөйкөмлө) менән, шулай уҡ дөйөм төшөнсә белдергән һүҙҙәрҙе үҙ телмәрендә ҡуллана белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Балалар телмәренә антонимдар (ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр) индереү: ҡараңғы-яҡты, тәпәш-бейек; эшсән, тырыш, уңған.

Һүҙъяһалыш ысулдары менән таныштырыуҙы дауам итеү: һүҙҙәрҙе ҡушып – билбау, ҡулъяулыҡ; һүҙ яһаусы ялғауҙар ярҙамында – ташсы, уҡыусы, ҡайынлыҡ.

Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен тәрбиәләү. Фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү, телмәр аппаратын формалаштырыу йүнәлешендә даими эшләү. Өндәр әйтелешен нығытыу буйынса күнегеүҙәр үткәреү. Башҡорт теленең барлыҡ һуҙынҡыларын, бигрәк тә ышҡыулы [ж, ш, щ, х, в, ф, ҙ, ҫ, һ, й, уа], ҡуш [ц, ч] тартынҡыларҙы дөрөҫ әйтергә иғтибар биреү. Шулай уҡ [с-з], [с-ц], [ш-ж], [ч-ц], [с-ш], [ж-з], [к-ҡ], [л-р] һәм шуның кеүек йыш ҡына бутап әйтелә торған өндәрҙе айыра белергә өйрәтеү, уларҙы аҫыҡ, дөрөҫ итеп әйтә алыуҙарына ирешеү.

Фонематик ишетеү һәләтен камиллаштырыу: балаларҙы билдәле өнгә һүҙ таба белергә, ошо өн булған һүҙҙе һөйләмдән айырып ала белергә һәм һүҙҙә ул өндөң урынын (һүҙҙең башында, уртаһында, аҙағында) билдәләй белергә өйрәтеү.

Өндәргә ябай ғына анализ биреү: һуҙынҡы өндәр һуҙылып әйтелә, уларҙы йырлап була; тартынҡы өндәр ҡаршылыҡ аша әйтеләләр.

Телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү. Балаларҙы һөйләмдә эйә менән хәбәрҙәре һәм һөйләмдең башҡа киҫәктәрен яраштырып һөйләргә, берлек һандағы һүҙҙәрҙе күплек формаһына әйләндерә белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Исемдәрҙе алмаштар менән алмаштырыу буйынса күнегеүҙәр үткәреү: Сания ҡалаҡ йыуа. Ул - ярҙамсы.

Балаларҙың һөйләмдәге һәр һүҙҙе үҙ урынына ҡуйып, ялғауҙарҙы дөрөҫ ялғап һөйләй белергә өйрәтеү.

Телмәрҙә ябай һәм ҡушма һөйләмдәр ҡулланырға өйрәтеүҙе дауам итеү.

Әкиәттәрҙе ролдәргә бүлеп һөйләгәндә геройҙарҙың кисерештәренә бәйле рәүештә интонацияны үҙгәртеп, кәрәкле урында пауза яһап һөйләшергә өйрәтеү.

Бәйләнешле телмәр үçтереү. Диалогик һәм монологик телмәр формаларын камиллаштырыу. Һорауҙарға тулы, һәр кем ишетерлек һәм аңларлыҡ итеп, һорауҙарҙы ҡабатлатмайынса, яуап бирергә күнектереү эшен дауам итеү. Балаларҙың үҙҙәренең дә һорау бирә белеү күнекмәләрн нығытыу; телмәр, үҙ-ара аралашыу мәҙәниәтен тәрбиәләү.

Балаларҙы бәләкәй күләмле хикәйә һәм әкиәттәрҙе тәрбиәсе һорауҙарынан башҡа бәйләнешле, эҙмә-эҙлекле һәм тасуири итеп һөйләргә өйрәтеү.

Балаларҙы билдәле бер әйбер тураһында йәки сюжетлы һүрәттәргә ҡарап, тәрбиәсе өлгөһөндә йәки сюжетлы һүрәттәргә ҡарап, тәрбиәсе өлгөһөндә йәки бирелгән план һәм схема-модель нигеҙендә бәләкәй генә хикәйәләр төҙөп һөйләргә, иптәшенә йәки тәрбиәсегә фекерен үҙ һүҙҙәре менән әйтеп бирергә күнектереү.

Баланы үҙ кисерештәрен, хистәрен кәрәкле һүҙҙәр менән һөйләп бирергә өйрәтеү.

Грамотаға өйрәтеү. Һөйләм тураһында ябай төшөнсә биреү (грамматик билдә бирмәйенсә). Ике-өс һүҙҙән торған һөйләмдәр төҙөп, уларҙы һүҙҙәргә бүлеү. Һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеү. Ижектәрҙән һүҙҙәр төҙөү. Ижектәрҙең һәм һүҙҙәрҙең тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙән тороуон төшөндөрөү.

Ике һәм өс һүҙҙән торған һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөргә һәм ошо схемаларҙы ҡулланып, һөйләм төҙөргә өйрәтеү.

Өндәрҙең билдәһе булған киçмә хәрефтәр менән таныштыра башлау.

НӘФИС ӘҘӘБИӘТ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Кескәйҙәрҙе башҡорт халҡының һәм башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады, яҙыусылар әçәрҙәре менән таныштырыу. Әçәр уҡыуҙы төрлө уйынсыҡтар, һүрәттәр, театрҙың төрлө төрҙәрен (өçтәл, алъяпҡыс, күләгә, бармаҡ һ.б. театры) ҡулланып, күргәҙмәлелек аша башҡарыу.

Ҡайһы бер поэтик әçәрҙәрҙе бергәләп уйнап башҡарыу. Шиғырҙың һүҙҙәрен, ябай фразаларҙы балаларҙың үҙҙәренә әйтеп бөтөрөү мөмкинлеген биреү. Шиғырҙарҙы балалар менән бергәләп һөйләү.

Балаларҙы сағыу һүрәтле китаптарҙы бергәләп ҡарарға күнектереү, таныш персонаждарҙың исемдәрен әйттереү, һорауҙарға яуаптар бирҙертеү.

Ябай ғына сюжетлы һүрәттәр эстәлеген балаларға һөйләп ишеттереү. Балаларға яҡшы таныш булған әкиәттәрҙе сәхнәләштереү.

Әçәр геройҙарының эш-хәрәкәттәрен ҡабатлап, балаларҙың үҙҙәренән уларҙы башҡарыуын ойоштороу.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Балаларға таныш булған һәм улар яратҡан әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыу.

Яңы әҫәрҙәрҙе уҡып, эстәлеге буйынса әңгәмәләшеп, ундағы персонаждар менән бергә шатланырға, ҡыуанырға өйрәтеү, уларҙың насар ҡылыҡтарына кире ҡараш тәрбиәләү.

Әҫәр өҙөктәрен ҡат-ҡат уҡып, һөйләмдәрҙе бергә ҡабатлау, йә балаларҙың үҙҙәренән әйтеп бөтөртөү.

Тәрбиәсе күрһәтеүе һәм өйрәтеүе буйынса бәләкәй генә әҫәр өҙөктәрен сәхнәләштереп уйнау.

Яттан һамаҡтарҙы, ҡыҫҡа күләмле шиғырҙарҙы һөйләү.

Китаптарҙың һүрәттәрен бергәләп ҡарау. Һүрәт буйынса әҫәрҙең эстәлеген иҫкә төшөрөү, 2-3 һөйләм менән һөйләргә өйрәтеү.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Балаларҙы уҡыған әҫәрҙе иғтибар менән тыңларға, уның эстәлегенә төшөнөргә, сюжетҡа ҡарап, үҙенең хис-тойғоларын һүҙҙәр ярҙамында аңлата белергә өйрәтеү.

Әҫәрҙең ҡыҙыҡлы урындарынан өҙөктәрҙе һайлап алып, уларҙы ҡат-ҡат уҡып сығыу, балаларҙың үҙҙәренән уның йөкмәткеһен ҡабатлап һөйләтеү.

Һүҙҙәрҙең матур әйтелешенә, уларҙың аңлатҡан мәғәнәһенең тәрәнлегенә балаларҙың иғтибарын йәлеп итеү.

Китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙе дауам итеү, таныш әҫәрҙәр эстәлегенең һүрәттәр аша асылышын төшөндөрөү. Китап ҡарағанда уны биҙәгән рәссамдар менән таныштырыу.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Нәфис әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙе дауам итеү. Әкиәттәрҙең, хикәйәләрҙең, шиғырҙарҙың эстәлегенә төшөнөргә, уларға ҡарата хис-тойғоларҙы сағылдыра белергә өйрәтеү. Әҫәр персонаждарының холоҡ-фиғеленә, башҡарған эштәренә үҙ фекерен әйтә белергә өйрәтеү, уларҙың ниндәй маҡсатта тегеләй, йә былай эш итеүенә төшөндөрөү.

Әҫәрҙәге һүҙ матурлығына иғтибар биреү, жанр төрҙәрен айыра белеү һәләтен үҫтереү (әкиәт, хикәйә, шиғыр, йомаҡ, мәҡәл).

Шиғырҙарҙы тасуири һөйләргә, сәхнәләштерелгән әҫәрҙе башҡарғанда тауыш менән идара итергә өйрәтеү.

Китап биҙәктәренә, һүрәттәренә баланың иғтибарын йәлеп итеү. Рәссамдар тураһында мәғлүмәттәр биреү, бер үк әҫәрҙең төрлө рәссамдар тарафынан биҙәлгән

өлгөләрен сағыштырыу. Балаларҙың үҙҙәренә лә уҡылған әҫәр буйынса һүрәттәр төшөрөргә тәҡдим итеү.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Нәфис әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү. Әҫәр геройҙары менән бергәләп шатланыу, ҡайғырыу, борсолоу, ҡыуаныу тойғолары кисереү һәләтен тәрбиәләү.

Әҙәби әҫәрҙәге төрлө һүрәтләү сараларына балаларҙың иғтибарын йәлеп итеү.

Яттан шиғыр һөйләгәндә, әҫәрҙәрҙе сәхнәләштергәндә тауыш, ым-ишара, бит мускулдары менән әҫәргә үҙ ҡарашын сағылдырып, күрһәтә белергә өйрәтеү.

Әҙәби жанрҙар тураһында төшөнсәләр биреү: әкиәт, хикәйә, ҡобайыр, һамаҡ, шиғыр, йомаҡ, мәҡәл.

«ХУДОЖЕСТВОЛЫ-ЭСТЕТИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

Донъялағы тәбиғәт күренештәре матурлығын, кешеләр араһындағы яҡшы мөнәсәбәттәрҙе дөрөҫ ҡабул итә һәм баһалай белеү нигеҙҙәре ғүмерҙең тәүге йылдарында – бала саҡта формалаша.

Балаларҙың төрлө сәнғәт әҫәрҙәре (һөйләү, йыр-моң, һынлы сәнғәт), тәбиғәт күренештәре аша матурлыҡты күрә, тоя, һиҙә, ҡабул итә алыу һәләтен үҫтереү.

Тирә-йүндәге матур предметтарға, күренештәргә иғтибар итеүҙе, улар менән һоҡлана, шатлана, ҡыуаныс хистәре кисерә белеүҙе ябай ғына саралар аша төшөндөрөү.

Матурлыҡҡа ҡарата хис-тойғоларҙы үҫтереүсе мөхит булдырыу, сәнғәттең төрҙәрен һәм жанрҙарын билдәләй белергә өйрәтеү, музыка һәм халыҡ сәнғәте төрҙәре менән таныштырыу.

Сәнғәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, уның ижади эшмәкәрлек булыуы һәм сәнғәттең төрлө төрҙәре тураһында төшөнсәләр биреп, уларҙы айыра, төркөмләй, атай белергә өйрәтеү (көнкүреш өсөн зауыҡлы әйберҙәр эшләү сәнғәте, һынлы сәнғәт, әҙәбиәт, музыка, архитектура, театр, бейеү, кино, цирк һ.б.).

Үҙ-аллы ижад итеүҙе хуплау һәм үҫтереү (һынлы сәнғәт, музыка, ҡоролмалар төҙөү һ.б.).

Төп маҡсаттары һәм бурыстары

Балаларға сәнғәт әҫәрҙәрендә матурлыҡты күрә белергә өйрәтеү, уға ҡарата ыңғай мөнәсәбәт формалаштырыу; сәнғәт төрҙәрен айыра, төркөмләй, телмәрҙә уларҙы ҡуллана белергә өйрәтеү (музыка, әҙәбиәт, һынлы сәнғәт).

Балаларҙы ижади яҡтан үҫтереү, ижади эшмәкәрлеккә ҡыҙыҡһыныу уятыу, шөғөлләнеү өсөн шарттар тыуҙырыу (һынлы сәнғәт, музыка, ҡоролмалар төҙөү һ.б.).

Сәнғәт төрҙәре менән таныштырыу. Әҙәби һәм музыка әҫәрҙәре, башҡорт халҡының биҙәнеү сәнғәте менән таныштырыу. Тирә-йүндең матурлығын күрә

белеүҙе, сәнғәт әҫәрҙәрен ҡабул итеп, автор тарафынан һалынған идеяны аңлай белергә өйрәтеү.

Донъя, Рәсәй һәм Башҡортостан халыҡтарының сәнғәт әҫәрҙәре аша балаларҙы сәнғәт төрҙәре менән таныштырыу, уларҙың йөкмәткеһен аңларға, төрҙәрен һәм жанрҙарын билдәләргә өйрәтеү.

Һынлы һәм музыка сәнғәтендәге жанрҙар менән таныштырыу. Һынлы сәнғәттәге, музыка һәм театр эшмәкәрлегендәге һүрәтләү саралары менән таныштырыу.

Буяу менән һүрәт төшөрөү сәнғәте (живопись) әҫәрҙәре һәм рәссамдар, тыуған яҡ һүрәтләнгән әҫәрҙәр менән таныштырыу.

Графика тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү, китап биҙәүсе рәссамдар менән таныштырыу.

Архитектура менән таныштырыуҙы дауам итеү: кешеләр йәшәгән йорттар, театр, мәсет, йәмғиәт йорто тигән төшөнсәләрҙе аңлатҡан ҡоролмалар менән таныштырыу.

Әкиәттә һүрәтләнгән йорттар төрө менән таныштырыу: тирмәкәй, бейәләй, ҡомған, япраҡ һ.б.

Ижади һөнәр эйәләренең эше менән таныштырыу. Телевидение, музей, театр, цирк, кино тураһында төшөнсәләр биреү һәм уларға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Халыҡ сәнғәте һәм уларҙың төрҙәре тигән төшөнсәләрҙе һиҙемләргә өйрәтеү. Ҡобайыр, башҡорт халыҡ йыры, бейеүе, һөнәрҙәре менән таныштыра башлау.

Библиотека, музей тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата һаҡсыл ҡараш, ҡурсылыҡ тәрбиәләү.

Һынлы сәнғәт эшмәкәрлеге. Һынлы сәнғәт эшмәкәрлеге төрҙәре тураһында төшөнсәләр биреү; һүрәт төшөрөү, әүәләү, йәбештереү, биҙәү-ҡулланма әйберҙәренең төрҙәре (камзул, тәбәтәй, түшелдерек, балдаҡ, беләҙек, билбау, елән, кейеҙ, таҫтамал һ.б.), уларҙың яһалышы менән таныштырыу; балаларҙың практик яҡтан уларҙы башҡарыуҙа ижады һәләтен үҫтереү һәм камиллаштырыу.

Һынлы сәнғәт мәҙәниәте әҫәрҙәрендә матурлыҡты күрә белергә өйрәтеү, матурлыҡҡа ынтылыш, ыңғай ҡараш һәм ошо матурлыҡты барлыҡҡа килтергән һөнәр эйәләренә ҡарата хөрмәт тәрбиәләү.

Коллектив эштәр башҡарғанда йәштәштәре менән бергә эшләү теләген үҫтереү.

Конструкция һәм модель ҡороу эшмәкәрлеге. Төрлө ҡоролмалар төҙөүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, конструктор төрҙәре менән таныштырыу, күмәкләп эшләү күнекмәләрен нығытыу, кемдең эштең ниндәй өлөшөн башҡарыуҙы билдәләү, алдан нисек ҡоролма төҙөүҙө планлаштырыу, һәр баланың башҡаларға ҡамасауламай дөйөм планға ярашлы эшләй белеү күнекмәләрен ойоштороу.

Музыкаль эшмәкәрлек. Музыка сәнғәтенә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, уның ижади эшмәкәрлек булыуын төшөндөрөү.

Төрлө инструменттарҙа, яҙмаларҙа башҡарылған музыкаль пьесаларға, бәләкәй күләмле йырҙарға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Төрлө жанрҙағы музыка әҫәрҙәренең йөкмәткеһен аңлау һәләтен үҫтереү, музыканың кеше күңеленә нисек тәъҫир итеүен, ниндәй хис-тойғолар уятыуын төшөндөрөү.

Музыканы ҡабул итеү һәләтен үҫтереү, ритмды, көйҙө тыңларға, һәм уның характерын тойорға өйрәтеү. Музыкаға һөйөү тәрбиәләү, унан алған тәьҫораттарҙы байытыу, көй-моң аша баланың сенсор һәләтен һәм үҙ-аллы ижад итеү эшмәкәрлеген үҫтереү.

ПСИХОЛОГИК ҺӘМ ПЕДАГОГИК ЭШ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Сәнғәт төрҙәре менән таныштырыу

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Бала яратып ҡараған һүрәттәрҙе, күңел биреп тыңлаған әҙәби һәм ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрен, йөрәгендә төрлө хис-тойғолар уятҡан йырҙың, көйҙөң яңғырауын зауыҡ менән ҡабул итергә өйрәтеү.

Уҡылған китаптарҙың һүрәттәрен ҡарау. Улар буйынса һорауҙарға яуап бирергә, әкренләп әңгәмәләшергә өйрәтеү.

Бала йәшенә ярашлы халыҡ уйынсыҡтары төрҙәре менән таныштырыу: ҡатлы ағас ҡурсаҡтар, һыҙғыртҡыстар, һыбыҙғылар, хәрәкәтләнгән уйынсыҡтар (тауыҡ ем сүпләй, бабай утын яра һ.б.), дымка, филимон, хохлома уйынсыҡтары. Уларҙың биҙәлешенә, уйнау ысулдарына иғтибар биреү. Уйынсыҡтарҙың формаһына, биҙәлешенә, ниндәй характерҙы сағылдырыуына (шатлыҡлы, асыулы, күңелһеҙ һ.б.) иғтибар итергә, улар менән уйнағанда ошо холоҡ-фигел үҙенсәлектәрен күрһәтә белергә күнектереү.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Балаларҙы тирә-йәндәге предметтарҙа, күренештәрҙә матурлыҡты күрергә, тойорға, һиҙергә, уны ыңғай хис-тойғолар аша ҡабул итергә, күңелендә шатлыҡ, ҡыуаныс тойғолары кисерергә өйрәтеүҙе дауам итеү (китаптағы сағыу һүрәттәр, халыҡ кәсептәре әйберҙәре, көнкүреш предметтары аша, кейем-һалымда, йорт биҙәлешендә һ.б.).

Тирә-йүндә сәнғәттең ябай ғына саралар аша сағылыуына төшөндөрөү (төҫ, тауыш, форма, хәрәкәт, ым-ишара аша).

Балаларҙы ҡурсаҡ театрына, һүрәттәр күргәҙмәһенә, балалар баҡсаһындағы этномузейға барыуға әҙерләү һәм ойоштороу.

Ауыҙ-тел ижадына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү (әкиәттәр, һамаҡтар, халыҡ уйындары), биҙәү-көнкүреш әйберҙәре менән, халыҡ йырҙары, музыкаль әҫәрҙәр

һәм музыка ҡоралдары менән таныштырыу; йыл миҙгелдәренең матурлығын таба, күрә һәм һоҡлана белергә өйрәтеү.

Балаларҙың матурлыҡҡа булған хис-тойғоларын үҫтереүсе мөхит булдырыу: бүлмәләрҙәге йыһаздарҙың, уйынсыҡтарҙың, һауыт-һабаның, стена-тәҙрәләр биҙәлешенең эстетик талаптарға тура килеүе; һәр нәмәнең үҙ урыны булып, кәрәкле тәртиптә урынлаштырылыуы; таҙалыҡ, бөхтәлек булдырыу.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Балаларҙа сәнғәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы дауам итеү, халыҡ сәнғәте әҫәрҙәре менән таныштырыу (биҙәнеү әйберҙәре, һүрәттәр, йорт йыһаздары, көнкүреш предметтары һ.б.), музыка әҫәрҙәрен тыңлатыу аша уларҙа төрлө хис-тойғолар тыуҙырыуға ынтылыу.

Артист, рәссам, композитор һөнәрҙәре менән таныштырыу. Башҡортостан Республикаһының арҙаҡлы сәнғәт оҫталары менән таныштырыу (Арыҫлан Мөбәрәков, Хөрмәтулла Үтәшев, Камиль Вәлиев, Хөсәйен Әхмәтов, Рудольф Нуриев, Әхмәт Лотфуллин һ.б.)

Әҙәби, музыка әҫәрендә, һүрәттә тасуирланған образдарҙа таныш предметтарҙы, күренештәрҙе таный белеү.

Ҡурсаҡ театрына, һынлы сәнғәт күргәҙмәләренә йөрөргә күнектереү.

Сәнғәт төрҙәрен һәм жанрҙарын билдәләй белергә өйрәтеү: әҙәби әҫәрҙә: шиғыр, сәсмә әҫәр, йомаҡ һ.б.; йыр, бейеү, музыка, һүрәт (репродукция), скульптура (һынлы сәнғәт), бина һәм ҡоролмалар (архитектура).

Тасуирлауҙың төп төрҙәрен айырырға һәм атарға өйрәтеү (төҫ, форма, дәүмәл, ритм, хәрәкәт, ым-ишара, тауыш).

Архитектура менән таныштырыу. Балалар баҡсаһы, мәктәп, өйҙәр – бөтәһе лә архитектура ҡоролмалары. Балаларға биналарҙы ҡарап, уларҙың өлөштәрен айырып, формаһын, урынлашҡан урынын әйтергә өйрәтеү. Йорттарҙың айырмаһын һәм оҡшашлығын билдәләү.

Балаларҙың һүрәттә, әүәләүҙә, йәбештереүҙә ысынбарлыҡтағы йәки әкиәт донъяһындағы ҡоролмаларҙы һүрәтләүен хуплау.

Музейға ата-әсәләр менән берлектә экскурсия ойоштороу. Музей тураһында мәғлүмәттәр биреү, унда үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу.

Китапхана менән таныштырыу, уның сәнғәттә тотҡан урыны – шағирҙар һәм яҙыусылар ижад иткән китаптар йыйыла һәм кешеләргә уларҙы уҡый алыу мөмкинлеген бирә. Китапханала үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу.

Халыҡ сәнғәте менән таныштырыу (ауыҙ-тел ижады, халыҡ йырҙары, ҡурай моңо, көнкүреш һәм биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәре, йорт-ҡура йыһаздары, һауыт-һаба өлгөләре һ.б.).

Балаларҙы төркөм бүлмәләренең һәм балалар баҡсаһы бинаһы эсенең нисек йыһазландырылыуы менән таныштырыу.

Балаларҙа сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата һаҡсыл булыу сифаттарын тәрбиәләү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Тирә-йүндә һәм сәнғәт әҫәрҙәрендә (музыка, һынлы сәнғәт, әҙәбиәт, халыҡ кәсептәре, архитектура, балет, театр, цирк, фотография һ.б.) матурлыҡты күрә белергә, аңларға өйрәтеүҙе һәм уға ҡарата ыңғай мөнәсәбәт формалаштырыуҙы дауам итеү.

Эстетик хис-тойғоларҙы, зауыҡлы әҫәрҙәрҙән алынған тәьҫораттарҙы үҫтереүҙе, сәнғәт әҫәрҙәренең төрҙәрен айыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Зауыҡлы сәнғәт әҫәрҙәрендә тыуҙырылған образды һәм уның ниндәй саралар аша һүрәтләнеүен танырға, уның тураһында һөйләй, үҙ-аллы эшмәкәрлек өсөн тейешле материалдар һәм әсбаптар һайларға күнектереү.

Сәнғәт әҫәрҙәрен төрҙәре буйынса (әҙәбиәт, музыка, һынлы сәнғәт, архитектура, театр һ.б.) айырырға, уларҙы һүҙ ярҙамында әйтергә, төркөмләүҙе формалаштырыу.

Һынлы сәнғәт һәм музыка жанрҙары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Баланы һынлы сәнғәттә, музыкаль һәм әҙәби әҫәрҙәрҙе театрлаштырыу эшмәкәрлегендә тәъҫирле сараларҙы һайлау һәм ҡуллана белеү нигеҙҙәренә өйрәтеү, төрлө эшмәкәрлектә әүҙем ҡатнашыу теләге уятыу, уларҙы башҡарыуға кәрәк-яраҡтарҙы әҙерләү, башҡарыу ысулдарына, алымдарына өйрәтеү.

Һынлы сәнғәт һәм музыкаль әҫәрҙәр менән таныштырыуҙы дауам итеү. Рәссамдарҙың (И.Шишкин, И. Левитан, В. Серов, И. Грабарь, Ә. Лотфуллин, М.Нестеров, һ.б.) тыуған яҡтың матурлығын һүрәтләгән живопись әҫәрҙәрен өйрәнеүҙе дауам итеү. Графика тураһында төшөнсәләр биреү, уның һүрәтләү ысулдары менән таныштырыу. Китап биҙәүсе рәссамдар ижады тураһында һөйләү, уларҙың әҫәрҙәрен ҡарау, йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү.

Архитектура тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Башҡарған функцияһы буйынса йорттарҙың, биналарҙың төрлө булыуын аңлатыу: кеше йәшәү өсөн төҙөлгән йорттар, һатыу итеү өсөн магазиндәр, күңел асыу өсөн һалынған театр биналары, мәсет, йәмғиәт йорто һ.б. (Мәскәүҙәге Останкино телебашняһы, Өфөләге Конгресс-холл, Өфө-Арена, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт драма театры бинаһы һ.б.), уларҙың оҡшашлығын һәм айырмаларын билдәләргә өйрәтеү. Балаларға ҡоролмаларҙың төҙөлөшө уның ниндәй маҡсатта ҡулланыуына бәйле икәнлекте төшөндөрөү. Иғтибарлыҡ тәрбиәләү: биналарҙың төрлө пропорцияла, ҡоролошо буйынса төрлө формала, биҙәлештәренең дә бер-береһенән айырылып тороуын күҙәтеп, айырырға һәм әйтергә өйрәтеү.

Әҙәби әҫәрҙәр, әкиәттәр менән таныштырғанда төрлө ҡоролмаларға иғтибар итергә өйрәтеү (тирмә, бейәләй өй, тауыҡ тәпәйендәге өй, боҙҙан ҡоролған өй, ҡомған, япраҡ һ.б.)

«Халыҡ сәнғәте», «халыҡ сәнғәте төрҙәре һәм жанрҙары» тигән төшөнсәләр менән таныштырыу. Ҡобайыр, халыҡ йыры, бейеүе, сигеү, балаҫ һуғыу, кейеҙ баҫыу халыҡ һөнәрҙәре төрҙәре менән таныштыра башлау.

Сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Сәнғәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙе дауам итеп, уның ижади эшмәкәрлек булыуы һәм сәнғәттең төрлө төрҙәре тураһында төшөнсәләр биреү (көнкүреш өсөн зауыҡлы әйберҙәр эшләү сәнғәте, һынлы сәнғәт, әҙәбиәт, музыка, архитектура, театр, бейеү, кино, цирк, һ.б.).

Һынлы сәнғәт тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Рус һәм башҡорт рәссамдары әҫәрҙәре менән таныштырыу: И. Шишкин «Арыш», И. Левитан «Алтын көҙ», А. Саврасов «Ҡара ҡарғалар ҡайтты», В.Васнецов «Аленушка», «Батырҙар»; К.Дәүләткилдеев «Башҡорт һунарсыһы», Б.Домашников «Ҡыш», М. Елгаштина «Сим йылғаһы». Лотфуллин «Алтын көҙ», «Өс ҡатын», А. Кузнецов «Салауат Юлаевтан һорау алыу», «Динислам бабай», А. Ситдикова «Башҡорт балы», «Зәңгәр мендәрҙәр», А. Тюлькин «Башҡорт урамы», «Архиерей биҫтәһе», М.Нестеров «Ағиҙел йылғаһы».

Бәләкәй формалағы скульптура тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү (форма, пропорция, төҫ, хәрәкәт торошо һ.б.), китап биҙәүсе рәссамдар менән таныштырыуҙы дауам итеү (И. Билибин, Ю.Васнецов, В.Конашевич, Е. Чарушин, А.Мөхтәруллин, Ф.Ислахов, Л.Фролова, А.Василов һ.б.).

Халыҡ көнкүреш сәнғәте менән таныштырыу: кейеҙ баҫыу, келәм туҡыу, шәл бәйләү, ағас семәрләп биҙәү, таҫтамал сигеү, тире иләү һ.б.

Архитектура өлгөләре менән таныштырыуҙы дауам итеп, архитектура ҡоролмаларының төрлө тәғәйенләнешле булыуын (Карауан һарай, Конгресс-холл, Ләлә-тюльпан мәсете, Спорт-арена һарайы, Башҡортостан опера һәм балет театры һ.б.), йәшәү өсөн төҙөлгән йорттар, мәктәптәр, дауаханалар, санаторийҙар, магазиндар һ.б. тураһында төшөнсәләр биреү.

Ер шарында бөтә донъяға танылған билдәле архитектура ҡомартҡылары булыуы тураһында таныштырыу: Мәскәүҙәге Кремль, Санкт-Петербургтағы Исаакиев соборы, Францияләғы Эйфелево башняһы, Бөйөк Ҡытай стенаһы, Өфөләге Конгресс-холл бинаһы һ.б.

Зауыҡлы эшмәкәрлектә архитектура ҡоролмаларының матурлығын һүрәтләргә өйрәтеү: семәрле тәҙрә ҡапҡастары, өй ҡыйығы ситтәре, мөһабәт ҡапҡалар һ.б.

Зауыҡлы ижад итеүсе сәнғәт эйәләренең һөнәре тураһында төшөнсәләр (рәссам, композитор, артист, бейеүсе, йырсы, пианист, ҡурайсы, режиссер, архитектор һ.б.) биреү.

Һиҙеү-тойоу ағзалары үҫешенең сәнғәт төрөнә тәьҫире: йырҙы, музыкаль әҫәрҙе тыңлайҙар; һүрәтте ҡарайҙар һ.б.).

Сәнғәт төрҙәре һәм уларҙың үҫеш тарихы менән таныштырыу. Халыҡ һәм профессиональ сәнғәт менән таныштырыу, уларға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, үҙ көсөн ниндәйҙер сәнғәт төрөндә һынап ҡарау теләге уятыу.

ҺЫНЛЫ СӘНҒӘТ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө
(2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Балаларҙа ҡәләмгә, фломастерҙарға, бумалаға, буяуҙарға, балсыҡҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу. Ҡәләм, фломастер, буяу менән һүрәт төшөрәләр, ә балсыҡты әүәләйҙәр икәнлеге тураһында төшөнсәләр биреү.

Предметлы һүрәт төшөрөү. Дөрөҫ ултырырға, ҡәләмде, фломастерҙы менән бумаланы ныҡ ҡыҫмайынса тоторға, буяуҙар (гуашь) менән бысранмай эшләргә өйрәтеү.

Ҡыҙыл, һары, йәшел, күк, аҡ, ҡара төҫтәрҙе таный, айыра белеү күнекмәләрен нығытыу. Төҫтәрҙе дөрөҫ һайлай белеү.

Баланы ритмлы хәрәкәттәр менән ҡәләм ярҙамында нәҙек, ҡыҫҡа һыҙыҡтар, бумала менән буяу һалыу алымдары аша тирә-йүндәге әйберҙәрҙе һәм күренештәрҙе һүрәткә төшөрөргә өйрәтеү: *япраҡтар ҡойола, ямғыр яуа.*

Төрлө йүнәлештәге тура һыҙыҡтар үткәреү: *оҙон, ҡыҫҡа, ауыш, арҡыры һәм тура* һыҙыҡтарҙы сиратлаштырырға өйрәтеү.

Түңәрәк формалағы әйберҙәрҙе һәм тәбиғәт күренештәрен һүрәтләргә өйрәтеү: *туп, шар, ҡояш, болоттар* һ.б. Уларға ҡәләм, бумала менән тура һыҙыҡтар төшөрөү: ҡояш яҡтырта, болонда бәпембәләр үҫә.

Дүртмөйөшлө предметтарҙы төшөрөргә өйрәтеү: *кулъяулыҡ, ашъяулыҡ, байраҡ һ.б.*

Баланы ҡәләм, буяу, ҡағыҙ, бумала һәм штамп (ҡалып) менән таныштырыу, улар менән эш итеү күнекмәләренә өйрәтеү.

Предметтарҙың, тирә-яҡтағы күренештәрҙең, уйынсыҡтарҙың, китаптағы һүрәттәрҙең (көнкүреш әйберҙәре, өҫ кейемдәре һ.б. нәмәләрҙең матурлығына һоҡланыу, ҡыуаныу тойғоларын, уларҙы күрә, айыра белеү һәләтлелеген тәрбиәләү һәм үҫтереү.

Балала ижади эшмәкәрлек һөҙөмтәһенә ыңғай мөнәсәбәт тәрбиәләү, үҙ теләге һәм уйы, йә тәрбиәсе әйтеүе буйынса төшөрөргә теләк уятыу.

Әүәләү. Әүәләүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балсыҡтың үҙенсәнлеге менән таныштырыуҙы дауам итеү: *йомшаҡ, киҫәктәргә бүленә, йомарлана, йәйелә, ҡата, кибә.*

Устар эсендә балсыҡ киҫәген тура йүнәлештә һәм өйрөлтөп тәгәрәтеп йомарлау *(ҡәләм, шар)*; йомро балсыҡты уска һалып, йәлпәштереү; тура йүнәлештә тәгәрәтеп алған форманың ике башын бер-береһенә бөгөп, түңәрәк эшләү *(тәгәрмәс).*

Йомро форманың уртаһына бармаҡ менән баҫып, соҡор эшләү *(түбәтәй, тәрилкә).*

Биҙәк төшөрөү өсөн таяҡса, йә пластмассанан эшләнгән бысаҡ (стека) ҡулланырға өйрәтеү.

Форманың ситтәрен бармаҡ остары менән семтеү *(тәрилкә, сынаяҡ аҫты).*

Формаһы буйынса бер төрлө, йә төрлөсә булған, бер нисә өлөштән торған ябай предметтарҙы әүәләргә, өлөштәрҙе бер-береһенә йәбештерергә өйрәтеү *(ҡурсаҡ, ҡошсоҡ).*

Эш башҡарғанда йыйнаҡ, бөхтә булырға өйрәтеү: өҫтәлде, кейемде бысратмай, таҡта өҫтөндә эшләй белеү.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4йәшкә тиклем)

Тирә-йүндәге матурлыҡҡа балаларҙың иғтибарын йәлеп итеү. Һынлы сәнғәт дәрестәренә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Рәсем төшөргәндә, әүәләгәндә, ҡорамалар йәбештергәндә ябай ғына предметтар һәм күренештәр аша ниндәйҙер образ тыуҙырырға тырышыуҙы хуплау, айырым һәм күмәкләп эш итә белергә өйрәтеү. Предметты тикшергәндә уны ике ҡул ярҙамында ҡапшап, һыйпап уның үҙенсәлектәрен билдәләргә өйрәтеү.

Предметлы һүрәт төшөрөү. Бумала, ҡәләм, граттаж таяҡсаһын ҡулланырға, буяуҙар менән эш итергә өйрәтеү. Алһыу, күкһел (зәңгәр), буҙ (серый) төҫтәр менән таныштырыу. Әйберҙәрҙе һәм тирә-йүн күренештәрен оҡшатып һүрәтләгәндә баланың үҙ-аллы төҫлө буяу һайларға һәм уны ҡуллана белергә төшөндөрөү. Бумаланың артыҡ һыуын йомшаҡ сепрәктә киптереп эш итергә күнектереү.

Предметлы һүрәт төшөрөү ысулдары: бумала осо менән төртөп алыу, өҙөк һәм тура һыҙыҡтар ярҙамында, уңдан һулға, өҫтән аҫҡа, төрлө киңлектә һәм оҙонлоҡта булған һыҙыҡтарҙы бер-береһе аша үткәреү (таҫма, балаҫ, билбау, таҫтамалдар төшөрөү).

Тура дүртмөйөшлө, түңәрәк формалағы предметтарҙы һәм улар менән сиратлашып килгән, түңәрәк һәм тура һыҙыҡтарҙан торған йәки түңәрәк һәм өсмөйөштән торған башҡа предметтарҙы төшөрөү: *ҡар бабай, себеш, машина, вагон и др.* (бер үк формалы, ләкин төрлө күләмдәге).

Һүрәтте ҡағыҙ битендә дөрөҫ (уртаһында, йә бөтә яҫылығында) урынлаштыра белеү.

Төрлө формалағы ҡалып (шаблон) ярҙамында биҙәк төшөрөү.

Халыҡтың биҙәү-ҡулланма сәнғәте буйынса биҙәктәр эшләй белеү (А.В.Молчева методикаһы буйынса).

Бер үк предметтың ҡабатланып килеүе аша ябай ғына сюжетҡа ҡоролған һүрәт төшөрөргә өйрәтеү *(беҙҙең баҡсалағы шыршылар, ҡоштар оса, сәскәләргә һыу һибәбеҙ һ.б.).*

Башҡортостан һәм Рәсәй рәссамдарын һәм уларҙың әҫәрҙәрен (4-5) белеү.

Ҡорама йәбештереү. Балаларҙа ҡорама йәбештереүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.

2-3 өлөштән торған һәм төрлө формалағы, ҙурлыҡтағы предметтарҙың һүрәтен (тәрбиәсе алдан әҙерләй) ҡағыҙ битендә йыйыу һәм елем менән йәбештереү. Елемде бумалаға аҙлап алырға, предметтың өлөштәрен клеенка өҫтөнә һалып, әкрен генә елем һөртөргә һәм уларҙы ҡағыҙ битенә йәбештерергә өйрәтеү. Йәбештергәндә сепрәк ҡулланырға күнектереү.

Төҫө, формаһы, ҙурлығы буйынса төрлөсә булған геометрик фигураларҙан (алдан әҙерләнгән) өсмөйөш, дүртмөйөш һәм түңәрәк эсендә бер-береһен аралаштырып, биҙәктәр төҙөргә өйрәтеү. Ошо уҡ эште фланелеграфта, магнит таҡтала башҡартыу.

Төрлө предметтарҙы айырым өлөштәрҙән йыйырға төшөндөрөү.

Ҡайсы менән ирекле эш итергә өйрәтеү. Квадрат, дүртмөйөш ҡырҡа белеү. Квадраттан – түңәрәк, дүртмөйөштән – оҙонса түңәрәк (овал) ҡырҡыу.

Төрлө ҡалыптар (шаблон) ярҙамында биҙәк төшөрөү.

Предметтарҙы ҡағыҙ битендә дөрөҫ урынлаштырырға өйрәтеү.

Дүртмөйөшлө һәм түңәрәк формалағы предметтарҙы ҡағыҙ бите өҫтөндә таратып һала һәм йәбештерә белеү (алма, шар); ике йәки унан да күберәк бер үк формалағы, әммә ҙурлығы буйынса төрлө булған *(пирамида, ҡар бабай)*, формаһы һәм ҙурлығы буйынса төрлө булып, бер нисә өлөштән торған предметтарҙы *(өй, машина)* йыя, йәбештерә белергә өйрәтеү.

Әүәләү. Балсыҡтың һәм пластилиндың үҙенсәлектәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балсыҡтан һәм пластилиндан өйрөлтөп тәгәрәтеп йомарлау, йәйеү, йәлпәштереү, ныҡ итеп устар араһында ҡыҫыу, бармаҡ батырыу, таяҡтан бөгөп түңәрәк яһау, ситтәрен семтеү ысулдарын ҡулланып, таныш предметтарҙы әүәләү, стека менән эш итә белеү.

Ике-өс өлөштән торған, бер үк формалы һәм ҙурлыҡтағы йәки төрлө формалы һәм күләмле предметтарҙы әүәләй белеү: *самолет, баҫҡыс, себеш һ.б.*

Башҡорт халҡының көнкүреш-ҡулланыу әйберҙәре менән таныштырыу, һауыт-һаба *(туҫтаҡ, тәпән, ижау һ.б.)* әүәләү һәм уларҙы халыҡ биҙәктәре менән матурлау.

Тәрбиәсе ҡарамағы буйынса 1-2 халыҡ уйынсыҡтары менән таныштырыу (башҡорт, дымка, филимон һ.б.).

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Һынлы сәнғәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Ҡәләм, буяу (гуашь), фломастер, төҫлө аҡбур, ҡом һ.б. ҡулланып, төрлө предметтарҙы һәм күренештәрҙе һүрәтләү мөмкин икәнлекте аңлатыу.

Рәсем төшөрөүгә, ҡорамалар йәбештереүгә, балсыҡтан төрлө әйберҙәр әүәләүгә теләк, ынтылыш уятыу.

Предметтарҙы тикшереп ҡарарға, ҡулдар ярҙамында ниндәй образдар тыуҙырып була алғанлығын күҙаллап, күрһәтергә өйрәтеү. Төрлө формалағы, төҫтәге, дәүмәлдәге предметтарҙы эстетик яҡтан дөрөҫ ҡабул итергә өйрәтеү. Шул предметтарға оҡшатып эште нисек башҡарыу кәрәклеген балаларға алдан планлаштырырға өйрәтеү. Уларға эштең үтәлеү ысулын күрһәтеп, тәүҙә балалар менән бергә, аҙаҡ – уларҙан үҙ-аллы был эште башҡартыу.

Коллектив эштәр башҡарырға өйрәтеү.

Предметлы һүрәт төшөрөү. Тасуири образ тыуҙырыу өсөн төҫтәрҙе һәм уларҙың сағылышын дөрөҫ ҡуллана, аҡ һәм ҡара буяуҙы ҡушып, төҫтәрҙең тон ҡуйылығын үҙгәртеү.

Контурҙан сыҡмай, асыҡ урын ҡалдырмай, һүрәттәрҙе буяй, бумаланың бөтә яҫылығын ҡулланып, киң һыҙыҡтар, ә осо менән нөктә һәм нәҙек һыҙыҡтар үткәрә белеү тәжрибәһе биреү.

Бер нисә өлөштән торған түңәрәк, дүртмөйөш, өсмөйөш формаһындағы предметтарҙы яҫылыҡта урынлашҡан урындарын билдәләп (өҫтә, аҫта, уңда, һулда) төшөрә белеү.

Бер һыҙыҡ кимәлендә бер-бер артлы 2-3 предметты төшөрә белеү: себештәр урамда йөрөй.

Төшөрөлгән һүрәттең формаһын һәм уның яҫылыҡта урынлашҡан урынын дөрөҫ күрһәтеү ниәтендә ҡағыҙ битенең торошон һайлай белеү.

Балаларға рәсемдең төп мәғәнәһен аңлатҡан өлөшө ҡағыҙ битенең уртаһында урынлаштырылыуын һәм уның һүрәттәге башҡа предметтарҙан ҙурлығы менән айырылыуын аңлатыу һәм һүрәт төшөргәндә был ҡағиҙәне ҡуллана белергә өйрәтеү.

Декоратив рәсем төшөрөү. Биҙәк элементтарын халыҡ орнаменты мотивтары менән төшөрә белеү (рустарҙың – мазки, нөктә, тура һыҙыҡтар, дуға һ.б., башҡорттарҙың – ҡусҡар, кәкерсә, ромб, әүернә).Төрлө биҙәктәрҙе киң таҫмала (ҡашмау, һарыуыс), квадрат эсендә (келәм, балаҫ), дүртмөйөштә (алъяпҡыс, ашъяулыҡ) һ.б. төшөрөү.

Рус халыҡ биҙәктәре (дымка, филимон, городец) менән таныштырыу. Дымка һәм филимон биҙәктәрен ҡулланып, сюжетлы композиция төҙөргә өйрәтеү. Дымка һәм филимон биҙәктәре аша зауыҡлыҡты һәм матурлыҡты күрә белеү һәләтен үҫтереү, был биҙәктәрҙе өлгө өсөн ҡулланыу (өлгө өсөн балаларҙың элек әүәләп һәм ҡырҡып эшләнгән уйынсыҡтарын ҡулланырға була).

Горордец биҙәктәре менән таныштырыу. Городец биҙәгенең төҫөн күрә һәм уның элементтарын айыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү, төшөрөлгән һүрәттәрҙә городец биҙәктәрен ҡулланыу.

Әүәләү. Балсыҡты тәгәрәтеп йомарлау, бармаҡ батырып соҡоу, йәйеп баҫыу, бармаҡ остары менән ҡыҫып йәмшәйтеү, йоҡартыу, семтеп ситтәрен бөгөү, балдаҡ һымаҡ бөгөү, бармаҡ менән төп деталдән тартып, семтеп сығарып, өҫтәлмә деталдәр эшләү, һылау, һыйпау ысулдарына өйрәтеү.

Төрлө ысулдар менән түңәрәк һәм оҙонса түңәрәк формалы (еләк-емеш, йәшелсәләр, балыҡтар, ҡоштар), конус формалы (сысҡан, кишер), тумалаҡ форманы бармаҡ батырып соҡоп, эсен ҡыуыш итеп (сынаяҡ, тәпән), йәлпәштерелгән түңәрәктең ситен бөгөп (сынаяҡ аҫты, тәрилкә), ике өлөштө бергә йәбештереп һылап ҡуйыу юлы менән (сынаяҡ тотҡаһы, сәйнүк мороно) эшләй белеү.

Халыҡ уйынсыҡтары өлгөһө буйынса эшләй белеү: тәпән, тырыз, туҫтаҡ һәм башҡа һауыт-һаба, муйынсаҡтар, беләҙектәр, ҡатлы-ҡатлы рус ағас ҡурсаҡтары, дымка әтәстәре, кәзәләре һ.б. һәм уларҙы стека ярҙамында, йә өҫтөнә йәбештереү ысулы менән биҙәү.

Бер нисә предметтан торған (төрлө ҙурлыҡтағы һәм формалағы) композицияны бергәләп эшләргә өйрәтеү.

Йәбештереү.Ҡайсыны дөрөҫ тотоп, уның менән эш итә белеү, тар һәм киң таҫмаларҙы – бер үк хәрәкәтттәр менән, квадратты диагональ буйынса һәм ҡыя һыҙыҡлап киҫә белеү; түңәрәкте, квадраттың, оҙонса түңәрәктең, дүртмөйөштөң остарын (мөйөштәрен) түңәрәкләтеп ҡырҡыу.

Бер нисә өлөштән торған предметтарҙы йыйып, йәбештерә белеү.

Бер үк йәки бер нисә төрлө геометрик элементтарҙы ҡулланып, киң таҫмала, квадратта, таныш әйберҙәрҙең силуэты эсендә биҙәк, орнамент төҙөп, йәбештерә белеү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Һынлы һәм музыка сәнғәтендәге жанрҙар менән таныштырыу.

Һынлы сәнғәттә, музыка әҫәрҙәрендә һәм театр эшмәкәрлегендә һүрәтләү саралары менән таныштырыу.

Буяу менән һүрәт төшөрөү сәнғәте (живопись) әҫәрҙәре һәм рәссамдар, тыуған яҡ һүрәтләнгән әҫәрҙәр менән таныштырыу.

Графика тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү, китап биҙәүсе рәссамдар менән таныштырыу (А.Мөхтәруллин, А.Хәйруллин, А Чудинов һ.б.).

Архитектура менән таныштырыуҙы дауам итеү: кешеләр йәшәгән йорттар, театр, мәсет, йәмғиәт йорто тигән төшөнсәләрҙе аңлатҡан ҡоролмалар менән таныштырыу: «Ихлас» мәсете, «Ҡунаҡ йорто-Гостиный двор», Өфөләге «Даско Гарден» ресторандар комплексы, «Планета» аквопаркы, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт йорто, Өфө дәүләт татар театры«Нур» һ.б.

Әкиәттә һүрәтләнгән йорттар төрө менән таныштырыу: тирмәкәй, бейәләй, ҡомған, япраҡ һ.б.

Ижади һөнәр эйәләренең эше менән таныштырыу. Телевидение, музей, театр, цирк, кино тураһында төшөнсәләр биреү һәм уларға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. «Башҡортостан» киностудияһы тураһында мәғлүмәт биреү.

Халыҡ сәнғәте һәм уларҙың төрҙәре тигән төшөнсәләрҙе һиҙемләргә өйрәтеү. Ҡобайыр, халыҡ йыры, бейеүе, көнкүреш һөнәрҙәре төрҙәре менән таныштыра башлау.

Библиотека, музей тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү: Третьяков исемендәге дәүләт галерияһы, Зәки Вәлиди исемендәге милли библиотека, Башҡортостан Республикаһының милли музейы һ.б.

Сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата һаҡсыл ҡараш, ҡурсылыҡ тәрбиәләү.

Предметлы һүрәт төшөрөү. Натуранан һәм күҙ алдына килтереп, сәскә, еләк-емеш, уйынсыҡ һ.б. төшөрә белеү, уларҙың формаһын, пропорцияһын, төҫөн; яҫылыҡта нисек урынлашыуына ҡарап, форманың үҙгәреүен күрһәтә белеү. Натюрморт төшөрөү.

Таныш төҫтәрҙе нығытыу, *көрән, зәңгәр, күк, миләүшә* (фиолетовый) һәм төҫтәрҙең сағылыштары – *зәңгәр, алһыу, аҡһыл йәшел (салатный), сейә (вишневый)* менән таныштырыу.

Гуашь менән эш иткәндә төҫтәрҙе бер-береһе менән ҡушып, яңы төҫтәр алырға, уларҙы ҡуйы йәки асыҡ итер өсөн һыу өҫтәргә өйрәтеү.

Акварель, гуашь һәм башҡа материалдар менән, төрлө ысулдарҙы ҡулланып, һүрәт төшөрә белеү (штрих, тушевка, размывка, по-сырому, «сухая кисть» һ.б.).

Төрлө һүрәт төшөрөү материалдарын ҡулланып (төҫлө аҡбур, фломастер, гуашь, акварель, күмер ҡәләм, төрлө бумалалар һ.б.) эш итергә өйрәтеү.

Предметтың контурын ябай ҡәләм менән нығ баҫмай төшөрөргә һәм рәсемде буяғанда бысраҡ эҙҙәр ҡалдырмай эшләргә күнектереү.

Бумала менән төрлө ысулдар ҡулланып буярға өйрәтеү: киң һыҙыҡтарҙы бумала өбөрөһөнөң (ворс) бөтә киңлеге менән, нәҙек кенә һыҙыҡтарҙы – өбөрөнөң осо менән; бумаланың тик осо ярҙамында нөктәләр төшөрөргә өйрәтеү.

Сюжетлы һүрәт төшөрөү. Тирә-яҡ мөхиткә һәм әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса сюжетлы композиция төҙөргә өйрәтеүҙе дауам итеү («Йомро икмәк үҙ юлында кемдәрҙе осратҡан?», «Ике һаран айыу»).

Һүрәттә предметтарҙың, тирә-йүндәге күренештәрҙең һәм әҙәби әҫәр геройҙарының образын бирергә ынтылдырыу. Предметтарҙы яҫылыҡта төрлөсә урынлаштырып булыуҙы төшөндөрөү (ята, тора, тәгәрәй, йәнле предметтар хәрәкәтләнә, ел иҫкәндә ағастар бөгөлә һ.б.). Һүрәттә кешенең һәм йәнлектәрҙең ябай ғына хәрәкәтен ҡул һәм аяҡ тороштарын үҙгәртеү аша күрһәтә белеү.

Ҡағыҙҙа композицияны дөрөҫ урынлаштыра белеү һәләтен үҫтереү. Сюжеттағы предметтарҙың дәүмәленә, формаһына балаларҙың иғтибарын йәлеп итеү (өйҙәр ҙур, ағастар тәпәш һәм бейек).

Декоратив һүрәт төшөрөү. Халыҡ биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәренең, көнкүреш кәрәк-яраҡтарының биҙәктәре менән таныштырыу. Башҡорт һәм рус халыҡ биҙәктәре элементтарын (әүернә, ромб; сәскә, япраҡ, сәскә бөрөһө, япраҡ мыйығы) ҡулланып, биҙәктәр, орнаменттар төҙөү һәм улар менән һүрәттәрҙе биҙәү (ҡулъяулыҡ, һарауыс, таҫтамал, билбау).

Һынлы сәнғәттең төрлө төрҙәрендә тасуирлау сараларын айыра белергә өйрәтеү (формаһы, төҫө, композицияһы һ.б.). Һүрәтләү материалдарының үҙенсәлектәре, тасуирлау маҡсатында төрлө төҫтәрҙе һәм уларҙың сағылыштарын ҡуллана, башҡорт һәм рус халыҡ биҙәү сәнғәте биҙәктәрен айыра һәм төшөрә белеүҙәге күнекмәләрен үҫтереү.

Әүәләү. Балсыҡтан, пластилиндан, тоҙло ҡамырҙан һ. б. әүәләү ысулдарына өйрәтеүҙе дауам итеү.

Һәр төрлө әүәләү ысулдарын белеү: скульптуралы һәм конструктив әүәләү йәки икеһен бергә ҡатнаштырып эшләү ысулы; стеканы ҡуллана белеү, әүәләгән предметтың өҫтөн еүеш сепрәк менән һылау, һыйпау.

Натуранан йәки күҙ алдына килтереп, 2-3 таныш предметты ябай хәрәкәттәрҙә күрһәтеп, скульптура төркөмө әүәләү. Үҙаллы сюжет таба, төрлө алымдар ҡулланып, үҙенең планы буйынса эш итергә өйрәтеү.

Һауыт-һабаны, төрлө ҙурлыҡтағы балдаҡтарҙы бер-береһенең өҫтөнә һалыу, йә стека ярҙамында йомро балсыҡ киҫәгенең эсенән балсыҡ соҡоп сығарыу ысулы менән эшләй белеү.

Әүәләнгән предметтың өҫтөн стека менән эшкәртә, рельеф, йә буяуҙар менән биҙәй белеү.

Үҙләштерелгән ысулдар һәм алымдар ҡулланып, төрлө формалағы предметтарҙы, уларҙың хәрәкәтен, торошон һүрәтләп, ябай ғына сюжетлы композиция уйлап әүәләү.

Декоратив әүәләү. Натуранан, йә күҙ алдына килтереп, балсыҡ киҫәгенән формаһы буйынса ҡатмарлы булған уйынсыҡтар, декоратив пластиналарға йәбештереп, йә соҡоп эшләнгән рельеф ысулын ҡулланып, орнаменттар төшөрә белеү.

Халыҡ уйынсыҡтарына (филимон, дымка, һ.б.) оҡшатып ҡоштарҙы, хайуандарҙы, кешеләрҙе әүәләргә өйрәтеү (ҡошсоҡ-һыҙғыртҡыс, утын ҡырҡҡан айыу, ем сүплəгән тауыҡ һ.б.).

Коллектив эште бергәләп башҡарыу.

Ҡорама йәбештереү. Ҡайсы менән эш итә белеү күнекмәһе: тура һыҙыҡ буйынса, йә төрлө йүнәлештәрҙә киҫеү, тиражлап киҫеү ысулы; ҡатмарлы һүрәтте силуэты буйынса киҫеү.

Икегә, йә гармун һымаҡ бөкләнгән ҡағыҙҙан дүртмөйөш, түңәрәк, оҙонса түңәрәк формалар киҫеү.

Һүрәтте бер нисә өлөштән йыйып йәбештерә, уларҙан сюжетлы композиция төҙөй белеү.

Башҡорт һәм руҫ халҡының биҙәү-ҡулланма сәнғәтенә таянып, геометрик фигураларҙы, үҫемлек элементтарын, ҡош, йәнлек һүрәттәрен ҡулланып, орнамент төҙөй, киҫә, йыя белеү.

Биҙәк (орнамент) элементтарын квадрат, тура дүртмөйөш, киң таҫма, силуэт эсендә симметрия һаҡлап урынлаштырыу ҡағиҙәләрен белеү һәм ҡулланыу.

Көнкүреш өсөн зауыҡлы әйберҙәр эшләү ижады. Ҡағыҙ менән эш итеү алымдарын камиллаштырыу. Ҡағыҙҙы төрлө йүнәлештә дүрт өлөшкә бөкләү, әҙер өлгөләр буйынса эшләү (кәпәс, кәмә, өй).

Ҡағыҙҙан күләмле фигуралар эшләү: тура дүртмөйөшлө ҡағыҙҙы бер нисә тигеҙ өлөшкә бүлеү, бөкләү, бөкләнгән урындан уны ҡырҡып, төрлө күләмле әйберҙәр эшләүҙе нығытыу (кәрзинә, өй).

Тәбиғәт (тубырсыҡ, ботаҡ, япраҡ) һәм башҡа материалдарҙан (тимер сыбыҡ, коробка) төрлө уйынсыҡтар, сувенирҙар эшләргә өйрәтеү (ҡулъяулыҡ, сәскә һ.б).

Ата-әсәйҙәргә, балалар баҡсаһының хеҙмәткәрҙәренә, сюжетлы-ролле уйындар уйнау өсөн үҙллы уйынсыҡтар эшләй белеү һәләтен үҫтереү.

Материалдарҙы һаҡсыл ҡулланырға кәрәклеген аңлатыу.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Һынлы сәнғәткә тотороҡло ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Предметты ҡул суҡтары ярҙамында тикшереп, өйрәнеп, уның нимәнән эшләнгәнлеген һәм ниндәй сифаттарға эйә булыуын белергә өйрәтеү.

Күренештәрҙе, предметтарҙы эстетик яҡтан образлы итеп ҡабул итергә, һынлы сәнғәт саралары ярҙамында һүрәтләргә өйрәтеү. Өйрәнелгән алымдарҙы ҡулланып, үҙ-аллы һүрәт төшөрөргә, әүәләргә, ҡорамалар йәбештерергә ылыҡтырыу.

Предметтың үҙенә ҡарап (натуранан); уның формаһын, дәүмәлен, өлөштәренең пропорцияһын дөрөҫ итеп биреп, һүрәт төшөрөргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Күмәкләп ижад итеүҙе хуплау. Үҙенең эшендә етешһеҙлекте табып, төҙәтә белергә күнектереү.

Предметлы һүрәт төшөрөү. Предметтарға ҡарап һәм хәтер буйынса һүрәт төшөрөү. Күҙәтеүсәнлек тәрбиәләү, предметтарға хас һыҙаттарҙы билдәләй һәм рәсемдә уны сағылдырып, төшөрә белергә өйрәтеү (формаһын, пропорцияһын һаҡлау, альбом битендә дөрөҫ урынлаштырыу).

Рәсем төшөрөү ысулдарын нығытыу. Төрлө материалдар ҡулланып (*гуашь, акварель, күмер, аҡбур, фломастер, ҡәләм һ.б.*) һүрәт төшөрөү.

Ҡәләм менән тура һәм тулҡын һыҙыҡтарҙы ҡул суҡтарын төрлө йүнәлештә бороп төшөрә белеү; ҡыҫҡа, оҙон һыҙыҡтарҙы, бөҙрәләнгән түңәрәктәрҙе бармаҡтар ярҙамында башҡара белеү.

Төҫтәрҙең һәм улар сағылыштарының төрлө булыуын, төп төҫтәрҙе бер-береһенә ҡушып, төрлө буяу сағылыштарын алып булыуҙы төшөндөрөү. Төҫтәрҙең тәбиғәттә лә төрлөсә үҙгәреүен күҙәтеүҙе ойоштороу (бер үк предметты уйынсыҡ майҙансығында көҙөн, яҙын, ҡышын, йәйен);.

Төҫтәрҙең атамаларын әйтә, уларҙың айырмаһын, төрлө сағылыштарын билдәләй һәм рәсемдә ҡуллана белергә өйрәтеү.

Сюжетлы һүрәт төшөрөү. Сюжетлы рәсем төшөрөүгә өйрәтеүҙе дауам итеү. Предметтарҙың дәүмәл буйынса айырмаһын һүрәтләй белеү (турғай бәләкәй, ҡарға ҙур), кешеләрҙең, йәнлектәрҙең хәрәкәтен күрһәтеп төшөрөү.

Һүрәтте ҡағыҙҙа нисек урынлашҡан, шулай уҡ урынлаштырырға өйрәтеү, һүрәтләнгән предметтарҙың ҙурлығына иғтибарҙарын йәлеп итеү (ағас бейек, сәскә тәпәшерәк). Һүрәттә композиция төҙөгәндә кешеләрҙең, йәнлектәрҙең хәрәкәтен, үҫемлектәрҙең елгә эйелеүен дөрөҫ күрһәтеү.

Халыҡ ижадын һәм автор әҫәрҙәренең сюжетын дөрөҫ һүрәтләү һәләтен үҫтереү. Үҙ-аллылыҡты үҫтереү һәм композицияның темаһын, төҫөн үҙ-аллы һайлау.

Декоратив һүрәт төшөрөү. Халыҡ биҙәктәрен төҙөү: рус, башҡорт халыҡ биҙәктәрен айыра, төшөрә, буяй белеү. Көнкүреш әйберҙәре силуэттарын биҙәү.

Балаларҙа декоратив ижадты үҫтереү. Халыҡ сәнғәте менән (гжель, городец, хохлома) таныштырыуҙы дауам итеү. Халыҡ декоратив сәнғәтенең айырым төрҙәрендәге төҫтәрҙе айырырға һәм дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү. Төрлө формалағы ҡағыҙҙа, уйынсыҡтар һәм предметтар силуэтында композиция төҙөү һәләтен үҫтереү. Декоратив композиция төҙөгәндә халыҡ сәнғәтенең биҙәктәрен һәм төҫтәрен урынлы ҡулланырға өйрәтеүҙе дауам итеү.

Әүәләү. Предметтың төп һәм башҡа өлөштәренең пропорцияһын һаҡлап хәрәкәтләнеүен, кәүҙә торошон сағылдырып әүәләргә өйрәтеүҙе дауам итеү. Әүәләгән предметтың өҫтөн бармаҡтар һәм стека ярҙамында тигеҙләү, матурлау, биҙәкләү.

Бергәләп төрлө сюжетҡа скульптура төркөмөнән композиция төҙөп әүәләү. Ҡатмарлы формалы предметтарҙы әүәләгәндә пропорция һаҡларға, стека менән соҡоп биҙәргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Декоратив әүәләү. Декоратив әүәләү алымдарын үҫтереүҙе дауам итеү, төрлө әүәләү алымдарын ҡулланыу (һылау, соҡоп, тәрән рельеф). Балсыҡтан әүәләгәндә пластинаны таяҡса ярҙамында биҙәргә өйрәтеү. Төрлө төҫтәге пластилиндан һәм балсыҡтан предметлы, сюжетлы, коллектив композиция төҙөүҙө дауам итеү.

Ике-өс предметты әүәләп, уларҙан сюжетлы композиция төҙөү, әүәләнгән предметтарҙы халыҡ биҙәктәре һәм орнаменттары менән биҙәй белеүҙе камиллаштырыу.

Ҡорама йәбештереү. Предметты һәм берәй темаға бәйле сюжетты ҡорамаларҙан йәбештерә белеүҙе дауам итеү: альбом битендә дөрөҫ урынлаштырып, һәр өлөштөң пропорцияһын һаҡлап, эш итергә күнектереү.

Төрлө биҙәктәрҙе, орнаменттарҙы һәм композицияларҙы геометрик фигуралар һәм үҫемлектәр элементтарын ҡулланып төҙөү.

Ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе балалар уйы буйынса йәки халыҡ сәнғәте өлгөһөндә йыйып, йәбештерә белеү.

Ҡағыҙҙы төрлө ысул менән ҡырҡыу, йыртыу, өҙөү, күләм биреп йомарлау, елем менән кәрәкле урынын һылап йәбештерергә өйрәтеү.

Ҡәләм менән предметтың силуэтын төшөрөп, мозаика ысулы менән йәбештереү.

Биҙәү-ҡулланма ижады: ҡағыҙ һәм ҡатырға менән эш. Дүртмөйөшлө, тура дүртмөйөшлө, түңәрәк формалы ҡағыҙҙы төрлө йүнәлештә бөкләү һәләтен үҫтереү (пилотка); төрлө фактуралы ҡағыҙҙы ҡулланыу, шаблон ярҙамында билдәләп эшләү, уйынсыҡтар төҙөргә өйрәтеүҙе дауам итеү. Төҫлө ҡағыҙ киҫәгенән предметтар эшләү (балаҫ, юл), уйынсыҡтар, сувенирҙар, байрам өсөн биҙәүестәр эшләгәндә төҫтәрҙе дөрөҫ һайлау.

Өлгө буйынса эшләү һәләтен үҫтереү. Оригами ысулын ҡулланып күләмле уйынсыҡтар эшләргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Биҙәү-ҡулланма ижады: туҡыма менән эш. Энәгә еп һаплау, төйөн төйнәү, төймә тегеү, ябай әйберҙәр тегеү һәләтен үҫтереү (ҡурсаҡ өсөн алъяпҡыс, орлоҡтар өсөн тоҡ), төрлө фактуралағы туҡыма киҫәген ҡулланып, аппликация эшләү, алдан уйланылған сюжеттың контурын аҡбур ярҙамында һыҙыу һәм дөрөҫ итеп ҡырҡыу алымдарын ныҡытыу.

Биҙәү-ҡулланма ижады: тәбиғи материалдар менән эш. Тубырсыҡтан, ботаҡтан, үләндән һәм башҡа тәбиғи материалдарҙан кешеләрҙең, йәнлектәрҙең, ҡоштарҙың һындарын эшләү һәләтен үҫтереү, дөйөм композиция төҙөү (әкиәт геройҙары, ялан), образдарҙы дөрөҫ тасуирларға өйрәтеүҙе дауам итеү. Күҙ алдына килтерә белеү һәм фантазияны үҫтереү. Материалдар менән һаҡ һәм һаҡсыл эш итергә өйрәтеү.

ҠОРОЛМАЛАР ҠОРОУ ҺӘМ МОДЕЛЛӘШТЕРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Өҫтәлдә йәки иҙәндә уйнау өсөн ҡулланылған төҙөлөш материалдарын формаһына, ҙурлығына ҡарап танырға, айырырға, атамаһын әйтә белергә өйрәтеү *(кубик, кирбес, пластина, өс ҡырлы призма-ҡыйыҡ)*, яҫылыҡта төҙөлөш материалдарын урынлаштырыу варианттары менән таныштырыу.

Өлгө буйынса ябай алымдар менән төрлө ҡоролмалар төҙөргә өйрәтеү: кирбесте пластинаға һалыу (*машина*), кирбесте, йә кубиктарҙы бер-береһе өҫтөнә һалыу *(башня, бағана, баҫҡыс)*.

Кубик, пластина һәм кирбестәрҙе бер-береһенә текәтеп, берләштереп өҫтәлдә теҙеү *(киң, тар юл)*.

Төҙөү материалдарын бер-береһенең өҫтөнә йәки терәтеп һалыу юлы менән төрлө ҡоролмалар эшләргә өйрәтеү.

Уйынсыҡтар ҡулланып, сюжетлы ҡоролмалар төҙөргә өйрәтеү: *ҙур машинаға – ҙур гараж; бәләкәй машинаға – бәләкәй гараж.*

Уйындан һуң төҙөлөш материалдарын урынына йыйырға күнектереү.

Ябай ғына пластмассанан эшләнгән конструктор менән таныштыра башлау.

Йәй осоронда тәбиғи материалдарҙы ҡулланып *(ҡом, һыу, тубырсыҡ, ҡабырсаҡ, ҡырсын таш һ.б.)* төҙөргә өйрәтеү.

Ололар ярҙамында ябай ғына ҡоролмалар төҙөй (*бағана, машина, күпер һ.б.*). Үҙе төҙөгән ҡоролма тураһында бер-ике һүҙ менән нимә эшләгәнен әйтергә, ҡоролмаһы менән уйнарға өйрәтеү.

Баланың төҙөү-ҡороу эшмәкәрлегендә үҙ-аллылыҡ күрһәтеүен хуплау.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Формаһы, ҙурлығы буйынса төҙөү-ҡороуҙа ҡулланылған материалдарҙы танып, атамаларын әйтә белергә өйрәтеү.

Тар, киң, бейек, тәпәш, оҙон, ҡыҫҡа төшөнсәләрен аңлап, ҡоролмаларҙа ҡуллана белеү.

Ҡоролма өлгөһөн ябай ғына анализлап, уның өлөштәрен айырып, һәр өлөштөң ниндәй форманан тороуын билдәләп, күрһәтә белеү.

Ҡоролманың яҫылыҡтағы йүнәлештәрен билдәләй белеү күнекмәләрен формалаштырыу.

Ябай ғына төҙөү-ҡороу ысулдарын үҙләштереү: кубиктарҙы, кирбестәрҙе, пластиналарҙы горизонталь рәүештә бер йәки ике рәткә теҙеү *(машиналар өсөн юл)* һ.б., төҫө, формаһы буйынса уларҙы сиратлатып бер-береһенән әҙ генә айырып баҫтырып ҡуйыу *(ҡапҡа, өй)*, ҡоролмаларҙың өҫтөн ҡаплай белеү һ.б.

Ололарҙың күрһәтеүе буйынса, ҡоролмаларҙы ҡабатлап төҙөй белеү.

Бер төрлө ҡоролманы икенсегә әйләндереү; уның бер өлөшөн икенсеһе менән алмаштырыу; ҡоролманы йә юғарыға, йә буйға дауам итеп төҙөү.

Шарт буйынса, һүрәткә ҡарап, йәки үҙенең уйы буйынса төҙөй белеү.

Төрлө төҫтәге фигураларҙы ҡулланып, төҫлө ҡоролма-моделдәр эшләү.

Төҙөлөш материалдарын таный, атамаһын әйтә һәм ҡоролмаларҙы ҡуллана белә. Кирбестәрҙе, пластиналарҙы вертикаль рәүештә урынлаштыра ала.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Төҙөү-ҡороуҙы башҡарғанда конструкцияның деталдәрен белеү: кубик, кирбес, призма, пластина, брус. Мәҫәлән: брус – дүрт ҡырлы итеп юнылған ағас. Уларҙы таный, әйтә белеү: конструктив үҙсәнлектәренә (тотороҡлоғона, һығылмалығына, йомшаҡлығына, ныҡлығына, формаһына, ҙурлығына) ҡарап, уларҙы ҡуллана белеү.

Төҙөү объекттары тураһында дөйөмләштерелгән төшөнсәләр формалаштырыу.

Төрлө күләмдәге, бейеклектәге, төҫтәге ябай ғына бер нисә ҡоролма төҙөү, дөйөм яҡтарын һәм айырмаһын табып, уларҙы сағыштыра белеү.

Өлгөһөҙ, тәрбиәсенең тәҡдимдәре, йә билдәле шарт буйынса, ҡоролманың моделен күҙаллай һәм төҙөй белеү, уйынсыҡтарҙың ҙурлығына, бейеклегенә ҡарап, уларҙан төрлө конструкциялар һәм ҡоролмалар төҙә белеү.

Ижади эшкә әҙерлек: үҙ-аллы тема, материал һайлап ала белеү, төрлө ҡоролмаларҙың айырым деталдәрен һәм предметты алмаштырған әйберҙәрҙе ҡулланыу күнекмәләренә өйрәтеү.

Икәүләп һәм күмәкләп эшләү күнекмәләрен үҫтереү.

Тәбиғи материалдарҙың үҙсәнлектәрен белеү һәм, уларҙы (ағас ҡайыры, ботағы, япраҡтары, тубырсыҡтар, сәтләүек ҡабығы, мүк һ.б.) бер-береһенә йәбештереп, төрлө предметтар эшләү.

Ҡағыҙ менән эшләүҙең төрлө ысулдарын үҙләштереү (бөтәрләү, йыртыу, бөкләү,төрлө ҙурлыҡтағы һәм төҫтәге йомарлаҡтар һ.б. эшләү), дүртмөйөштө мөйөштәрен һәм ситтәрен тап килтереп, уртаға бөкләп (автобус, байраҡ, өй, гараж һ.б.) эшләү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Төрлө төҙөлөш-ҡоролма материалдарын һәм уларҙың үҙенсәнлектәрен белергә, айырырға өйрәтеү.

Предметтарҙы һәм өлгөләрҙе үҙ-аллы анализлап, уларҙың төп һәм ярҙамсы өлөштәрен билдәләп, бер-береһе араһында булған бәйләнештәрҙе табып, уларҙың мөһим үҙенсәлектәрен төркөмләп, ҡоролмалар төҙөүҙә төрлө ысул ҡулланып эш итә белеү.

Һүрәткә, фотоһүрәткә, чертежға ҡарап, кәрәкле төҙөлөш материалдары һайлап алып төҙөй белеү (өйҙәр, спорт һәм уйын ҡорамалары һ.б.). Оригами ысулы

менән төрлө әйберҙәр эшләй алыу. Тәбиғи һәм ташландыҡ материалдарҙан уйынсыҡтар эшләй белеү.

Бер деталде икенсеһе менән алмаштырыу ҡағиҙәһен белеү һәм ҡулланыу.

Предметтарҙы төҙөп ҡороу планын күҙ алдына килтереү һәм уны тормошҡа ашыра белеү һәләтен үҫтереү.

Кем ниндәй ҡоролма төҙөргә тейешлеген алдан билдәләп, бергәләп эш итергә өйрәтеү. Төҙөлгән ҡоролманы анализлап, баһа бирергә өйрәтеү, етешһеҙлектәрен төҙәтә белеү.

Төрлө формалағы һәм ҙурлыҡтағы пластина, брус , цилиндр, конус һ.б. яңы деталдәр менән таныштырыу.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Төрлө ҡоролмалар төҙөүгә теләк уятыу. Ҡоролмаларҙың төп һәм ярҙамсы өлөштәрен айыра, уларҙың үҙенсәлектәрен, формаһын, дәүмәлен, урынлаштырыу урынын билдәләп, беркетергә өйрәтеү, үҙ-аллы ижади эш итергә күнектереү.

Күмәкләп, парлап эшләү күнекмәләрен нығытыу: кемдең эштең ниндәй өлөшөн башҡарыуҙы билдәләү, алдан нисек ҡоролма төҙөүҙе планлаштырыу, бер-береһенә ҡамасауламай дөйөм планға ярашлы эшләүҙе ойоштороу.

Ҡулланышы бер үк булған предметты төрлө маҡсатҡа ярашлы итеп ҡороу (йәйәүлеләр өсөн күпер, ауыр йөк машиналары өсөн күпер, поезд үтер өсөн күпер).

Дөйөм темаға (сюжетҡа) бәйле ҡоролмалар төҙөү (урам, машиналар, өйҙәр һ.б.).

Төрлө пластмасс конструкторҙар менән таныштырыу. Һүрәт, тәрбиәсе әйтеүе буйынса һәм үҙе уйлап ҡоролмалар төҙөү.

Өлөштәре ағас сөйҙәр менән беркетелә торған ағас конструкторҙар ярҙамында йорт йыһаздарын, машиналарҙы һ.б. һүрәт, йәки схема, йәки тәрбиәсе әйтеүе буйынса төҙөү. Төҙөлгән ҡоролмаларҙы пластмасс тотҡостар һәм ағас сүкештәр ярҙамында сисеү.

Предметтың төҙөлөшөн күреп, уның ниндәй өлөштәрҙән тороуын билдәләй белеү.

МУЗЫКАЛЬ ТӘРБИӘ

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Төрлө инструменттарҙа, яҙмаларҙа башҡарылған музыкаль пьесаларға, бәләкәй күләмле йырҙарға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Музыка уйын ҡоралдары менән таныштырыу. Йырлау интонацияларын, ябай ритмик хәрәкәттәр тәрбиәләү.

Балаларҙың ихтибарын тыныс һәм етеҙ йырҙарға, төрлө характерҙағы музыкаль пьесаларҙы тыңлауға йүнәлтеү.

Музыкаль пьесаларҙың йөкмәткеһен аңлау. Музыкаль өндәрҙең нәҙек йәки ҡалын тауышын, динамикаһын айырырға өйрәтеү *(ҡыңғырау, металлофон һ.б.).*

Тыңлау. Был төркөмдә бигерәк тә халҡыбыҙҙың боронғо йырҙарын тыңлатыу мөһим. Ҡурайҙа, ҡумыҙҙа башҡарылған көйҙәрҙе ишеттереү. Уларҙы барабанда, дөңгөрҙә (бубен) уйнарға, ҡурайҙа өрөргә, ҡумыҙҙа уйнау хәрәкәттәрен ҡабатлай белергә өйрәтеү.

Йырлау. Йырҙа ҡабатланған музыкаль фразаларҙы тәрбиәсегә ҡушылып йырлау.

Музыкаль - ритмик хәрәкәттәр. Ритмик хәрәкәттәрҙе көй менән бергә башларға һәм көйҙөң аҙағына бөтөрөргә, көйҙөң характерына ҡарап хәрәкәтләнергә өйрәтеү. Ябай бейеү хәрәкәттәрен өйрәтеү (*сәпәкәйләү, тыпырлатыу, ҡул сугын әйләндереү, бәүелтеү*).

Тәрбиәсе күрһәтеүе буйынса уйын күнегеүҙәрен ҡабатлатыу (ҡуяндар һикерәләр, ҡоштар осалар, ем сүпләйҙәр һ.б.).

Бейеү ваҡытында түңәрәк буйлап хәрәкәт итеү *(ҡулдар менән тотоношоп, парлашып бер-бер артлы йырҙың тактына бәйле хәрәкәт итеү).*

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Балаларҙа төрлө характерҙағы көйҙәрҙе (бейеү, бишек йыры, марш) музыкаль яҡтан һиҙемләү һәм уларҙы айыра белеү һәләтен тәрбиәләү, уларҙы тыңлау теләген уятыу.

Таныш пьесаларҙы һәм йырҙарҙы танырға өйрәтеү.

Балаларҙа йырлау һәләтен үҫтереү. Бергәләп йырларға өйрәтә башлау. Хәрәкәттең һәм көйҙөң берҙәм үтәлешенә иғтибарлыҡ үҫтереү.

Тыңлау. Музыкаль әҫәрҙе аҙағына тиклем тыңларға, унда нимә тураһында йырланыуын һөйләргә өйрәтеү. Музыканың характерын (күңелле, тыныс) аңларға өйрәтеү. Ике бүлекле пьесаны таный белеү. Өндәрҙең октава һәм септима араһындағы ҡалынлығын һәм нәҙеклеген айырыу.

Яңғырауҙың (көслө, тыныс) үҙгәреүен һиҙемләргә өйрәтеү. Музыкаль ҡоралдарҙың яңғырашын айырыу һәм уларҙың атамаһын әйтә белеү (барабан, шалтырауыҡ, дөңгөр, ҡурай, металлофон, гармун).

Боронғо башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлау.

Йырлау. Ре (ми) – *ля* (си) диапазонында музыка ҡоралы уйнауына ҡушылып, күңелле һәм шат кәйеф менән, наҙлы итеп, артыҡ ҡысҡырмай ғына, бер темпта һәм бер-береһенән ҡалышмай, һүҙҙәрҙе асыҡ итеп әйтеп йырларға өйрәтеү.

Йыр ижады. Балаларға сәңгелдәк йырҙарын «бәү-бәү» өндәренә, күңелле көйҙәрҙе «*лә-лә*» өндәр ҡушылмаһына йырларға өйрәтеү. Һалмаҡ һәм күңелле көйҙәрҙе айырырға өйрәтеү.

Музыкаль - ритмик хәрәкәттәр. Ике өлөштән торған көй формаһына ярашлы һәм тауыштың яңғырау көсөнә (көслө, әкрен) ҡарап хәрәкәттәрҙе үҙгәртергә өйрәтеү.

Көйҙөң башында һәм аҙағында хәрәкәтте үҙ-аллы башлау һәм тамамлау. Уртаса һәм шәп темптағы, тыныс йәки етеҙ характерлы көйгә ярашлы итеп (бөтәһе менән бергә һәм яңғыҙ) маршта атларға өйрәтеү: парлашып йөрөү, парлашып өйөрөлөү, ике аяҡты алмашлатып тыпырлау, ҡул суғы өсөн күнегеүҙәр башҡарыу, аяҡтарҙы алмашлап һикереп йүгереү (галоп).

Төп хәрәкәттәр (йөрөү һәм йүгереү) күнекмәләрен камиллаштырыу. Башҡалар менән бергә һәм яңғыҙ ғына атлап йөрөргә, музыка аҫтында еңел, һалмаҡ һәм тиҙ темпта йүгерергә өйрәтеү.

Бейеү хәрәкәттәрен башҡарыу сифатын яҡшыртыу: сиратлаштырып, ике аяҡ һәм бер аяҡ мелән тыпырҙау.

Парлашып әйләнеү, тура галоп башҡарыу, музыкаль әҫәрҙең темпына һәм ритмына ҡарап, предметтар, уйынсыҡтар менән һәм уларҙан башҡа көйгә тап килтереп хәрәкәтләнә белеү күнекмәләрен үҫтереү. Уйын һәм әкиәт образдарын тәьҫирле һәм хис-тойғоло итеп сағылдыра алыуға булышлыҡ итеү: *айыу килә, бесәй йәшеренеп кенә атлай,сысҡан балалары йүгерешә, ҡуян һикерә һ.б.*

Музыкаль-уйын һәм бейеү ижады. Көйгә ҡушылып ябай бейеү хәрәкәттәрен үҙ-аллы башҡарыуҙы тәрбиәләү. Йәнлектәрҙең холҡон һүрәтләгән хәрәкәттәрҙе дөрөҫ күрһәтә белеү (айыу килә, бесәй шыуыша һ.б.)

Музыкаль ҡоралдарҙа уйнау. Балаларҙы ябай музыка ҡоралдарында уйнап һәм уларҙың яңғырауышы менән таныштырыу: металлафон, ҡыңғырау, шалтырауыҡ, барабан, дөңгөр. Уларҙы һуҡма ҡоралдарҙа уйнарға өйрәтеү.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Музыкаға һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү, уны тыңларға теләк, ынтылыш тәрбиәләү, музыканан алған хис-тойғоно һәм тәьҫораттарҙы байытыу, музыкаль яҡтан мәҙәнилекте үҫтереү.

Тыңлау. Көйҙө иғтибар һәм ҡыҙыҡһыныу менән тыңларға, уның характерын тойорға өйрәтеү. Көйө буйынса йырҙы, пьесаны таный белеү. Өндәрҙе юғарылығы буйынса айыра белеү (секта, септима).

Башҡорт музыка ҡоралдары – ҡурай һәм ҡумыҙ менән яҡындан танышыу, уларҙа башҡарылған көйҙәрҙе тыңлау, характерҙары буйынса айыра белергә

өйрәтеү. Башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлау, улар тураһында ҡыҫҡаса төшөнсә биреү.

Йырлау. Йырҙы көсәнмәй, тасуири, етеҙ һәм моңло итеп йырларға, тынды фразалар араһында алырға, һүҙҙәрҙе асыҡ әйтергә, көйҙөң мелодияһын дөрөҫ тапшырырға өйрәтеү.

Йырҙы берҙәм башларға һәм тамамларға өйрәтеү, музыка инструменты менән бергәләп йәки яңғыҙ йырлау.

Йыр ижады. Бишек йырына көйҙө үҙ-аллы уйлап сығарып, ижад итә белергә өйрәтеү. Йырлап бирелгән һорауҙарға («Һинең исемең нисек?», «Бесәй, һиңә ни кәрәк?», «Һин ҡайҙа?») яуап бирергә өйрәтеү. Бирелгән текстҡа импровизация менән көй сығарыу һәләтен формалаштырыу.

Музыкаль-ритмик хәрәкәттәр. Балаларҙы көйҙөң характерына ярашлы хәрәкәт итергә өйрәтеү, ике һәм өс өлөштән торған көйгә ҡарап, хәрәкәттәрҙе үҙ-аллы үҙгәртә белергә өйрәтеү.

Бейеү хәрәкәттәрен башҡара белеү: аяҡтарҙы алмаш-тилмәш аяҡ осона һәм үксәгә ҡуйыу, ике аяҡты бергә ҡуйып, тубыҡтарҙы ҡыҫып, торған урында әҙ генә бер нисә тапҡыр эйелеү («пружинка»); яңғыҙ һәм парлашып әйләнеү; парлашып түңәрәктә йөрөү; ат булып сабыу; түңәрәктән сығып таралышыу һәм кире түңәрәккә тора белеү; аяҡтарҙы бер-бер артлы алмаштырып баҫып, аҙымдар яһау һәм тыпырлау; предметтар менән хәрәкәттәр башҡарыу; аяҡтан-аяҡҡа һикереү.

Музыкаль-уйын һәм бейеү ижады. Уйынлы образдарҙы тасуири итеп күрһәтергә өйрәтеү (япраҡ өйөрөлә, ҡар яуа). Йырҙарҙы уйнап хәрәкәтләнеп башҡарыу һәм сәхнәләштерә белеү (шаян ҡуян, хәйләкәр төлкө, уҫал бүре һ.б.).

Музыкаль ҡоралдарҙа уйнау. Ябай көйҙәрҙе ағас ҡалаҡта, шалтырауыҡта, дөңгөрҙә, металлафонда ябай көйҙәрҙе уйнарға өйрәтеү. Ҡурайға, ҡумыҙға ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Музыкаға ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм мөхәббәт, уны тоя белеү һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү. Классик музыка, халыҡ көйҙәре һәм хәҙерге заман музыкаһы менән таныштырыу нигеҙендә музыкаль мәҙәнилекте формалаштырыу.

Балаларҙың музыкаль яҡтан һәләттәрен (тауыш юғарылығын, ритмын, тембрын, динамикаһын) айырыуҙы һәм ишетеүҙе үҫтереүҙе дауам итеү.

Йырлау, музыка аҫтында хәрәкәттәр яһау, балалар музыка уйын ҡоралдарында уйнау һәм импровизациялау күнекмәләрен үҫтереү; балаларҙың иҗади әүҙемлегенә булышлыҡ итеү.

Тыңлау. Музыкаль әҫәрҙәрҙең жанрҙарын (марш, бейеү, йыр) айырырға өйрәтеү.

Музыкаль хәтерҙе үҫтереү, музыкаль әҫәрҙең айырым өлөштәре (инеш, йомғаҡлау, музыкаль фраза) буйынса уларҙы таныуҙы камиллаштырыу.

Квинта сиктәре эсендә өндәрҙең юғарылығын, яңғыраштары буйынса музыка уйын ҡоралдарын (клавишлы-бәрмә һәм ҡыллы: фортепиано, скрипка, виолончель, балалайка) айырыу күнекмәләрен үҫтереү. Төрлө музыка ҡоралдарының яңғырауын таныу (фортепиано, баян, ҡурай, ҡумыҙ). Әйтелгән ҡоралдарҙа башҡарылған йырҙарҙы тыңлатыу.

Йырлау. Балаларҙы тасуири итеп, тыныс, ҡысҡырмай, талғын, еңел, ре$_{ү}$ – до$_{ә}$ диапазонында йырларға өйрәтеү; тынды йыр алдынан һәм музыкаль фразалар араһында алырға өйрәтеү; һүҙҙәрҙе асыҡ әйтеү; йырҙы ваҡытында башлау һәм тамамлау; көйҙө дөрөҫ итеп башҡарырға өйрәтеү; элек өйрәнелгән йырҙарҙы яңғыҙ башҡарыу.

Йыр ижады. Бирелгән текстҡа ярашлы көй уйлап сығарырға өйрәтеү. Төрлө көйҙәрҙе яңғырашы буйынса ҡабул итеп, уларҙы үҙ-аллы характеры буйынса айыра белергә өйрәтеү: моңло һәм яғымлы бишек йырын, дәртле һәм теремек марш көйөн, һалмаҡ вальсты, шат күңелле бейеү көйөн һ.б.

Музыкаль-ритмик хәрәкәттәр. Көйҙөң характерына, музыкаль фразаларға ярашлы хәрәкәттәрҙе үҙгәртә белергә, төрлө предметтар менән, йәки уларҙан башҡа башҡарырға өйрәтеү.

Бейеү хәрәкәттәрен өйрәтеү: аяҡтарҙы алмашлап баҫып, аҙымлап атлау; тубыҡтарҙы күтәрә биреп баҫыу; ҡул суҡтарын һелкетеү; бармаҡтарҙы сиртеү; бер урында тыпырлау; бер аяҡта һикереп, алға табан аҙым яһау һәм икенсе аяҡ менән дә шул уҡ хәрәкәттәрҙе башҡарыу. Балаларға ошо хәрәкәттәрҙән торған бейеүҙәрҙе өйрәтеү.

Йырлы түңәрәк бейеүҙәре, шулай уҡ башҡа халыҡтарҙың бейеүҙәре менән таныштырыу. Музыкаль уйындарҙы һәм бейеүҙәрҙе үҙ-аллы башҡарыу. Йырлы түңәрәк бейеүҙәренең йөкмәткеһен сәхнәләштереү.

Төрлө уйындарҙа әкиәт хайуандарын һәм ҡоштарын (ат, кәзә, төлкө, айыу, ҡуян, торна, ҡоҙғон һ.б.) кәүҙәләндерергә өйрәтеү.

Музыка ҡоралдарында ябай ғына көйҙәрҙе яңғыҙ һәм бәләкәй төркөмдәр менән уйнарға өйрәтеү.

Музыкаль-уйын һәм бейеү ижады.

Бейеү ижадын үҫтереү; ижадта үҙ-аллылыҡ күрһәтеп, бейеүҙәр өсөн хәрәкәттәр уйлап сығарырға, бейеү композицияһын төҙөргә өйрәтеү.

Үҙ-аллы йырҙың эстәлеген сағылдырыусы хәрәкәттәр уйлап сығарырға өйрәтеү.

Йырҙарҙың, әйлән-бәйлән уйындарының эстәлеген сәхнәләштереү теләге уятыу.

Балалар музыка уйын ҡоралдарында уйнау. Балаларҙы иң ябай көйҙәрҙе балалар музыка уйын ҡоралдарында уйнарға; көйҙөң үҫеш динамикаһын һәм темпын һаҡлап, таныш йырҙарҙы шәхси рәүештә һәм бәләкәй төркөмдәр менән башҡарырға өйрәтеү.

Балалар ижадын үҫтереү, уларҙы әүҙем рәүештә үҙ-аллы башҡарыуға дәртләндереү.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Балаларҙа төрлө жанрҙағы музыкаль әҫәрҙәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Музыка тәьҫире аҫтында алынған тәьҫораттарҙы киңәйтеү.

Йырлау тауышы аппаратын формалаштырыуға, музыкаға эйәреп хәрәкәт итеү күнекмәләрен үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Ябай ғына кимәлдә музыкаль төшөнсәләр менән таныштырыу.

Ансамблдә (төрлө музыка ҡоралдарында) уйнарға өйрәтеү.

Йырҙарҙы, бейеүҙәрҙе үҙ-аллы башҡарыуға ынтылыш тәрбиәләү.

Тыңлау. Квинта - терция сиктәре эсендә көйҙөң моңон, яңғырау үҙенсәлеген, көсөн ишетә һәм айыра белеү һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү. Өндәрҙең юғары, түбән яңғырау нескәлеген айыра белеү. Таныш әҫәрҙе таный белеү.

Балаларҙа музыкаль тәьҫирҙәрҙе байытыуҙы һәм музыкаль зауыҡ формалаштырыуҙы дауам итеү, музыкаль хәтерҙе үҫтереү. Фекерләү ҡеүәһен, күҙаллау, хәтер, ишетеү һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Ябай ғына музыкаль төшөнсәләр (темп, ритм); музыкаль жанрҙар (опера, концерт, симфоник концерт), композиторҙар һәм музыканттар ижады менән таныштырыу.

Бейеүҙе (полька, вальс, халыҡ бейеүе), йырҙы, маршты айырып әйтә белеү һәм йөкмәткеһенең өлөштәрен таный белергә өйрәтеү (инеш, ҡушымта, аҙағы).

Вокаль музыка менән таныштырыу: башҡорт халыҡ йырҙары, башҡа халыҡ йырҙары, хәҙерге заман йырҙары, инструменталь музыка менән таныштырыу: фортепиано, баян, скрипка, ҡурай, оркестр менән таныштырыу: халыҡ инструменттары, тынлы һәм симфоник оркестр.

Башҡорт халҡының тормошонда ҡурайҙың, йырҙың, ҡурайсыларҙың тотҡан урынын күрһәтеү. Атаҡлы ҡурайсылар (Ишмулла Дилмөхәмәтов, Роберт Юлдашев, һ.б.) башҡарыуында әҫәрҙәр тыңлау. Халыҡ йырҙарын һәм бейеүҙәрен башҡарыусы арҙаҡлы шәхестәр менән таныштырыу (Рәшиҙә Туйсина, Риф Ғәбитов һ.б.).

Ҡобайырҙар менән таныштырыу. Башҡортостан һәм Рәсәй Федерацияһының гимндары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Уларҙы көйө аша таный белеү.

Классик һәм бөгөнгө заман композиторҙарының балалар өсөн яҙған әҫәрҙәре менән танышыу.

Балаларҙы Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Дәүләт гимндары менән таныштырыу.

Йырлау. Балаларҙы тасуири итеп, тыныс тауыш менән, талғын, еңел, реү – доә диапазонында йырларға өйрәтеү. Тынды музыкаль фразалар араһында һәм йырҙың башында дөрөҫ итеп алып, фразаның аҙағына тиклем тоторға өйрәтеү. Йырҙы үҙаллы башлау һәм тамамлау. Яңғыҙ һәм бергәләп йырлау.

Йыр ижады. Халыҡ йырҙарына оҡшатып, үҙ-аллы көйҙәр сығарырға; таныш йырҙарҙы, музыкаль пьесаларҙы һәм бейеү көйҙәрен файҙаланып, өлгө буйынса, йәки унан башҡа бирелгән темаға көйҙәр уйлап сығарырға өйрәтеү.

Музыкаль-ритмик хәрәкәтләр. Бейеү хәрәкәттәре күнекмәләрен, бейеүҙә хистойғоно сағылдырып, музыканың характерына тап килтереп, ритмик хәрәкәтләнеү күнекмәләрен үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Көйҙөң характерына ярашлы итеп ритмлы хәрәкәттәр башҡарыу һәләтен нығытыу. Бейеү хәрәкәттәрен өйрәтеү (аҙымдарҙы алмашлап атлау, полька, галоп, үксә һуғыу, бармаҡ сиртеү, тыпырлау һ.б.) Балаларға ошо хәрәкәттәрҙән торған бейеүҙәр өйрәтеү.

Милли халыҡ бейеүҙәре (рус, башҡорт, татар, белорус, украин һ.б.) менән таныштырыу.

Бейеү-уйын ижадын үҫтереү; йырҙарҙы, әҙәби әҫәрҙәрҙе сәхнәләштергәндә төрлө образдарҙы зауыҡлы итеп башҡарыу күнекмәләрен формалаштырыу.

Музыкаль-уйын һәм бейеү ижады.

Музыкаль үҫеште тәьмин иткән эшмәкәрлектең аңлайышлы төрҙәрендә (оркестрҙа уйнау, йырлау, бейеү хәрәкәттәре һ.б.) балаларҙың ижади әүҙемлеген үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Төрлө характерҙағы музыкаға ярашлы импровизациялар уйлап табырға өйрәтеү (саңғысы, конькиҙә шыуыусы, һыбайлы, балыҡсы, хәйләкәр бесәй, асыулы кәзә бәрәсе һ.б.)

Йырҙың эстәлеген сағылдырыусы хәрәкәттәр уйлап сығарырға, күҙ алдына килтергән предметтар менән төрлө образдар тыуҙырырға өйрәтеү.

Хәрәкәттәрҙә музыкаль образдарҙы сағылдырыу ысулдарын үҙ-аллы эҙләргә өйрәтеү.

Музыкаль һәләтте үҫтереү; әүҙемлек һәм үҙ-аллылыҡ күрһәтеүҙе хуплау.

Балалар музыка уйын ҡоралдарында уйнау. Төрлө музыка уйын ҡоралдары ярҙамында башҡарылған һәм оркестр өсөн эшкәртелгән музыкаль әҫәрҙәр менән таныштырыу.

Балаларҙы металлофонда, һыбыҙғыла, бәрмә музыка ҡоралдарында (барабан, шөңгөр (бубен), шалтырауыҡ), башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында (ҡумыҙ, ҡурай, думбыра, һ.б.) рус халыҡ музыка ҡоралдарында (өсмөйөш, ағас ҡалаҡ, дөңгөр, һ.б.) уйнарға өйрәтеү.

Ансамблдә, йә оркестрҙа музыкаль әҫәрҙе уйнарға өйрәтеү.

«ФИЗИК ҮҪЕШ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ӨЛКӘҺЕ

«Физик үҫеш» эшмәкәрлектең йөкмәткеһе үҙ эсенә төрлөсә хәрәкәтләнеүҙе, координация һәм һығылмалылыҡ кеүек физик сифаттарҙы үҫтереүҙе һәм организмдың төп хәрәкәтләнеү системаһының дөрөҫ формалашыуына нигеҙ һалыуҙы күҙаллай.

Баланың үҙ хәрәкәт-торошо менән идара итә белеүенә өйрәнеүҙе, ҡулдарҙың эре һәм ваҡ моторикаһының үҫешенә булышлыҡ итеүсе күнекмәләр башҡара белеүен, организмға зыян килмәҫлек итеп төп хәрәкәттәрҙе дөрөҫ үтәүен (атлау, йүгереү, һикереүҙәр, ике аяҡҡа ла боролоу, эйелеү, тәгәрәү һ.б.) өйрәтеү ҙә инә.

Спорттың ҡайһы бер төрҙәре тураһында башланғыс төшөнсәләрҙең формалашыуын, хәрәкәтле уйын ҡағиҙәләре һәм уларҙы уйнау ысулдары менән таныштырыуҙы үҙ эсенә ала.

Сәләмәт тормош алып барыуҙы, сәләмәт һәм хәүефһеҙ йәшәү ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәүҙе (файҙалы ғәҙәттәр, дөрөҫ туҡланыу, сынығыу алымдарын) ала.

Төп маҡсаттары һәм бурыстары

Сәләмәт тормош тураһында башланғыс төшөнсәләр биреү, балаларҙың һаулығын һаҡлау һәм нығытыу эшен даими рәүештә алып барыу; дөрөҫ һын, кәүҙә торошон формалаштырыу; төп хәрәкәттәрҙе һәм тирә-йүндә дөрөҫ хәрәкәтләнә белеүҙе үҫтереү.

Физик культура. Әүҙемлек, үҙ-аллылыҡ, етеҙлек, хәрәкәтте башҡарғанда уларҙың матурлығын, тасуирлығын, һомғоллоғон сағылдырыуға иғтибар биреүҙе, хәрәкәтле һәм спорт уйындарына, физик һәм спорт күнекмәләренә, үҙ-аллы хәрәкәтләнеү эшмәкәрлегенә ҡыҙыҡһыныу һәм спортҡа ҡарата һөйөү тәрбиәләү.

ПСИХОЛОГИК ҺӘМ ПЕДАГОГИК ЭШТЕҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Сәләмәт тормош тураһында башланғыс төшөнсәләр

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Балаларҙың һаулығын нығытыуҙы дауам итеү. Хәрәкәтләнеүҙең төрлө төрҙәрен үҙләштереүгә өйрәтеү. Баланың арыуын киҫәтеү. Үҙ-үҙен хеҙмәтләндереү һәм әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үтәргә күнектереү.

Ике йәш ярымлыҡ баҡсаға яңы йөрөй башлаған балалар һаны төркөмдә күп булһа, физик тәрбиә эшен программаны еңеләйтеп үткәреү ҡарала.

Йыл эсендә медицина хеҙмәткәрҙәре ҡулы аҫтында тәбиғи факторҙарҙы ҡулланып (һыу, һауа, ҡояш) сыныҡтырыу саралары үткәреү. Был сараларҙы үткәргәндә балаларҙың шәхси үҙенсәлектәрен һәм һаулыҡ торошон иҫтән сығармауҙы күҙ алдында тотоу.

Төркөмдә балаларҙы еңел кейемдә йөрөргә күнектереү. Саф һауала йөрөү ваҡытын тулыһынса маҡсатлы үтәүгә ирешергә.

Махсус сыныҡтырыу сараларын балалар баҡсаһы етәкселеге рөхсәте менән һәм медицина хеҙмәткәрҙәре ҡарамағында атҡарыу.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Балаларҙың һаулығын һаҡлау һәм нығытыу эшен дауам итеү: дөрөҫ һын, кәүҙә торошон формалаштырыу, төп хәрәкәттәрҙе үтәй белеүҙе нығытыу, үҫтереү.

Тирә-йүндә дөрөҫ хәрәкәтләнә белеүҙе үҫтереү. Балаларҙың бергәләп уйнауын, физик күнекмәләр башҡарыуын хуплау.

Әүҙемлек, үҙ-аллылыҡ, күтәренке күңел формалашыуына булышлыҡ итеү.

Төрлө тәбиғи факторҙарҙы (һыу, һауа, ҡояш) ҡулланып, медицина хеҙмәткәрҙәрҙе күҙәтеүе аҫтында балаларҙы сыныҡтырыу саралары үткәреү.

Төркөм бүлмәһендә балаларҙы еңел кейемдә йөрөргә өйрәтеү.

Саф һауала көн тәртибенә ярашлы кейем кейҙереү.

Көн һайын 5-6 минутлыҡ иртәнге гимнастика үткәреү.

Хәрәкәтле уйындарҙа һәм физик күнекмәләрҙе башҡарыуҙа бергәләп, ҡатнашып эш итергә күнектереү.

Физик күнекмәләргә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, буш ваҡытта физкультура йыһаздарын ҡулланырға өйрәтеү.

Мөмкинлек булғанда балаларҙы йөҙөргә өйрәтеү.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Медицина хеҙмәткәрҙәре етәкселегендә тәбиғи факторҙар ҡулланып, сыныҡтырыу саралары үткәреү.

Көн һайын 6-8 минутлыҡ иртәнге гимнастика үткәреү.

Йыл миҙгеленә ярашлы төрлө хәрәкәтле һәи спорт уйындары үткәреү (ҡышын – санала, саңғыла шыуыу, боҙ юлдан аяҡ өҫтөндә йәки ултырып шыуыу; йәйен – велосипедта, самокатта йөрөү). Мөмкинлеккә ҡарап, йөҙөргә өйрәтеү.

Айына 1 тапҡыр 20 минутлыҡ физкультура буйынса күңел асыуҙар, йылына 2 тапҡыр (йәй һәм ҡыш) 45 минутлыҡ физкультура байрамдары үткәреү.

Өлкән төркөм (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Һаулыҡты нығытыу сараларын башҡарыу, төп хәрәкәттәрҙе үтәү оҫталығын байытыу.

Һәр төр хәрәкәттә кәүҙә торошон дөрөҫ тотоуҙы формалаштырыу, әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙ-аллы һәм теләк менән башҡарыуҙы формалаштырыу.

Тән, хәрәкәт матурлығына иғтибар тәрбиәләү.

Медицина хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында тәбиғи сараларҙы ҡулланып, (һыу, һауа, ҡояш) сыныҡтырыу процедуралары физик күнекмәләр менән аралаштырып башҡарыуҙы дауам итеү.

Көн һайын 8-10 минутлыҡ иртәнге гимнастика үткәреүҙе дауам итеү. Дәрестәрҙә 1-3 минутлыҡ, улар араһында 10 минутлыҡ ял минуттары үткәреү.

Балаларҙы үҙ-аллы спорт һәм хәрәкәтле уйындар уйнарға өйрәтеү: ҡышын санала, саңғыла йөрөү; йәйен – ике тәгәрмәсле велосипедта, тәгәрмәсле конькилә йөрөү, йөҙөргә өйрәтеү һ.б.

Айына 1 тапҡыр 25-30 минутлыҡ физкультуранан күңел асыуҙар, 2 тапҡыр 1 сәғәтлек физкультура байрамдары үткәреү. Уларға әҙерлекте бергәләп башҡарыу, сараларҙа балаларҙың һәм ата-әсәләрҙең әүҙем ҡатнашыуын ойоштороу.

Физик яҡтан сыныҡтырыу һәм һауыҡтырыу саралары аша балаларҙа үҙ-аллылыҡ, ижадилыҡ, психик яҡтан тотороҡлоҡ һәм әхлаҡи һыҙаттар тәрбиәләү.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Балаларҙың һаулығын нығытыуҙы һәм сәләмәт йәшәйеш күнекмәләрен үтәргә күнектереүҙе дауам итеү.

Хәрәкәтләнеүҙә ижадилыҡ, үҙ-аллылыҡ, әүҙемлек үҫтереү. Спортҡа ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү тәрбиәләү.

Медицина хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында һәр баланың шәхси үҙенсәлектәренә ҡарап, төрлө сыныҡтырыу саралары үткәреү.

Көн һайын 10-12 минутлыҡ иртәнге гимнастика үткәреү.

Дәрестәр араһында һәм психик энергия күберәк талап ителгән дәрестәрҙә 1-3 минутлыҡ физминуткалар үткәреү.

Тейешле шарттар булдырыу мөмкинлеге булған осраҡта йөҙөргә өйрәтеү.

Баланың үҫеш кимәленә тап килтереп, көн эсендә тейешле хәрәкәтләнеүҙе ойоштороу.

Айына бер тапҡыр 40-ар минутлыҡ физкультуранан күңел асыу, йылына ике тапҡыр (ҡыш, йәй) бер сәғәтлек физкультура байрамы үткәреү.

Физик культура

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө

(2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Хәрәкәтле уйындар. Тәрбиәсе менән бергәләп, ябай ғына эстәлекле хәрәкәтле уйындар уйнарға ылыҡтырыу. Бәләкәй төркөмсәләргә бүленеп уйнарға өйрәтеү. Хәрәкәттәрҙе йәнлектәр образы аша бирә белергә, хис-тойғолар аша һүрәтләргә өйрәтеү (ҡуян кеүек һикереп, себештәр кеүек ем сүпләп).

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Хәрәкәтләнеүҙең төрлө төрҙәрен үҫтереү. Балаларҙы аяҡтарын һөйрәмәй, баштарын төшөрмәй, ҡулдарҙы сиратлап һелтәп һәм аяҡтарҙы алмашлап атлап, иркен һәм еңел итеп йөрөргә һәм йүгерергә өйрәтеү.

Бейеклеккә һикергәндә ике аяҡты ерҙән этеп күтәрелергә һәм ергә дөрөҫ төшөрөргә өйрәтеү, бер урында һәм алға табан ике аяҡта һикереү.

Урындан алыҫҡа һәм бейеклеккә һикергәндә, туп ташлағанда, тәгәрәткәндә кәүҙәне дөрөҫ тоторға өйрәтеү.

Үрмәләгәндә арҡыры ағасҡа дөрөҫ тотонорға, тупты ике ҡул менән тотоп ташларға өйрәтеү.

Берәмләп колоннаға бер-береһе эргәһенә, сафҡа, түңәрәккә теҙелергә һәм үҙ урынын табырға күнектереү. Һәр төр хәрәкәтләнеүҙә дөрөҫ кәүҙә торошон һаҡлауға өйрәтеү.

Санала, өс тәгәрмәсле велосипедта үҙ-аллы ултырып йөрөргә өйрәтеү. Саңғыларҙы кейергә, сисергә, шыуырға, аҙаҡ урынына ҡуйырға өйрәтеү.

Хәрәкәтле уйындарҙа ҡағиҙәләрҙе үтәргә өйрәтеү. Тәүәкәллек, үҙ-аллылыҡ, етеҙлек тәрбиәләү.

Хәрәкәтле уйындар. Хәрәкәтләнеү эшмәкәрлегендә балаларҙың әүҙемлеген, ижадилығын хуплау. Ҡағиҙәле уйындар уйнауҙы ойоштороу. Тәгәрмәсле уйынсыҡтарҙа, машиналарҙа, велосипедта йөрөүҙе, шар, туп менән үҙ-аллы уйнауҙы ойоштороу. Ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәп, бер-береһе менән килешеп, тирә-йүндәге арауыҡта үҙҙәре торған ерҙе билдәләй белеү.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Хәрәкәтләнеүҙең төрлө төрҙәрен дөрөҫ башҡарыуҙы нығытыу. Хәрәкәттәрҙе башҡарғанда уларҙың матурлығын, мәғәнәлеген, тасиурлығын, һомғоллоғон сағылдырыуға иғтибар биреү.

Кәүҙәнең дөрөҫ торошон формалаштырыу.

Аяҡ һәм ҡул хәрәкәттәрен бер-береһенә тап килтереп атлау, йүгереү күнекмәләрен камиллаштырыу.

Аяҡ осона, үксәгә баҫып атлауҙы нығытыу.

Темпты, йүнәлеште үҙгәртеп, тубыҡтарҙы юғары күтәреп йүгерергә өйрәтеү.

Шыуышыу һәм үрмәләүҙең төрлө төрҙәрен (имгәкләп, шыуышып, эскәмйә буйлап) нығытыу.

Гимнастика стенкаһының әле бер яғына, әле икенсе яғына күсеп, үрмәләргә өйрәтеү.

Һикереү, ҡом тултырылған тоҡсай ырғытыу, сәпкә бәреү, тупты тотоп алыу төрҙәрен нығытыу.

Тигеҙлек һаҡлауҙы нығытыуға айырыуса иғтибар итеү.

Сафҡа теҙелеү буйынса күнегеүҙәр башҡарыуға, колоннаға берәрләп, икешәрләп, өсәрләп теҙелергә, төрлө яҡҡа боролорға өйрәтеү.

Хәрәкәтле, спорт, халыҡ уйындары менән таныштырыу.

Хәрәкәтле уйындар. Туптар, һикергестәр, ҡоршауҙар һ.б. менән уйындар үткәреп, әүҙем хәрәкәтләнеүҙе үҫтереү.

Тирә-йүндә йүнәлеш билдәләүҙе, үҙ-аллылыҡты, осҡорлоҡто, зирәклекте, ижади һәләтлекте үҫтереүгә уйындар үткәреү.

Ололар әйтеүен көтмәй, уйында ҡағиҙәләрҙе үҙ-аллы үтәй белеүгә ғәҙәтләндереү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Баланың кәүҙәһенең дөрөҫ торошон формалаштырыуҙы дауам итеү.

Хәрәкәтләнеү күнекмәләрен камиллаштырыу.

Психофизилогик сифаттар – йылғырлыҡ, көс, сыҙамлыҡ, һығылмалыҡ - тәрбиәләү.

Терәк предметтан этенеп, еңел генә йүгерә һәм атлай белеү. Баҫтырышып йүгереү, ҡаршылыҡтар үтеп йүгереү.

Тиҙлекте үҙгәртеп, гимнастика стенаһынан үрмәләү. Йүгереп килеп оҙонлоҡҡа һәм бейеклеккә һикереү. Һикереү төрөнә ҡарап, аяҡтар менән этенә белеү, йомшаҡ урынға һикергес аша һикереү, тигеҙлек һаҡлап ергә һикереп төшөү.

Предметты ташлағанда ҡулдарҙы һелтәү һәм әйберҙе ырғытыуҙы бергә башҡара белеү, тупты һыңар ҡул менән тота белеү, тупты ергә ике ҡул менән алмашлап һуғып, хәрәкәтләнеү.

Саңғыла аяҡтарҙы шыуҙырып йөрөү, ҡалҡыу урынға саңғыла менә белеү, тауҙан шыуып төшөү, ике тәгәрмәсле велосипедта йөрөү, самокатта аяҡтарҙы алмаштырып этеп йөрөү. Түрә-йүндәге аралыҡта йүнәлеште дөрөҫ билдәләү.

Спорт уйындарының ябай ғына элементтарына өйрәтеү, ярыш рәүешендә уйындар ойоштороу.

Өлкәндәргә спорт йыһаздарын әҙерләргә, аҙаҡ – йыйышырға ярҙамлашыу.

Баланың шәхес булараҡ формалашыуына һәр яҡлап ярҙам итеү.

Хәрәкәтле уйындар. Таныш булған уйындарҙы үҙ-аллы ойошторорға тырышыуҙы, уйында әүҙемлек күрһәтеүҙе хуплау.

Балаларҙа хәрәкәтле уйындарҙа, ярыштарҙа, эстафеталарҙа ҡатнашырға ынтылыш тәрбиәләү. Спорт уйындарына һәм күнегеүҙәренә өйрәтеү.

Уйын ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәп, аҙағына тиклем уйнау. Ярышыу, күмәкләп бер командала уйнау һәләтен үҫтереү.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Балаларҙың сәләмәтлеген нығытыуҙы, физик үҫешен камиллаштырыуҙы дауам итеү. Көн һуҙымында әүҙем хәрәкәт эшмәкәрлегенә өлгәшеү. Хәрәкәт итеүҙең бөтә төрҙәрен (атлап йөрөү, йүгереү, шыуышыу, үрмәләү, һикереү, туп ырғытыу, уны тотоп алыу, сәпкә бәреү һ.б.) камиллаштырыу.

Тирә-йүндә үҙ торошон билдәләп, хәрәкәтләнә, тигеҙлек һаҡлап, күнекмәләр башҡара белеү.

Сафта йөрөгәндә хәрәкәт итеү йүнәлешен үҙгәртергә, сафҡа төрлөсә яңынан теҙелергә өйрәтеү.

Физкультура күнегеүҙәренең бөтә төрҙәрен дә үҙ-аллы башҡарырға өйрәтеү.

Хәрәкәт итеүҙең төп төрҙәрен нығытыу маҡсатында һәр бала менән шәхси эш үткәреү. Йөҙөргә, ике тәгәрмәсле велосипедта йөрөргә өйрәтеүҙе дауам итеү.

Еңел атлетика комплекстарын, йүгереү, атлау, һикереү, сәпкә бәреү кеүек төп хәрәкәт төрҙәрен киң ҡулланыу.

Физик тәрбиә сараларында халыҡ уйындарын ҡулланыу. Хәрәкәтле уйындарҙы көн тәртибенең икенсе яртыһында йышыраҡ үткәреү. Ата-әсәләр менән кәңәшләшеп, медицина хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында балалар организмын сыныҡтырыуҙа традицион булмаған алымдар ҡулланыу.

Хәрәкәтле уйындар. Балаларҙы төрлө хәрәкәтле уйындарҙы һайлай белергә өйрәтеү (ярышыу элементтары менән), ошо уйындар уларға психофизик яҡтан үҫешергә булышлыҡ итергә тейештәр (йылдамлыҡ, көс, тиҙлек, сыҙамлыҡ, һығылмалыҡ). Хәрәкәттәрҙә үҙенең кәүҙә торошон, хәрәкәтләнеү ысулдарын аңлы рәүештә арауыҡта дөрөҫ башҡара белергә өйрәтеү.

Таныш булған уйындарҙы иптәштәре менән берлектә ойоштора белеү, үҙҙәренең һәм дуҫтарынын һөҙөмтәләрен баһалай белергә өйрәтеү. Яңы уйындар уйлап сығарырға, хәрәкәттәрҙе төрлөләндерә белеүҙе хуплау.

Спорт уйындарына, күнекмәләренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү (бура уйыны, бадминтон, баскетбол, өҫтәл теннисы, хоккей, футбол).

ПРОГРАММАНЫ ТОРМОШҠА АШЫРЫУ САРАЛАРЫ

Программаны тормошҡа ашырыуға психологик һәм педагогик шарттар

Аң-белем биреү һәм тәрбиә эшен ойоштороу үҙенсәлектәре

Программаны тормошҡа ашырыу өсөн мөһим шарттар булып, балалар үҫешенә ыңғай тәьҫир иткән һәм төрлө яҡлап уны үҫтереүсе мөхит булдырыу тора.

Балалар баҡсаһы балаларға шатлыҡ килтерергә, ә белем биреү эшмәкәрлеге мауыҡтырғыс итеп ойошторолорға тейеш.

Белем биреү эшмәкәрлегенең маҡсаттары:

- балаларҙың эмоциональ яҡтан именлеген тәьмин итеү;

- балаларҙа башҡа кешеләргә ҡарата иғтибарлы һәм яҡшы мөнәсәбәттә булыуҙы тәрбиәләү өсөн шарттар булдырыу;

- балаларҙа үҙ-аллыҡты үҫтереү;

- төрлө эшмәкәрлек төрҙәрендә балаларҙың һәләтен үҫтереү.

Был маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн педагогтарға түбәндәгеләр тәҡдим ителә:

- баланы шәхес булараҡ хөрмәт итеү һәм башҡа педагогтар менән берлектә демократик алымдар ҡулланыу аша уны үҫтереү;

- балаларҙа яуаплылыҡ һәм башҡа кешеләргә ҡарата хәстәрле һәм яуаплы булыу һәләтен үҫтереү өсөн шарттар булдырыу;

- килеп сыҡҡан күңелһеҙ ваҡиғаларҙы бергәләп тикшереү, хәл итеү, кәрәк саҡта ярҙам итеү, йәшәйештә дөйөм әҙәп һәм әхлаҡи ҡағиҙәләр булдырып, уны үтәргә өйрәтеү, бер-береһенә хөрмәтле булырға өйрәтеү;

- балаларҙың йәшәйештәге күренештәргә, хәл-ваҡиғаларға үҙ ҡарашы булыуын формалаштырыу һәм уны дәлилләргә, яҡларға өйрәтеү;

- балаларға һәр бер кешенең үҙ фекере, үҙ баһаһы булыуы менән айырылып тороуын һәм уларҙың нисек итеп кешенең тәртибенә, холоҡ-фиғеленә тәьсир итеүен аңлатыу, төрлө осраҡтарҙы бергәләп тикшереү;

- ата-әсәләр һәм педагогтар менән ҡуйылған маҡсаттарҙы үтәүгә йүнәлтелгән сараларҙы бергәләп билдәләү, тормошҡа ашырыу юлдарын асыҡлау.

Балалар баҡсаһында баланың уйын аша аң-белемде үҙләштереү даирәһе киң булырға һәм балала был өлкәлә әүҙемлек күрһәтеүгә шарттар тыуҙырылған булырға тейеш.

Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында балаларҙа тормошто яратыу, тирә-йүнде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу, һәр бер яңылыҡты белергә һәм үҙләштерергә теләге булыу кеүек сифаттарҙы формалаштырыу өсөн тейешле шарттар булдырыу мөһим.

Аң-белемгә өйрәтеү һәм тәрбиәләү мөхитенең заман талаптарына тап килтереп ойошторолоуы балала үҙ-үҙеңә ышаныс тойғоһо үҫтереүҙе, йәшәйеште тәрәнерәк өйрәнергә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы, көндәлек тормошта хаталаныу осраҡтарының булыуын, ләкин уларҙы йырып сығыу сараларын өйрәнеү мөмкинлегенең һәр саҡ булыуын тәьмин итә. Баланың ауыр ваҡыттарҙа башҡаларға ярҙам итеү теләген, танып-белеүгә ҡыҙыҡһыныуын хуплау, уға социаль яҡтан уңышлы шәхес булып үҫергә ярҙам итә.

Балалар менән өйрәнелгән темалар аң-белемгә өйрәтеүҙә һәм тәрбиәләүҙә ҡуйылған маҡсаттарҙы үтәү материалдары булып тора. Улар балаларҙың һәләтен һәм үҙ-аллылығын үҫтереү, көндәлек тормошта уңышлы йәшәү өсөн кәрәк булған эш-хәрәкәттәрҙе башҡарыу ысулдарын үҙләштереүҙе һәм ҡуллана белеүҙе күҙаллай.

Балалар баҡсаһы шарттарында көндәлек йәшәйештә килеп тыуған төрлө осраҡтар баланы шәхес булараҡ тәрбиәләүҙә мөһим урын биләй: бала саф һауала уйнағанда, йәки эшмәкәрлектең башҡа төрҙәрендә башҡалар менән аралаша, тиҫтерҙәре менән төрлө мөнәсәбәткә инә, әүҙем булырға, үҙ-аллы ниндәйҙер ҡарарға килергә, уйлап эш итергә күнегә.

ҒАИЛӘ ҺӘМ БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ АРАҺЫНДАҒЫ ҮҘ-АРА БӘЙЛӘНЕШ

Төп маҡсаттары һәм бурыстары

Баланы шәхес булараҡ үҫтереү өсөн иң мөһим шарттарҙың береһе булып ғаилә һәм балалар баҡсаһы араһындағы үҙ-ара бәйләнештең нисек бер-береһенә ыңғай тәьҫир итеүе, йәки йоғонтоһо тора.

Төп маҡсат булып, балалар баҡсаһы педагогтары һәм ғаилә ағзалары араһында тығыҙ һәм нәтижәле үҙ-ара бәйләнеште формалаштырыуға кәрәкле шарттар булдырыу, ата-әсәләрҙең компетентлығын (бала тәрбиәләү буйынса килеп тыуған төрлө социаль-педагогик проблемаларҙы сисә белеү һәләтен) үҫтереү; ата-әсәләрҙең хоҡуҡтарын аңлауҙы һәм хөрмәтләүҙе тәьмин итеү тора.

Ата-әсәләрҙең һәм педагогтарҙың бер-береһен ғәйепләүҙе, бала тәрбиәләүҙә ҡулланылған алымдарҙы бергәләп кәңәшләшмәй эшләүҙе булдырмай, тулы хоҡуҡлы партнерҙар берҙәм эш итеүҙе ойоштороу кәрәк.

Балалар баҡсаһы һәм ғаилә араһындағы үҙ-ара бәйләнештең төп бурыстары:

- ғаиләлә һәм балалар баҡсаһында балалар тәрбиәләүҙә, уларҙы аң-белемгә өйрәтеүҙә, һәр төрлө үҫтереүсе эшмәкәрлек барышында килеп сыҡҡан һорауҙарға, педагогик ситуацияларға ҡарата ата-әсәләрҙең фекерен өйрәнеү;
- педагогтарҙы һәм ата-әсәләрҙе балалар баҡсаһы шарттарында һәм ғаиләлә тәрбиәләүҙең иң отошло тәжрибәләре менән таныштырыу, шулай уҡ тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеү эшендә килеп тыуған ҡыйынлыҡтар тураһында мәғлүмәт биреү, уларҙы булдырмау юлдарын өйрәтеү;
- педагогтарҙы һәм ата-әсәләрҙе тәрбиәләү һәм аң-белемгә өйрәтеү процесының көнүҙәк мәсьәләләре менән системалы рәүештә таныштырып тороу, уларҙы тормошҡа ашырыуҙа балалар баҡсаһының һәм ғаиләнең мөмкинлектәре тураһында һөйләшеүҙәр үткәреп тороу;
- педагогтар һәм ата-әсәләр араһындағы бәйләнеште нығытыу һәм үҫтереү маҡсатында балалар баҡсаһында йөкмәткеһе һәм формаһы төрлө булған хеҙмәттәшлек итеү саралары һәм уларҙы ойоштороу шарттары булдырыу;
- районда (ҡалала, республикала) ойошторолған төрлө сараларға ата-әсәләрҙе йәлеп итеү һәм мәктәпкәсә белем биреү өлкәһендәге проблемалар, ҡаҙаныштар менән таныштырыу;
- баланың төрлө ынтылыштарына һәм ихтыяждарына ҡарата иғтибарлы мөнәсәбәт күрһәткән ата-әсәләрҙе дәртләндереү, хуплау, ошо ихтыяждарҙы ғаиләлә ҡәнәғәтләндереү өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу.

Ғаилә менән балалар баҡсаһы араһындағы бәйләнештең төп йүнәлештәре һәм формалары

Балалар баҡсаһы ғаиләнең тәрбиәүи мөмкинлектәре менән таныш булһа, ә ғаиләлә үҙе балаһын ышанып тапшырған балалар баҡсаһы тураһында етерлек кимәлдә мәғлүмәттәр булған осраҡта, үҙ-ара бәйләнештең уңышлы булыуы мөмкин. Был бәйләнеш бала үҫешендә бер-береһенә ярҙам итергә һәм дөйөм бурыстарҙы бергәләп тормошҡа ашырырға ярҙам итә.

Ике яҡтың да тәрбиә һәм бала үҫеше өлкәһендәге белем кимәлен камиллаштырыуға түбәндәге саралар ярҙам итә:

- анкеталар, иншалар, әңгәмәләр аша социаль-педагогик диагностика үткәреү;
- балаларҙың ғаиләһенә барыу, йәшәү шарттары менән танышыу;
- балалар баҡсаһында асыҡ ишектәр ойоштороу;
- төрлө йыйылыш-осрашыуҙар үткәреү. Тәүге йыйылыш-осрашыуҙарҙың маҡсаты булып, педагогтарҙың ғаиләләр менән һәм ғаиләнең педагогтар менән танышыуы тора. Аралашҡанда ике яҡтың да бер-береһенә ҡарата ыңғай ҡараштa, хөрмәтле, итәғәтле булыуы мөһим. Аралашыу файҙалы булһын һәм ата-әсәләр менән педагогтар араһында бер-береһенә асылып һөйләшеү мөмкинлеген тыуҙырыу маҡсатында махсус аралашыу алымдары ҡулланыу кәрәк: «Дистанция һайла», «Фотографиялар теле», «Ассоциатив рәт» һ.б.

Тәрбиәселәр һәм ата-әсәләр бер-береһенә балалар баҡсаһында һәм ғаиләлә балаларҙың тормошондағы төрлө факттар, хәл-тороштары, балалар һәм ололар араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында хәбәр итеп торорға тейеш. Бындай мәғлүмәттәр осрашҡанда (әңгәмә, консультация, йыйылыш, конференция), йә төрлө мәғлүмәти сығанаҡтарҙан алына (стенд, газета, журналдар).

Стендтар. Стендтарҙа стратегик, тактик һәм оператив мәғлүмәттәр урынлаштырыла. Стратегик белешмәләргә балалар баҡсаһы үҫешенең маҡсаттары һәм бурыстары, балалар баҡсаһының инновацион проекттары, өҫтәлмә белем биреү тураһындағы мәғлүмәттәр ҡарай.

Тактик белешмәләргә педагогтар һәм уларҙың эш графигы, көндәлек режим, бер йылға планлаштырылған тәрбиәүи-белем биреү эштәренең бурыстары һәм йөкмәткеһе тураһындағы мәғлүмәттәр инә.

Оператив стенд белешмәһенә ололарҙы ҡыҙыҡһындырған хәбәрҙәр, төркөмдә (балалар баҡсаһында, районда) буласаҡ һәм булған ваҡиғалар, акциялар, конкурстар, репетициялар, күргәҙмәләр, осрашыуҙар, проекттар, ял көнөндәге экскурсиялар һ.б. тураһындағы мәғлүмәттәр ҡуйыла. Был мәғлүмәт төрҙәрен һәр ваҡыт алмаштырып торорға кәрәк.

Стендтағы мәғлүмәттәр ата-әсәләрҙә һәм педагогтарҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙырһын өсөн улар биҙәлеше яғынан сағыу булыуы (фотографиялар, төрлө сағыу һүрәттәр ҡулланыла), ғаиләне борсоған һорауҙарға тулы яуаптар бирелеүе, стендты әҙерләүҙә ата-әсәләрҙең ҡатнашыуы менән айырылып тора. Мәғлүмәттәрҙе балалар

баҡсаһының сайтында, йә булмаһа ғаилә календарында урынлаштырып, һәр саҡ яңыртып тороу кәрәк.

Мәктәпкәсә төп белем биреү программаһының белем биреү өлкәләре

Коррекцион-педагогик эштең төп мәсьәләһе булып СМС балаларҙы төрлө яҡлап үҫтереү, социаль тәжрибә туплауҙы байытыу, коллективта тиҫтерҙәре араһына ыңғай һәм тиҙ генә инеп китеү шарттарын тыуҙырыу тора.

Төп белем биреү өлкәләренә характеристика:

«Социаль-коммуникатив үҫеш» белем биреү өлкәһе

СМС балаларҙың комуникация күнегеүҙәренә эйә булыуҙары һәм йәмғәт тормошона ҡулайлы инеп китеүҙәре - төп маҡсат итеп ҡуйыла. Социаль-коммуникатив үҫештең мәсьәләләре булып түбәндәгеләр һанала:

- балала үҙе тураһында төшөнсәләр булдырыу, үҙенә шәхес булараҡ дөрөҫ һәм аңлы ҡараш тәрбиәләү һәм үҙенә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт системаһын төҙөү өсөн ябай ғына күнекмәләрҙе формалаштырыу;

- үҙ-үҙен хеҙмәтләндереү күнекмәләрен формалаштырыу;

- өлкәндәр һәм йәштәштәре менән хеҙмәттәшлек итеү; тирә-яҡтағы предметтарҙы һәм күренештәрҙе аңлап ҡабул итеү, уларға ҡарата ыңғай мөнәсәбәттә булыу күнекмәләрен формалаштырыу;

- тирә-йүнгә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, милли-төбәк традицияларына һәм кешелек үҙкиммәттәренә ҡарата хөрмәтле, ыңғай мөнәсәбәтле, тәрбиәле булыу нигеҙҙәрен формалаштырыу;

- балалар эшмәкәрлеге төрҙәрендә һәм ирекле аралашыуҙа телмәр аша (вербаль) аралашыу сараларын уларҙың һөйләшмәйенсә (вербаль булмаған) ҡулланылған саралары менән аңлы рәүештә яраштырып ҡуллана белеү күнекмәләрен формалаштырыу.

Ошо өлкәгә ҡараған белем биреү бурыстарын тормошҡа ашырғанда, СМС балаларҙа тирә-яҡ донъяның күп төрлөлөгө, шулай ук социаль күренештәргә, ҡағиҙәләргә, йәмғиәттең (социумдың) дөйөм ҡабул ителгән нормаларына ҡарата мөнәсәбәттәрҙең күп төрлө булыуы турындағы күҙаллауҙар формалаша һәм мөмкинлекләре сикләнгән балаларҙы үҙ-аллы тормош эшмәкәрлегенә әҙерләү эше башҡарыла.

Балаларҙың эшмәкәрлеге педагог тарафыннан системалы рәүештә формалаштырылғанда, СМС балаларҙың ижтимағи тәжрибәне үҙләштереүе асыҡ күренә. Шул рәүешле эш итеү һөҙөмтәһендә балала психик яҡтан яңы барлыҡҡа килгән психик күренештәр — оҡшатыу, тиңләштереү, сағыштырыу, өҫтөнлөк биреү кеүек социаль күнекмәләр формаһы барлыҡҡа килә. Тиҫтерҙәре менән үҙ-ара бәйләнештәр нигеҙендә шәхси позициялар һәм баһалауҙар ҙа үҫешә, был инде СМС балаға сәләмәт тиҫтерҙәре коллективында билдәле урын биләү мөмкинлеген бирә.

Социаль характерҙағы башланғыс төшөнсәләрҙе үҙләштереү һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы социаль мөнәсәбәттәр системаһына индереүгә йүнәлтелгән аралашыу күнекмәләрен үҫтереү буйынса эш бер нисә йүнәлештә башҡарыла:

- көндәлек тормошта балаларҙың иғтибарын бер-береһенә йәлеп итеү, үҙ-ара ярҙамлашыу һәм коллектив сараларҙа ҡатнашыу барышында;

- үҙе, тирә-йүндәге өлкәндәр һәм йәштәштәре тураһындағы төшөнсәләрҙе үҫтереүгә йүнәлтелгән махсус уйындар һәм күнекмәләр процесында;

- ҡатнашыусыларҙың аңлы рәүештә үҙ-ара аралашыу барышында элементар рәүештә дөйөм ҡабул ителгән нормалар һәм ҡағиҙәләр менән таныштырыусы сюжетлы-ролле һәм театрлаштырылған уйындарға, уйын-тамашаға өйрәтеү процесында;

- хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте процесында һәм эшмәкәрлектең төрлө төрҙәрендә.

Социаль-коммуникатив һәләттәрҙе формалаштырыу эше көн һайын башҡарылырға һәм мотлаҡ рәүештә эшмәкәрлектең барлыҡ төрҙәренә (көнкүрешкә, уйынға, уҡытыу-өйрәтеүгә) үтеп инергә тейеш.

СМС балаларҙа социаль белемдәр формалаштырыу эшендә һәр баланың сәләмәтлеген һаҡлау һәм нығытыу, культура-гигиена күнекмәләрен, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыу ихтыяжын формалаштырыу; үҙ сәләмәтлеге һәм уны һаҡлау саралары тураһындағы төшөнсәләрҙе үҫтереү өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу мөһим.

Культура-гигиена күнекмәләре үҫтереү эшенең яҡынса эстәлеге:

- ашау: ҡалаҡ, сәнске, сынаяҡ, салфетка ҡулланырға (шәхси мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алып); ашағанда бөхтәлек һаҡларға, ашағандан һуң рәхмәт әйтергә (ниндәйҙер билдә ярҙамында, хәрәкәт, һүҙҙәр менән) өйрәтеү;

- гигиена күнекмәләре: иртәнге һәм киске гигиена процедураларын башҡарыу (бәҙрәф, ҡулдарҙы йыуыу, аяҡтарҙы йыуыу һ.б.); таҙалыҡ, кейенеү-яһаныу кәрәк-яраҡтары (ҡағыҙ, шыйыҡ һәм ҡаты һабын, паста, салфетка, губка, таҫтамал, тараҡ, щетка, көҙгө), ҡулъяулыҡ менән файҙалана белеү;

- өҫ кейеме һәм тышҡы ҡиәфәт: файҙаланыуға ҡарап өҫ кейеменең төрлө төрҙәрен айырыу; кейенеү һәм сисенеү тәртибен үтәү; өҫ кейеме предметтарын тейешле урындарҙа һаҡлау; төймәләр, молния, шнурҙар һ.б. менән дөрөҫ эш итеү; кейемде һауа торошона, сезонға ҡарап һайлау; көҙгө, тәрбиәсе күрһәтмәләре ярҙамында тышҡы ҡиәфәтенең бөхтәлеген контролдә тотоу күнекмәләренә өйрәтеү.

Бурыстарҙы тормошҡа ашырыу өсөн, балалар баҡсаһында һәм өйҙә көндәлек режимды дөрөҫ ойоштороу, эшмәкәрлектең һәм ялдың организмға теүәл эшләргә булышыусы төрлө төрҙәрен сиратлаштырыу кәрәк.

СМС балалар сәләмәтлек, тормош өсөн ҡурҡыныс булған төрлө хәлдәрҙә ҡалырға мөмкиндәр, шуға күрә кешенең йәмғиәттәге тормошо менән бәйле төшөнсәләр, һәләттәр һәм күнекмәләр формалаштырғанда педагог, тәрбиәсе, әүҙем тормош позицияһы тыуҙырып, теге йәки был хәлдә үҙ-үҙен тотоуға бәйле бер нисә моделде «уйнап күрһәтә», балаларҙы үҙ-аллы ҡарар ҡабул итеүгә йүнәлтә ала.

Түбəндəге айырыуса йыш осраған типик хəлдəрҙе тəҡдим итергə һəм үҙ-үҙен тотоуға иң ябай алгоритмдарҙы формалаштырырға мөмкин:

- йəмғиəт транспортын файҙаланыу;
- юл хəрəкəте хəүефһеҙлеге ҡағиҙəлəре;
- өй аптечкаһы;
- электр приборҙарын файҙаланыу;
- йəмғиəт урындарында (вокзал, театр һ.б.) үҙ-үҙеңде тотоу һ.б.
- кеше өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыусы предметтар һəм күренештəр (ут, йəрəхəтлəнеү ҡурҡынысы, ағыулы матдəлəр) тураһында мəғлүмəттəр.

Оҡшаш тормош хəлдəре миҫалында балалар ҡағиҙəлəрҙе өйрəнəлəр, тирə-яҡты өйрəнергə мөмкинлек биреүсе ыңғай холоҡ һыҙаттарын үҙлəштерəлəр. Кешелəрҙең ҡатмарлы осраҡтарҙа үҙҙəренең хəл-торошон анализлау, ҡайһы бер мəсьəлəлəрҙе хəл итеү юлдарына өйрəнеү баланың үҙ-үҙенə ышанысын арттыра, уны эмоциональ яҡтан нығыта.

Социаль-коммуникатив һəлəттəрҙе формалаштырыу буйынса белем биреү өлкəһендə СМС балаларҙы ябай хеҙмəт күнекмəлəренə, иң ябай ҡоралдар менəн эш итергə өйрəтеү айырым урын билəй. Был эш түбəндəгелəрҙе үҙ эсенə ала:

- балаларҙа үҙ-үҙҙəрен хеҙмəтлəндереү күнекмəлəрен, хужалыҡ-көнкүреше һəм тəбиғəттəге хеҙмəт күнекмəлəрен формалаштырыу маҡсатында уларҙың практик эшмəкəрлеген ойоштороу;
- балаларҙы өлкəндəр хеҙмəте, кешелəр тормошонда хеҙмəттең тотҡан урыны менəн таныштырыу, хеҙмəткə ҡарата хөрмəт тəрбиəлəү;
- хеҙмəт хəрəкəттəрен аңлатыусы һүҙҙəрҙе, ҡайһы бер һөнəрҙəрҙе һəм хеҙмəт ҡоралдарының атамаларын əйтергə өйрəтеү;
- үҫемлектəрҙе, хайуандарҙы тəрбиəлəү ысулдарына өйрəтеү;
- ҡул хеҙмəтенə өйрəтеү (ҡағыҙ, ҡатырғы, тəбиғи материалдар менəн эшлəү, елем, ҡайсы ҡулланыу, ҡағыҙ киҫеү, киҫеп алынған формаларҙы ҡағыҙға йəбештереү, тартмаларҙан һəм тəбиғи материалдарҙан əйберҙəр эшлəү һ.б.);
- коллектив эштəр башҡарыу;
- эшлəнгəн əйберҙəрҙе уйында ҡулланыу күнекмəлəрен формалаштырыу.

Ижтимағи тəжрибəне үҙлəштереүҙең төрлө ысулдарына эйə булып, СМС балаларҙы оҡшатыу, күрһəтеү, үрнəк һəм телдəн күрһəтмə буйынса эш итергə өйрəнəлəр. СМС балаларҙың хеҙмəт эшмəкəрлеген формалаштырыу уларҙың психофизик мөмкинлеклəрен һəм шəхси үҙенсəлектəрен иҫəпкə алып тормошҡа ашырыла.

Социаль-коммуникатив һəлəттəрҙе үҙлəштереү СМС балаларҙы аралашыуға - кешелəр менəн уртаҡ эшмəкəрлеккə булған ихтыяж нигеҙендə тыуыусы элементəлəрҙе урынлаштырыу һəм үҫтереү процесына индереүҙе тəьмин итə.

Аралашыуҙы үҫтереү эшендə төп сара булып коммуникатив ситуацияларҙы ҡулланыу — баланың телдəн (вербаль) һəм телдəн булмаған (вербаль булмаған) аралашыу саралары аша үҙенсəлекле рəүештə ойошторолған əйлəнə-тирə объекттары һəм субъекттары менəн үҙ-ара тəьҫир итешеү ситуациялары файҙаланыла.

Мәктәпкәсә йәштәге СМС балаларға белем биреү эшмәкәрлеген улар көн дә осратҡан күренештәргә, предметтарға таянып, балаларға яҡын һәм аңлайышлы материалға нигеҙләнеп ҡороу отошло була. Яңы материалды балаларға улар үҙләштергән мәғлүмәттәргә таянып, таныш булған ысулдар, эш-хәрәкәттәр аша өйрәтеү кәрәк.

Балалар баҡсаһы төркөмөндә һәм ғаиләлә ишетеү-һөйләү мөхитен ойоштороу баланың телмәрен үҫтереүгә, аралашыу шарттарында ысынбарлыҡта ҡулланыуға йоғонто яһаусы мөһим факторҙарҙың береһе булып тора. Был мөхитте булдырыуҙа тәрбиәселәр, төркөм педагогтары, ата-әсәләр, башҡа өлкәндәр һәм балаларҙың йәштәштәре ҡатнаша.

«Танып-белеү үҫеше» белем биреү өлкәһе

Төп маҡсат булып танып-белеү процесын һәм аҡыл эшмәкәрлеге ысулдарын ойоштороу, шулай уҡ тәбиғәт һәм йәмғиәт тураһындағы белемдәрҙе байытыу; танып-белеүгә ҡыҙыҡһыныу үҫтереү тора.

СМС балалар өсөн танып-белеү процесы тирә-йүндең ысынбарлығын һиҙемләү, ҡабул итеү, фекерләү, иғтибар итеү, хәтерҙә ҡалдырыу процестары аша тәьмин ителә.

Танып-белеү үҫешендә түбәндәге бурыстар ҡуйыла:

перцептив хәрәкәт ысулдарын формалаштырыу һәм камиллаштырыу;

сенсор эталондары менән таныштырыу һәм уларҙы формалаштырыу;

иғтибарҙы һәм хәтерҙе үҫтереү;

күргәҙмәле-хәрәкәтле һәм күргәҙмәле-образлы фекерләүҙе үҫтереү.

«Танып белеү үҫеше» белем биреү өлкәһе үҙ эсенә түбәндәгеләрҙе ала:

Сенсор яҡтан үҫеш. Уның барышында СМС балаларҙың тирә-йүнде үҙләштереүе бөтә төр психик процестар аша тормошҡа ашырыла: күреү, ишетеү, тактиль-хәрәкәт, еҫ һиҙеүе, тәмләү аша үҫешә. Улар нигеҙендә баланың предметтың тышҡы сифаты, формаһы, төҫө, дәүмәле, еҫе, тәме, арауыҡтағы урыны һәм ваҡыты тураһында тулыһынса күҙ алдына килтереүе формалаша.

Сенсор тәрбиә балаларҙың фекерләүенә, зиһен үҫешенә тәьҫир итеп тап килтереү, сағыштырыу, анализлау, синтезлау, дөйөмләштереү, классификациялау һәм абстракциялау процестары үҫешен күҙ уңында тота, шулай уҡ телмәрҙең барлыҡ яҡтарын — номинатив функцияһын (предметтың атамаһын аңлап хәтерҙә ҡалдырыу һәм ҡуллана белеүҙе), фразалар төҙөп һөйләшеүҙе үҫтерә, баланың һүҙлеген байытыуға һәм киңәйеүгә булышлыҡ итә.

Күҙҙең насар күреүе, ҡолаҡтың насар ишетеүе, төп терәк-хәрәкәт ағзаларының зарарланыуы сәбәпле, бала тулыһынса сенсор яҡтан үҫешә алмай. Шуның өсөн уның сенсор үҫешенә ҡағылышлы ойоштороу эштәре алып барғанда СМС баланың һәр береһенең психофизик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып эшләргә кәрәк. Был эштәр күргәҙмә материалдарҙы күрһәтеү, (предметтың исеме һәм эштең тексты булған картиналар, һүҙ әйтеп, уны ым-ишара формаһында төшөндөрөү, телдән аңлатыу, һ.б.) сағылдырылған тейешле инструкциялар йыйылмаһы булырға тейеш.

Баланың зарарланған ағзаһын иҫәпкә алып, сенсор үҫешенә ҡағылышлы күнегеүҙәрҙе планлаштырғанда һәм күнегеүҙәр һайлағанда, уларҙың балаға үтәү өсөн аңлайышлы икәнлеген күҙаллап төҙөйҙәр.

Танып-белеү-эҙләнеү эшмәкәрлеген һәм конструктив эшмәкәрлекте үҫтереү балаға арауыҡты дөрөҫ ҡабул итеүҙе формалаштырыуға, предметтың бар үҙенсәлектәрен өйрәнеп, уны ысынбарлыҡта нисек бар, шулай итеп ҡабул итергә һәм үҙләштерергә, ҡулдың ваҡ моторикаһын үҫтереүгә, күҙаллауҙы, белем даирәһен киңәйтеүгә һәм тирә-яҡ донъя тураһындағы төшөнсәләрҙе үҫтереүгә йүнәлтелгән.

СМС балаларҙың йыш арыуҙарын иҫәпкә алып, бала үҙенең эшмәкәрлегенең һөҙөмтәһен күрһен өсөн, белем биреү эшмәкәрлеген ойоштороғанда унда ҡулланылған материалдарҙы бала еңел төшөнһөн итерлек итеп, уға аңлайышлы кимәлдә планлаштырырға кәрәк. Бирелгән эште ауыр башҡарған балалар өсөн (церебральный паралич балалар) эш барышында төрлө хуплау төрҙәрен ҡулланырға кәрәк.

Башланғыс математик төшөнсәләрҙе формалаштырыу - балаларға предметтарҙы бер-береһе менән тигеҙләргә, сағыштырырға, күплектәге предметтар һәм уларҙың элементтары араһындағы бәйләнештәргә төшөнөргә, ваҡыт һәм арауыҡта йүнәлеш таба белергә өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. СМС балаларҙы өйрәткәндә уларҙың һаҡланған анализаторҙарына таянып эш итергә, күргәҙмәлелек ҡулланырға, ябайҙан ҡатмарлыға принцибына таянып ойоштороу кәрәк.

Элементар математик төшөнсәләрҙе формалаштырыуҙы планлаштырғанда баланың ысынбарлыҡта булған мөмкинлектәрен иҫәпкә алып, программа материалының күләмен уйлап төҙөргә кәрәк, сөнки СМС баланың үҫеш кимәле түбән, бирелгән материалдарҙы ул аҡрын темпта үҙләштерә (психик үҫештәре тотҡарланған балалар, интеллектуаль яҡтан тайпылыштары булған).

«Телмәр үҫтереү» белем биреү өлкәһе

Төп маҡсат булып – телмәр үҫешен үҙ ваҡытында һәм тейешле кимәлдә ойоштороп, уның аралашыу һәм донъяны танып-белеү сараһы булыу функцияһын булдырыу тора. Шулай уҡ бала һәр төрлө эшмәкәрлектә телмәр аша үҙенең уй-фекерен башҡаларға еткерә белергә, башҡалар менән аралашырға өйрәнә.

Телмәр үҫтереүҙең бурыстары:

- тел структураһының өлөштәре булған фонетика, грамматика, лексика тураһындағы төшөнсәләрҙе үҙләштереү;

- тел аша аралаша белеү күнекмәләрен формалаштырыу - бәйләнешле телмәрҙе үҫтереү, уның ике төрө - монологы һәм диалогты үҙләштереү;

- ябай ғына кимәлдә тел һәм телмәр күренештәрен аңлай белеүҙе формалаштырыу.

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәрен үҫтереү эшенең төп йүнәлештәре:

- **һүҙлек үҫтереү.** Һүҙлек телдең төп берәмлеге булғанлыҡтан, баланың һүҙ байлығына эйә булыуы телмәр үҫтереүҙә төп нигеҙ булып тора. Һүҙлектә телмәрҙең йөкмәткеһе сағыла. Һүҙҙәр предметты, күренештәрҙе, уның билдәләрен, сифатын,

үҙенсәлектәрен аңлата. Балалар көндәлек йәшәйештә телмәр аша төрлө эшмәкәрлектә ҡатнашалар һәм тирә-йүндәгеләр менән аралаша алалар;

- **өндәрҙе дөрөҫ әйтеү мәҙәниәтен тәрбиәләү.** Был йүнәлеш ишетеү һәләтен үҫтерә, уның нигеҙендә бала телдең үҙенсәлекле фонологик сараларын дөрөҫ ҡабул итеү мөмкинлегенә эйә була; өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнә; телмәрҙең орфоэпик дөрөҫлөгө тәрбиәләнә; һүҙҙәрҙең тәьҫир итеү сараларын үҙләштерә (тауыштың көсө, тембры, тиҙлеге, баҫым, интонация, пауза һ.б.).

- **телмәрҙең грамматик яҡтан төҙөлөшөн үҙләштереү.** Телмәрҙең грамматик төҙөлөшөн үҙләштереү маҡсаты: морфологияны үҙләштереү (һан, килеш, заттың һүҙҙәрҙә үҙгәреүе), һүҙъяһалыш ысулдары, синтаксик берәмлектәр (төрлө төр һүҙбәйләнештәргә һәм һөйләмдәргә эйә булыу) һ.б өйрәтеү;

- бәйләнешле телмәр үҫтереү. Бәйләнешле телмәр үҫтереү үҙ эсенә диалогик һә монологик телмәрҙе ала. Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн диалогик телмәр төп аралашыу формаһы булып тора. Баланы диалог алып барырға өйрәтеү, уға йүнәтелгән телмәрҙе тыңларға һәм аңларға өйрәтеүҙе үҫтереү, әңгәмәгә ҡушылыу һәм һөйләшеүҙе дауам итеү, һорауҙарға яуап биреү һәм кемгәлер һорау биреү, аңлатыу; төрлө тел сараларын ҡулланыу аша диалогик телмәрҙе өйрәтеү. Монологик телмәрҙе үҫтереү, ҡатмарлы, бәйләнешле текстарҙың йөкмәткеһен аңлап, эстәлеген һөйләргә ярҙам өйрәтеү.

- **ябай ғына кимәлдә тел һәм телмәр күренештәрен төшөнөүҙө формалаштырыу** балаларҙы грамотаға, уҡырға, яҙырға өйрәтеүгә булышлыҡ итеүе.

- **фонематик ишетеүҙе, ҡулдың ваҡ моторикаһын үҫтереү.** СМС балалар менән эшләүҙә телмәр үҫтереү мәсьәләләрен аныҡлау шартлы һәм улар бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән. Был мөнәсәбәттәр төрлө тел берәмлектәре араһындағы бәйләнештәрҙе билдәләй. Мәҫәлән, беҙ баланың һүҙлеген байытыу өҫтөндә эшләгәндә бер үк ваҡытта, бала һүҙҙе дөрөҫ һәм аныҡ әйтеүен, уның төрлө формаларын һүҙбәйләнештәрҙә, һөйләмдәрҙә, бәйләнешле телмәрҙә ҡулланыуын талап итәбеҙ. Бәйләнешле телмәрҙә телмәр үҫтереүҙең бөтә бурыстары сағылған: һүҙлекте формалаштырыу, телдең грамматик төҙөлөшен, фонематик ишетеүҙе үҫтереү. Бында баланың телде өйрәнеүҙәге бөтә ҡаҙаныштары күренә. Төрлө телмәр үҫтереү бурыстарын бер-береһенә бәйләп, комплекслы рәүештә өйрәнеү, телмәр үҫтереүгә бағышланған күнекмәләрҙең нәтижәле үҫешенә алып килә.

СМС балаларҙың телмәр үҫтереү эше бөтә эшмәкәрлек төрҙәрендә тормошҡа ашырыла: уйын барышында, физик үҫеш дәрестәрендә, художество-эстетик үҫештә (һүрәт төшөрөү, йәбештереү, әүәләү, төрлө ҡоролмалар төҙөү), музыка дәрестәрендә һ.б. ирекле эшмәкәрлектә, тирә-йүндәге кешеләр менән аралашыу барышында.

Нәфис әҙәбиәт уҡыу телмәр үҫтереү эшендә бик мөһим роль уйнай. Халҡыбыҙҙың рухи байлығы булараҡ, нәфис әҙәбиәт, СМС балаларҙың тирә-йүн менән етерлек кимәлдә аралаша алмаған бушлыҡты тултыра, белем даирәһен киңәйтә, тормош һәм әхлаҡи тәжрибәһен байыта.

Әҙәби әҫәрҙәр балаларҙы кешеләрҙең холоҡ-фиғеле, башҡарған эштәре, тәртибе, төрлө ваҡиғалар тураһында уйланыуҙарға мәжбүр итә; уларҙы баһаларға өйрәтә, хис-тойғоно байыта. Нәфис әҙәбиәтте уҡыу баланы коррекция-үҫтереү

буйынса ҙур тәьҫиргә эйә, ул баланың һөйләү телмәрен, тел оҫталығын, телмәр эшмәкәрлеген үҫтерә.

СМС балаларҙың телмәре түбәндәге шарттар үтәлгән хәлдә генә тейешле кимәлдә һәм нәтижәле үҫешә:

әҙәби әҫәрҙе баланың тормош тәжрибәһенә яҡын булған һәм уның үҫеш кимәлен иҫәпкә алып һайлау;

бала менән әҙәби әҫәрҙең геройҙары кеүек үк эш-ҡыланыш башҡарған кешеләр тураһында әңгәмәләшеү һәм әҫәрҙе уҡығас, уның йөкмәткеһен ниндәй кимәлдә аңлауын асыҡлау;

әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һүрәттәр, иллюстрациялар әҙерләү, макеттар эшләү;

әҫәр буйынса инсценировкалар, сәхнәләштереү ойоштороу;

ҡоролмалар төҙөп, хәрәкәтле фигуралар ярҙамында төрлө эш-хәрәкәттәрҙе күрһәтеү;

һүҙлек эшен үткәреү;

текстың грамматик һәм лексик төҙөлөшөн балаларҙың телмәр үҫеше кимәлен иҫәпкә алып яраҡлаштырыу (телмәре, ишетеү һәләте, аҡыл кимәле, фекерләү һәләте үҫешмәгән балалар өсөн);

балаларға һорауҙарға яуап бирергә өйрәтеү;

балаларға төрлө эш төрҙәре тәҡдим итеү: уҡылған тексҡа ҡарата иллюстрациялар һайлап алыу, текстың йөкмәткеһен һөйләү, әҫәрҙең башын тәрбиәсе һөйләй, аҙағын һөйләргә балаға тәҡдим итеү.

Төрлө диагнозлы балаларҙың (ҡолаҡ ишетеүе, күҙ күреүе, төп терәк-хәрәкәт ағзалары, хис-тойғо, кисереш, ихтыяр көсө, аҡыл ҡеүәһе, фекерләү һәләте үҫешмәгән) телмәре төрлөсә кимәлдә үҫешә.

Аҡыл-зиһен, фекерләү һәләте үҫешмәгән балалар өсөн тирә-йүнде өйрәнгәндә һүҙлек эшен үткәреү айырым мәғәнәгә эйә. Был эштең бурыстары һәм йөкмәткеһе баланың танып-белеү мөмкинлегенән сығып билдәләнә һәм ябай ғына төшөнсәләр ярҙамында өйрәтелә. Баланың телмәрен үҫтереүҙә иң мөһиме булып - һүҙҙең мәғәнәһен аңлау һәм аралашҡан шарттарға ҡарап, уны урынлы ҡулланыу тора.

Күреү анализаторының эшмәкәрлеге боҙолған балаларҙа телмәр үҫешенең үҙенсәлеге күҙәтелә. Был үҙенсәлек телмәрҙең этаплап үҫешенең бик әкрен темпта барыуы менән айырыла, оҡшатыу эшмәкәрлегенең мөмкинлектәре сикләнеүҙә, һүҙ һәм уның аңлатҡан мәғәнәһенең бер-береһенә тап килмәүе сағыла. Шуға күрә телмәрҙе үҫтереү эшендә һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлауға, һүҙҙең ысынбарлыҡта нимә аңлатыуын төшөндөрөүгә айырым иғтибар бирелә.

Ишетеү анализаторы боҙолған балалар өсөн телмәр үҫтереү эше айырым рәүештә төҙөлә. Ҡолаҡ ишетеүе боҙолоуы өн-телмәр үҫешен нығ тотҡарлай. Ишетеү һәләте боҙолған баланың телмәрҙе үҙләштереүен билдәләү өсөн һиҙемләү-тойоу базаһын баһалап, уның күреү, тойоу, хәрәкәтләнеү һәм ниндәйҙер кимәлдә һаҡланған ишетеү анализаторҙарының һәр береһенең мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу мөһим. Күреү анализаторы айырыуса ҙур роль уйнай; уның ярҙамында бала телмәр органдарының ҡайһы бер хәрәкәттәрен аңлы рәүештә ҡабул итә, тимәк, үҙенә йүнәлтелгән телмәрҙе яҡшыраҡ аңлай, төшөнә. Күнегеүҙәрҙе башҡарғанда, үҙ-ара

яҡшыраҡ аңлашыу өсөн, график алымдар - билдәле бер предметтарҙы белдереүсе һүҙҙәр яҙылған карточкалар, карточка-күрһәтмәләр ҡулланыла.

Ишетеү һәләте боҙолған балаларҙың телмәр эшмәкәрлеге төрлө формаларҙа - ишетеп-күреү һәм ишетеү аша ҡабул итеү, һөйләү, уҡыу (глобаль һәм аналитик), яҙыу, бармаҡтар ярҙамында һөйләшеү рәүешендә тормошҡа ашырыла. Телмәр эшмәкәрлегенең был төрҙәре аралашыу процесындағы бәйләнештәрҙең төп төрҙәре булып ҡарала.

Ишетеү һәләте боҙолған мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы аң-белемгә өйрәтеү процесында телмәр эшмәкәрлегенең һәр төрөнә айырым иғтибар бирелә, аралашыу ихтыяждарынан сығып, уларҙың дөрөҫ билдәләнгән күләме һәм эҙмә-эҙлеклелеге иҫәпкә алына.

Телмәрҙең өн үҙенсәлектәрен просодик берәмлектәр — һүҙ баҫымы, интонация (телмәрҙең мелодикаһы, тауыш көсө, телмәр темпы) сағылдыра. Улар төп терәк-хәрәкәт аппараты боҙолған (балалар церебраль параличы), минималь дизартрия тайпылыштары булған балалар менән махсус уҡытыусы-логопед эшенең айырым ҡатламын тәшкил итәләр.

Телмәр һәләте боҙолған балалар өсөн был белем биреү өлкәһе буйынса эште индивидуаль рәүештә ойоштороу кәрәк.

Барлыҡ категорияларҙағы СМС балалар өсөн телмәрҙә өндәрҙе әйтә белеүҙе тәрбиәләү, телмәрҙең грамматик төҙөлөшөн үҙләштереү, бәйләнешле телмәр үҫтереү ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Мәҫәлән, грамматик категориялар абстрактлылыҡ менән характерлана. Норма буйынса балалар грамматик төзөлөштө практик рәүештә, өлкәндәрҙең телмәренә оҡшатыу һәм дөйөмләштереү юлы менән үҙләштерәләр.

СМС балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү, грамматик формаларҙы үҙләштертеү өсөн махсус шарттар тыуҙырыу, йәғни грамматик схемалар, төрлө күрһәтмә дидактик материалдар булдырыу, предметлы-ғәмәли эшмәкәрлекте ойоштороу һ.б. зарур. СМС балаларҙың төрлө категорияларында күҙәтелә торған өндәр әйтелешендәге тайпылыштарҙан белгес ярҙамында ғына арынырға мөмкин.

«Художестволы –эстетик үҫеш» белем биреү өлкәһе

Төп бурыс булып, балаларҙың донъяға ҡарата зауыҡлы ҡарашын формалаштырыу, эстетик төшөнсәләрҙе һәм күренештәрҙе туплау, зауыҡлыҡ һәм матурлыҡ тойғоһон үҫтереү, һынлы сәнғәт эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәрен үҙләштереү тора. Мөмкинлектәре сикле булған балаларҙың сенсор һәләттәрен үҫтереү, һынлы сәнғәт күренештәрендә ижади һәләттәрен күрһәтә белеү, хис-тойғо, ритм, төҫ, композиция һәләттәренең үҫеше дөйөм белем биреү аша һәм коррекция-үҫтереүсе бурыстарҙы тормошҡа ашырыуҙа хәл ителә. Хәҙерге белем биреү өлкәһендә балалар менән эшләүҙең төп йүнәлеше булып сәнғәт ижады һәм музыкаль эшмәкәрлек тора.

Һынлы сәнғәт ижады. Төп маҡсат булып, балаларҙы ижади эштәргә өйрәтеү тора. Мөмкинлектәре сикле булған балаларҙы һынлы сәнғәт эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәренә өйрәтеү алымдары, уларҙың психофизиологик үҙенсәлектәренә тап килергә тейеш.

Әүәләү ҡул суҡтары үҫешенә, хәрәкәттәрҙе теүәл үтәүҙе үҫтереүгә, эш барышында балаларҙың төрлө материалдар һәм уларҙың үҙенсәлектәре тураһындағы белемдәрен байытыуға булышлыҡ итә. Йәбештереү төрлө конструктив мөмкинлектәрҙе үҫтерергә, форма һәм төҫ тураһындағы төшөнсәләрҙе формалаштырырға булышлыҡ итә. Һүрәт төшөрөү манипулятив эшмәкәрлектең һәм ҡул хәрәкәтенең үҫешенә, ҡул мускулдарын нығытыуға йүнәлгән.

Балаларҙың күреү, ишетеү, хәрәкәтләнеү һәләттәрен, интелектуаль һәм бәйләнешле телмәр мөмкинлектәрен үҫтереү маҡсатында, ҡулланыу өсөн яйлы булған (форма, ҙурлығы, күләме, төҫө буйынса) эш ҡоралдарын һайларға, материалдарҙы күрһәтеү ысулдарын уйлап табырға (күрһәтмә, предметтарҙың атамаларын, һүҙ һәм күрһәтеү төрҙәре аша аңлатыу) һәм инструкция-күрһәтмәләрҙең ярашлы формаларын һайларға кәрәк.

БЦП (балалар церебраль параличы) ауырыулы балалар менән эшләгәндә, моторика (хәрәкәтләнеү) етешһеҙлеге тәьҫирен кәметеүгә йүнәлдерелгән түбәндәге шарттарҙы үтәү кәрәк:

- баланың мускулдар тонусын нормалләштереүгә, көсөргәнешлекте кәметеүгә ярҙам итеүсе уңайлы позала ултыртыу;

- БЦП тайпылыштары булған һәр баланың әйҙәүсе, эш башҡарыусы ҡулын билдәләү;

- гиперкинезды кәметеү өсөн баланың ҡул суҡтарын ныҡ итеп ҡыҫыу алымдарын (айырым осраҡта баланың ҡулына махсус ауыр браслет кейҙерергә) ҡулланыу;

- бөтә эшмәкәрлек төрҙәрендә лә әүҙем-һүлпән алымды киң ҡулланыу мотлаҡ (оло кеше үҙенең ҡулы менән бала ҡулының хәрәкәтенә ярҙам итә).

Музыкаль эшмәкәрлек. Төп маҡсат булып, балалар менән көй, йыр тыңлау, көйлө-ритмик хәрәкәттәр эшләү һәм музыка ҡоралдарында уйнау тора. Сәләмәтлек мөмкинлектәре сикле булған балаларҙың контингенты органдарҙың зарарланыуы буйынса бер үк түгел, шуға күрә мотлаҡ рәүештә, музыка ҡоралдарында уйнауға һәм уларҙың яңғырашына (ишетеү һәләте насарайған балаларҙың), бейеү хәрәкәттәренә (хәрәкәтләнеү мөмкинлектәре сикле балаларҙың) иғтибар итергә кәрәк.

«Физик үҫеш» белем биреү өлкәһе

Төп маҡсат булып, үҫеүсе организмдың функцияларын формалаштырыу, хәрәкәтләнеү күнекмәләрен үҫтереү, ваҡ ҡул моторикаһын һәм күҙ-арауыҡ (зрительно-пространственной) үҫешен нығытыу эше тора. Физик яҡтан үҫеш балалар баҡсаһында һәм ғаиләлә балалар эшмәкәрлеген ойоштороуҙың нигеҙе булып тора. Былар бөтәһе лә, предметлы-социаль мөхиттә һәм эшмәкәрлектең бар төрҙәрендә лә, балаларҙың йәшен һәм айырым үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып эшләүҙе талап итә. Көндәлек режимда, милли-төбәк һәм климат шарттарын иҫәпкә алып, физкультура дәрестәре саф һауала һәм күңел асыу алымдары аша үткәрелергә тейеш.

Физик тәрбиә эше дөйөм үҫеш һәм коррекция-үҫтереү бурыстарын үтәү маҡсатында төҙөлөргә тейеш. Төп бурыс булып, организмдың үҫешенә ыңғай тәьҫир иткән кәрәкле хәрәкәтләнеү күнекмәләрен башҡарырға өйрәтеү, физик яҡтан

үҫешергә ынтылыш тәрбиәләү һәм баланың физик сифаттарын һәм һәләттәрен үҫтереү тора.

Физкультура дәрестәрендә белем биреү һәм һаулыҡты нығытыу менән бер рәттән,махсус коррекция-үҫтереү бурыстары хәл ителә :

- физик тәрбиә эше барышында арауыҡ һәм ваҡыт төшөнсәләрен формалаштырыу;

- предметлы эшмәкәрлек барышында төрлө материалдарҙың үҙенсәлектәрен,шулай уҡ предметтың тәғәйенләнешен өйрәтеү;

- хәрәкәт барышында телмәрҙе үҫтереү;

- хәрәкәт эшмәкәрлеге барышында танып-белеү эшмәкәрлегенең төрҙәрен формалаштырыу;

- баланың үҙ хис-тойғолары менән идара итә белеүҙе, махсус хәрәкәтле дәрестәр, уйындар, эстафеталар барышында ихтыяр көсө тәрбиәләүҙе формалаштырыу.

Физик үҫеш эшмәкәрлеген ойошторғанда физик күнекмәләр башҡарыла: һыҙыҡ буйлап, бер-бер артлы, түңәрәккә теҙелеү; атлау; һикереү, йүгереү; үрмәләү; шыуышыу; алыҫлыҡҡа бәреү; арҡа, бил, аяҡ мускулдарын нығытыуға дөйөм үҫтереү күнекмәләре; арҡаны төҙ тотоу, тигеҙлекте һаҡлауҙы формалаштырыусы физик күнекмәләр; кәүҙә ағзаларын арауыҡта билдәләү күнегеүҙәре инә. Балалар менән хәрәкәтләнеү һәләттәрен камиллаштырыуға һәм күнегеүҙәр үтәү барышында бер-береһенә ҡарата ыңғай мөнәсәбәттәр формалаштырыуға йүнәлтелгән хәрәкәтле уйындар уйнарға тәҡдим ителә.

Хәҙерге ваҡытта СМС балаларҙың физик үҫеш дәрестәре системаһына, социаль мөхиттә уларҙы реабилитациялауға һәм яраҡлаштырыуға йүнәлтелгән, тулы тормош алып барыуға кәртә булған ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға һәм йәмғиәттең үҫешендә үҙенең шәхси өлөшөн индереү мөмкинлеген биргән адаптив физкультура (адаптивная физическая культура – АФК) индерелә. Адаптив физкультура – ул балаларҙы спортҡа һәм һауыҡтырыуға йүнәлтелгән комплекслы сараларҙан тора һәм уларҙы дауалауҙы, һаулыҡтарын нығытыуҙы, реабилитация һәм профилактика эштәрен башҡарыуҙы күҙаллай.

Адаптив физкультураның төп бурыстары:

- балала үҙенең көсөн һәм мөмкинлектәрен башҡа сәләмәт йәштәштәренең көсө менән сағыштырыу ҡарашын формалаштырыу;

- тулы тормош алып барыуға кәртә булған, физик һәм психологик ҡаршылыҡтарҙы еңеү һәләтен үҫтереү;

- компенсациялау күнекмәләре, йәғни булмаған йәки боҙолған органдар урынына төрлө система һәм органдарҙың функцияларын файҙаланыу һәләтен формалаштырыу;

- физик ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу һәләтен үҫтереү;

- сәләмәт булыу һәм сәләмәт тормош алып барыу теләген уятыу;

- йәмғиәт тормошонда үҙенең шәхси өлөшөн индереү мөмкинлеген формалаштырыу;

- үҙенең шәхси сифаттарын яҡшыртыу теләген уятыу.

Адаптив физик культура (АФК) балаларҙың мөмкинлектәрен киңәйтеүгә булышлыҡ иткән физик әүҙемлектең һәм спорттың бөтә төрҙәрен берләштерә. АФК-ның маҡсаты булып һаулығы яғынан мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың физик әүҙемлеген һәм тормошоноң сифатын яҡшыртыу. Төп бурысы булып, балаларға әүҙем тормош алып барырға, юлындағы ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға, спорт менән шөғөлләнеү мөмкинлектәрен асырға ярҙам итеү тора.

Төп терәк-хәрәкәт аппараты боҙолған (БЦП) мәктәпкәсә йәштәге балаларға физик тәрбиә буйынса дәрестәр системаһы айырым рәүештә (ЛФК инструкторы менән берлектә) ҡорола. Балаларҙы тәүге тапҡыр ҡабул иткәндә физкультура тәрбиәсеһе лә булырға тейеш. Ул дауалаусы физкультура инструкторы (ЛФК) менән берлектә медицина документтарын өйрәнергә (ауырыу тарихынан күсермә, ортопед, невролог, дауалаусы табиб һ.б. кәңәштәре), ата-әсәләр менән әңгәмәләшергә, ирекле эшмәкәрлектә баланы күҙәтергә тейеш. ЛФК инструкторы менән берлектә, неврологик сирле балаларҙың хәрәкәтләнеү мөмкинлеген асыҡларға, ҡул хәрәкәте торошон, һиҙгерлек һәләтенең барлығын тикшерергә тейеш. Баланың хәрәкәтләнеү һәләтен ныҡлап, комплеклы рәүештә тикшергәндән һуң ғына тәүге протокол яҙыла. Икенсе этапта баланы бөтә яҡлап ныҡлы тикшергәндән һуң ғына һөҙөмтәләре картаға индерелә. Ошоларҙан сығып, хәрәкәт күнекмәләрен һәм хәрәкәтләнеү һәләтен формалаштырыу өсөн, һәр бер баланың һаулыҡ торошона ярашлы шәхси программа төҙөлә.

Программала хәрәкәтләнеү һәм ортопедик режим бирелә, (атлауға, ҡул һәм бармаҡтар торошона, башты тотоуға ярҙам иткән төрлө ортопедик ҡулайламалар ҡулланыуға), физик нагрузкалар кимәле, теге йәки был алымдарҙы ҡулланырға ярамаған осраҡтар күрһәтелә.

Физик тәрбиә эшендә һәр бер белгестең бөтә кәңәштәре лә иҫәпкә алынырға тейеш. БЦП менән ауырыған балаларға дөйөм хәрәкәт режимы буйынса шөғөлләнеү мөһим. Бала бер үк торошта (позала) 20 минуттан артыҡ торорға тейеш түгел. Һәр бер балаға үҙенә айырым торош (поза) һайланыла.

Балалар менән шөғөлләнгән ваҡытта ял минуттары һәм физкультура паузалары ҡулланыла. Буш ваҡыттары булғанда балалар төрлө физкультура кисәләрендә, спорт байрамдарында ҡатнаша ала. Бала менән үткәреләсәк бөтә саралар ҙа табиптар консилиумында тикшерелә. Церебраль паралич менән ауырыған балаларҙы физик яҡтан тәрбиәләү маҡсаты булып, режимдан тайпылмай, ысынбарлыҡ тормош шарттарында социаль күнегеү аша үтеү, коррекция-төҙәтеүсе физик күнегеүҙәр һәм махсус хәрәкәттәр тора. Төп терәк-хәрәкәт ағзалары боҙолған балалар өсөн программа төҙөгәндә М.В.Ипполитова, И.Ю.Левченко, Е.М.Мастюкова, О.Г.Приходько һ.б. хеҙмәттәрен ҡулланыу тәҡдим ителә.

Тәрбиә һәм белем биреү программаларының эстәлеге дөйөм үҫеш маҡсаттары менән бер рәттән махсус коррекция өлкәләрҙә күрһәтелгән бурыстарҙы ла үҙ эсенә ала. Тимәк, СМС балаларҙың дөйөм үҫеше коррекция эшенең ойошторолоу сифатына бәйле. Шуның өсөн программаларҙа һәр эшмәкәрлек төрө буйынса коррекция-төҙәтеү бурыстары ҡуйыла, уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн үҙ алымдары, ысулдары ҡулланыла.

Һиҙемләү, хәрәкәтләнеү һәләттәре боҙолған осраҡтар өсөн программа эстәлегенә «Күреп ҡабул итеүҙе үҫтереү» (күреү һәләтендә тайпылыштар булған балалар өсөн), «Ишетеп ҡабул итеүҙе үҫтереү һәм дөрөҫ әйтергә өйрәтеү» (ишетеүҙә мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн), «Дөйөм хәрәкәттәрҙе үҫтереү һәм коррекциялау, ҡул суҡтарының һәм бармаҡтарҙың физиологик мөмкинлектәрен камиллаштырыу» (хәрәкәтләнеү өлкәһендә етешһеҙлектәре булған балалар өсөн) кеүек коррекция бүлектәре индерелә.

ОЙОШТОРОУ БҮЛЕГЕ

2 ЙӘШТӘН АЛЫП МӘКТӘПКӘ ТИКЛЕМГЕ ЙӘШТӘГЕ БАЛАЛАРҘЫҢ КӨН ТӘРТИБЕ

Дөрөҫ көн тәртибе — тәүлек дауамында балалар эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәренең һәм ялының рациональ дауамлылығы һәм уйлап сиратлаштырылыуы. Көн тәртибе балаларҙың йәшенә, психо-физиологик үҙенсәлектәренә тура килеүе – уны төҙөүҙөң төп принцибы булып тора. Көндәлек режимды баланың индивидуаль үҙенсәлектәренә ҡулайлаштырырға ынтылыу кәрәк.

Таблицала төрлө йәш төркөмдәре өсөн көндәлек режим өлгөләре бирелә. Көндәлек режим баланың балалар баҡсаһында 12 сәғәт булыуына иҫәп тотоп төҙөлгән. Баланың баҡсала булыу ваҡыты икенсе төрлө булған осраҡта мәктәпкәсә ойошма көндәлек режимды үҙ-аллы төҙөй.

Көндәлек режимда дәрестәрҙең, уларҙың төрлө төрҙәре араһындағы тәнәфестәрҙе лә индереп, дөйөм ваҡыты күрһәтелгән. Педагог белем биреү нагрузкаһының күләмен, санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләр һәм нормативтар буйынса максималь рөхсәт ителгән эш күләмен арттырмайынса, үҙ-аллы билдәләй. Йылдың йылы осоронда дәрестәрҙең бер өлөшөн һауала йөрөү ваҡытында майҙансыҡта үткәрергә мөмкин.

Статик характерҙағы дәрестәрҙең уртаһында физкультминуттар үткәрергә тәҡдим ителә. Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн өҫтәлмә белем биреү дәрестәрен (студиялар, түңәрәктәр, секциялар һ.б.) һауала йөрөүгә һәм көндөҙгө йоҡоға бирелгән ваҡыт иҫәбенә үткәреү ярамай.

Көндәлек режим яҡынса төҙөлгән, уға һәр бер мәктәпкәсә учреждениеһының эш үҙенсәлектәрен (балалар контингентын, төбәктәге климат шарттарын, бассейн булыу-булмауҙы, йыл миҙгелен, көн оҙонлоғон һ.б.) иҫәпкә алып төҙәтмәләр индерергә мөмкин.

Һәр бер бала үҙен балалар баҡсаһында уңайлы, хәүефһеҙ хис итергә тейеш. Бында уны яратыуҙарын, уның тураһында ҡайғыртыуҙарын белеүе мөһим. Ата-әсәләрҙән ауыр айырыла һәм төркөмдә ҡалырға теләмәгән балаларға ҡарата, айырыуса балалар баҡсаһына эйәләшеү осоронда, күберәк иғтибар бирергә кәрәк.

Яҡынса көн тәртибе

Режим моменттары	Иң кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2-3)	Кескәйҙәр төркөмө (3-4)	Уртансылар төркөмө (4-5)	Өлкәндәр төркөмө (5-6)	Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6-7)
Балаларҙы ҡабул итеү, уйнау, үҙ-аллы эшмәкәрлек, иртәнге гимнастика	7.00 – 8.30	7.00 – 8.30	7.00 – 8.30	7.00. – 8.30	7.00 – 8.30
Иртәнге ашҡа әҙерләнеү, иртәнге аш	8.30- 9.00	8.30- 9.00	8.30- 9.00	8.30- 9.00	8.30- 9.00
Белем биреү эшмәкәрлегенә әҙерлек, белем биреү эшмәкәрлеге*	9.00 – 9.10 9.20 - 9.30- 9.40	9.00 – 9.50	9.00 – 10.10	9.00 – 10.40	9.00- 11.05
II иртәнге аш**	9.50	10.00	10.10	10.05	10.15
Тышҡа сығырға әҙерлек, саф һауала булыу (уйындар, күҙәтеүҙәр), тыштан инеү	9.55-11.40	10.05-12.05	10.15-12.15	10.40– 12.30	11.05-12.50
Төшкө ашҡа әҙерләнеү, төшкө аш	11.40 – 12.15	12.05 – 13.00	12.15 – 13.00	12.30– 13.00	12.50– 13.15
Йоҡларға әҙерләнеү, көндөҙгө йоҡо	12.15 – 15.15	13.00-15.00	13.00-15.00	13.00-15.00	13.15-15.15
Йоҡонан тороу, һауа һәм һыу процедуралары, уйындар, үҙ-аллы эшмәкәрлек	15.15-16.00	15.00-16.00	15.00 - 16.00	15.00-16.00	15.15-16.00
Белем биреү эшмәкәрлегенә әҙерлек, белем биреү эшмәкәрлеге	15.35- 15.45				
Полдникка әҙерлек, туҡлыҡлы полдник***	16.00 – 16.30	16.00 – 16.30	16.00 – 16.30	16.00– 16.30	16.00 – 16.30
Тышҡа сығырға әҙерләнеү, саф һауала йөрөү, тыштан инеү	16.30 – 18.45	16.30 – 18.45	16.30 – 18.45	16.30 – 18.45	16.30. – 18.45
Уйындар, өйгә ҡайтыу	18.45 – 19.00	18.45 – 19.00	18.45 – 19.00	18.45 – 19.00	18.45 – 19.00

** дөйөм ваҡыт күрһәтелгән, уның эсенә тәнәфестәр ҙә ингән.*

*** икенсе иртәнге аш көн тәртибендә мотлаҡ элемент түгел. Айырым ҡарар нигеҙендә балалар баҡсаһы етәкселеге уны индерә ала. 2.4.1.3049-13 СанПиН буйынса иртәнге ашҡа берәй эсемлек, һут һәм/йәки емеш-еләктәр инә.*

**** 12 сәғәтлек көн режимында полдникты айырым ойоштороу мөмкин, йәки еңелсә ашты киске аш ризыҡтары менән тулыландырыу мөмкин СанПиН 2.4.1.3049-13).*

Режим моменттарын ойоштороу үҙенсәлектәре

Режим моменттарын тормошҡа ашырғанда, балаларҙың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға кәрәк. Балалар баҡсаһының режимы баланың шәхси үҙенсәлектәренә ярашлы төҙөлһә, баланың үҙен уңайлы тойоуына, кәйефенең һәйбәт булыуына һәм әүҙемлегенә булышлыҡ итә.

Туҡланыу. Баланы ашарға ҡыҫтарға ярамай, улар аппетит менән ашарға тейеш. Әгәр балаларға ризыҡты һайлау хоҡуғы бирелһә, улар теләк менән ашаясаҡтар. Балаларҙың төрлө тиҙлектә ашауҙарын иҫәпкә алып, уларға үҙҙәренең яйы менән ашау мөмкинлеге бирелә.

Балаларҙы ашап бөткәндән һуң, өҫтәл артында башҡалар ашап бөткәнде көттөрөп ултыртырға ярамай. Ашап бөткәс, балалар «рәхмәт» әйтеп, үҙ-аллы уйындар менән шөғөлләнергә тейеш.

Саф һауа. Балаларҙың һаулығын нығытыу һәм хәрәкәт әүҙемлеге ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн, көн һайын саф һауала йөрөү ҡарала. Саф һауала йөрөү ваҡытын ҡыҫҡартырға ярамай. Көн ағышында, балаларҙың саф һауала йөрөүөн етерлек итеп тәьмин итеү мөһим.

Көндәлек уҡыу. Көн режимында балаларға көн һайын даими уҡыу өсөн ваҡыт бүленергә тейеш. Уҡыу өсөн әҙәби әҫәрҙәрҙе генә түгел, танып-белеүҙе тәьмин итеүсе китаптарҙы, балалар энциклопедияһын, тыуған илдең һәм башҡа сит илдәрҙең тарихы һәм мәҙәниәте тураһындағы әҫәрҙәрҙе һайларға кәрәк.

Китапты уҡыу һәм әҙәби геройҙар миҫалында уҡылғандар тураһында фекер алышыу балаларҙа социаль-әхлаҡи сифаттар тәрбиәләргә ярҙам итә. Китап уҡыуҙы дәрескә әйләндерергә ярамай - баланың һәр ваҡыт китап уҡыуҙы тыңлау йәки үҙ эштәре менән шөғөлләнеү теләгән һайлау мөмкинлеге булырға тейеш. Педагогтың төп бурысы - бөтә балалар өсөн дә мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы итеп уҡыу.

Көндөҙгө йоҡо. Балаларҙың көндөҙгө йоҡоһо өсөн шарттар булдырыу мөһим булып тора. Балалар йоҡлаған бүлмәлә тыныс һәм саф һауа булырға тейеш. Көн ағышындағы хәрәкәт әүҙемлеге һәм тыныс уйындар тәрән йоҡоға һәм тиҙ йоҡлап китеүгә ярҙам итә.

Физкультура-һауыҡтырыу эше

Мәктәпкәсә ойошмала балаларҙың сәләмәтлеген нығытыу, организмын сыныҡтырыу һәм уның функцияларын камиллаштырыу буйынса даими эш алып барыу кәрәк.

Төрлө тәбиғәт факторҙарын (һауа, ҡояш, һыу) ҡулланып һәм балаларҙың һаулыҡ торошон, урындағы шарттарҙы иҫәпкә алып, медицина хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында төрлө сыныҡтырыу сараларын тормошҡа ашырыу кәрәк. Сыныҡтырыу сараларын үткәргәндә балаларҙың шәхси мөмкинлектәрен иҫәпкә алып, һәр бер бала менән айырым рәүештә эш итеү мөһим.

Мәктәпкәсә балалар ойошмаһының етәксеһе, медицина персоналы һәм ата-әсәләрҙең ҡарарынан сығып, махсус сыныҡтырыу сараларын үткәрергә мөмкин (мәҫәлән, һыу менән ҡойоноу).

Балаларҙың кәүҙә торошон дөрөҫ һаҡлауға иғтибар итеү, бүлмәне уртаса температура режимы менән тәьмин итеү, көн һайын елләтеү, балаларҙы бүлмәлә еңел кейем менән йөрөргә өйрәтеү мөһим.

Көн режимына ярашлы, балаларҙы саф һауаға алып сығырға кәрәк.

Оптималь хәрәкәт режимын — хәрәкәт әүҙемлеге формалары һәм дәрестәрҙең төрлө төрҙәрен рациональ сиратлаштырыуҙы тәьмин итеү мөһим, был хәрәкәт активлығының дөйөм ваҡыты баланың барлыҡ уяу булған ваҡытының 60 % нан да кәм булмаҫҡа тейеш.

Саф һауала үткәрелгән хәрәкәтле уйындарҙа һәм физик күнекмәләрҙә ҡатнашҡан балаларҙы дәртләндереп торорға кәрәк. Үҙ-аллы хәрәкәтле һәм спорт уйындарын, күнекмәләрҙе ойошторғанда балаларҙың инициативаһын үҫтереү, физкультура һәм спорт ҡулланмаларын үҙ-аллы ҡулланған балаларҙы дәртләндереү кәрәк.

Балаларҙа физик күнекмәләргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләргә һәм буш ваҡытта физкультура ҡулланмаларын ҡулланырға өйрәтергә кәрәк. Балаларҙың теләге буйынса, көн һайын иртәнге гимнастика үткәреү мөһим. Аҡыл нагрузкаһын талап иткән белем биреү эшмәкәрлеге барышында 1-3 минутлыҡ ял минуттары үткәрергә тәҡдим ителә.

Мөмкинлек булғанда балаларҙы йөҙөргә һәм гидроаэробика күнекмәләренә өйрәтергә кәрәк.

Хәрәкәт әүҙемлеге режимы

Эш төрө	Эшмәкәрлек төрө	Эшмәкәрлектең күләме һәм оҙонлоғо (минуттарҙа)			
		3-4 йәш	4-5 йәш	5-6 йәш	6-7 йәш
Физкультура дәрестәре	бүлмәлә	анаһына 2 тапҡыр 15-20	аҙнаһына 2 тапҡыр 20-25	аҙнаһына 2 тапҡыр 25-30	аҙнаһына 2 тапҡыр 30-35
	саф һауала	аҙнаһына 1 тапҡыр 15-20	аҙнаһына 1 тапҡыр 20-25	аҙнаһына 1 тапҡыр 25-30	аҙнаһына 1 тапҡыр 30-35
Көн режимында физкультура -һаулыҡ нығытыу эштәре.	иртәнге гимнастика (балаларҙың теләге буйынса)	көн һайын 5-6	көн һайын 6-8	көн һайын 8-10	көн һайын 10-12
	хәрәкәт һәм	көнөнә	көнөнә	көнөнә	көнөнә

	спорт уйындары һәм саф һауала күнекмәләр	2 тапҡыр (иртән һәм кис) 15-20	2 тапҡыр (иртән һәм кис) 20-25	2 тапҡыр (иртән һәм кис) 25-30	2 тапҡыр (иртән һәм кис) 30-35
	ял минуттары (дәрестең төрөнә һәм йөкмәткеһенә ҡарап)	көн һайын 3-5	көн һайын 3-5	көн һайын 3-5	көн һайын 3-5
	бассейнда дәрестәр	15-20	20-25	25-30	30-40
Әүҙем ял	Физкультура саралары	айына 1 тапҡыр 20	айына 1 тапҡыр 20	айына 1 тапҡыр 30-45	айына 1 тапҡыр 40
	Физкультура байрамдары	-----	йылына 2 тапҡыр 45 мин	йылына 2 тапҡыр 60 минутҡа тиклем	йылына 2 тапҡыр 60 мин
	Сәләмәтлек көнө	кварталға 1 тапҡыр	кварталға 1 тапҡыр	кварталға 1 тапҡыр	кварталға 1 тапҡыр
Үҙ-аллы хәрәкәт эшмәкәрлеге	Физкультура һәм спорт-уйын ҡорамалдарын үҙ-аллы файҙаланыу	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
	Үҙ-аллы хәрәкәтле һәм спорт уйындары	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын

Уҡытыу-тәрбиә эшмәкәрлеген проектлау

Уҡытыу-тәрбиә эше тәрбиәләнеүселәрҙең контингентын, уларҙың шәхси үҫеш һәм йәш үҙенсәлектәрен, ата-әсәләрҙең социаль заказдарын иҫәпкә алып төҙөлә.

Тәрбиә-белем биреү процесын ойошторған ваҡытта тәрбиәләү, үҫтереү һәм өйрәтеү маҡсаттарының һәм бурыстарының берҙәмлеген тәьмин итеү кәрәк, шуның менән бергә ҡуйылған маҡсат һәм бурыстарҙы балаларға саманан артыҡ эш бирмәйенсә, кәрәкле һәм етәрлек материалға таянып, тейешле «минимум»ға максималь рәүештә яҡынайтып хәл итеү кәрәк. Белем биреү процесын белем биреү өлкәләре интеграцияһын иҫәпкә алып, комплекслы-тематик принципҡа нигеҙләнеп ҡороу был маҡсатты тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирә.

Белем биреү эшен бөтә яҡлап төп темаға бәйләп төҙөү, баланың үҫешенә ҙур йоғонто яһай һәм уның практик яҡтан тәжрибә туплауына һәм күнекмәләрҙе башҡарыу ысулдарын үҙләштереүенә, аңлы фекерләүенә төрлө мөмкинлектәр аса. Темалар мәғлүмәттәрҙе төрлө ысулдар менән ойоштороpға ярҙам итә.

Билдәле осорға төп теманы айырып алыу балаларҙың бөтә эшмәкәрлеген тик ошо темаға ғына бағышлау кәрәк тигән һүҙ түгел. Төп теманы индереүҙең маҡсаты - белем биреү эшмәкәрлеген интеграциялау һәм балалар эшмәкәрлеген белем биреү өлкәләре буйынса артыҡ ваҡлауға юл ҡуймау.

Төрлө йәштәге төркөмдәрҙә оҡшаш темаларҙы тормошҡа ашырыу мәктәпкәсә осорҙа балалар үҫешендәге күсәгилешлекте һәм белем биреү маҡсаттарының берҙәмлегенә ирешеүҙе, балаларҙың шәхси мөмкинлекләренә ҡарап уларҙың тулы үҫешен тәьмин итә.

Белем биреү процесын ойоштороуҙың тематик принцибы милли-төбәк һәм мәҙәни йөкмәткеле материалдарҙы индерергә, балалар баҡсаһының үҙенсәлеген иҫәпкә алып эш итергә мөмкинлек бирә.

Бер темаға бирелгән ваҡыт бер аҙнанан да кәм булмаҫҡа тейеш. Оптималь ваҡыт – 2-3 аҙна. Тема төркөмдә һәм үҫеш үҙәктәрендә (мөйөштәрендә) булған материалдарҙы һайлауҙа сағылырға тейеш. Программала һәр йәш төркөмө өсөн комплекслы тематик планлаштырыу бирелә (ҡушымта№ 3). Уны өлгө булараҡ ҡарарға кәрәк.

Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһы белем биреүҙә ҡатнашыусылар тарафынан формалаштырылған милли-төбәк һәм мәҙәни йөкмәтке өлөшөн индереү өсөн, балалар баҡсаһының үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, үҙ теләктәре буйынса темаларҙы йәки уларҙың атамаларын, йөкмәткеһен, ваҡытын һ.б., өлөшсә йәки тулыһынса үҙгәртә ала.

Программала биш көнлөк аҙна буйынса эшләгән моделдә белем биреү эшмәкәрлеген планлаштырыу өлгөһө бирелә. Мәктәпкәсә учреждение төбәктең һәм мәктәпкәсә учреждениеның үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу өсөн планлаштырыуға үҙгәрештәр индерә ала.

СанПиН 2.4.1.3049-13 буйынса, мәктәпкәсә учреждениела балалар менән үткәрелә торған дәрестәр һаны билдәләнмәй; бары белем биреүҙә эштең нисә тапҡыр үткәрелергә һәм үткәрелеү ваҡыты ғына күрһәтелә:

«**11.9.** 1.5 йәштән алып 3 йәшкә тиклемге кесе йәштәге балалар өсөн өҙлөкһөҙ, туранан-тура белем биреү эшмәкәрлеге дауамы 10 минуттан артмаҫҡа тейеш. Белем биреү эшмәкәрлеге көндөң беренсе һәм икенсе яртыһында тормошҡа ашырыла ала (8-10-ар минут). Белем биреү эшмәкәрлеген саф һауала йөрөгәндә уйын майҙансығында ойошторорға мөмкин.

11.10. 3 йәштән алып 4 йәшкә тиклемге балалар өсөн өҙлөкһөҙ туранан-тура белем биреү эшмәкәрлегенең дауамы 15 минуттан, 4 йәштән алып 5 йәшкә тиклемгеге балалар өсөн - 20 минуттан, 5 йәштән 6 йәшкә тиклемге балалар өсөн - 25 минуттан, ә 6 йәштән 7 йәшкә тиклемге балалар өсөн 30 минуттан артыҡ булырға тейеш түгел.

11.11. Көндөң беренсе яртыһында кескәйҙәр төркөмөндә һәм уртансы төркөмдә рөхсәт ителә торған максималь белем биреү нагрузкаһы күләме, төркөмгә ҡарап, 30

һәм 40 минуттан, ә ҙурҙар һәм әҙерлек төркөмдәрендә - төркөмгә ҡарап, 45 минуттан һәм 1,5 сәғәттән артмаҫҡа тейеш. Өҙлөкһөҙ белем биреү эшмәкәрлегенә бирелгән ваҡыт уртаһында физкультура минуттары үткәрелә. Өҙлөкһөҙ белем биреү эшмәкәрлеге ваҡыттары араһындағы тәнәфестәр 10 минуттан кәм булмаҫҡа тейеш.

11.12. Мәктәпкәсә йәштәгеләрҙең ҙурҙар төркөмө менән белем биреү эшмәкәрлеге көндөң икенсе яртыһында көндөҙгө йоҡонан һуң үткәрелергә мөмкин. Уның үткәрелеү ваҡыты көнөнә 25-30 минуттан артмаҫҡа тейеш.

Статик характерҙағы туранан-тура белем биреү эшмәкәрлеге уртаһында физкультура минуттары үткәрелә.

5 көнлөк эш аҙнаһына белем биреү эшмәкәрлеген яҡынса планлаштырыу

Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге					
Эшмәкәрлектең базалы төрө	**Эшмәкәрлектең ҡабатланып тороуы**				
	Иң кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө	**Кескәйҙәр төркөмө**	**Уртансы төркөм**	**Өлкәндәр төркөмө**	**Мәктәпкә әҙерлек төркөмө**
Бүлмәлә физкультура үткәреү	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр
Саф һауала физкультура үткәреү	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр
Танып-белеү үҫеше	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр
Телмәр үҫеше	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр
Һүрәт төшөрөү	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр
Әүәләү	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр
Йәбештереү	-------------	2 аҙнаға 1 тапҡыр	2 аҙнаға 1 тапҡыр	2 аҙнаға 1 тапҡыр	2 аҙнаға 1 тапҡыр
Музыка	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр	аҙнаһына 2 тапҡыр
Өлкәндәрҙең балалар менән төрлө эшмәкәрлектә үҙ ара бәйләнеше					
Әҙәби әҫәрҙәр уҡыу	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Конструктив-моделләштереү эшмәкәрлеге	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр	аҙнаһына 1 тапҡыр

Уйын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Режим моменттарындағы аралашыуҙар	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Дежур итеү	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Саф һауала	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Балаларҙың үҙ-аллы эшмәкәрлеге					
Үҙ-аллы уйын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Үҫеш мөйөштәрендә балаларҙың үҙ-аллы эшмәкәрлеге	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Танып-белеү-эҙләнеү эшмәкәрлеге	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Һауыҡтырыу эштәре					
Иртәнге гимнастика	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Сыныҡтырыу сараларының комплексы	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын
Гигиена саралары	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын	көн һайын

Мәҙәни – күңел асыу эшмәкәрлеге (байрамдарҙың, кисәләрҙең, ғәҙәттәге ваҡиғаларҙың үҙенсәлектәре)

Программала стандарт талаптарына ярашлы байрамдарға, кисәләргә, ғәҙәти ваҡиғаларға арналған «Мәҙәни-күңел асыу эшмәкәрлеге» бүлеге индерелгән һәм ул балаларҙың мәҙәни-күңел асыу эшмәкәрлегенең үҫеше, һәр бер балаға ял, хис-тойғо именлеге, шөғөлләнеү оҫталығын формалаштырыуҙы тәьмин итә. Бүлектә педагогтар өсөн, һәр йәштәге балалар төркөмөнөң буш ваҡыттарын ойоштороу бурыстары күрһәтелгән.

Ҡушымтала байрамдарҙың, кисәләрҙең, ваҡиғаларҙың яҡынса исемлеге бирелгән.

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Балалар баҡсаһында һәм төркөмдә эмоциональ климат булдырырға, балалар үҙҙәрен уңайлы һәм хәүефһеҙ тойһон өсөн шарттар булдырырға кәрәк.

Балаларҙа байрамдарҙа, уйын-көлкөлә, күңел асыуҙа ҡатнашыу теләген үҫтереү мөһим. Үҙ йөрөшлө уйынсыҡтарҙың һәм әкиәт геройҙарының хәрәкәттәрен күҙәтеү һәләтен үҫтереү, уларға ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү.

Әкиәт геройҙары ҡиәфәтенә инеү оҫталығын формалаштырыуға булышлыҡ итеү.

Байрамдар йәш мөмкинлектәренә һәм балаларҙың ҡыҙыҡһыныуына ярашлы үткәреләә.

Кескәйҙәр төркөмө(3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Ял итеү. Балаларҙың ҡыҙыҡһыныуын иҫәпкә алып, мәҙәни-күңел асыу эшмәкәрлеген үҫтереү. Һәр бер баланың ял (пассив һәм актив) итеүен һәм кәйеф торошоноң именлеген тәьмин итеү. Үҙ-үҙен уйын менән мәшғүл итеү оҫталығын формалаштырыу.

Күңел асыуҙар. Театр тамашаһын күрһәтеү. Йәнһүрәт ҡарауҙы һәм спектакль яҙмаларын тыңлауҙы ойоштороу. Төрлө тематик күңел асыуҙар үткәреү (үтелгән материалдарҙы дөйөмләштереү һәм нығытыу өсөн).

Байрамдар. Байрам мәҙәниәтенә балаларҙы ылыҡтырыу. Дәүләт байрамдарын үткәреү («Яңы йыл», «Әсәйҙәр көнө»). Байрамда шатлыҡ һәм яҡшы кәйеф торошон булдырыу.

Үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлеге. Балаларҙа һынлы сәнғәт эшмәкәрлеге менән шөғөлләнеү, китаптарҙан һүрәттәр ҡарау, төрлө уйындар уйнау, тәрбиәсе ярҙамында таныш әкиәттәрҙе сәхнәләштереү, халыҡ йырҙарын һәм һамаҡтарын тыңлау теләген уятыу. Баланың уйнау, бейеү, музыка ҡоралдарында уйнау теләгенә булышлыҡ итеү. Баланың үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлеген тормошҡа ашырыу өсөн тейешле шарттар булдырыу.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Ял итеү. Баланың буш ваҡытында үҙ-аллы эшмәкәрлек менән шөғөлләнеү, тәбиғәт матурлығына һоҡланыу; ҡоштар, ямғыр тауышын, көй тыңлау, һүрәт төшөрөү, илһамланыу теләген тормошҡа ашырыу.

Күңел асыу. Баланың үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлегенә, ялына һәм яңы тәьҫораттар алыуына шарттар булдырыу. Танып-белеү аша күңел асыуға, халыҡ традицияларына, йолаларына һәм мәҙәниәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Уйын-көлкө төрҙәрен ойоштороуға әҙерлек барышына балаларҙы йәлеп итеү, ҡурсаҡтар спектаклында, музыкаль һәм әҙәби концерттарҙа, спорт уйындарында ҡатнашыу теләген формалаштырыу.

Рухи һәм әхлаҡи тәрбиәне тормошҡа ашырыу.

Ижади эштәр менән шөғөлләнеү оҫталығын һәм теләген үҫтереү (һүрәт төшөрөү,әүәләү һ.б.).

Байрамдар. Халыҡ байрамдарына һәм уларҙы үткәреү мәҙәниәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү (милли кейемдәр кейеү, байрам атрибуттарын әҙерләү, ололар һәм тәбиғәт менән балалар араһындағы мөнәсәбәттәр һ.б.). Байрамдарҙа ҡатнашыу теләген үҫтереү.

Тыуған илгә, йәшәгән еренә, ундағы төрлө милләт халыҡтарына ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Яңы йылға, 8 мартҡа, Ватанды һаҡлау көнөнә һәм халыҡ байрамдарына арналған саралар ойоштороу.

Үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлеге. Эшмәкәрлектең төрлө төрҙәрен һәм төрлө йөкмәткеле дәрестәрҙе (танып-белеү, спорт, һынлы сәнғәт, хеҙмәт) һайлағанда, үҙ-

аллылыҡ үҫешенә булышлыҡ итеү. Һәр бер баланың ижад йүнәлеше буйынса һәләтен формалаштырыу.

Балаларҙы эстетик яҡтан тәрбиәләү һәм үҫтереү студияларына йөрөү теләген үҫтереү (балалар баҡсаһында һәм ижади үҙәктәрҙә).

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Ял итеү. Буш ваҡытта ҡыҙыҡлы һәм файҙалы эшмәкәрлек менән шөғөлләнеү теләген үҫтереү. Күңел асыу мәҙәниәтенең нигеҙҙәрен формалаштырыу (уйын, китап уҡыу, рәсем, әүәләү, сәйәхәт һ.б.).

Күңел асыу. Мәҙәниәт һәм танып-белеү ихтыяждарын асыу өсөн шарттар булдырыу һәм буш ваҡытты файҙалы үткәреү өсөн алған белемдәрҙе һәм оҫталыҡтарҙы ҡулланыу.

Спортҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү һәм уның менән шөғөлләнеү теләгенә ярҙам итеү.

Байрамдар. Ғәҙәти, ябай һәм байрам көндәре тураһында төшөнсә биреү. Байрамдарға ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү, уны әҙерләгәндә ҡатнашыу теләген булдырыу (музыка залын һәм төркөмдө биҙәү).

Тирә-яҡтағы кешеләргә ҡарата иғтибарлы булырға, уларҙы байрам менән ҡотларға, үҙ ҡулдары менән бүләк әҙерләргә күнектереү.

Үҙ-аллы эшмәкәрлек. Баланың ҡыҙыҡһыныу һәм шәхси һәләттәренең үҫеше өсөн шарттар булдырыу (күҙәтеү, тәжрибә үткәреү, коллекция йыйыу). Үҙ эшмәкәрлеген ойоштороу оҫталығын һәм ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә белеү нигеҙҙәрен формалаштырыу, таҙалыҡҡа һәм тәртипкә күнектереү. Тәрбиәселәр, ололар һәм йәштәштәре менән үҙ ара бәйләнеште үҫтереү.

Ижад. Йырға, ижадҡа, һүрәт төшөрөүгә ынтылыш үҫтереү. Баланың танып-белеү һәм сәнғәт эшмәкәрлеге менән мауығыуына ярҙам итеү, түңәрәк һәм студияларға йөрөү өсөн шарттар булдырыу.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Ял итеү. Балаларҙы ҡыҙыҡлы һәм файҙалы эшмәкәрлеккә йәлеп итеү (уйын, спорт, рәсем,әүәләү, көй тыңлау, йәнһүрәт ҡарау, китап уҡыу).

Күңел асыу. Төрлө күңел асыуҙарҙа әүҙем ҡатнашыу теләген уятыуға булышлыҡ итеү. Үҙ-аллы эшмәкәрлектә белем һәм оҫталыҡты ҡулланыу, башҡаларға ҡарата ярҙамсыл һәм яҡшы мөнәсәбәттә булыу һәләтен үҫтереү.

Ижади һәләтте, ҡыҙыҡһыныусанлыҡты, хәтерҙе, фекерләү һәләтен, төрлө булған хәл-ваҡиғаларҙа үҙ-үҙен тота белеү оҫталығын үҫтереү.

Рәсәйҙә, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре һәм традициялары, кәсептәре, мәҙәниәте тураһындағы төшөнсәләрҙе тулыландырыу һәм аң-белем даирәһен киңәйтеү.

Байрамдар. Дәүләт һәм халыҡ байрамдары тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Балаларҙы байрамға әҙерлек үткәреү эштәренә йәлеп итеү. Байрам эшмәкәрлегендә ҡатнашыуҙан ҡәнәғәтлек тойғоһон алыуҙы формалаштырыу. Байрам мәҙәниәте нигеҙҙәрен формалаштырыу.

Үҙ-аллы эшмәкәрлек. Балаларға төрлө материалдар менән тәжрибә үткәреү (һыу, ҡом, балсыҡ менән һ.б.) һәм үҫемлектәрҙе, йәнлектәрҙе, тәбиғәтте күҙәтеү мөмкинлектәрен биреү.

Дидактик һәм өҫтәл-арты уйындары менән уйнау һәләттәрен үҫтереү. Үҙ-аллы эшмәкәрлекте ойоштороу һәм планлаштырыу оҫталығын формалаштырыу.

Ижад. Әҙәби-музыкаль һәм танып-белеү эшмәкәрлегендә үҙ-аллылыҡты камиллаштырыу. Буш ваҡытта төрлө эшмәкәрлек: музыка, һынлы сәнғәт, театр һ.б. менән шөғөлләнгәндә ижады яҡтан ҡуйылған талаптарҙы үтәй белеү һәләтен формалаштырыу.

Баланың әҙәби-эстетик студияларға йөрөү теләгенә булышлыҡ итеү.

Программаны тормошҡа ашырыу шарттары

Предметлы арауыҡ мөхитен ойоштороу үҙенсәлектәре

Мөхит төшөнсәһе аңлатмаһында тәбиғәт, социаль-көнкүреш йәки мәҙәни-эстетик характерлы тирә-йүн күҙ уңында тотола. Кешенең көн күреү шарттары - уның тормошта йәшәйеш арауығы булып тора. Мөхит махсус проектланған йүнәлеш алырға мөмкин. Уның тураһында, шәхесте формалаштырыусы мөһим фактор тип, йәки белем биреү мөхите (Т.С.Колмарова, С.Л.Новоселова, Г.Н.Пантелеев, Н.П.Сакулова, Е.О. Смирнова, Е.Н.Тихеева, Е.А.Флерина, С.Т. Щацкий һ.б.) булараҡ та әйтәләр.

Балалар баҡсаһындағы белем биреү мөхите булып, балаларҙың йәшәүе өсөн кәрәкле махсус шарттар тора. Предметлы-үҫтереүсе мөхит, балаларҙың талаптарын ҡәнәғәтләндереүсе булараҡ, танып белеүҙә, аралашыуҙа, хеҙмәттә, физик һәм рухи яҡтан үҫеште тәьмин итеүсе бай йөкмәткеле һәм сағыу биҙәлешле махсус ойошторолған йәшәйеш арауығы. Хәҙерге замандағы үҫтереүсе предметлы - арауыҡ мөхите баланың әүҙем йәшәү эшмәкәрлеген тәьмин итеүҙе, уның ижади һәләттәрен төрлө яҡлап һәм төрлө алымдар менән үҫтереүҙе үҙ эсенә ала.

Мөхит ойоштороуға төп талаптар:

Мәктәпкәсә йәштәге балалар ойошмаһының үҫтереүсе предмет-арауыҡ мөхите түбәндәге талаптарға тап килергә тейеш:

- бай йөкмәткеле һәм үҫтереүсе;
- вариатив, тиҙ йыйылмалы һәм ҡоролмалы;
- күп функциональлы;
- хәүефһеҙ;
- һаулыҡты нығытыуға, һаҡлауға ярҙам итеүсе;
- бала ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүсе, йәғни уның теләгән эшмәкәрлек менән шөғөлләнә алыу мөмкинлеге;
- эстетик яҡтан сағыу һәм мауыҡтырғыс булырға тейеш.

Мөхит ойоштороуҙың төп бурыстары:

Мәктәпкәсә йәштәге балалар ойошмаһының бүлмәләренең йыһаздары хәүефһеҙ (һаулыҡҡа ҡурҡыныс янамаған), эстетик яҡтан зауыҡлы итеп биҙәлгән булырға тейеш. Йыһаз баланың йәшенә һәм буйына ярашлы булырға, ә уйынсыҡтар һәр

йәш төркөмөндәге балаларҙы үҫтереүсе булараҡ тейешле роль үтәүсе дидактик саралар булып ҡулланылырға тейеш.

Үҫтереүсе предметлы-арауыҡ мөхите бала һәм ололарҙың берҙәм һәм үҙаллылыҡ эшмәкәрлеге булараҡ, бай йөкмәткеле, кәрәкле һәм баланың ихтыяждарын тормошҡа ашырыу талаптарына яуап бирергә тейеш.

Кескәйҙәр төркөмөндә балалар уйынының нигеҙендә предмет ята, шуға күрә ололар һәр ваҡыт уйын мөхитен яңыртып торорға тейеш. Төркөм бүлмәһендә балаға үҙ-аллы хәрәкәтләнеү әүҙемлеге өсөн шарттар булдырыу мөһим: көнөнә бер нисә тапҡыр уйын майҙансығын йыһаздарҙан һәм уйынсыҡтарҙан бушатып, хәрәкәтле уйын эшмәкәрлеген үҫтереү өсөн икенсе уйынсыҡтар ҡуйырға, хәрәкәт әүҙемлеген дәртләндереү өсөн был уйынсыҡтарҙы алмаштырып торорға кәрәк.

Өлкәндәр төркөмөндә төп теләк уйын темаһына нигеҙләнә, шуға күрә төрлөләнгән күп функциаль үтәүсе предметлы мөхит балаларҙың әүҙем фекерләүен уята һәм улар һәр ваҡыт уйын арауығын һығылмалы модулдар, шаршауҙар, ултырғыстар, кубтар ҡулланып яңыса төҙөйҙәр. Предметлы - уйын мөхите балаларға уйын арауығын икенсе күҙлектән сығып ҡарарға, уйын урынын тулыландырыуҙа әүҙемлек күрһәтергә һәм уның һөҙөмтәһен күрергә ярҙам итә.

Үҫтереүсе предметлы-арауыҡ мөхите тәбиғи характерлы объекттар менән тәьмин ителеүҙе күҙаллай: балалар баҡсаһындағы майҙансыҡта үҫкән үҫемлектәрҙе, ҡош-ҡорттарҙы, бөжәктәрҙе күҙәтеү, уларға ярҙам итеү теләген уятырға тейеш., тәбиғәт материалдары менән тәжрибә, тикшереү эштәре үткәреү һ.б.

Үҫтереүсе предметлы-арауыҡ мөхите, мәҙәни арауыҡ булараҡ та, балалар тәрбиәләүгә ҙур йоғонто яһай (халыҡ ижады, көнкүреш кәрәк-яраҡтары, репродукциялар, бөйөк кешеләрҙең портреттары, милли биҙәктәр, кейемдәр, музыка ҡоралдары: ҡурай, ҡумыҙ, дөңгөр, думбыра).

Төркөм бүлмәһендә һәр берешенә айырым урын бүленгән үҙәктәр йәки мөйөштәр булдырып, уларҙы ҙур күләмле үҫтереүсе материалдар менән байытыу (китаптар, уйынсыҡтар, ижад өсөн материалдар һ.б.). Арауыҡты ошо кимәлдә ойоштороу, балаларға үҙе өсөн ҡыҙыҡлы шөғөл һайлауға, ә педагогҡа баланың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, белем биреү эшен файҙалы ойоштороуға мөмкинлектәр бирә.

Мөйөштәрҙе (үҙәктәрҙе) тулыландырыу белем биреү эшенең тематик планына ярашлы үҙгәреп торорға тейеш. Үҫтереү үҙәктәре (мөйөштәре) үҙ эсенә түбәндәгеләрҙе ала:

-сюжетлы-ролле уйындар өсөн мөйөш;

-театр уйындары өсөн мөйөш;

-китап мөйөшө;

-өҫтәл-арты уйындары өсөн мөйөш:

-күргәҙмә (балалар һүрәттәре, халыҡ оҫталарының эштәре һ.б.);

-тәбиғәт мөйөшө;

-һыу һәм ҡом менән уйнау, тәжрибәләр өсөн мөйөш;

-баланың үҙ-аллылыҡ эшмәкәрлегендәге төрлө тармаҡтар мөйөшө (һынлы сәнғәт, музыка, ҡоролмалар төҙөү һ.б.);

-ҙур йомшаҡ ҡоролмалар төҙөү мөйөшө (блоктар,өйҙәр, тоннелдар һ.б.);

-уйнау мөйөшө (уйынсыҡтар һәм төҙөлөш материалдары менән) тора.

Үҫтереүсе предметлы-арауыҡ мөйөшө динамик арауыҡ булараҡ, хәрәкәтле һәм еңелсә үҙгәреүсән булырға тейеш. Предметлы мөхитте проектлағанда, шуны иҫәптә тоторға кәрәк: «ҡатып» ҡалған (статик), хәрәкәтләнмәгән, бер нәмәгә лә тейергә ярамаған предметлы мөхит үҙенең үҫтереүсе ролен үтәй алмай, ул балаға уйланырға, фекерләргә сәбәпсе, этәреүсе көс булып хеҙмәт итә алмай.

Динамик нигеҙ булып уйын арауығының хәрәкәтсәнлеге, предметлы шарттарҙың төрлөлөгө балалар эшмәкәрлегенең ниндәй характерҙа булыуына бәйле. Шуның менән бергә мөхиттең тотороҡло һәм даими булыуы ла мөһим, бигерәк тә балаларҙың дөйөм ҡулланыу урыны өсөн кәрәкле шарттар булдырыу - төп талап булып тора (китапхана, уйынсыҡтар менән кәштәләр, күп функция үтәүсе материалдар һ.б.).

Үҫтереүсе предметлы-арауыҡ мөхитен ойоштороу үҙенсәлектәре, төрлө педагогик-психологик бурыстар өсөн, «Программаны тормошҡа ашырыуҙа психологик-педагогик шарттар» бүлегендә күрһәтелгән.

Программаны материаль-техник яҡтан тәьмин итеү

Стандартҡа ярашлы, программаны материаль-техник яҡтан тәьмин итеү үҙ эсенә уҡытыу-өйрәтеү, аң-белемгә өйрәтеү алымдары комплектын, йыһаздарҙы һәм предметтарҙы ала. Программаны тормошҡа ашырыу өсөн, ойошма уҡыу алымдарын техник яҡтан тейешле материалдар менән тәьмин итеүҙе, спорт һәм һаулыҡты нығытыу ҡорамалдарын һайлауҙы үҙ-аллы билдәләй.

Программаны тормошҡа ашырыу өсөн уҡытыу-методик ҡулланмалар

«Бала саҡ» Төп мәктәпкәсә белем биреү өлгө программаһы тейешле уҡытыу-методик ҡулланмалар менән тәьмин ителгән. Ҡулланыу өсөн ҡушымталар итеп, төбәк үҙенсәлектәрен, республиканың тарихы, мәҙәниәте, тәбиғи ҡомартҡылары һ.б. ингән түбәндәге материалдар бирелде:

1. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың үҫеш үҙенсәлектәренә характеристика.
2. 2-7 йәшлек балалар менән эшләү өсөн яҡынса комплекслы-тематик план.
3. Уйын эшмәкәрлеге үҫешенә талаптар.
4. Күңел асыуҙарҙы, күмәк уйындарҙы, байрамдарҙы ойоштороуға тәҡдим ителгән сараларҙың яҡынса теҙмәһе.
5. Балаларға уҡыу өсөн тәҡдим ителгән нәфис әҙәбиәт исемлеге.
6. Тәҡдим ителгән музыкаль репертуар.
7. Хәрәкәттең төп төрҙәренең, хәрәкәтле уйындарҙың һәм күнегеүҙәрҙең яҡынса исемлеге.
8. Программаның эстәлеге буйынса нәшер ителгән методик ҡулланмалар, әсбаптар исемлеге.
9. Ойошманы финанс яҡтан тәьмин итеү механизмын аңлатыусы материалдар.
10. Өҫтәлмә парциаль программалар:

а) Давлетбаева Р.Г., АзнабаеваФ.Г и др. Программа обучения русской разговорной речи в башкирских детских дошкольных образовательных учреждениях.

б) Ғәлиева Ғ.Ғ. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы башҡорт халҡының көнкүреше, үткән тарихы, әҙәбиәте, сәнғәте, мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу.

в) Нафиҡова З.Ғ., Дәүләтшина Ә.Д. Балалар баҡсаһында компьютер.

г) Нафиҡова З.Ғ., Насертдинов С.К. Балалар баҡсаһында инглиз теле.

11. Ҡулланылған әҙәбиәт исемлеге.

12. Глоссарий.

Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының бүлмәһенә һәм бинаһына талаптар

Материаль-техник база	**Минималь кимәл**	**Төп (базовый) кимәл**	**Оптималь кимәл**
Бина	СанПин талаптарына ярашлы, теләһә ниндәй	Балалар баҡсаһы бинаһының типовой проекты	Шәхси проект
Билдәләнгән биләмә	Саф һауала йөрөү өсөн бирелгән биләмә	Майҙансыҡтағы һәр төркөм өсөн ҡулланмалар	Һәр төркөмгә айырым майҙансыҡ, мини-стадион, тәбиғәт менән таныштырыу өсөн майҙансыҡ (баҡса, клумбалар, түтәлдәр)
Балалар баҡсаһы бүлмәләре	СанПин талаптарына ярашлы	Музыка һәм физкультура дәрестәре өсөн бүлмә һәм ярҙамсы бүлмәләр (медицина блогы, кер йыуыу, ашарға бешереү бүлмәләре)	Музыка һәм физкультура дәрестәре өсөн бүлмә; бассейн, сауна, тренажер залы, логопед һәм психолог кабинеты, һынлы сәнғәт студияһы, компьютер класы. Ярҙамсы бүлмәләр (медицина блогы, кер йыуыу, ашарға бешереү бүлмәләре)

Төркөм бүлмәһе	СанПин талаптарына ярашлы	Йоҡо бүлмәһе, туалет, кейенеү-сисенеү бүлмәһе, айырым уйын бүлмәһенең булыуы	Уйын бүлмәһе, спорт мөйөшө, туалет, кейенеү-сисенеү бүлмәһе. Компьютеры менән йыһазландырылған тәрбиәсенең эш урыны. Дизайнер ярҙамында биҙәлгән бүлмәләр.

Баланың юғары кимәлдәге үҫешен ябай ғына материал мөмкинлектәре менән дә тәьмин итергә мөмкин, сөнки үҫтереүсе эффект булып мөхит объекты түгел, ә ололар ярҙамында йәки баланың үҙ-аллы ойоштороған эшмәкәрлеге тора. Эштең һөҙөмтәһе булып, беренсе сиратта, педагогтың һөнәри һәм ижади яҡтан оҫта ойоштороусы булыуы тора.

Уҡыу материалдарын Ойошманың мөмкинлеген, баланың ихтыяждарын һәм ата-әсәләрҙең теләк-һорауҙарын күҙ уңында тотоп, аң-белемгә өйрәтеү өсөн алынған материалдарҙы (уйнау, спорт, һаулыҡты нығытыу өсөн ҡорамалдарҙы, инвентарь һәм уйынсыҡтарҙы) балалар баҡсаһы үҙ-аллы билдәләй.

Мәктәпкәсә йәштәге белем биреү ойошмаларын уҡыу материалдары менән тәьмин итеү һәм уйын ҡорамалдарының яҡынса исемлеге Рәсәй Мәғариф министрлығының 17.11.2011 й. № 03- 877 хатында күрһәтелгән

2-7 йәшлек балалар менән эшләү өсөн яҡынса комплекслы тематик план

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Тема	Эштең йөкмәткеһе	Йомғаҡлау сараларының варианттары
Һаумы, балалар баҡсаһы! 1-се-2-се аҙна (сентябрь)	Балаларҙы балалар баҡсаһы шарттарына өйрәтеү. Баланы балалар баҡсаһы менән яҡын социаль мөхит булараҡ таныштырыу. Тәрбиәсе, балалар менән таныштырыу. Балалар баҡсаһына, тәрбиәсегә, тиҫтерҙәренә ҡарата ыңғай эмоциональ ҡараш булдырыу. Балаларҙа тирә-яҡтағы ысынбарлыҡҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларҙа кешеләргә, тәбиғәткә, тирә-яҡтағы предметтарға, күренештәргә, картиналарға, иллюстрацияларға, музыкаға ыңғай	Балалар баҡсаһы буйлап экскурсия

	мөнәсәбәттә булыу хис-тойғоһон тәрбиәләү. Тәрбиәсенең исемен һәм атаһының исемен әйтә белеүҙе ғәҙәткә индереү.	
Мин һәм минең ғаиләм 3-сө -4-се аҙна (сентябрь) 1-се аҙна (октябрь)	Ғаилә ағзаларының һәм үҙ исемен дөрөҫ итеп әйтә белеү. Нимә яҡшы һәм нимә насар тигән төшөнсәне аңлатыу. Көндәлек тормошта аралашыуҙа дуҫ-татыу мөнәсәбәттә булып, ябай ғына социаль ҡағиҙәләрҙе үтәп йәшәй белеү нигеҙҙәренә өйрәтеү. Яҡындарының эмоциональ хәлдәрен күрә белергә өйрәтеү.	Ата-әсәләр менән уйындар
Көҙ миҙгеле 2-се-3-сө-4-се аҙна (октябрь)	Балаларҙы көҙҙөң сағыу күренештәре менән таныштырыу; тере булмаған тәбиғәт, үҫемлектәр донъяһы, ҡоштар, хайуандар менән таныштырыу. Көҙ миҙгеленә хас булған билдәләрҙе аңлатыу. Балаларҙы һауа торошон күҙәтергә өйрәтеү. Көҙгө уңышты йыйыу тураһында дөйөм төшөнсә биреү (йәшелсәләр, емештәр, бәшмәктәр).	Байрам «Көҙгө бүләктәр»
Минең ҡалам, минең өйөм 1-се-2-се аҙна (ноябрь)	Балаларҙы үҙе йәшәгән ҡала/ауыл, төҙөлөш объекттары, транспорт төрҙәре; йорттар, өй йыһаздары, уларҙың тәғәйенләнеше; үҙ бүлмәһе, уйынсыҡтары менән таныштырыу	Сюжетлы уйын «Автобуста китеп барабыҙ»
Әсә көнө 3-сө-4-се аҙна (ноябрь)	Иң яҡын кешеләренә ҡарата яратыу хисе тәрбиәләү: әсәй – донъяла иң бөйөк, наҙлы кеше, уға иң яҡшы һыҙаттар - яғымлыҡ, мөхәббәт һәм ҡайғыртыусанлыҡ хас, ә атай - иң көслө, ҡыйыу, ул - ғаилә башлығы тигән төшөнсәләрҙе аңлатыу.	Фотокүргәҙмә: «Әсәй-әсәкәйем минең»
Мин һау-сәләмәт булып үҫәм 1-се-2-се аҙна (декабрь)	Үҙе тураһында кеше балаһы тип аңлатыу. Кешенең тән өлөштәре һәм уларҙың тәғәйенләнеше тураһында дөйөм төшөнсәләр биреү. Һау-сәләмәт тормош алып барыу кәрәклеген аңлатыу.	«Ҡурсаҡты йыуындырабыҙ»
Яңы йыл 3-сө-4-се аҙна (декабрь)	Балалар эшмәкәрлеген бөтә төр белем биреү өлкәләре буйынса ойоштороу (уйын, коммуникатив, хеҙмәт, танып-белеү һ.б.). Яңы йыл байрамына әҙерләнеү.	Яңы йыл иртәһе: «Беҙҙең шыршыҡай»

Ҡыш миҙгеле 2-се-3-сө-4-се аҙна (ғинуар)	Ҡыш тураһында ябай ғына төшөнсәләр биреү (тәбиғәттәге миҙгел үҙгәрештәре, балалар майҙансығында, кешеләрҙең кейем-һалымында). Йорт хайуандары һәм ҡоштар тураһында белемдәрен үҫтереү. Ҡайһы бер ҡырағай хайуандарҙың һәм ҡоштарҙың үҙенсәлекле ҡылыҡтары менән таныштырыу.	Ҡышҡы байрам: «Ҡыш килде»
Кеше һәм тирә-яҡ мөхит 1-се-2-се аҙна (февраль)	Тирә-яҡтағы предметтарҙың бер-береһенә ныҡ бәйле булыуын төшөндөрөү. Танып-белеү һәм тәжрибә үткәреү эшмәкәрлегенә ылыҡтыра башлау.	Театрлаштырылған тамаша «Өләсәйемдең ихатаһында»
Минең атайым 3-сө аҙна (февраль)	Ғаилә темаһы. “Кем беҙҙе ҡурсылай, һаҡлай?” - олатайға, атайға, ағай-ҡустыларға ҡарата яратыу һәм уларҙы хөрмәт итеү тойғолары тәрбиәләү.	Фотокүргәҙмә: «Мин һәм минең атайым, олатайым».
Минең әсәйем 4-се аҙна (февраль) 1-се аҙна (март)	Ғаилә темаһы. Ғаиләгә, әсәйҙәргә, өләсәйҙәргә, апайҙарға, тәрбиәселәргә ҡарата Һөйөү, һоҡланыу тойғолары тәрбиәләү.	«Минең яғымлы әсәйем» иртәлеге.
Минең уйынсыҡтар 2-се-3-сө аҙна (март)	Балалар эшмәкәрлегендә фольклорҙы ҡулланыу. Милли уйынсыҡтар аша халыҡ ижады менән таныштырыу. Музыкаға, халыҡ музыкаһына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, йыр-бейеү башҡарыуға теләк уятыу.	Уйынсыҡтар менән уйындар:“Уйынсыҡтар беҙҙә ҡунаҡта”. А.Бартоның шиғырҙарын уҡыу.
Халыҡ-ара балалар китабы көнө 4-се аҙна (март) 1-се аҙна (апрель)	Баланың китап ҡарарға, уҡығанды тыңларға теләү ихтыяжын тәрбиәләү һәм формалаштарыу: телмәрен үҫтереү, һүҙлеген байытыу, әҙәби әҫәрҙе эстетик яҡтан тойомлауҙы формалаштыра башлау; китап аша кәрәкле һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр табырға мөмкинлеген аңлатыу.	Театр эшмәкәрлеге: «Китаптар - уйынсыҡтар», «Китаптар - дуҫтар»,
2-се аҙна (апрель)	Мониторинг	
Урам буйлап яҙ килә 3-сө-4-се аҙна (апрель) 1-се аҙна (май)	Яҙ тураһында ябай ғына төшөнсәләр биреү (тәбиғәттәге миҙгел үҙгәрештәрен, балалар майҙансығында, кешеләрҙең кейем-һалымында) Йорт хайуандары һәм ҡоштар тураһында белемдәрен үҫтереү. Ҡайһы бер ҡырағай хайуандарҙың һәм ҡоштарҙың үҙенсәлекле ҡылыҡтары менән таныштырыу.	Яҙғы байрам “Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ!”.

Йәй миҙгеле 2-се-3-сө -4 –се аҙна (май)	Йәй миҙгеле тураһында ябай ғына төшөнсәләр биреү (тәбиғәттәге миҙгел үҙгәрештәре, балалар майҙансығында, кешеләрҙең кейем-һалымында). Үҫемлектәрҙе, бөжәктәрҙе, ҡоштарҙы күҙәтеү.	Күңел асыу: «Һаумы, көтөп алған йәй!»

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Тема	Эштең йөкмәткеһе	Йомғаҡлау сараларының варианттары
Һаумы, балалар баҡсаһы! 1-се-2-се аҙна (сентябрь)	Балаларҙа балалар баҡсаһына һәм яңы төркөмгә килеү шатлығы тойғоһон уятыу. Баланы яңы төркөм һәм тирә-яҡ мөхит менән таныштырыуҙы дауам итеү. Шулай уҡ балалар баҡсаһында эшләгән тәрбиәселәр, тәрбиәсе ярҙамсыһы менән таныштырыу , балалар баҡсаһына йөрөү ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөү. Үҙ-ара һәм ололар менән ниндәй мөнәсәбәттәр ҡорорға кәрәклекте ҡабатлау.	Күңел асыу: «Минең яратҡан балалар баҡсам!»
3-сө аҙна (сентябрь)	Мониторинг	
Мин һәм минең ғаиләм. 4-се аҙна (сентябрь) 1-се аҙна (октябрь)	Балала үҙ ғаиләһе менән ғорурланыу хисе уятыу, яҡындарын ҡайғыртыу, уларға ярҙамлашыу тойғолары тәрбиәләү. Үҙ исемен, фамилияһын, атаһы исемен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү. Ғаилә төшөнсәһен аңлатыу - бергә йәшәгән яҡын кешеләр, туғанлыҡ терминдарын аңлатыу. Ғаилә ағзаларының башҡарған эштәре. Буш ваҡытты бергәләп үткәреү формалары. Ғаиләгә ҡарата ғорурланыу хистәре тәрбиәләү.	«Минең татыу ғаиләм». фотоальбомын төҙөү. «Ҡуянҡай үҙенә нисек әсәй эҙләгән?» Ҡурсаҡ театры күрһәтеү.
Көҙ миҙгеле 2-се-3-сө-4-се аҙна (октябрь)	Көҙ миҙгеле тураһында төшөнсәләр биреп, белем даирәләрен киңәйтеү (тәбиғәттәге, кешеләрҙең кейем-һалымындағы, балалар майҙансығындағы үҙгәрештәр һ.б.). Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу. Һауа торошоноң үҙгәрешен күҙәтеү, тәбиғәттең матурлығын күрә белергә өйрәтеү. Көҙ көнөндә йорт хайуандарының, ҡырағай хайуандарҙың, ҡоштарҙың нисек итеп миҙгелгә яраҡлашыуҙары, үҙ-үҙҙәрен тотоуҙары тураһында киңерәк мәғлүмәт биреү.	«Башҡортостанда алтын көҙ» иртәлеге.

Минең өйөм, минең ҡалам 1-се-2-се аҙна (ноябрь)	Балаларҙы көнкүреш тауарҙары, өй кәрәк-яраҡтары менән таныштырыу. Тыуған ҡала/ауыл, уның атамаһы, иҫтәлекле урындары, транспорт төрҙәре, юл ҡағиҙәләрен өйрәнеү; ҡала урамында үҙ-үҙеңде тотоу тураһында әңгәмәләшеү.	Ҡаланың/ауылдың иҫтәлекле еренә экскурсия.
Әсә көнө 3-сө-4-се аҙна (ноябрь)	Әсәй – донъяла иң яҡын, яғымлы, наҙлы, иң ғәзиз кеше, балаға һөйөү, наҙ биреүсе. Әсәйҙәргә ҡарата һөйөү, ихтирам хисе тәрбиәләү. Ә атай кешенең ҡыйыу, көслө, баһадир, ғаиләне туйындырыусы булыуын аңлатыу.	Фотокүргәҙмә: «Әсәй-әсәкәйем минең». Шиғырҙар һөйләү.
Мин һау-сәләмәт булып үҫәм 1-се-2-се аҙна (декабрь)	Кеше тураһында мәғлүмәт биреү, тән төҙөлөшө, тән өлөштәре тураһында белемдәрен үҫтереү, киңәйтеү. Сәләмәт тормош алып барыу; файҙалы һәм зарарлы ризыҡтар тураһында һөйләшеү.	«Беҙ көслө һәм ҡыйыу булып үҫәбеҙ» - спорт байрамы.
Яңы йыл 3-сө-4-се аҙна (декабрь)	Бөтә төр балалар эшмәкәрлеген ойоштороу (уйын, коммуникатив, хеҙмәт, танып-белеү һ.б.). Байрамда актив ҡатнашыу теләге уятыу. Ғаиләләге яҡындарына, дуҫтарына бүләктәр әҙерләү, уларҙы нисек ҡотлау формаларын уйлау.	Яңы йыл байрамы: «Әйләнәйек шыршы тирәләй!»
Ҡыш миҙгеле 2-се -3-сө - 4-се аҙна (ғинуар)	Ҡыш миҙгеле тураһында белем даирәләрен киңәйтеү. Ҡышҡы спорт уйындары менән таныштырыу. Һыу, ҡар менән тәжрибә үткәреү. Тәбиғәттәге үҙгәрештәр менән таныштырыу.	Ҡышҡы байрам: «Башҡортостанда – ҡыш!»
Кеше һәм тирә-яҡ мөхит 1-се-2-се аҙна (февраль)	Тирә-яҡ мөхит тураһындағы дөйөм төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Йорт һәм ҡарағай хайуандар, уларҙың балалары, ҡош-ҡорт тураһында өҫтәлмә белемдәр биреү. Экологик тәрбиә биреү. Балаларҙың ижади һәм конструктив таланттарын үҫтереү. Ябай математик төшөнсәләрҙе үҙләштереүҙе дауам итеү.	«Ҡоштарҙы һыйлайбыҙ!» -акция.
Ватанды һаҡлаусылар көнө 3-сө аҙна (февраль)	Балаларға патриотик тәрбиә биреү. Хәрби һөнәрҙәр менән таныштырыу. Тыуған илгә ҡарата һөйөү хисе тәрбиәләү. Шулай уҡ нисек итеп малайҙарға ҡыйыу, көслө, Тыуған илде һаҡлаусы батырҙар булып үҫергә кәрәклеген аңлатыу, әңгәмәләшеү.	Ҡулдан бүләктәр эшләү: «Мин һәм минең атайым, ағайым, олатайым»
Әсәйҙәр байрамы 4-се аҙна	Балалар эшмәкәрлегенең бөтөн төрөн дә ойоштороу (уйын, коммуникатив, хеҙмәт, танып белеү, музыкаль, ижади-эстетик, нәфис	«Өләсәйем минең – йомаҡ һандығы» (фольклор буйынса)

(февраль) 1-се аҙна (март)	әҙәбиәт һ.б.) Башҡорт халҡының әкиәттәрен уҡыу, һынамыштарын, уйындарын өйрәнеү. Халыҡ байрамдары, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, кәсептәре менән танышыу. Ҡул эштәре (сигеү, бәйләү, балаҫ һуғыу, ағас юныу, биҙәнеү әйберҙәре семәрләү һ.б.) менән таныштырыу. Ғаиләгә, әсәйҙәргә, өләсәйҙәргә, апайҙарға, тәрбиәселәргә ҡарата һөйөү, хөрмәт тойғолары тәрбиәләү.	
Халыҡ мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу 2-се-3-сө аҙна (март)	Милли уйынсыҡтар, музыка ҡоралдары, милли кейем тураһында белемдәрҙе камиллаштырыу. Үҙ ауылында/ҡалала/ғаиләлә һаҡланған халыҡ кәсептәре менән таныштырыу. Халыҡ ижады, йыры, бейеүе менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балалар эшмәкәрлегенең бөтә төрөн дә ҡулланыу.	Күргәҙмә ойоштороу: «Минең әсәйем нимә эшләй белә?» Балалар араһында конкурс: “Кемдең балаҫы матур?”
Халыҡ-ара балалар китабы көнө 4-се аҙна (март) 1-се аҙна (апрель)	Уҡылған әҫәрҙәрҙе (әкиәтте, шиғырҙы) сәхнәләштереү. Персонаждарға кейемдәр әҙерләү. Китапты биҙәүсе рәссамдар менән таныштырыу. Балаларҙың үҙҙәренә бәләкәй генә китапсыҡтар эшләү, уларҙың күргәҙмәһен ойоштороу.	Театр эшмәкәрлеге: «Борон-борон заманда, әкиәт батшалығында…»
Яҙ миҙгеле 2-се-3-сө-4-се аҙна (апрель) 1-се аҙна (май)	Яҙ миҙгеленең үҙенсәлекле яҡтарын өйрәнеү: ҡояш яҡтыраҡ яҡтырта, ҡар ирей, үлән үҫә һ.б. Тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, яҙ миҙгеленең матурлығын күрһәтә белеү. Башҡорттарҙың яҙғы байрамдары, һынамыштары.	Яҙғы байрам: “Ҡар һыуына барыу”.
Йәй миҙгеле 2-се-3-сө -4 –се аҙна (май)	Йәй миҙгелендә тәбиғәттәге үҙгәрештәр. Йорт хайуандары, ҡоштар, йәшелсәләр, емеш-еләктәр тураһында һөйләшеү, белемдәрҙе үҫтереү, арттырыу. Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу (үҫемлектәрҙе өҙөргә ярамай, ағас ботаҡтарын һындырмаҫҡа, хайуандарға, бөжәктәргә ҡағылмаҫҡа һ.б.). Тәбиғәттә булған ябай бәйләнештәрҙе аңлау теләге уятыу маҡсатында эҙләнеү-тикшереүҙәр ойоштороу. Хеҙмәткә, төрлө һөнәр эйәләренә ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү.	Күңел асыу: «Һаумы, көтөп алған йәй!»

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Тема	Эштең йөкмәткеһе	Йомғаҡлау сараларының варианттары
Һау бул, йәй! Һаумы, балалар баҡсаһы! 1-се-2-се аҙна (сентябрь)	Балаларҙың йәйге ялдан һуң балалар баҡсаһына килеүҙәрен байрамса ҡаршы алыу, күңел күтәренкелеге булдырыу. Балалар баҡсаһы һәм унда эшләүсе хеҙмәткәрҙәр менән яҡындан таныштырыу (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, музыка етәксеһе, табиб һ.б.). Балалар баҡсаһының традициялары һәм дөйөм ҡағиҙәләре тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү.	«Беҙҙең яратҡан балалар баҡсаһы».
3-сө аҙна (сентябрь)	Мониторинг	
Мин - кеше. 4-се аҙна (сентябрь) 1-се аҙна (октябрь)	Сәләмәтлек һәм сәләмәт тормош тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Ғаилә һәм туғанлыҡ терминдарын нығытыу (ул, ҡыҙ, атай, әсәй һ.б.) төшөнсәләрен байытыу. Балаларҙың исеме, фамилияһы, йәше, ата-әсәһенең исеме тураһындағы белемдәрен нығытыу. Балаларҙы ата-әсәләренең һөнәрҙәре менән таныштырыу, уларҙың хеҙмәтенә ҡарата хөрмәт, ҡыуаныу хистәре тәрбиәләү. “Мин” образына һәм үҙ-үҙен баһалай белеү һәләтен формалаштырыу. Балала үҙенең тышҡы ҡиәфәте тураһындағы төшөнсәләрҙе үҫтереү, киңәйтеү. Яҡындарына һәм оло кешеләргә ҡарата хөрмәтле, хәстәрле ҡараш тәрбиәләүҙе дауам итеү.	“Һаулыҡ – ҙур байлыҡ!” – һаулыҡ һаҡлау көнөнә бағышланған байрам.
Көҙ 2-3-4-се аҙна (октябрь)	Көҙ миҙгеле (тәбиғәттәге үҙгәрештәр, кешеләрҙең өҫ-кейемдәре һ.б.), еләк-емештәр, йәшелсәләр, бәшмәктәр йыйыу; йәнлектәр һәм ҡоштар донъяһының көҙгө миҙгелдәге үҙенсәлектәре тураһында төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Ауыл хужалығы эшселәренең һөнәрҙәре менән таныштырыу. Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең үҙ-ара бәйләнеше тураһында төшөнсәләрҙе формалаштырыу. Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырауҙы дауам итеү.	Күңел асыу: “Сөмбәлә” байрамы.
Минең йортом, минең ҡалам, минең республикам.	Балаларҙың ғаилә һәм уның ағзалары тураһындағы төшөнсәләрен киңәйтеү. Ғаилә ул - баланың ата-әсәһе менән йәшәгән өйө тигән төшөнсәне аңдарына һеңдереү. Туған	Күңел асыу: «Беҙ йәшәгән ҡала/ауыл».

1-се-2-се аҙна (ноябрь)	ҡалаһы/ауылы менән таныштырыу, тыуған ергә һөйөү тәрбиәләү. Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй – беҙҙең тыуған ил. Башҡортостандың күренекле кешеләре, һөнәр эйәләре тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү.	Иртәлек: “Рәсәй менән Башҡортостан – мәңге бергә!”
Әсәйҙәр көнө. 3-сө-4-се аҙна (ноябрь)	Әсәйгә ҡарата хөрмәт һәм һөйөү тәрбиәләү. Уның турала ҡайғыртырға кәрәклеген һәм ярҙам итеү теләген уятыу. Әсәйҙең тормошта иң мөһим кеше икәнлеген аңлатыу, яҡын кешеләренә ҡарата һөйөү һәм хөрмәт тәрбиәләү. Балаларға әсәй - хәстәрле. Киң күңелле кеше, ә атай – ҡыйыу, көслө кеше икәнлеген төшөндөрөү.	«Әсәйҙәр көнө»нә бағышланған концерт. Күргәҙмәләр: “Әсәйемдең ҡулы – алтын”. “Әсәйем кеүек булам!”
Мин һау-сәләмәт булып үҫәм. 1-се-2-се аҙна (декабрь)	Сәләмәтлек һәм сәләмәт тормош тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Сәләмәт тормош алып барыуҙың мөһимлеген аңлатыу, кешегә кәрәкле витаминдар һәм матдәләр тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Һаулыҡ өсөн йоҡоноң, хәрәкәттең,сынғыуҙың әһәмиәтен төшөндөрөү, үҙенең сәләмәтлеген ҡайғырта белергә кәрәклекте аңлатыу.	Күңел асыу «Айболит һаулыҡ тарата». Спорт ярышы: “Кем иң шәбе?”
Яңы йыл байрамы. 3-сө-4-се аҙна (декабрь)	Яңы йыл байрамын ойоштороуға әҙерлек (уйын, хеҙмәт, музыка, нәфис әҙәбиәт һ.б). Байрамға бөтә балаларҙы ла ылыҡтырыу, ҡатнашыу теләген уятыу: бүлмәләрҙе биҙәү, бүләктәр әҙерләү, йыр-бейеү, уйындар өйрәнеү, ҡотлауҙар әҙерләү.	Яңы йыл байрамы: «Ҡыш бабайҙың тылсымлы таяғы».
Ҡыш. 2-3-4 аҙна (ғинуар)	Ҡыш миҙгеле һәм тәбиғәттәге үҙгәрештәр тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт араһындағы бәйләнеште асыҡлауҙы камиллаштырыу. Көҙгө һәм ҡышҡы пейзаждарҙы сағыштырырға өйрәтеү, ҡышлаусы ҡоштарға ярҙам итеү теләген уятыу, тағараҡтар эшләү. Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре тураһындағы төшөнсәләрҙе үҙләштереү. Тәжрибә аша донъяны танып-белергә һәм тәжрибә-эҙләнеү-тикшеренеү эштәренә ҡыҙыҡһыныу тәрбәләү. Ҡышҡы спорт уйындары, Көньяҡ һәм Төньяҡ полюстары менән таныштырыу.	Спорт уйындары. «Кем тиҙерәк, етеҙерәк!». “Ҡышҡы Нардуған” байрамы.
Кеше һәм тирә-йүн. 1-се-2-се аҙна (февраль)	Тирә- йүндә йәнлектәр һәм ҡоштар донъяһы, улар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаларҙың ижади конструктив һәләтен үҫтереү, экологик яҡтан тәрбиәләү. Ҡышҡы	«Тылсымлы үҙгәреш»- ҡарҙан эшләнгән ҡоролмалар

	һынамыштарҙы, йомаҡтарҙы өйрәнеү. Ҡарҙан әкиәттәр буйынса ҡоролмалар төҙөү.	конкурсы.
Ватанды һаҡлау көнө. 3-сө аҙна (февраль)	Хәрби һөнәрҙәр, хәрби техникалар, Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәйҙең флагы, гимны, гербы менән таныштырыу, Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү. Рус һәм башҡорт халҡының тарихы аша батырҙар тураһында мәғлүмәттәр биреү. Малайҙарға ҡыйыу һәм көслө булып үҫергә, ә ҡыҙҙарға малайҙарҙы Тыуған илдең һаҡсыһы булараҡ хөрмәт итергә кәрәклеген аңлатыу.	«Хәрби техника» күргәҙмәһенә экскурсия. Ватанды һаҡлаусылар менән осрашыу. Күргәҙмә: “Минең олатайым/атайым – Ил һаҡсыһы!”.
Әсәйҙәр көнө. 4-се аҙна (февраль) 1-се аҙна (март)	Әсәйҙәр – кешегә ғүмер биреүсе. Улар өйгә ҡот, наҙ, шатлыҡ килтерә. Ул – оҫта ҡуллы хужабикә, балаларын әҙәпкә өйрәтеүсе. Ғаиләгә, әсәйгә, өләсәйгә,апайға ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Тәрбиәсе һәм балалар баҡсаһында эшләүсе башҡа хеҙмәткәрҙәр эшенә ҡарата хөрмәт тәрбиәләү. Малайҙарға ҡыҙҙарҙы, әсәйҙәрҙе, өләсәйҙәрҙе яратырға һәм хөрмәт итергә кәрәклеген төшөндөрөү.	«Минең ҡәҙерле әсәйем» - байрам. “Мин – әсәйем кеүек булам!”- фотокүргәҙмә.
Халыҡ мәҙәниәте һәм йолалары менән таныштырыу. 2-се-3-сө аҙна (март)	Халыҡ уйынсыҡтары (дымков уйынсыҡтары, ағастан эшләнгән ҡатлы ҡурсаҡтар һ.б.) тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Халыҡ көнкүреше, дымков һәм филимонов биҙәктәре менән таныштырыу. Балалар эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә рус һәм башҡорт халыҡ фольклорын ҡулланыу.	«Халыҡ уйындары» байрамы. “Халыҡ биҙәктәре - милли кейемдә” күргәҙмә (балалар эше)
Донъя халыҡ балалар әҙәбиәте көнө. 4-се аҙна (март) 1-се аҙна (апрель)	Әҙәбиәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, әҙәби телмәрҙе үҫтереү, ауыҙ-тел ижадына, нәфис әҙәбиәткә ҡарата эстетик тойғолар тәрбиәләү, тирә- йүн тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Китаптарҙы “дауалау”, өйҙә библиотека йыйыу.	Уйын –викторина Проект эше: “Минең библиотекам”. Конкурс: «Минең яратҡан әҙәбиәт геройы».
2-се аҙна (апрель)	Мониторинг	
Яҙ. 2-3-4 –се аҙна (апрель)	Яҙ миҙгеле тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү: тәбиғәткә экскурсия. Сәскә, йәшелсә орлоҡтары сәсеү, ҡоштарҙы ҡаршылау. Тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе күҙәтеү. Тәбиғәт ҡанундарына ярашлы ҡағиҙәләрҙе нығытыу, экологик төшөнсәләрҙе үҙләштереү. Балаларҙы хеҙмәткә ылыҡтырыу.	Байрамдар: “Ҡоштар ҡайта”, “Боҙ китә”.

Еңеү байрамы. 1-се-2-се аҙна (май)	Балаларҙы патриотик яҡтан тәрбиәләү. Еңеү көнө тураһындағы төшөнсәләрҙе үҙләштереү. Тыуған ергә һәм Ватанға ҡарата һөйөү тәрбиәләү. "Үлемһеҙ полк" маршында ҡатнашыу өсөн олатайҙарҙың, өләсәйҙәрҙең порттарын әҙерләү.	Еңеү көнөнә арналған байрам.
Йәй. 3-4 –се аҙна (май)	Йәй миҙгеле тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү, тәбиәттәге үҙгәрештәрҙе күҙәтеү, йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт араһындағы бәйләнеште асыҡлау, йәйге спорт төрҙәре менән таныштырыу. Күңел асыуҙар.	«Кәкүк сәйе» байрамы. Спорт ярыштары үткәреү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Тема	Эштең йөкмәткеһе	Йомғаҡлау сараларының варианттары
Белем көнө 1-се-2-се аҙна (сентябрь)	Тирә-йүнде танып белеү һәләтен үҫтереү, уҡырға әҙерлек эштәре алып барыу, мәктәпкә һәм китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларға уҡырға кәрәклектең әһәмиәтен, мәктәптең мөһимлеген, мәктәп кәрәк-яраҡтары тураһындағы белемдәрҙе байытыу. Уҡытыусы һәм «уҡыусы» һөнәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм ыңғай ҡараш тәрбиәләү.	"Мәктәптә нимә эшләйҙәр?"- сәйәхәт.
3-сө аҙна (сентябрь)	Мониторинг	
Минең йортом, минең ҡалам, минең республикам. 4-се аҙна (сентябрь) 1-се аҙна (октябрь)	Балаларға башҡорт халҡының мәҙәниәтен, телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын өйрәтеүҙе дауам итеү, тыуған илгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Башҡортостан Республикаһының дәүләт һәм башҡорт халҡының милли йолалары, дини байрамдары тураһында төшөнсәләр биреү.	«Тыуған илемә йыр!» - концерт. "Беҙҙең уңыштар" - йәрминкә.
Алтын көҙ 2-3-4-се аҙна (октябрь)	Көҙ тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Ауыл хужалығындағы һөнәрҙәр менән таныштырыуҙы дауам итеү, тәбиғәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен нығытыу, йәнһеҙ тәбиғәт тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү, үҫемлектәрҙең һәм йәнлектәрҙең тәбиғәттең көҙгө шарттарына яраҡлашыуҙары тураһындағы төшөнсәләрҙе нығытыу.	"Башҡортостаным көҙө" - күңел асыу.
Бөтә халыҡ	Тыуған ил һәм уның байрамдары тураһындағы	«Башҡортостан –

берҙәмлек көнө. 1-се-2-се аҙна (ноябрь)	төшөнсәләрҙе дөйөмләштереү. Тыуған илдең тарихына ҡыҙыҡһыныу үҫтереү, тыуған илгә ҡарата ғорурлыҡ һәм һөйөү тәрбиәләү. Рәсәйҙең, Башҡортостандың тарихы, гербы, флагы, гимны менән таныштырыу. Рәсәй ҙур һәм төрлө милләтле ил тураһында мәғлүмәт биреү. Рәсәйҙең баш ҡалаһы Мәскәү менән таныштырыу. Өфө – беҙҙең баш ҡала.	минең республикам”-байрам. Фотокүргәҙмә: “Тыуған илебеҙ – Рәсәй”.
Әсәйҙәр көнө. 3-сө-4-се аҙна (ноябрь)	Әсәйгә ҡарата хөрмәт һәм һөйөү тәрбиәләү, уның тураһында ҡайғыртырға, ярҙам итергә кәрәклеген аңлатыу. Ғаилә, уның тарихы, ата-әсәйҙәрҙең шөғөлө һәм һөнәрҙәре тураһындағы мәғлүмәттәрҙе киңәйтеү.	Шәжәрә байрамы.
Мин сәләмәт булып үҫәм. 1-се-2-се аҙна (декабрь)	Һаулыҡ һәм сәләмәт тормош алып барыу кәрәклеге тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Дөрөҫ туҡланыу, үҙ-үҙеңә ыңғай баһа биреүҙе формалаштырыу, йәшәгән адресты нығытыу, ғаилә тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү.	«Спортландияға сәйәхәт» - күңел асыу.
Яңы йыл. 3-сө-4-се аҙна (декабрь)	Байрамдар тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү, Яңы йыл байрамына бергәләп әҙерлек үткәреү, күтәренке кәйеф булдырыу. Яҡындары өсөн үҙ ҡулдары менән бүләк эшләп, уларҙы ҡотларға күнектереү, бергәләп эш итеү барышында әхлаҡи холоҡ сифаттарын тәрбиәләүҙе дауам итеү, башҡа илдәрҙә Яңы йыл байрамдары нисек үтә, шулар менән таныштырыу.	Байрам: «Яңы йыл шыршыһының мажаралары».
Ҡыш. 2-3-4 аҙна (ғинуар)	Ҡышҡы тәбиғәт, ҡыш миҙгеленең билдәләре (һыуыҡ, ҡар яуа, һыуыҡ ел иҫә,туңдыра) тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү һәм байытыу. Ҡала һәм ауылда йәшәүсе халыҡтың тормошондағы ҡышҡы үҙгәрештәр тураһында аңлатыу.	Музыкаль-әҙәбиәт композиция: «Тылсымлы ҡыш».
Кеше һәм тәбиғәт. 1-се-2-се аҙна (февраль)	Тирә-йүн, тәбиғәт һәм йәмғиәт күренештәре тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү, кеше һәм тәбиғәттең бер-береһенә тәьҫире тураһындағы төшөнсәләрҙе формалаштырыу, уратып алған предметтарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Предметтар эшләнгән материалдарҙы айыра һәм уларҙың төрҙәрен билдәләргә өйрәтеүҙе дауам итеү. Тикшереү-эҙләнеү тәжрибәләре үткәреү.	Тәбиғәт материалдарынан эшләнгән ҡул эштәре күргәҙмәһе: “Оҫта ҡулдар”.
Ватанды һаҡлау көнө.	Тыуған илдең тыныслығы һәм хәүефһеҙлеген һаҡлауҙың ауыр, маҡтаулы булыуы тураһында	Байрам: «Ватанды

3-сө аҙна (февраль)	һөйләшеү, атай-олатайҙарҙың Тыуған илде һаҡлап батырҙарса көрәшеүен һәм һаҡлап алып ҡалыуы тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Бөгөнгө һалдаттарға ихтирам тәрбиәләү, һуғыш батырҙарына һәм тыуған илгә ҡарата һөйөү, улар менән ғорурланыу тойғолары тәрбиәләү. Һауа, пехота, диңгеҙ, танк ғәскәрҙәре менән таныштырыу. Малайҙарға көслө, батыр булып үҫеп, Ватанды һаҡларға кәрәклеген аңлатыу, ә ҡыҙҙарға малайҙарҙы Ватанды һаҡлаусылар булараҡ хөрмәт итергә кәрәклеген төшөндөрөү.	һаҡлаусылар көнө». Ил һаҡлаусыларға бағышлап, күргәҙмә ойоштороу: "Минең олатайым/атайым – ил һаҡсыһы булған".
Ҡатын-ҡыҙҙар көнө 8 март. 4-се аҙна (февраль) 1-се аҙна (март)	Балалар эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә әсәйгә, өләсәйгә ҡарата һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү, малайҙарҙа ҡатын-ҡыҙға ихтирам һәм хөрмәт итергә кәрәклекте аңлатыу, әсәйҙәргә, өләсәйҙәргә бергәләп бүләктәр әҙерләү. Ер шарындағы ҡатын-ҡыҙҙар, әсәйҙәр тураһында һөйләшеү.	Байрам: «Иң матур һәм иң һәйкөмлө ҡатын-ҡыҙҙар өсөн».
Халыҡ мәҙәниәте һәм йолалары. 2-се-3-сө аҙна (март)	Башҡорт халыҡ мәҙәниәте, йолалары һәм һынлы сәнғәте менән таныштырыуҙы дауам итеү, һынлы сәнғәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, халыҡ сәнғәте төрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Башҡорт һәм рус халҡының йәшәгән йорттары (тирмә, изба), уның төҙөлөшө, милли кейемдәре, йорт кәрәк-яраҡтары, һөнәрҙәре менән таныштырыу.	Башҡортостандың, йәки районның милли музейына сәйәхәт.
Донъя халыҡ балалар китабы көнө. 4-се аҙна (март) 1-се аҙна(апрель)	Нәфис әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, әҙәби телмәрҙе үҫтереү. Әҫәрҙәге һүҙ матурлығына иғтибар биреү, жанр төрҙәрен айыра белергә өйрәтеү. Китапҡа ҡыҙыҡһыныу һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.	«Балалар китабы көнө» - байрам.
2-се аҙна (апрель)	Мониторинг	
Яҙ. 3-4-се аҙна (апрель)	Яҙ миҙгеле, үҫемлектәр һәм йәнлектәрҙең миҙгелгә ҡарап үҙгәреүе тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү. Яҙ миҙгеленең билдәләре (ҡар ирей, ҡоштар йылы яҡтан осоп ҡайта, ҡояш йылыта һ.б.), йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең бәйләнеше. Ҡоштар донъяһы тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү.	Байрам: «Яҙҙы ҡаршылау»
Еңеү көнө. 1-се-2-се аҙна	Балаларҙа Ватанға ҡарата һөйөү тойғоларын уятыу һәм патриотик тәрбиә биреү, Бөйөк	Батырҙар һәйкәлдәренә

(май)	Ватан һуғышы һәм уның батырҙары тураһындағы белемдәрен киңәйтеү, һуғыш батырҙары һәйкәлдәре менән таныштырыу.	экскурсия ойоштороу, сәскәләр һалыу.
Йәй. 3-се-4-се аҙна (май)	Йәй миҙгеле тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү, ҡояштың кеше һәм йәнлектәргә, үҫемлектәргә тәьҫире. Емеш-еләк һәм йәшелсәләрҙең өлгөрөүө, ашарға яраҡлы һәм яраҡһыҙ бәшмәктәр,еләктәр, ҡоштар һәм йәнлектәр тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү.	Күңел асыу: “Балалар һабантуйы”.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Тема	Эштең йөкмәткеһе	Йомғаҡлау сараларының варианттары
Белем көнө 1-се-2-се аҙна (сентябрь)	Тирә-йүнде танып белеү һәләтен үҫтереү, уҡырға әҙерлек эштәре алып барыу, мәктәпкә һәм китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларға уҡырға кәрәклектең әһәмиәтен, мәктәптең мөһимлеген,мәктәп кәрәк-яраҡтары тураһындағы белемдәрҙе байытыу. Уҡытыусы һәм «уҡыусы» һөнәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм ыңғай ҡараш тәрбиәләү.	Мәктәпкә сәйәхәт.
3-сө аҙна (сентябрь)	Мониторинг	
Минең йортом, минең ҡалам, минең республика. 4-се аҙна (сентябрь) 1-се аҙна (октябрь)	Балаларға үҙ милләтенең мәҙәниәтен, телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын өйрәтеүҙе дауам итеү, телгә, тыуған илгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Башҡортостан Республикаһының дәүләт һәм башҡорт халҡының милли йолалары, дини байрамдары тураһында төшөнсәләр биреү.	«Тыуған илемә йыр» - концерт. Ҡул эштәре йәрминкәһе.
Алтын көҙ 2-3-4-се аҙна (октябрь)	Көҙ тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Ауыл хужалығында эшләүсе кешеләрҙең һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Тәбиғәт ҡанундарына ярашлы ҡағиҙәләрҙе ныҒытыу. Йәнһеҙ тәбиғәт тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү, үҫемлектәрҙең һәм йәнлектәрҙең тәбиғәттең көҙгө шарттарына яраҡлашыуҙары	“Башҡортостанда алтын көҙ” - күңел асыу. Милли ризыҡтар йәрминкәһе

	тураһындағы белемдәрҙе, ябай кимәлдәге төшөнсәләрҙе формалаштырыу.	
Бөтә халыҡ берҙәмлек көнө. 1-се-2-се аҙна (ноябрь)	Тыуған ил һәм уның байрамдары тураһындағы төшөнсәләрҙе дөйөмләштереү. Тыуған илдең тарихына ҡыҙыҡһыныу үҫтереү, тыуған илгә ҡарата ғорурлыҡ һәм һөйөү тәрбиәләү. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың тарихы, гербы, флагы гимны менән таныштырыу. Рәсәйҙең ҙур һәм төрлө милләтле ил булыуы тураһында мәғлүмәт биреү. Башҡортостан – Рәсәйҙең иң матур төбәктәренең береһе. Рәсәйҙең баш ҡалаһы Мәскәү менән таныштырыуҙы дауам итеү. Өфө – Башҡортостандың башҡалаһы.	«Мәскәү – Рәсәйҙең баш ҡалаһы» - виртуаль экскурсия. Конкурс "Был ҡайҙа – Мәскәүҙәме, әллә Өфөләме?"
Әсәйҙәр көнө. 3-сө-4-се аҙна (ноябрь)	Әсәйҙең ғаиләл тотҡан урыны. Беҙҙең әсәйҙәрҙең һөнәре. Ғаилә, уның тарихы, ата-әсәйҙәрҙең шөғөлө һәм һөнәрҙәре тураһындағы мәғлүмәттәрҙе киңәйтеү.	Спорт байрамы: «Атай,әсәй һәм мин – спорт яратыусы ғаилә». "Беҙҙең әсәйҙәрҙең һөнәре" фотокүргәҙмә.
Мин сәләмәт булып үҫәм. 1-се-2-се аҙна (декабрь)	Һаулыҡ һәм сәләмәт тормош алып барыу кәрәклеге тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү. Дөрөҫ туҡланыу, үҙ-үҙеңә ыңғай баһа биреүҙе формалаштырыу, йәшәгән адресты белеүҙе нығытыу, ғаилә тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү.	«Спортландияға сәйәхәт» - күңел асыу.
Яңы йыл. 3-сө-4-се аҙна (декабрь)	Байрамдар тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү, Яңы йыл байрамына бергәләп әҙерлек үткәреү, күтәренке кәйеф булдырыу. Яҡындары өсөн үҙ ҡулдары менән бүләк эшләп, уларҙы ҡотларға күнектереү. Яңы йыл байрамына маскарад костюмы әҙерләү.	Байрам: «Яңы йыл – яңы бәхет алып килһен!"
Ҡыш. 2-3-4 аҙна (ғинуар)	Ҡышҡы тәбиғәт ҡыш миҙгеленең билдәләре (һыуыҡ, ҡар яуа, һыуыҡ ел иҫә, туңдыра) тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү һәм байытыу. Киске уйындар, ҡул эштәре. Милли ризыҡтар әҙерләү.	Музыкаль-әҙәби композиция «Аулаҡ өй».
Кеше һәм тәбиғәт.	Тирә-йүн, тәбиғәт һәм йәмғиәт күренештәре тураһындағы белемдәрҙе	Тәбиғәт ҡомартҡыларына

1-се-2-се аҙна (февраль)	дөйөмләштереү. Башҡортостандың тәбиғәт ҡомартҡылары: Шүлгән-таш мәмерйәһе, Ҡорғаҙаҡ минераль һыу сығанағы, Ирәмәл тауы һ.б. менән таныштырыу.	виртуаль сәйәхәт.
Ватанды һаҡлау көнө. 3-сө аҙна (февраль)	Тыуған илдең тыныслығын һәм хәүефһеҙлеген һаҡлауҙың ауыр, маҡтаулы эш булыуы тураһында һөйләшеү, атай-олатайҙарҙың Тыуған илде һаҡлауы тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү. Космонавтар, уларҙың хеҙмәте, Ил һағында күрһәткән батырлыҡтары менән таныштырыу. Көслө, ҡыйыу булып үҫер өсөн сәләмәт тормошто үҙ итеү кәрәклеген төшөндөрөү.	Байрам: «Ватанды һаҡлаусылар көнө».
Ҡатын-ҡыҙҙар көнө - 8 март. 4-се аҙна (февраль) 1-се аҙна (март)	Балалар эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә әсәйгә, өләсәйгә ҡарата һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү, малайҙарҙа ҡатын-ҡыҙға ихтирам һәм хөрмәт итергә кәрәклекте аңлатыу, әсәйҙәргә, өләсәйҙәргә бергәләп бүләктәр әҙерләү.	Байрам: «Иң матур һәм иң һөйкөмлө ҡатын-ҡыҙҙар өсөн». Резинкаларҙан үреү: “Әсәйемә – беләҙек”(күргәҙмә)
Халыҡ мәҙәниәте һәм йолалары. 2-се-3-сө аҙна (март)	Башҡорт халыҡ мәҙәниәте, йолалары һәм һынлы сәнғәте менән таныштырыуҙы дауам итеү. Башҡорт һәм рус рәссамдәре: Ә. Лотфуллин, М. Нестеров, К. Дәүләткилдиев һ.б. ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү.	Милли һынлы сәнғәт музейына сәйәхәт. Йәки уларҙың ижадына бағышланған виртуаль сәйәхәт ойоштороу.
Донъя халыҡ балалар китабы көнө. 4-се аҙна (март) 1-се аҙна (апрель)	Нәфис әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, әҙәби телмәрҙе үҫтереү. Әҫәрҙәге һүҙ матурлығына иғтибар биреү, жанр төрҙәрен айыра белергә өйрәтеү. Китапҡа ҡыҙыҡһыныу һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.	«Балалар китабы көнө» - байрам. Берәй әкиәтте, йә әҫәрҙе сәхнәләштереү.
2-се аҙна (апрель)	Мониторинг	
Яҙ. 3-4-се аҙна (апрель)	Яҙ миҙгеле, үҫемлектәр һәм йәнлектәрҙең миҙгелгә ҡарап үҙгәреүе тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү. Яҙ миҙгеленең билдәләре (ҡар ирей, ҡоштар йылы яҡтан осоп ҡайта, ҡояш йылыта һ.б.), йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең бәйләнеше. Ҡоштар донъяһы тураһындағы белемдәрҙе	Байрам: «Яҙҙы ҡаршылау» йәки “Науруз” байрамы.

	киңәйтеү.	
Еңеү көнө. 1-се-2-се аҙна (май)	Балаларҙа Ватанға ҡарата һөйөү тәрбиәләү һәм патриотик тәрбиә биреү, Бөйөк Ватан һуғышы һәм уның батырҙары тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү, һуғыш батырҙары һәйкәлдәре менән таныштырыу.	“Батырға - һәйкәл”- балалар эштәре күргәҙмәһе.
Йәй. 3-се-4-се аҙна (май)	Йәй миҙгеле тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү, ҡояштың кеше һәм йәнлектәргә, үҫемлектәргә тәьҫире. Емеш-еләк һәм йәшелсәләрҙең өлгөрөүе, уларҙы ҡышҡылыҡҡа һаҡлауға әҙерлек эштәре.	Күңел асыу: “Һабантуй”.

Күңел асыуҙарҙың, күмәк уйындарҙың, байрамдарҙың теҙмәһе

Иң кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Ял итеү. Баланың күтәренке күңелдә булыуына һәм аралашыуҙан ҡыуаныс, шатлыҡ кисереүенә шарттар булдырыу. Кескәйҙәрҙе хәрәкәтле уйындарға, сәхнәләштерелгән әкиәттәргә, байрамдарға, күмәк йырлы-бейеүле түңәрәк уйындарына йәлеп итеү.

Күңел асыуҙар: «Минең яратҡан уйынсығым». «Беҙ - турғайҙар». «Бесәйҙе ҡунаҡҡа саҡырҙыҡ». «Ҡар бөртөктәре».

Байрамдар: «Япраҡтар оса». «Тышта ҡар яуа». «Һаумы, Ҡыш бабай!». «Минең әсәйем». «Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ!». «Сәскәләр йыям».

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Ял итеү. Балаларҙың теләгенә ҡарап, ял итеүҙе ойоштороу, үҙ теләктәре буйынса уйнау мөмкинлеген биреү, уларҙың күңел күтәренкелеге, шатлыҡ кисереп аралашыуы, уйнауы тураһында ҡайғыртыу. Үҙ-аллылыҡ, зирәклек, отҡорлоҡ үҫешенә ярҙам итеүсе шарттар тыуҙырыу.

Күңел асыу. Көн һайын 5-10 минутлыҡ күңел асыу ойоштороу. Аҙнаһына 1-2 тапҡыр театрлаштырылған сығыштар ойоштороу, телетапшырыу, видеороликтар ҡарау, аудиояҙмалар тыңлау. Ололар сығышын ҡарау. Төрлө физкультура уйындары, ярыштары үткәреү.

Байрамдар. Халыҡ һәм дәүләт байрамдары менән таныштыра башлау: Республика көнө, Яңы йыл, 8-се март, Ил һаҡлаусылар көнө, Урожай байрамы, Һабантуй.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Ял итеү. Буш ваҡытта балаларға үҙҙәре теләгән эшмәкәрлек менән булышыу мөмкинлеген биреү һәм шарттар тыуҙырыу: йыр тыңлау, рәсем төшөрөү, китап ҡарау, өҫтәл уйындары һәм ҡоролмалар төҙөп уйнау һ.б.

Саф һауала йәйәү йөрөүҙә, спорт уйындары уйнауға ғәҙәтләндереү.

Күңел асыу. Ҡурсаҡ театры сығышына, музыкаль һәм спорт уйындары үткәреүгә әҙерләнгәндә балаларҙы йышыраҡ йәлеп итеү.

Яңы белем, мәғлүмәт алыуға булышлыҡ итеүсе саралар үткәреү. Башҡорт халыҡ йолалары, һөнәрҙәре менән таныштырыу, ата-әсәләр менән берлектә сығыштар, уйындар, ярыштар үткәреү.

Байрамдар. Халыҡ байрамдары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Миҙгел һәм йола байрамдарына ата-әсәләр менән бергәләп әҙерләнеү һәм үткәреү.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Ял итеү. Буш ваҡытты файҙалы итеп ҡуллана белеүгә күнектереү, дөрөҫ ял итә белеүгә нигеҙ һалыу: уйнау, китап ҡарау, уҡыу, рәсем төшөрөү, ҡоролмалар ҡороу, саф һауала йөрөү, экскурсияға барыу һ.б.

Күңел асыу. Спорт уйындарына, музыка ҡоралдарында уйнауға, йыр-моңға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Матур әйберҙәр, тәбиғәт күренештәре, сәнғәт әҫәрҙәре менән һоҡлана белеүҙе тәрбиәләү. Сигеү, әүәләү, һүрәт төшөрөү, ишеү, үреү, бәйләү һ.б. ярҙамында баланың үҙенең матур әйберҙәр ижад итергә булған тырышлығын хуплау, дәртләндереү.

Байрамдар. Ғәҙәти, ябай һәм байрам көндәре тураһында төшөнсәләр биреү. Байрамдар тарихы, халыҡ байрамдары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу. Башҡортостан Республикаһы көнө, Сөмбәлә, Нардуған, Науруз, Һабантуй байрамдары.

Ололарға, яҡындарына ҡарата иғтибарлы булырға өйрәтеү: туғандарҙы, ололарҙы, дуҫ-иштәрҙе байрам, тыуған көн менән ҡотларға, үҙ ҡулдары менән бүләк әҙерләргә күнектереү.

Байрамдарға әҙерлектә күмәкләп әүҙем ҡатнашыу. Халыҡ-ара, дәүләт, халыҡ һәм көнкүреш байрамдарын билдәләү.

Яҡынса күңел асыуҙар һәм байрамдар. Театрлаштырылған күңел асыуҙар: күләгә, бармаҡ, өҫтәл, ҡурсаҡ театрын ҡулланып, балалар операһы, оркестры, бейеү ансамблы һ.б. ойоштороп, сығыштар яһау.

Әҙәби-музыкаль сығыштар әҙерләү, сәхнәләштерелгән әҫәрҙәрҙе уйнау.

Белем үҫтереүсе тематик кисәләр; башҡорт халҡының арҙаҡлы яҙыусылары, рәссамдары, йырсылары, ҡурайсылары, композиторҙары, сәсәндәре, һөнәр оҫталары тураһында һөйләү (Мостай Кәрим, Шәйхзада Бабич, Зәки Вәлиди, Муса Гәрәев, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Рамазан Йәнбәков, Рудольф Нуриев һ.б.).

Башҡорт халыҡ уйындарына, бейеүҙәренә, әкиәттәренә бағышланған викториналар, бәйгеләр, ярыштар һ.б.

Спорт байрамдары: «Күңелле ярыштар», «Балалар һабантуйы», «Ҡышҡы уйындар», «Аулаҡ», «Ҡаҙ өмәһе», «Балалар Олимпиадаһы».

Фольклор байрамдары: «Нардуған», «Сөмбәлә», «Ҡарға буҡтаһы», «Кәкүк сәйе», «Ҡатыҡ тәмләү», «Исем туйы» һ.б.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Ял итеү. Һаулыҡҡа зыян килтермәй, буш ваҡытты файҙалы итеп үткәрә белергә ғәҙәтләндереү (уйын, спорт, китап ҡарау, рәсем төшөрөү, әүәләү, моделдәр йыйыу, сигеү, бәйләү, ағасты семәрләү һ.б.).

Күңел асыу.Төрлө күмәк уйындарҙа, спорт, йола байрамдарында ҡатнашырға күнектереү. Бергәләп эш итеү барышында әхлаҡи һыҙаттар тәрбиәләүҙе дауам итеү, аң-белем даирәһен киңәйтеү, үҙенең тәртибенә баһа бирергә өйрәтеү.

Матурлыҡҡа, хозурлыҡҡа, нәфис әйберҙәргә, йәмле тәбиғәт күренештәренә ҡарата фекерен, үҙ ҡарашын белдерергә өйрәтеү.

Байрамдар. Дәүләт, йола, дини, халыҡ байрамдары тураһындағы төшөнсәләрҙе киңәйтеү ("Берҙәмлек" көнө, Ватанды һаҡлаусылар көнө", "Аулаҡ", "Ҡаҙ өмәһе", "Ураҙа байрамы" һ.б.). Байрамдарға бергәләп әҙерлек үткәреү: күтәренке кәйеф менән, матур кейемдәр, тәмле-татлы ашамлыҡтар әҙерләп, ҡунаҡтар көтөү йәки ҡунаҡҡа барыу. Ҡунаҡтарға йәки тыуған көн менән ҡотлау өсөн бүләктәр әҙерләү, аралашыу, йыр-бейеү, шиғыр башҡарыу, тейешле ҡотлау һүҙҙәрен әйтергә өйрәтеү. Ҡунаҡта үҙеңде тота белеү, башҡаларға ҡарата ихтирамлы булырға күнектереү. Ғәҙәти, ябай һәм байрам көндәре тураһында төшөнсәләр биреү. Байрамдар тарихы, халыҡ байрамдары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу.

Яҡынса тәҡдим ителгән күңел асыуҙар һәм байрамдар: «Һаумы, алтын көҙ», «Урожай байрамы», «Тыуған ерем – Башҡортостан», «Ҡаҙ өмәһе», «Аулаҡ өй», «Яңы йыл байрамы», «Ҡатыҡ тәмләү», «Бәпес ҡотлау», «Исем туйы», «Шәжәрә байрамы», «Ҡарғатуй байрамы», «Йыйын», «Кәкүк сәйе», «Ҡарға бутҡаһы» һ.б.

Балаларға өсөн тәҡдим ителгән нәфис әҙәбиәт исемлеге

Иң кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Ятлау өсөн. «Бутыр-бутыр бутҡа бешкән», «Ямғыр, яу, яу! », «Мин – ҡуян» Г. Юнысова. «Сәп-сәп-сәпәкәй…» А. Йәғәфәрова. «Туп» А. Барто. «Шыршыҡай», «Ҡыш бабай» М. Бикбова

Һөйләү өсөн. «Төлкө менән айыу», «Ҡуяндың ҡолағы ниңә оҙон булған?», «Шалҡан», «Сыбар тауыҡ», «Ялҡау бесәй» һ.б.

Уҡыу өсөн.«Нәҙекәйбил» А. Йәғәфәрова. «Бутҡа көршәге» Бер туған Гриммдар. «Эт үҙенә нисек хужа тапҡан?» (башҡорт халыҡ әкиәте). «Ялҡау ҡыҙ» (италия халыҡ әкиәте). «Себеш» К.Чуковский. «Тирмә» (рус халыҡ әкиәте). «Терпе» А. Толстой һ.б.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Ятлау өсөн. «Көҙ килгән» Г. Юнысова. «Ҡыш» Д.Юлтый. «Аҡ ҡуян» М.Бикбова. «Аҡтүш» А.Игебаев. «Сыйырсыҡ» Р.Ғарипов «Ҡояш көлә» Г.Ғәлиева.

Һөйләү өсөн. Әкиәттәр: «Бүре менән кәзә», «Төлкө менән торна», «Башбармаҡ», «Эт, һыйыр һәм ҡаҙ», «Ниңә бесәй сысҡан яратмай?», «Һарыбай», «Көҙһылыу менән Йәйһылыу», «Ҡуян менән терпе», «Кәзә үҙенә нисек өй төҙөп алды?», «Ҡыҙыҡай менән айыу», «Ҡойроҡ», «Тейендәр ниңә ағас башында йәшәй?», шулай уҡ «Йәйғор» хрестоматияһында тәҡдим ителгән төрлө халыҡ әкиәттәре. С Маршак, К. Чуковский, Е. Благинина, К. Ушинский, Л. Толстой, Б. Заходер һ.б. рус яҙыусыларының тәржемә ителгән шиғырҙары.

Уҡыу өсөн. «Төйләгән», «Ҡарға» - халыҡ ижады. «Уралым» С.Юлаев. «Бәпес бит йоҡлай» Р.Шаммас. «Беҙҙең әсәй» Ф.Рәхимғолова. «Гөр килә өйҙөң эсе»

К.Кинйәбулатова. «Сәскә менән күбәләк» М.Дилмөхәмәтов. «Ҡулыма көрәк алдым» М.Сиражи, һ.б.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Ятлау өсөн. Һанашмаҡтар, һамаҡтар. «Икмәк» Ф.Туғыҙбаева. «Нисә алма» З. Әхмәтйәнова. «Зәңгәр тубым» Г.Юнысова. «Шыршы» Ҡ.Даян. «Әсәйҙәр байрамы», Ғ.Ғүмәр. «Ҡымыҙ» Г.Ғәлиева. «Ямғыр» М.Бикбова һәм башҡалар.

Һөйләү өсөн. «Алдар төлкө». «Айыу менән бал ҡорттары». «Йомарт ҡуян». «Ҡуян менән терпе». «Ҡыҙыл башлыҡ» Ш.Перро. «Үгәй ҡыҙ Гөлбикә». «Йылан менән балыҡ». «Һандуғас менән Ҡарлуғас». «Кем отҡорораҡ?». «Төлкө, бүре, бүҙәнә». «Ҡуян менән арыҫлан». «Ҡаҙҙар ниңә ала булған?». «Бремен музыкаттары» бер туған Гриммдар. «Бәләкәй ҡайын». А.Йәғәфәрова. «Батыр ҡуян». «Көнһылыу». «Ҡарһылыу ниңә һуңланы?» Ф. Туғыҙбаева. «Турыҡай» С. Агиш. «Ҡайын урманында» М. Кәрим һәм башҡалар.

Уҡыу өсөн. «Үҙем тектем» А. Игебаев. «Биҙәкле силәктәр» Ә.Таһирова. «Бәрәскәй» Ә.Әхмәт-Хужа. «Күгәрсен» Г. Ғәлиева. «Себеш менән бәпкә» А. Йәғәфәрова. «Тауыҡбикә» Ғ.Амантай. «Байрам» Ф. Рәхимғолова. «Көләмәстәр» - балалар фольклоры. «Тиҙ төшөндөм» С. Муллабаев.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Ятлау өсөн. Һамаҡтар. Телтөҙәткестәр. «Тыуған ил» Ҡ.Даян. «Ватан» Р.Ниғмәти. «Светофор» Б.Байымов. «Яу, ямғыр!» Ф. Рәхимғолова. «Ҡулъяулыҡ» Г.Юнысова. «Көҙ килгән» Г.Юнысова. «Хәрәкәт» Н. Сәлимов. «Бесәй китте еләккә» М. Хисмәтуллина. «Йәйғор» хрестоматияһынан «Алтын көҙ», «Ябалаҡлап ҡар яуа», «Яғымлы ҡояш йылмая», «Йәмле йәй етте» һәм башҡа бүлектәрҙә бирелгән әҫәрҙәр.

Уҡыу һәм һөйләү өсөн.«Илкәйем» Я.Ҡолмой. «Башҡортостан» С. Әлибаев. «Ирәндек», «Ҡурайсы», «Шаян бесәй», «Төлкө менән әтәс». «Еңел икмәк», «Урал батыр» әкиәттәре һәм «Йәйғор» хрестоматияһында бирелгән башҡа әҫәрҙәр, «Аҡбуҙат» журналынан һәм балалар яҙыусылары әҫәрҙәренән.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Ятлау өсөн. «Болон» М. Ғафури, «Башҡортостанға» Ғ.Ғүмәр, «Туған тел» Б.Бикбай, «Ватан» Р.Ниғмәти, «Икмәк» Ш.Биҡкол, «Ултыртайыҡ аҡ ҡайын» А. Игебаев, «Беҙҙең үгеҙ» Ә. Вахитова, «Йондоҙҙар бейей» К.Кинйәбулатова, «Көсөк» Ә. Әхмәт-Хужа, «Тейен» Р. Ниғмәтуллин, «Һуңғы баҫма» Ф. Мөхәмәтйәнов, «Тыуған ил» Ҡ.Даян, «Боҙ китә» Ә. Таһирова, «Сиренем» Ш. Биҡкол, «Урман юлы»М. Ғәли, «Йырсы Гөлдәр» З.Ҡотлогилдина, «Тыуған илем», «Уралым» С.Юлаев, «Ҡыш» Н.Нәжми.

Һөйләү өсөн. «Айыу менән бабай» К.Ушинский, «Салауаттың кир аты», «Минең атым», «Бәләкәй ҡайын», «Изгелек», «Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар», «Өс ҡыҙ» А.Йәғәфәрова, «Һәйкәл» Т. Ғәниева, «Балыҡта» И. Морат, «Ололар әйтә: әҙәпле бул?», «Икмәк» Р. Усманова, «Самауыр» З. Ханнанова, әкиәттәр – «Ҡамыр батыр», «Аҡъял батыр», «Әминбәк», «Әрмәнде тун», «Батыр малай» (дағстан халыҡ әкиәте),

«Эшләп табылған бер һум» (грузин халыҡ әкиәте), «Кәкүк» (ненец халыҡ әкиәте), «Айоға» (нанай халыҡ әкиәте), «Хикмәтле һүҙҙәр» Ф. Мырҙаҡаев.

Уҡыу өсөн. «Сөгөлдөрсө Айгөл» Г. Юнысова, «Олатайҙың фотоһы» М. Ғәли, «Егеткә» С. Юлаев, «Мин осоп китәм» З. Әхмәтйәнова, «Нимә яҡшы була?» В. Осеева, «Нимә ул яҡшы, нимә ул насар?» В. Маяковский, «Бәләкәй малайҙың ҙур ҡыуанысы», «Иренгән ике эшләр» Д. Булгакова, «Әсә» З. Воскресенская, «Ҡурай тартам» ; Ғ. Дәүләтов һ.б.(«Йәйғор» хрестоматияһын ҡарағыҙ).

Музыкаль репертуар

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө
(2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Тыңлау. «Сәңгелдәк» йыры; «Ямғыр» М. Бикбова; «Бөрлөгән». Башҡорт халыҡ йыры; «Көҙ». Ҡ. Даян. Х. Заимов. «Ҡурсағым». А. Кәримов. Г. Юнысова. «Птички». Т. Ломова. “Марш”. А. Кәримов; «Ете ҡыҙ». Башҡорт халыҡ көйө ; «Аттар». А. Кәримов; «Тышта ҡар яуа». Ҡ. Даян; Р. Сәлимов. «Аҡ ҡуян». М. Бикбова. «Сәңгелдәк йыры». Р. Ҡасимов. “Кәкүк”. А. Ғабдрахманов. «Ҡоштар». Х. Заимов. «Бесәйгә ҡалас». З. Фәйзуллина. «Ҡояш көлә». С. Сәлмәнов. К. Кинйәбулатова. «Әтәс». Ф. Әхмәтов. «Себештәр». С. Сәлмәнов. М. Хисамова.

Йырлау. «Турғай». Т. Попатенко. Н. Найденова (тәржемә). «Да, да, да» Е. Тиличеева. Ю. Островский. «Ҡыш бабай». «Гөлкәй» (тәржемә). Шыршыҡай». «Йоҡла, айыуҡай». Е. Тиличеева. Ю. Островский (тәржемә). «Яҙ». Х. Әхмәтов. М. Бикбова. «Был – мин». Ә. Зиннурова. Р. Ураҡсина. «Сәпәкәй». Г. Шәрипова. «Кошка». А. Александров. Н. Френкель. Музыкаль “Йәй”. С. Сәлмәнов. Ф. Туғыҙбаева. «Дождик». Рус халыҡ көйө. « Кәзә». Ф. Туғыҙбаева. А. Ҡобағошов.

Музыкаль - ритмик хәрәкәттәр. «Марш» Ф. Гершова. «Атлайбыҙ-йүгерәбеҙ» Е. Тиличеева. «Гопачок» Украин халыҡ көйө. «Атлау – ял итеү» Ш. Ҡолбарисов. Г. Юнысова. «Бубен» Г. Фрид. «Марш» Ф. Гершова. «Ҡуяндар» Р. Ҡасимов. «Бәләкәй полька» Е. Тиличеева. А. Шибицкая (тәржемә). «Шаян туп». Ш. Ҡолбарисов. С. Әлибай. «Бейеү» Башҡорт халыҡ көйө. «Ҡапҡалар» уйыны. «Ҡурсаҡ менән уйын». Р. Ҡасимов. Р. Еникеев. «Күңелле бейеү». Башҡорт халыҡ көйө. «Аҡ ҡайын». Р. Рустамов. А. Матлина (тәржемә).”Бесәй һәм уның балалары”. «Парлашып бейеү». Башҡорт халыҡ көйө. «Поезд уйыны». А. Кәримов. К. Кинйәбулатова. «Күңелле бейеү«. С. Сәлмәнов. С. Әлибай.

Музыкаль - дидактик уйындар. «Ҡош һәм уның балалары». «Кемдең тауышы?». «Ҡурсаҡ атлай һәм йүгерә». «Нимәлә уйнайым?»

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Тыңлау. “Турғай”. Р Ҡасимов. “Осенняя песенка – Көҙгө йыр”. А. Александров. “Ямғыр” А. Кәримов. С. Муллабаев. “Марш” А. Сәлмәнова. “Моя лошадка - Минең атым” А. Гречанинов. “Бейеү көйө” (ҡурайҙа). “Колыбельная – Бишек йыры” С. Разоренова. “Тау шыуғанда” С. Низаметдинов, Г. Юнысова. “Зима- Ҡыш” В. Карасева. Н. Френкель. “Марш” А. Кәримов. “Ете ҡыҙ” бейеүе. Башҡорт халыҡ көйө. “Ҡоштар” Х. Заимов. “Сәңгелдәк йыры” Р. Ҡасимов. “Шат тумыртҡа” Н. Сабитов. “Кәкүк” А. Ғабдрахманов. “Зима прошла - Ҡыш үтте” К. Метлов. М. Клопова.

Ҡурайҙа бейеү көйө. Ҡумыҙҙа көйҙәр тыңлау. “Сәңгелдәк йыры”, “Марш” М. Вәлиев.

Йырлау. “Бесәй әле кескәй шул” Р. Сәлмәнов. М. Баширов. “Көҙ” Р. Ҡасимов. С. Муллабаев. “Ҡарбуз” А. Еникеева. С. Әлибай. “Дождик – Ямғыр” Рус халыҡ көйө. “Шаян ямғыр” Т Бокач (тәржемә). “Аҡ ҡуян” М. Бикбова. “Шыршы йәшел энәле” М. Бикбова. “Елка – Шыршы” Н. Найденова. Т. Попатенко. “Бәлештәр” А. Филиппенко. Н. Кукловская (тәржемә). ”Мин – һалдат” Н. Френкель. В. Карасева (тәржемә). “Яҙ” М. Бикбова. Х. Әхмәтов. “Очень любим маму - Әсәйҙе ныҡ яратабыҙ” Ю. Слонов. И. Михайлова. “Сәпәкәй” Г. Шәрипова. “Ҡурсағым” М. Бикбова. “Тамсы” Ф. Туғыҙбаева. А. Ғәбдрахманов. “Әтәс” А. Игебаев. А. Ҡобағошов. “Йәмле йәй” Ҡ. Даян. Х. Заимов. “Ҡоштар һайрай” С. Әлибай. З. Исмәғилев.

Музыкаль - ритмик хәрәкәттәр. “Атлап йөрөү” А. Сәлмәнова. “Һикереү” А. Сәлмәнова. “Ҡуяндар” А. Сәлмәнова. “Бейеү” Р. Сабитов. “Бармаҡтар – ҡулдар”. Рус халыҡ көйө. «Турғайҙар һәм бесәй» уйыны. Ф. Гершова. “Ҡоштар менән машина” А. Еникеева. «Ҡояш менән ямғыр» уйыны. М. Бикбова. “Марш” Ф. Гершова. “Ял итәбеҙ” А. Хәсәншин. “Һикереү” К. Черни. “Танец с куклами- Ҡурсаҡтар менән бейеү” Украин халыҡ көйө. “Воротики-Ҡапҡалар” Э. Парлов. “Атлайбыҙ-йүгерәбеҙ” Е. Тиличеева. “Туҡталып йүгереү” А. Сәлмәнова. “Бесәй менән сысҡандар” Р. Ҡасимов. «Дуҫлаштыҡ» бейеүе. Т. Вилькорейская. “Төҫлө ҡулъяулыҡтар менән бейеү” Башҡорт халыҡ көйө. “Марш” Р. Ғәзизов. «Поезд» уйыны. К. Кинйәбулатова. А. Кәримов. «Аттар» уйыны. Р. Ҡасимов. “Парлашып бейеү” Башҡорт халыҡ көйө.

Музыкаль - дидактик уйындар. «Көслө һәм тын тауыш”, “Ҡыңғырау». «Сысҡан һәм айыу». «Тауыҡ һәм себештәр». «Нимәлә уйнайым? »

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Тыңлау. “Ҡурсаҡтар бейеүе” Х. Заимов. “Сәңгелдәк йыры” Х. Заимов. “Беҙҙең йәшелсә” Р. Сәлмәнов. Ғ. Ғүмәр. “Перовский”- башҡорт халыҡ көйө. “Ах ты, береза” Рус халыҡ көйө. Ҡурайҙа бейеү көйө. “Сана шыуабыҙ”. “Башҡорт көйҙәре” С. Ишбулатов.”Уйнайбыҙ ҙа йырлайбыҙ” Ә. Зиннурова. “Сәғәт” Х. Заимов. “Әкиәт” Х. Заимов. Ҡумыҙҙа көйҙәр тыңлау. “Тамсылар” С. Сәлмәнов. “Йылы ямғыр” Р. Ғәзизов. “Песенка о весне” Ф. Френкель. “Колокольчики звенят”. В. Моцарт. “Тирәк”- башҡорт халыҡ йыры. “Воробушки” М. Красев. “Көйһөҙ ҡыҙ” Н. Сабитов. “Сәүкә”- башҡорт халыҡ йыры.

Йырлау. “Уңыш йыябыҙ” (хоровод-уйын). “Емештәр” Н. Дауытов. Й. Гәрәй. “Ямғыр” М. Бикбова. Көҙгө ҡояш. Непослушный дождик. Ҡар яуа.Ҡыш бабай. Вот какая елочка. М. Картушина. Шыршы йәшел энәле. М. Бикбова. Мы знаем песенку. Р. Рустамов. Л. Миронова. Әсәйҙәр байрамы. Ә. Зиннурова. Р. Ураҡсина. Тамсы. А. Ғабдрахманов. Ҡоштар килә. С. Сәлмәнов. Ҡ Даян. Ҡояш көлә. С. Сәлмәнов. К. Кинйәбулатова. Күгәрсендәр гөрләйҙәр. Ә. Зиннурова. Р. Ураҡсина. Яҙ етә. Й. Фәйзи. Ф. Кәрим. Зима прошла. К. Метлов. М. Клокова. Йәй. Р. Сәлмәнов. Урманға барабыҙ. Һандуғас. Г. Бойко. А. Филиппенко (тәржемә).

Музыкаль - ритмик хәрәкәттәр. Ҡурсаҡтар менән уйын. Ш. Ҡолбарисов. Г. Юнысова. Марш. Д. Хәсәншин. Айыу. Р. Еникеев. «Атта» уйыны. Башҡорт халыҡ көйө. Түңәрәк уйын. Р. Сәлмәнов. М. Бикбова. Саҡырыу бейеүе. Башҡорт халыҡ

көйө.Ҡыш уйыны. М. Бикбова. Урманда уйыны. Башҡорт халыҡ көйө. Ҡышҡы бейеү. О. Высотская. М. Старокадомский (тәржемә). Урман хайуандары бейеүе. Күңелле бейейбеҙ. Башҡорт халыҡ көйө. Һәпәләк уйыны. Атлау-йүгереү. Р. Ҡасимов. Полька. М. Бикбова. Парлап бейейбеҙ. Башҡорт халыҡ көйө. Төҫлө ҡулъяулыҡтар менән уйын. Займи домик. М. Магдиенко. Бесәй менән сысҡан уйыны. Кәзә бәрәстәре менән бүре уйыны. Ҡабырғалы, ҡамсылы уйыны.

Музыкаль - дидактик уйындар. "Шаян музыканттар". "Минең кеүек уйна". "Ҡурсаҡ ни эшләргә тейеш?", "Һүрәттән йырҙы таны!"

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Тыңлау. Башҡортостандың, Рәсәй Федерацияһының гимндарын тыңлау, уларҙы айыра белеү. Сыңрау торна. Башҡорт халыҡ йыры. Марш. Д. Шостакович. Вальс. Д. Кабалевский. Күңелле. Күңелһеҙ. Х. Заимов. Сәңгелдәк йыры. Р. Хәсәнов. Башҡорт бейеүе. С. Шаһиәхмәтова. Клоуны. Д. Кабалевский. Һыбай егеттәр. С. Низаметдинов. Марш. Р. Ғәзизов. Әкиәт. Р. Сәлмәнов. Салауат. Башҡорт халыҡ йыры. Әсәйем – ҡәҙерлем. Ә. Зиннурова. Р. Ураҡсина. Вальс. Р. Ҡасимов. Ҡыҙҙар бейеүе. Р. Мортазин. Егеттәр. Р. Ғәзизов. Әхирәттәр. (Шаян ҡыҙ. Илаҡ ҡыҙ.) Р. Ҡасимов. Болезнь куклы - Ҡурсаҡ ауырый. П. Чайковский. Новая кукла – Яңы ҡурсаҡ. П. Чайковский. Салауат маршы. Башҡорт халыҡ көйө.Ҡурайҙа, ҡумыҙҙа көйҙәр тыңлау. Йәй килде. Г. Ишҡыуатова. Байыҡ. Башҡорт халыҡ көйө. (ҡурайҙа) Марш. Вальс снежинок - Ҡар бөртөктәре вальсы. "Щелкунчик" балетынан.

Йырлау. Көҙ. Ҡ. Даян. Х. Заимов. Һау булығыҙ, аҡҡоштар. Р. Сәлмәнов. А. Игебаев. Листочек золотой – Алтын япраҡ. Н. Вересокина. Т. Коломиец. Огородная-хороводная. Б. Можжевелов, А. Пассова. Саған. Б. Хайретдинов. Д. Талхина. Ҡыш бабай. М. Бикбова. Шыршы. К. Кинйәбулатова. С. Низаметдинов. Тышта ҡар яуа. Р. Сәлмәнов. Ҡ. Даян. Һалдаттар. Г. Юнысова. А. Ғабдрахманов. Самый добрый дедушка – Яратҡан ҡартатайым. Л. Старченко. Маму поздравляем -Ҡотлайбыҙ әсәйҙәрҙе. Л. Старченко. Бравые солдаты - Ҡыйыу һалдаттар. А. Филиппенко. Т. Волгина. Яҙғы гөлдәр. Башҡорт халыҡ йыры. Песня о Родине – Тыуған ил тураһында йыр. Ф. Гершова. Салауат - батыр. Ә. Зиннурова. Песенка друзей – Дуҫтар йыры. В. Герчик. Я. Аким. Эх, күңелле яҙ килә. Р. Сәлмәнов. Ә. Ихсан. Аҡ ҡуян. Башҡорт халыҡ йыры. Мин үҙемде яратам. Ә. Зиннурова. Р. Ураҡсина.

Музыкаль-ритмик хәрәкәттәр. «Тирмә» уйыны. Ф. Гершова. «Ҡурай» уйыны. Ф. Гершова. «Тауыштан таны» уйыны. Н. Дауытов. «Тумыртҡа» уйыны. Ш. Ҡолбарисов. Г. Юнысова. Хлоп-хлоп-хлоп (бейеү). Эстон халыҡ көйө. Дружные тройки – Татыу пар аттар. Полька. И. Штраус.Атлау һәм йүгереү. Ф. Гершова. Марш. А. Ғабдрахманов. Круговая пляска – Түңәрәк бейеүе. Рус халыҡ көйө. «Уйынсыҡты тап» уйыны. С. Низаметдинов. «Егеттәр» уйыны. С. Низаметдинов. Шаян музыканттар. Г. Юнысова. Ш. Ҡолбарисов. Башҡорт полькаһы. М. Вәлиев. Сәскәләр менән бейеү. Х. Заимов. Марш. М. Яруллин. «Тамсы» уйыны. Ф. Гершова. Шаян полька. М. Бикбова. Шалтырауыҡ менән уйын. С. Низаметдинов. Ҡулъяулыҡ биреү. Р. Еникеев. Полька. И. Яҡупов. «Һабантуй» уйыны. Ф. Гершова. Хоровод в лесу – Урманда бейеү. М. Иорданский. Н. Найденова (тәржемә). Уйын «Гори, гори ясно – Дөрләп, ян, ян». Русская народная мелодия.

Музыкаль-дидактик уйындар. Нимәлә уйнағанды белеү. Ике тауыштан йырҙы таны! Әтәс, тауыҡ һәм себеш. Ритмик лото.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Тыңлау. Күңелле марш. Х. Заимов. Вальс. П. Чайковский. Уйланыуҙар. Х. Әхмәтов. Шаян малай. Н. Сабитов. Грустная песня. Г. Свиридов. Светит месяц – Ай яҡтырта. Рус халыҡ йыры. Был минең тыуған ерем. Ә. Зиннурова. Шәл бәйләнем. Башҡорт халыҡ йыры. Болезнь куклы - Ҡурсаҡ ауырый. П. Чайковский. (фортепиано) Новая кукла – Яңы ҡурсаҡ. П. Чайковский (фортепиано). Урал иртәһе. Х. Әхмәтов (скрипка). Салауат маршы (ҡурай). Марш. Ф. Гершова (баян). Полька. М. Глинка (фортепиано). Әпипә. Бейеү көйө (ҡурай). Салауат маршы (ҡумыҙ). «Урманда» композицияһы (ҡумыҙ). Подснежник - Умырзая. П. Чайковский. Весна. Г. Свиридов (симфонический оркестр). Вальс. С. Низаметдинов (башҡорт милли музыка ҡоралдары оркестры башҡарыуында). Башҡортостан гимны (тынлы оркестр). Рәсәй гимны (тынлы оркестр).

Йырлау. Ерем, илем, телем. Р. Шәкүр. М. Сәлимов. Яуа ҡайын япрағы. З. Исмәғилев. М. Кәрим. Айҙар-ғынайым (таҡмаҡтар). Ф. Фәтҡуллина. Әйләнәбеҙ, әйләнәбеҙ. Ш. Ҡолбарисов. М. Бураҡаева. Беҙҙең йәшелсә. Р. Сәлмәнов. Ғ Ғүмәр. Һау булығыҙ, ҡоштарым. Н. Дәүләтҡолова. Уйна, ҡурай. Башҡорт халыҡ йыры. Аҡбуҙатта елдереп. С. Сәлмәнов.С. Әлибай. Ҡыш бабай. М. Сәлимов. Әсхәл Әхмәт-Хужа. Шыршы. С. Низаметдинов. К. Кинйәбулатова. Шат Ҡыш бабай килә (тәржемә). Н. Вересокина. Әсәйем – ҡәҙерлем. Ә. Зиннурова. Р. Ураҡсина. Әсәйҙәр байрамы (тәржемә). Ю. Гурьев. С.Вигдоров. Олатайым миҙалдары. Ә.Зиннурова. Р. Ураҡсина. Армияла хеҙмәт итәрбеҙ. Ю. Чичков, В. Малков. Яҙ килә. Р. Сәлмәнов. Ә. Ихсан. Тал араһы. Башҡорт халыҡ йыры. Әсәйем - әсәкәйем. Н. Дәүләтҡолова. Тиҙҙән мәктәпкә. Ф. Фәтҡуллина. Хушлашыу йыры. Ф. Фәтҡуллина. Һау бул, балалар баҡсаһы. (тәржемә) А. Филиппенко. Т. Волгина.

Музыкаль - ритмик хәрәкәттәр. Марш. Р. Ҡасимов. Байрам. Х. Заимов. Сәскәләр. Р. Хәсәнов. Хәтирә. Алты егет. Башҡорт халыҡ көйҙәре. Яулыҡ һалыш. Уйын. Энә менән еп. Уйын. Әйләнәбеҙ, әйләнәбеҙ. Уйын. Ҡулъяулыҡтар менән парлы бейеү. Ш. Ҡолбарисов. Түңәрәктә бейеү. А. Кәримов. Нардуған. Уйын. Полька. Р. Сәлмәнов. Вальс. Р. Сәлмәнов. Ритмды ҡабатла. Н. Дауытов. Бейеү көйө. Башҡорт халыҡ көйө. Баҡыр бүкән. Уйын. Таһыл егет. Уйын. Шаян бейеү. Р. Сәлмәнов. Ищи - Тап. Уйын. Т. Ломова. Новогодний хоровод – Яңы йыл бейеүе. Т. Попатенко. Н. Найденова. Байрам маршы. Р. Ҡасимов. Марш. Р. Сәхәүетдинова. Олатай. Башҡорт халыҡ көйө. Шаян бейеү. М. Бәширов. Аҡ тирәк. Уйын. Мунса. Уйын. Наза. Уйын. Башҡорт ҡыҙы. Бейеү. К. Рәхимов. Парлы полька. Ш. Ҡолбарисов.

Музыкаль-дидактик уйындар. Ике тауыштан йырҙы бел. Ҡыңғырауҙар. Музыкаль баҫҡыстар. Ритмик лото. Ритмик домино. Кем иң иғтибарлы? Музыка ҡоралдары.

Хәрәкәттең төп төрҙәренең, хәрәкәтле уйындарҙың һәм күнегеүҙәрҙең исемлеге

Иртә йәштәге кескәйҙәрҙең икенсе төркөмө (2 йәштән 3 йәшкә тиклем)

Хәрәкәттәрҙең төп төрҙәре

Атлау. Парлашып, төркөмсәләргә бүленеп, бөтә төркөм менән атлау. Ҡулдарға тотоноп, түңәрәк буйлап атлау. Тиҙлекте шәбәйтеп, йүгереүгә күсеп йәки йүгереүҙән әкрен генә атлауға күсеп хәрәкәтләнеү.

2 йәштә 6 айҙан төрлө яҡҡа таралып йүгереү, предметтарҙы урап йүгереү. Бер аяҡты икенсеһе эргәһенә ҡуйып, алға табан, йә уң-һул яҡҡа ҡарай хәрәкәтләнеү.

Тигеҙлек һаҡлап, күнекмәләр башҡарыу. 20 см киңлектәге 2-3 м оҙонлоҡтағы тура юлдан 10-15 см бейеклектәге предметтарҙы аша атлап йөрөү: 20-25 см киңлектәге таҡта, бейеклеге 10-15 см булған гимнастика эскәмйәһе, бүрәнә буйлап йөрөү.

Ҡулдарға берәй әйбер тотоп, яй ғына үҙ-тирәләй әйләнеү.

Йүгереү. Төркөмсәләргә бүленеп, йәки бөтә төркөм менән тура йүнәлештә бер-бер артлы берәмләп сафҡа теҙелеп, 30-40 секунд эсендә (туҡтамайынса) яй темпта йүгереү; йүгереүҙең темпын үҙгәртеп (шәберәк, йә яйыраҡ) хәрәкәтләнеү.

Бер-береһенән 25-30 см алыҫлыҡта һуҙылған ике бау уртаһынан йүгереү.

Имгәкләү, шыуышыу, үрмәләү. 3-4 м алыҫлыҡҡа тура йүнәлештә тубыҡланып имгәкләү; иҙәндә ятҡан таҡта өҫтөнән ултырып шыуышыу; бер осо 20-30 сантиметрға күтәрелгән таҡта, гимнастика эскәмйәһе буйлап үрмәләү.

30-40 см бейеклектә ҡуйылған ҡапҡа йәки һуҙылған бау аҫтынан шыуышып үтеү, бүрәнә аша сығыу.

1,5 бейеклектәге баҫҡысҡа, гимнастика стенаһына үрмәләп менеү һәм төшөү (үҙенә уңайлы ысул менән).

Этәреү, ташлау, ырғытыу, һелтәү. 50-100см алыҫлыҡтан тупты ике ҡуллап, аҙаҡ – бер ҡул менән тәрбиәсегә йәки икенсе балаға дуға аша тороп йәки ултырып этәреү.

Тупты алға ике ҡул менән эйелеп, аҫтан, түш тәңгәленән, баш артынан күкрәк алдынан һуҙылған бау аша йәки бала буйына тап килтереп һуҙылған сетка аша 1- 1,5 алыҫлыҡҡа ташлау.

Уң һәм һул ҡул менән тупты йәки ҡом тултырылған тоҡсайҙы, тубырсыҡты алыҫлыҡҡа ташлау: алыҫлыҡҡа – ике ҡуллап, сәпкә – уң (һул) ҡул менән 1 м аралыҡтан һелтәү.

50-100 см алыҫлыҡтан тәрбиәсе ташлаған тупты тотоу.

Һикереү. Ике аяҡты бергә ҡуйып, бер урында һикереү; әҙ генә алға табан хәрәкәтләнеп һикереү; бау (һыҙыҡ) аша һикереү; ике (10-30 см киңлектәге) параллель һыҙыҡтар аша һикереү.

Бала ҡулынан 10-15 см бейеклектәге предметҡа ҡулдарҙы тейҙерер өсөн юғарыға һикереү.

Дөйөм үҫеш күнегеүҙәре

Ҡул суҡтары һәм күкрәк мускулдарын үҫтереүгә күнегеүҙәр: ҡулдарҙы алға, өҫкә, ситкә һуҙыу; уларҙы күкрәк тәңгәлендә киңәштереп, ян-яҡҡа һуҙыу. Ҡулдарҙы артҡа йәшереү; ситкә һуҙып, ҡул суҡтарын яурынға һалыу.

Түш алдында, баш өҫтөндә сәпәкәйләү. Ҡулдарҙы алда, артта, өҫтә-аҫта һелкетеү.

Умыртҡа һөйәге һығылмалылығын һәм арҡа мускулдарын нығытыуға күнегеүҙәр. Эргәлә торған (ултырған) балаға предмет биреү өсөн уңға-һулға боролоу; алға һәм уңға-һулға эйелеү.

Иҙәндә ултырып, бер-бер артлы аяҡтарҙы бөкләү һәм һуҙыу. Арҡаға ятып, аяҡтарҙы күтәреү һәм төшөрөү. Тубыҡтарҙа тороп, үксәләргә ултырыу һәм кире тороу.

Ҡорһаҡ һәм аяҡ мускулдарын нығытыуға күнегеүҙәр. Бер урында тапаныу һәм атлау. Торған килеш аяҡты алға һуҙып, тубыҡтан бөгөргә һәм яҙырға (тотоноп). Тотоноп, сүкәйергә һәм торорға; аяҡ остарында күтәрелергә. Тотоноп, аяҡты алға һуҙып, үксәгә ҡуйыу. Ултырып, аяҡ бармаҡтарын ҡыбырлатыу.

Хәрәкәтле уйындар

Атлап-йүгереп: «Ҡурсаҡтарға ҡунаҡҡа», «Тупты баҫтырып тот!», «Һуҡмаҡ буйлап!», «Йылға аша», «Айыуға ҡунаҡҡа», «Ҡояш һәм ямғыр», «Кем тынысыраҡ?», «Мине тотоғоҙ!», «Әйберҙәрҙе алып кил!», «Ҡар бөртөктәре һәм ел», «Баҫтырыш», «Ҡоштар осалар», «Турғайҙар һәм автомобиль», «Минең атым».

Шыуышып: «Ҡыңғырауға шыуышып ет!», «Ҡапҡа», «Һыҙыҡҡа баҫма!», «Һаҡ бул!», «Бесәй балалары», «Маймылдар»,

Тупты ырғытып һәм тотоп: «Туп түңәрәктә», «Тупты тәгәрәт!», «Тура ырғыт!», «Ташла - тот!».

Һикереп: «Минең күңелле тубым», «Оялағы ҡошсоҡтар», «Аҡ ҡына ҡуян ултыра», «Ҡуян», «Бесәй һәм сысҡандар», «Оялағы ҡошсоҡтар».

Арауыҡта йүнәлеш билдәләүгә: «Ҡайҙа шылтырай?», «Ҡыш бабайҙы һәм Ҡарһылыуҙы тап!», «Күңелле уйын!», «Ҡуянҡай!», «Байраҡты тап!», «Күңелле уйындар!», «Уйынсыҡты һаҡла!».

Күңелле уйын: «Поезд», «Флажок».

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Хәрәкәттәрҙең төп төрҙәре

Атлау. Аяҡ остарында, тубыҡты күтәреп, тулыһынса табандарға баҫып, колоннала берәмләп, парлашып йөрөү; йөрөү йүнәлештәрен үҙгәртеп, туп-тура йүнәлештә, түңәрәк буйлап, предметтар араһынан боролоп, төрлө яҡҡа таралып йөрөү. Атлап йөрөү барышында күнегеүҙәр башҡарыу (туҡтап, сүкәйеп ултырып, икенсе яҡҡа боролоп).

Тигеҙлек һаҡлап, күнекмәләр башҡарыу. Киңлеге 15-20 см, оҙонлоғо 2-2,5 м булған тура юлдан, таҡтанан, гимнастика эскәмйәһенән, бүрәнәнән аяҡтың үксәһенә икенсе аяҡ осон ҡуйып атлау; ҡырлы таҡтанан, иҙәндә ятҡан предметтар, баҫҡыс аралыҡтары аша атлау.

30-35 см бейеклектәге ауыш таҡтанан йөрөү. Үҙ-тирәһендә әкрен генә ике яҡҡа әйләнеү.

Йүгереү. Ғәҙәттәгесә йүгереү, аяҡ осонда йүгереү (төркөмсәләргә бүленеп, бөтә төркөм менән), майҙансыҡтың бер осонан икенсеһенә, колоннала берәмләп, төрлө йүнәлештә: туп-тура, тулҡын кеүек һалынған юлдан (киңлеге 25-50 см, оҙонлоғо 5-6 м), түңәрәк буйлап, таралышып; төрлө күнекмәләр башҡарып (туҡтап, баҫтырыусынан ҡасып, ҡасып барыусыны баҫтырып, сигнал буйынса тейешле урынға), йүгереү темпын үҙгәртеп; яй темпта 50-60 секунд эсендә, шәп темпта (10 м аралыҡта).

Тәгәрәтеү, ташлау, тотоу, ырғытыу. Тупты (шарҙы) бер-береһенә; предметтар араһынан; 50-60 см киңлектәге ҡапҡаға тәгәрәтеү. Алыҫлыҡҡа уң, һул ҡул менән ырғытыу (йыл аҙағында 2,5-5 м алыҫлыҡҡа), 1,5-2 м алыҫлыҡта горизонталь урынлашҡан сәпкә ике ҡуллап аҫтан, түштән һәм уң, һул ҡул менән ташлау.

Вертикаль сәпкә 1-1,5 алыҫлыҡтан уң һәм һул ҡул менән ташлау. 70-100 алыҫлыҡтан тәрбиәсе ташлаған тупты тотоу. Тупты өҫкә, аҫка ташлап, иҙәнгә (ергә) һуғып, тотоу.

Имгәкләү, шыуышыу, үрмәләү. Тубыҡланып 6 м аралыҡты тура йүнәлештә предметтар араһынан йәки эргәһенән шыуышып үтеү.

50 м бейеклектәге бау аҫтынан ҡулдар ярҙамынан башҡа имгәкләп үтеү; ҡоршау аша үтеү; бүрәнә аша сығыу; 1,5 м бейеклектәге баҫкысҡа үрмәләү.

Этәреү, ташлау, ырғытыу, һелтәү. Тупты (шарҙы) бер-береһенә этеп тәгәрәтеү; предметтар араһынан тәгәрәтеү; 50-60 см киңлектәге ҡапҡаларға тәгәрәтеп индереү. Уң һәм һул ҡул менән алыҫлыҡҡа ташлау (йыл аҙағына 2,5-5 метрға).

Горизонталь сәпкә ике ҡуллап аҫтан, түштән, һыңар ҡуллап (1,5 – 2 м алыҫлыҡҡа), 1,2 м бейеклектәге вертикаль сәпкә 1-1,5 м алыҫлыҡтан).

70-10 см алыҫлыҡтан тәрбиәсе ташлаған тупты тотоу. Тупты өҫкә, аҫка ташлау, ергә (иҙәнгә) һуғып, тотоу (бер рәттән 2-3 тапҡыр).

Һикереү. 2-3 м аралыҡты ике аяҡлап һикереп үтеү. Ике аяҡта бер урында һикереү; бер түңәрәктән икенсеһенә. 15-20 см бейеклектән аҫка һикереү; торған урындан юғарыға ҡарай бала ҡулынан бейегерәк эленгән предметты алыу маҡсатында һикереү; һыҙыҡ, бау аша; бер-бер артлы 4-6 һыҙыҡ аша; 5 см бейеклектәге предметтар аша; торған урындан һикереү.

25-30 см киңлектәге ике һыҙыҡ аша оҙонлоҡҡа урындан һикереү.

40 см оҙонлоҡҡа урындан һикереү.

Теҙелеүгә күнегеүҙәр. Колоннаға, шеренгаға, түңәрәккә берәмләп теҙелеү, берәмләп теҙелеүҙән парлашып теҙелеүгә күсеү; атлағанда рәтте ҡушыу, айырыу; бер урында уңға, һулға әйләнеп атлау.

Дөйөм үҫеш күнегеүҙәре.

Ҡул суҡтары һәм күкрәк мускулдарын үҫтереүгә күнегеүҙәр: Һуҙылған ҡулдарҙы өҫкә, аҫка, ситкә күтәреү һәм төшөрөү. Предметты бер ҡулдан икенсеһенә күкрәк алдында, баш өҫтөндә, арҡа артында һалыу.

Ҡулдарҙы түш тәңгәлендә сабыу һәм арҡа артына йәшереү; алға һәм ситкә һуҙыу; устарҙы асып, ҡул суҡтарын йоморға, асырға, бармаҡтарҙы һелкетергә.

Умыртҡа һөйәге һығылмалылығын һәм арҡа мускулдарын нығытыуға күнегеүҙәр. Тупты баш өҫтөнән алға һәм артҡа биреү; уңға-һулға боролоп, түш тапҡырынан бер-береһенә биреү.

Ултырып: предметты боролоп артҡа һалырға, икенсе яҡҡа кире боролоп, уны алырға. Ултырып: алға эйелергә, аяҡтарҙы тубыҡтан бөгөргә һәм ҡосаҡлап үҙеңә тартырға.

Арҡала ятып: аяҡтарҙы күтәрергә, төшөрөргә; аяҡтарҙы велосипедта йөрөгән кеүек хәрәкәтләндерергә.

Эстә ятып: аяҡтарҙы бөгөргә, турайтырға (бер-бер артлы, бергә); эстән арҡаға әйләнергә һәм киреһенсә; яурындарҙы күтәреп, ҡулдарҙы ситкә һуҙып, башты күтәреп, артҡа бөгөлөргә.

Ҡорһаҡ һәм аяҡ мускулдарын нығытыуға күнегеүҙәр. Хәрәкәтле уйындар. Аяҡ остарында күтәрелергә; аяҡ осона, үксәгә, табан ҡырыйына баҫыу.

Тотоноп, тотонмайынса сүкәйеү. Ҡулдарҙы алға һуҙып сүкәйеү. Тубыҡтарҙы ҡулдар менән ҡосаҡлап, башты аҫка эйеп сүкәйеү. Тубыҡтан бөкләнгән аяҡтарҙы бер-бер артлы күтәреп һуҙыу.

Ултырып, аяҡ бармаҡтары менән ҡом тултырылған тоҡсайҙарҙы эләктереп алыу. Иҙәндәге таяҡ өҫтөнән, 6-8 см диаметрлы арҡан өҫтөнән табан уртаһы менән баҫып, аяҡтарҙы бер-береһе эргәһенә ҡуйып йөрөү.

Спорт күнекмәләре.

Санала шыуыу. Бер-береһен санала шыуҙырыу; тәпәш тауҙан санала шыуыу.

Боҙ юлдарҙан ололар ярҙамында шыуыу.

Саңғыла йөрөү: Тигеҙ ерҙә саңғы юлынан атлап һәм шыуып йөрөү, саңғыла аҙымлап юлдан боролоу.

Велосипедта йөрөү. Өс тәгәрмәсле велосипедта тура юлдан, түңәрәк буйынса, уңға, һулға боролоп йөрөү.

Йөҙөү. Һыуға төшөү, сумыу, йүгереү, предметтар менән уйнау. Йөҙөргә өйрәтеү.

Хәрәкәтле уйындар

Атлап-йүгереп: «Миңә йүгерегеҙ!», «Ҡоштар һәм ҡошсоҡтар», «Сысҡандар һәм бесәй», «Тупты баҫтарып тот!», «Ҡоршау», «Ҡояш һәм ямғыр», «Себештәр һәм ҡарауылсы», «Осоусылар», «Карусель», «Әйберҙе алып кил!», «Автомобилдәр», «Кем тиҙерәк?», «Баҫтырыш», «Санала», «Һаҡлан-туңдырам!», «Ҡар бөртөктәре һәм ел», «Поезд», «Ҡуяндар һәм бүре», «Боҙло юлдан», «Ялбыр эт», «Оялағы ҡошсоҡтар», «Ҡыяр, ҡыяр », «Кәзә бәрәстәре һәм бүре», «Айыуҙа ҡунаҡта», «Хәйләкәр төлкө», «Йәшенмәк», «Һәпәләк», «Ҡоштар һәм төлкө».

Шыуышып: «Тигеҙ генә юлдан», «Юғарыраҡ һикер!», «Соҡорҙо һикереп сыҡ!», «Келәттә сысҡандар», «Балыҡтар», «Ҡуяндар», «Бал ҡорттары һәм айыу», «Маймылдар».

Һикереп: «Кем алыҫыраҡ ташлар?», «Тупты түңәрәккә ырғыт!», «Шарҙы тот!», «Турғай һәм бесәй», «Кәзә бәрәстәре һәм бүре», «Йылға аша»,«Түңгәктән -түңгәккә», «Күңелле туп».

Тупты ырғытып һәм тотоп: «Тупты тот!», «Таяҡты йыҡ!», «Кем ҡайҙа ҡысҡыра – бел!», «Әйберҙе һаҡла!», «Ҡоршау артынан», «Кәрзингә ырғыт!».

Арауыҡта йүнәлеш билдәләүгә: «Үҙеңдең урыныңды тап!», «Кем ҡайҙа ҡысҡыра – бел!», «Нимә йәшерелгәнен тап!»

Күңелле уйын: «Флажок», «Ҡыуыҡ», «Ап-аҡ ҡына ҡуян ултыра», «Тирмәкәй», «Хоровод», «Карусель».

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Хәрәкәттәрҙең төп төрҙәре

Атлау. Ғәҙәттәгесә атлау, аяҡ остарына, аяҡ үксәләренә, табан ситенә баҫып, тубыҡтарҙы юғары күтәреп, ваҡ һәм ҙур аҙымдар менән, йөҙ менән алға табан ҡарап, аяҡтарҙы бер-береһе эргәһенә ҡуйып, уңға (һулға) атлау.

Колоннала берәмләп, парлашып атлау. Тура йүнәлештә, түңәрәк буйлап, зал ситенән, предметтар араһынан атлау, таралышып атлап йөрөү. Төрлө күнекмәләр башҡарып (сүкәйеп, ҡулдарҙы төрлөсә хәрәкәтләндереп) йөрөү. Атлауҙы йүгереү, һикереү менән сиратлау. Атлау темпын, йүнәлешен үҙгәртеп, башлап барыусыны алмаштырып йөрөү.

Тигеҙлек һаҡлап, күнекмәләр башҡарыу. 10-15 см аралыҡтағы ике бау араһынан, диаметры 1,5 – 3 см булған арҡан буйлап, таҡтанан, гимнастика эскәмйәһенән, предметтар аша, борма юл буйлап, баш өҫтөнә ҡом тултырылған тоҡсай һалып, аяҡ осонда, ҡулдарҙы тирә-яҡҡа һуҙып атлау. Ҡырлы итеп арҡыры таҡталар ҡатылған таҡта буйлап, 15-20 см киңлектәге, бейеклеге 30-35 см булған ауыш таҡтанан йөрөү.

Иҙәндән 20-25 см бейеклектә һалынған баҫҡыс аралыҡтарынан йөрөү һәм йүгереү, төйөп тултырылған 5-6 туп аша ҡулды төрлө торошҡа ҡуйып, аша атлап үтеү.

Ҡулдарҙы билгә ҡуйып, ике яҡҡа ла әйләнеү.

Йүгереү. Ғәҙәттәгесә йүгереү, аяҡ остарында, тубыҡтарҙы юғары күтәреп, ваҡ һәм киң аҙымдар менән йүгереү. Колоннала берәмләп, парлашып йүгереү; төрлө йүнәлештә йүгереү; түңәрәк буйлап, предметтар араһынан, таралышып йүгереү;

Йүгереүҙең темпын, йүнәлешен, алдан барыусыны алмаштырып йүгереү. 1-1,5 минут эсендә туҡтамай йүгереү (40-60); бер-бер артлы өсәр тапҡыр 10 м алыҫлыҡҡа йүгереү; 20 м алыҫлыҡҡа йүгереү.

Тәгәрәтеү, ташлау, тотоу, ырғытыу. Предметтар араһынан туптарҙы, ҡоршауҙарҙы тәгәрәтеү. Бер-береһенә туптарҙы аҫтан, баш артынан һәм уларҙы 1,5 м алыҫлыҡтан тотоу; Тупты ике ҡуллап баш артынан, бер ҡул менән 2 м алыҫлыҡтан ҡаршылыҡ аша ташлау.

Тупты өҫкә ташлау, ергә һуғыу һәм ике ҡуллап уны тотоу (2-3 тапҡыр). Тупты 5-әр тапҡыр уң һәм һул ҡул менән бер-бер артлы ергә һуғып, һикертеү.

Предметтарҙы алыҫлыҡҡа (3,5 - 6,5 м), горизонталь ятҡан сәпкә (2-2,5 метрҙан) уң, һул ҡул менән ташлау; 1,5 м бейеклектә вертикаль торған сәпкә 1,5-2 м алыҫлыҡтан ташлау.

Имгәкләү, шыуышыу, үрмәләү. 10 метр аралыҡты тубыҡтарға һәм терһәктәргә таянып тура йүнәлештә, предметтар араһынан, бормалы юлдан, горизонталь һәм ауыш таҡтанан имгәкләп үтеү. Гимнастика эскәмйәһенән эскә ятып, ҡулдар ярҙамында алға тартылып шыуышыу. Дүртаяҡлап, аяҡ табандарына һәм ҡул устарына таянып имгәкләү. 50 см бейеклектәге бау, дуға аҫтынан кәүҙәнең уң һәм һул яғы менән сығыу. Ҡоршау эсенән имгәкләп үтеү; бүрәнә, гимнастика эскәмйәһе буйлап имгәкләп үтеү. Гимнастика баҫҡысының әле бер яғына, әле икенсе яғына күсеп, үрмәләп менеү.

Һикереү. Бер урында ике аяҡта һикереү (20-әр тапҡыр, атлау менән 2-3 мәртәбә сиратлап); алға табан хәрәкәтләнеп һикереү (2-3 метр аралыҡты), арт яҡҡа кире боролоп һикереү.

Һикереү: аяҡтарҙы бергә ҡуйып; аяҡтарҙы айырып ҡуйып; һыңар аяҡлап (уң һәм һул аяҡтарҙы сиратлап).

Бер-береһенән 40-50 см аралыҡта һыҙылған 4-5 һыҙыҡтар аша һикереү. 5-10 см бейеклектәге 2-3 предметтың һәр береһе аша һикереү. 20-25 см бейеклектән аҫҡа һикереү. Урындан тороп, оҙонлоҡҡа һикереү (70 см аралыҡҡа). Ҡыҫҡа һикергес (скакалка) менән һикереү.

Сафҡа теҙелеүгә күнегеүҙәр. Берәмләп колоннаға, шеренгаға, түңәрәккә теҙелеү; колоннаға икешәрләп, өсәүләп барған ерҙән теҙелеү; бирелгән ориентир буйынса тигеҙлек һаҡлап; уңға, һулға боролоу: үҙ тирәләй әйләнеү. Колоннала рәтте ҡушыу, айырыу.

Ритмик гимнастика. Көйгә тап килтереп, таныш һәм ҡабатлана торған хәрәкәттәр башҡарыу.

Дөйөм үҫеш күнегеүҙәре

Ҡул суҡтары һәм күкрәк мускулдарын үҫтереүгә күнегеүҙәр: Ҡулдарҙы алға, өҫкә, ситкә күтәреү (бергә, айырым), билгә ҡуйылған йәки кәүҙә буйлап төшөрөлгән, түш алдындағы ҡулдарҙы арҡа артына һуҙыу. Ҡулдарҙы алға, артҡа һелтәү. Терһәктән бөкләп, ҡулдарҙы үҙ тирәһендә әйләндереү. Ҡулдарҙы баш артына ҡуйып, ситкә һуҙыу һәм төшөрөү.

Умыртҡа һөйәге һығылмалылығын һәм арҡа мускулдарын нығытыуға күнегеүҙәр. Ҡулдарҙы билгә ҡуйған, ситкә йәйгән тороштан уңға-һулға боролоу. Ҡулдарҙы алға һуҙып, эйелеп, бармаҡтарҙы аяҡ осона тейгеҙеү. Аяҡтарҙы бергә ҡуйып; айырып ҡуйып, алда ятҡан предметтарҙы эйелеп алыу. Ултырып йәки тубыҡтарҙа тороп үҙ тирәләй туп тәгәрәтеү; бер-бер артлы күтәрелгән аяҡтар аҫтынан предметты бер ҡулдан икенсеһенә һалыу. Ултырып, арҡала ятып, ике аяҡты өҫкә күтәреү, бөкләп турайтыу, кире иҙәнгә төшөрөү. Алға һуҙылған ҡулдарҙа предмет тотоп, арҡанан ҡорһаҡҡа әйләнеү. Эстә ятҡан килеш, ҡулдарҙы алға һуҙып, башты, яурынды күтәреү.

Ҡорһаҡ һәм аяҡ мускулдарын нығытыуға күнегеүҙәр. Аяҡ остарына күтәрелеү. Сиратлап аяҡтарҙы алға һуҙып, үксәгә, аяҡ осона ҡуйыу. Аяҡтарҙы тыпылдатыу. Ҡулдарҙы билгә ҡуйып, алға һуҙып, ситкә йәйеп, сүкәйеү.

Торған килеш тубыҡтарҙы бөгөп, аяҡтарҙы сиратлап алға һуҙыу. Таяҡ, арҡан буйлап, үксәгә баҫып йөрөү. Аяҡ бармаҡтары ярҙамында предметтарҙы бер урындан икенсе ергә алып һалыу.

Спорт күнекмәләре

Санала шыуыу. Тауҙан шыуып төшөү, сананы һөйрәп тауға менеү. Шыуғанда аяҡтар ярҙамында тиҙлекте кәметә белеү.

Боҙ юлдарҙан үҙаллы ултырып, ятып, аяҡ өҫтө шыуыу.

Саңғыла йөрөү. Аяҡтарҙы шыуҙырып, саңғыла йөрөргә өйрәтеү. Урында йүнәлеште үҙгәртеп, саңғыла боролоу (уңға, һулға). Тауға менергә өйрәтеү (алға атлап, таяҡтарға таянып; саңғылар менән «шыршы» яһап). Саңғыла 500 м араны үтеү.

Велосипедта йөрөү. Өс һәм ике тәгәрмәсле велосипедта тура йүнәлештә, түңәрәктә йөрөү. Уңға, һулға боролоу.

Йөҙөү. Һыу төбөндә ҡулдарға таянып алға, артҡа йөрөү (аяҡтар горизонталь рәүештә һуҙылған). Һыу эсендә ултырып, аяҡтарҙы өҫкә күтәреү, төшөрөү. Эйәккә, күҙҙәргә тиклем һыу эсенә сүкәйеп инеү. Битте һыу эсенә тығып өрөү. Башты һыу эсенә тығыу.

Хәрәкәтле уйындар

Йүгереү менән: «Самолеттар», «Үҙеңә иш тап!», «Өйһөҙ ҡуян», «Көтөүсе-тотоусы», «Кем тиҙерәк?», «Ҡоршауҙы тот!», «Ҡуяндар һәм эт», «Таҫыл егет», «Тәртипле балалар», «Кәзә бәрәстәре һәм бүре», «Ҡар бөртөктәре һәм ел», «Ҡарлы карусель», «Етеҙ саналар», «Урында», «Һыңар саңғыла йүгереү», «Ташла ла кире тот!», «Төҫлө автомобилдәр», «Турғайҙар һәм автомобиль», «Себештәр һәм бесәй», «Ҡыяр, ҡыярҡай», «Мөгөҙлө ҡуңыҙ», «Беҙ күңелле балалар», «Баҫтырыш», «Ҡаҙҙар-ҡаҙҙар», «Тауыҡ ояһында төлкө», «Кем арыраҡ?», «Һыңар аяҡта», «Ҡоршау аша».

Һикереү менән: «Ҡуяндар һәм бүре», «Ҡуян йыуына», «Һунарсы һәм ҡуяндар», «Һикереп әйлән!», «Ҡар өйрөлмәһе аша».

Шыуышыу менән: «Ҡапҡа», «Ҡоштар осоуы», «Эт һәм бесәй балалары», «Көтөүсе һәм көтөү», «Маймылдар», «Бал ҡорттары һәм айыу», «Ут һүндереүселәр», «Ҡаршылыҡтар аша».

Ташлап тотоу: «Ырғыт һәм тот», «Сәпте йыҡ»,«Төҙ генә тигеҙ!», «Ҡарлы сәп», «Снайперҙар», «Кем алыҫыраҡ?», «Тот та ташла!», «Юғары ырғыт!», «Селтәр аша туп ташла!», «Сәпкә ташла!».

Арауыҡта йүнәлеште билдәләүгә: «Ҡайҙа йәшерелгәнде тап!», «Ҡыңғырау менән һәпәләк», «Кем юҡ?», «Йәшенмәк», «Тап та өндәшмә!», «Танау, ҡолаҡ, танау», «Тамсыҡай»

Күңелле уйын: «Бесәй уйынға сыҡты…», «Түмгәктә ҡуян серем итә», «Карусель».

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Хәрәкәттәрҙең төп төрҙәре

Атлау. Ғәҙәттәгесә атлап йөрөү, ҡулдарҙы баш артына ҡуйып, аяҡ остарында, үксәләрҙә, аяҡ табаны ҡырыйына баҫып, тубыҡтарҙы юғары күтәреп, үксәнән аяҡ остарына күсеп, аяҡтарҙы бер-береһе эргәһенә ҡуйып, уңға һәм һулға атлау.

Сафҡа берәмләп, парлашып, өсәүләп теҙелеп, зал ситенән боролоп, тәрбиәсе ҡушыуынса төрлө хәрәкәттәр башҡарып атлау.

Тигеҙлек һаҡлап, күнекмәләр башҡарыу. Диаметры 1,5-3 см булған эскәмйә рейкаһы йәки арҡан буйлап, ауыш таҡтанан тура һәм ҡабырға яҡлап; аяҡ осонда атлап йөрөү; гимнастика эскәмйәһе буйлап эсенә ҡом тултырылған туптар аша атлап; эскәмйә буйлап сүкәйеп; предметтарҙы эскәмйәгә һалып, кире йыйып; ике ҡуллап тупты үҙ алдынан этеп; ҡабырғаға боролоп, аяҡтарҙы бер-береһе эргәһенә ҡуя-ҡуя; баш өҫтөнә ҡом тултырылған тоҡсай һалып атлау. Ауыш таҡтанан өҫкә, аҫҡа табан; ҡабырғаға боролоп, аяҡҡа аяҡ терәп атлау. Парлашып, ҡулдарға тотоноп, әйләнеү.

Йүгереү. Ғәҙәттәге рәүештә, аяҡ осонда, тубыҡтарҙы юғары күтәреп, ваҡ һәм киң аҙымдар менән, сафта берәмләп, икешәрләп; бормалы юл буйлап; таралышып, ҡаршылыҡтар аша атлау.

1,5-2 минут эсендә яй темпта бер туҡтауһыҙ йүгереү; 80-120 м алыҫлыҡҡа (2-3 тапҡыр) атлау менән сиратлап урта темпта йүгереү. Өс тапҡыр бер-бер артлы 10 м алыҫлыҡҡа йүгереү.

Тиҙлеккә йүгереү: 20 м алыҫлыҡты 5,5 секунд эсендә йүгереп үтеү (йыл аҙағында 30 метрҙы 8,5-7,5 секунд эсендә). Ауыш таҡтанан өҫкә, аҫҡа, аяҡ осонда, ҡабырғаға боролоп, аяҡтарҙы бер-береһе эргәһенә ҡуйып йүгереү. Ҡулдарға тотоноп, парлашып әйләнеү.

Имгәкләү, шыуышыу, үрмәләү. Дүртаяҡлап борма юлдан предметтарҙы аша атлау һәм йүгереү менән сиратлап, имгәкләү, ҡаршылыҡтар аша имгәкләп үтеү. Баш менән тупты этә-этә, 3-4 м алыҫлыҡты шыуышып үтеү. Терһәктәргә таянып һәм тубыҡтар ярҙамында алға этенеп шыуышыу; эскә ятып, ҡулдар ярҙамында алға тартылып гимтастика эскәмйәһенән шыуышыу.

Бер нисә предметты бер-бер артлы аша атлап сығыу. Ҡоршау аша төрлө ысулдар ярҙамында үтеү.

2,5 бейеклектәге гимнастика баҫҡысынан темпты үҙгәртеп, бер яғынан икенсеһенә күсә-күсә, үрмәләп менеү һәм төшөү.

Этәреү, ташлау, ырғытыу, һелтәү. Тупты өҫкә ырғытыу һәм тотоп алыу; ергә һуғып, кире тотоу (10 тапҡыр бер рәттән); уң (һул) ҡул менән алмашлап; тупты өҫкә ырғытып, ҡулдар менән түш алдында сәпәкәйләп, тупты ике ҡуллап тотоу. Тупты бер ҡулдан икенсеһенә ташлап тотоу.

Балаларҙың тупты бер-береһенә төрлө тороштан һәм теҙелеп торған урындан төрлөсә ташлауы (аҫтан, баш артынан, түштән, ергә һуғып тотоп һ.б.).

Тупты бер урында ергә һуғып, алға табан атлау (5-6 м), 1 кг ауырлыҡтағы ҡом тултырылған тупты алға табан этеп тәгәрәтеү.

5-8 м алыҫлыҡҡа предметтарҙы көс менән һелтәү, 3-4 м алыҫлыҡтан горизонталь һәм вертикаль (1 м аралыҡтан) сәпкә ырғытыу.

Һикереү. Бер урындан ике аяҡлап 2-3 тапҡыр 30-40 см алға табан һикереү башҡарыу. Атлау менән сиратлап, төрлөсә һикереү (аяҡтарҙы ҡайсылап, алға табан

барып (3-4 метрға тиклем), аяҡтарҙы бергә ҡуйып, айырып ҡуйып, бер аяҡты алға, икенсеһен артҡа ҡуйып.

Бер урында һыңар аяҡлап һикереү (уң һәм һул аяҡта); алға табан хәрәкәтләнеп; торған урындан тура йүнәлештә алға табан бейеклеккә (15-20 см) һикереү; ҡабырға менән тороп 5-6 предмет аша һикереү.

20 см бейеклектәге йомшаҡ предмет өҫтөнә һикереп төшөү. 80 сантиметр оҙонлоҡҡа торған урындан һикереү. Йүгереп, оҙонлоҡҡа (100 см), бейеклеккә (30-40 см) һикереү. Һикергес аша уны ал яҡтан һәм арт яҡтан әйләндереп, һикереү.

Сафҡа теҙелеү күнегеүҙәре. Берәмләп колоннаға, шеренгаға, түңәрәккә теҙелеү. Колоннаға икешәрләп, өсәрләп атлап барғанда теҙелеү; колоннала елкәгә ҡарап, тигеҙләнеү. Колоннала алға ҡулдарҙы һуҙып, шеренгала – ҡулдарҙы йәйеп таралып тороу. Уңға, һулға, үҙ тирәләй әйләнеү.

Ритмик гимнастика. Таныш күнегеүҙәрҙе музыкаға тап килтереп башҡарыу. Музыка әҫәренең характерына ҡарап, күнегеүҙәр үтәү.

Дөйөм үҫеш күнегеүҙәре

Ҡул суҡтары һәм күкрәк мускулдарын үҫтереүгә күнегеүҙәр: Терһәктән бөгөлгән ҡулдар түш алдында, ошо тороштан ҡулдарҙы турайтып ситкә һуҙыу; ҡулдарҙы өҫкә күтәреү һәм устарҙы өҫкә табан асып, ситкә һуҙыу; ҡул суҡтарын бергә йоҙаҡ итеп йомоп, ҡул һырттарын бер-береһенә ҡаратып, уларҙы алға һуҙыу, өҫкә күтәреү. Ҡул суҡтарын өҫкә күтәреү һәм төшөрөү; ҡул бармаҡтарын йомоу, асыу һәм һелкетеү.

Умыртҡа һөйәге һығылмалығын һәм арҡа мускулдарын нығытыуға күнегеүҙәр.

Стенаға соңҡа, яурын, арҡа, ултырыш, үксәләр менән терәлеп тороп, ҡулдарҙы өҫкә күтәреү, аҫҡа төшөрөү. Гимнастика эскәмйәһенә терәлеп, ҡулдар менән бил тапҡырында рейкаға тотоноп, бер-бер артлы тура аяҡтарҙы күтәреү. Гимнастика эскәмйәһенә йөҙ менән ҡаршы тороп, ҡулдар менән бил тапҡырында рейкаға тотоноп, алға табан эйелеү. Устар менән иҙәнгә тейергә тырышып алға эйелеү; арҡа артында ҡул суҡтарын бергә йоҙаҡ итеп йомоп, алға эйелеү. Ҡулдарҙы түш алдына, баш артына ҡуйған тороштан ҡулдарҙы ситкә һуҙып, уңға, һулға боролоу. Арҡала ятып, аяҡтарҙы бер-бер артлы өҫкә күтәреү; башты һәм аяҡтарҙы күкрәккә тартыу; гимнастика эскәмйәһендә ҡулдарға таянып, кәүҙәне күтәреү.

Ҡорһаҡ һәм аяҡ мускулдарын нығытыуға күнегеүҙәр. Хәрәкәтле уйындар. Иҙәндән аяҡ остарын айырмайынса бер урында тапаныу. Ҡулдарҙы алға, өҫкә күтәреп, арҡа артына йәшереп, сүкәйеү. Аяҡтарҙы турайтып, алға һуҙыу. Ҡулдарҙы билгә ҡуйып (ситкә йәйеп, өҫкә күтәреп), аяҡтарҙы бер-бер артлы бер аҙым алға ҡуйып, сүкәйеү.

Аяҡ бармаҡтары ярҙамында предметтарҙы тотоп, өҫкә күтәреү һәм төшөрөү. Аяҡтарҙы бер-береһе аша ҡуйып, үксәләрҙә йөрөү; аяҡ остары менән иҙәндәге таяҡҡа йәки бауға баҫып йөрөү.

Спорт күнекмәләре.

Санала шыуыу. Санала шыуыу. Бер-береһен санала һөйрәп йөрөтөү, тауҙан парлашып шыуышып төшөү. Тауҙан шыуғанда боролоп шыуырға өйрәтеү.

Боҙ юлдан йүгереп барып шыуыу, сүкәйеп, ултырып, тороп шыуыу.

Саңғыла йөрөү. Аяҡтарҙы шыуҙырып саңғыла йөрөү. Бер урында һәм хәрәкәт ваҡытында төрлө яҡҡа әйләнеп шыуыу. Баҫҡыс яһап, тауға менеү, сүкәйә биреп, тауҙан шыуып төшөү.

1-2 км аралыҡты яй темпта саңғыла үтеү. Саңғы кейеп, төрлө уйындар уйнау «Ҡыуып ет!», «Слалом», «Кем тиҙерәк?».

Велосипедта, самокатта йөрөү. Үҙ-аллы ике тәгәрмәсле велосипедта тура юлдан, уңға, һулға боролоп йөрөү. Уң һәм һул аяҡтар менән этеп, самокатта йөрөү.

Йөҙөү. Һай ғына урында ултырған йәки ятҡан килеш ҡулдарға таянып, аяҡтар менән аҫҡа-өҫкә табан хәрәкәтләнеү. Арҡала һәм эскә ятып һыу өҫтөндә төрлө хәрәкәттәр башҡарыу. Һыу өҫтөндә тын алып, һыу аҫтында сығарыу. Үҙе теләгәнсә йөҙөү. Төрлө уйындар уйнау: «Фонтан», «Поезд тоннелдә», «Һыуҙы тот!».

Спорт уйындары: баскетбол, бадминтон, футбол, хоккей уйындарының ябай ғына уйын хәрәкәттәрен үҙләштереү.

Хәрәкәтле уйындар

Йүгереү менән: «Баҫтырыш», «Икәүләп йүгереү», «Ҡапҡан», «Беҙ күңелле балалар», «Төлкө һәм ҡаҙҙар», «Яңы иш тап», «Һабантуй», «Ярышып уҙыш», «Баҡсасылар», «Аҡ айыуҙар», «Саңғыла», «Ҡыҙыл танау», «Һыуыҡ», «Баҫтырыш», «Ҡар ташлашыу», «Етеҙ юртаҡтар егелгән саналар», «Санала уҙыш», «Ташбаҡа», «Буш урын», «Ҡаҙҙар - аҡҡоштар», «Хәйләкәр төлкө», «Ойоштороусылар», «Өсөнсө артыҡ», «Туҡта!», «Йылытҡыс», «Түңәрәк эсендә тотоу», «Тирмә», «Еҙ түмәр», «Мотоциклда ярыш».

Һикереү менән: «Иҙәндә тороп ҡалма!», «Кем яҡшыраҡ һикерер?», «Ҡармаҡ», «Мөйөштәр», «Синыфтар», «Һыңар аяҡта», «Йортһоҙ ҡуян», «Йүгереп ет тә – һикер!», «Кем әҙерәк һикерер?», «Һаҙлыҡтағы баҡалар», «Түмгәктән түмһәккә һикереү», «Соҡорҙа бүре».

Шыуышып: «Кем байраҡҡа тиҙерәк барып етер?», «Алабуға менән суртан», «Айыу һәм бал ҡорттары», «Ут һүндереүселәр өйрәнә», «Маймылдарҙы аулау», «Балыҡтар», «Эҙләүсе-күҙәтеүселәр», «Бүрәнә аша».

Ташлап тотоу: «Һунарсы һәм ҡуяндар», «Ҡоршауға индер!», «Тупҡа, сәпкә тей!», «Тик тормаған сәп», «Селтәр аша туп», «Шайбаны ҡапҡаға индер!», «Ҡар йомарлап ташлап тупҡа тей!», «Тупты тейҙер!», «Кем оҙағыраҡ?», «Һунарсы һәм өйрәктәр», «Кемдең командаһы күберәк?», «Тупты балдаҡҡа ташла!», «Тупты байраҡ аша ырғыт!», «Туп мәктәбе», «Ҡаласыҡтар», «Баскетбол», «Футбол».

Күңелле уйын: «Ептән ишелгән түңәрәк»,«Түңәрәк уйыны», «Ҡурай», «Гөлләмә».

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Хәрәкәттәрҙең төп төрҙәре

Атлау. Ғәҙәттәгесә атлау, аяҡ остарында ҡулдарҙы төрлө торошҡа ҡуйып, үксәләрҙә, аяҡ табандары ҡырында, тубыҡтарҙы юғары күтәреп, киң һәм ваҡ аҙымдар менән, аяҡтарҙы бер-береһе эргәһенә ҡуйып, алға, артҡа, үксәләрҙән аяҡ осона күсеп, сүкәйеп атлау.

Колоннала һәм шеренгала берәмләп, икәүләп, өсәүләп, дүртәүләп атлау. Төрлө йүнәлештә йөрөү: түңәрәк буйлап, тура йүнәлештә, боролоп, борма юлдан, таралышып.

Башҡа күнегеү төрҙәрен башҡарып атлау.

Тигеҙлек һаҡлап, күнекмәләр башҡарыу. Гимнастика эскәмйәһе буйлап ҡырын тороп, аяҡтарҙы бер-береһе эргәһенә ҡуйып атлау; ҡом тултырған тоҡсайҙы арҡаға һалып; бер аяҡты эскәмйә ситенән алға һуҙып баҫып, икенсе аяҡта сүкәйеп ултырып; тура аяҡты алға күтәреп, аяҡ аҫтында ҡулдар менән сәпәкәйләп атлау; эскәмйә уртаһында туҡтап, таяҡ (арҡан) аша атлау; сүкәйеп һәм кире яҡҡа әйләнеп, таҫма аша һикереп атлау.

Тар эскәмйә буйлап, 1,5-3 см диаметрлы арҡан буйлап алға йөҙ менән һәм ҡырын тороп атлау. Күҙҙәрҙе йомоп, туҡтап һәм төрлө хәрәкәттәр башҡарып, үҙ тирәләй әйләнеп атлау.

Йүгереү. Ғәҙәттәгесә йүгереү, аяҡ остарында, тубыҡтарҙы юғары күтәреп, аяҡтарҙы артҡа ныҡ итеп бөгөп, тура аяҡтарҙы алға һуҙып ташлап, ваҡ һәм киң аҙымдар менән. Төрлө тороштан һәм йүнәлештә, ҡаршылыҡтар аша, колоннала берәмләп, парлашып йүгереү.

Һикергес, туп менән; таҡта, бүрәнә буйлап; атлау, һикереү менән сиратлап; темпты үҙгәртеп йүгереү.

2-3 минут эсендә туҡтамай йүгереү. 80-120 метр алыҫлыҡҡа урта тиҙлектә 2-4 тапҡыр сиратлап атлау һәм йүгереү. Бер-бер артлы 10 метр аралыҡты 3-5 тапҡыр йүгереп үтеү.

Тиҙлеккә йүгереү: 30 метр аралыҡты 7,5 - 6,5 секунд эсендә (йыл аҙағында).

Имгәкләү, шыуышыу, үрмәләү. Дүртаяҡлап гимнастика эскәмйәһе, бүрәнә буйлап шыуышыу; ҡулдар менән алға тартылып, аяҡтар ярҙамында этеп, гимнастика эскәмйәһе буйлап эстә һәм арҡала шыуышыу.

Төрлөсә ҡоршау аҫтынан үтеү; 35-50 см бейеклектәге дуға һәм гимнастика эскәмйәһе аҫтынан төрлө ысулдар менән үтеү (шыуышып, имгәкләп, сүкәйеп, дүртаяҡлап).

Гимнастика баҫҡысынан темпты үҙгәртеп, ҡул-аяҡ хәрәкәттәрен тап килтереп, эскәмйәнең арҡыры ағастарына төрлөсә тотоноп һәм баҫып, өҫкә-аҫҡа үрмәләү.

Һикереү. Ике аяҡта һикереү: бер урында (төрлөсә) 30 см һикереште 3-4 тапҡыр атлау менән сиратлап; ҡапма-ҡаршы яҡҡа әйләнеп, алға 5-6 метрға хәрәкәтләнеп барып, аяҡтар араһында ҡом тултырылған тоҡсайҙы ҡыҫып тотоп.

6-8 тултырылған туптарҙы бер артлы һикереп үтеү; һыңар аяҡта һыҙыҡ аша, бау аша алға – артҡа; уңға – һулға; бер урында һәм алға табан хәрәкәтләнеп һикереү.

Сүкәйеп ултырған килеш бейеклеккә һикереү, 40 см бейеклеккә йүгереп, йомшаҡ урынға һикереү.

40 см бейеклектән аҫҡа табан; торған урындан алыҫлыҡҡа (яҡынса 100 см); йүгереп алыҫлыҡҡа (180-190 см), торған ерҙән юғарыға; бала ҡулынан 25-20 см бейеклектә ҡуйылған предметты алыу өсөн; йүгереп һикереү.

Ҡыҫҡа һикергестән төрлө ысул менән (ике аяҡлап, бер-бер артлы аяҡтарҙы сиратлап), оҙон һикергес аша берәмләп, парлашып һикереү. Ҙур ҡоршау аша һикереү (һикергес һымаҡ әйләндереп).

Эскәмйәлә торған килеш ике аяҡлап һикерә-һикерә алға табан барыу. Ауыш ерҙән ике аяҡта һикереп алға барыу.

Этәреү, ташлау, ырғытыу, һелтәү. Бер-береһенә тупты аҫтан, баш артынан (3-4 метрҙан), аяҡтарҙы бөкләп ултырған килеш ташлау; сетка (селтәр) аша тупты ташлау. Тупты өҫкә ташлап, ергә һуғып, ике ҡуллап тотоу (20 тапҡыр), бер ҡул менән (20 тапҡыр), ҡулдарҙы сәпәкәйләп, уңға, һулға боролоп, ташлау.

Тупты уң, һул ҡул менән ергә һуғыу. Тупты бер урында һәм хәрәкәттә төрлө йүнәлештә ергә һуғып йөрөү.

Тултырылған туптарҙы бер-береһенә ташлап тотоу.

Алыҫлыҡҡа (6-12 м) уң һәм һул менән ташлау. Сәпкә төрлө тороштан ырғытыу (тороп, тубыҡҡа тороп, ултырып), 4-5 м алыҫлыҡтан горизонталь һәм вертикаль урынлашҡан сәпкә ташлау. Хәрәкәтләнгән сәпкә ташлау.

Теҙелеүгә күнегеүҙәр. Үҙ-аллы колоннаға, түңәрәккә, шеренгаға теҙелеү. Колоннала берәмләп атлап барған рәүештән икешәрләп, өсәрләп, дүртәрләп теҙелә белергә өйрәтеү; бер түңәрәктән 2-3 түңәрәккә теҙелеү. Рәттә беренсегә, икенсегә һанашып, ике рәткә төҙөлә белеү.

Колоннала, шеренгала, түңәрәктә тигеҙләнеү, аяҡтарҙы бер-береһе эргәһенә яҡын ҡуйып, яҡынайыу һәм ситкә таралыу.

Уңға, һулға, үҙ-тирәләй әйләнеү.

Ритмик гимнастика. Физик күнекмәләрҙе матур хәрәкәттәр менән музыка характерына тап килтереп башҡарыу.

Дөйөм үҫеш күнегеүҙәре

Ҡул суҡтары һәм күкрәк мускулдарын үҫтереүгә күнегеүҙәр: Ҡулдарҙы өҫкә, аҫҡа, алға, ситкә күтәреү, аяҡ остарына тороп (төп торош – үксәләр бергә, аяҡ остары – айырым); үксәгә кире баҫып, арҡа менән стенаға һөйәлеп. Ҡулдарҙы яурынға ҡуйып, өҫкә күтәреү.

Яурындарҙы күтәреү һәм төшөрөү. Ҡулдарҙы терһәктән бөгөп, алға һуҙып, тиҙ темпта турайтыу (ҡул суҡтары йомолған); ҡулдарҙы алға һәм ситкә һуҙыу; терһәктәрҙе көс менән тиҙ-тиҙ артҡа 2-3 тапҡыр этеү (ҡулдар күкрәк алдында терһәктән бөгөлгән); ҡулдарҙы терһәктән бөкләп, ҡул суҡтарын яурынға терәп, үҙ тирәләй әйләндереү (алға, кире).

Бер ҡул менән ҡоршауҙы терһәк эргәһендә әйләндереү, ҡул суҡтары ярҙамында әйләндереү.

Ҡул бармаҡтарын йомоу, асыу, бер-бер артлы бөтә бармаҡтарҙы ла баш бармаҡҡа тейгеҙеү.

Умыртҡа һөйәге һығылмалылығын һәм арҡа мускулдарын нығытыуға күнегеүҙәр. Башты ситкә бороу, түшкә төшөрөү. Ҡулдарҙы баш артына ҡуйып, уларҙы өҫкә, ситкә һуҙып, алға эйелеү. Ултырып, (аяҡ остарын тартып) аяҡтарҙы күтәреү һәм бер аҙ шул килеш тотоп тороу. Эскәмйәлә ултырған килеш, ҡулдар менән арт яҡтан эскәмйәгә тотоноп, тура һуҙылған аяҡтарҙы алда эскәмйә аша уңға-һулға йөрөтөү.

Арҡаға ятҡан тороштан аяҡтарҙы бергә ҡуйып, ултырыу һәм яңынан ятыу. Ҡорһаҡта ятып, артҡа табан бөгөлөү.

Арҡала ятҡан торoштан ике аяҡты ла бергә күтәреп, баш артында ятҡан предметҡа тейгеҙеү.

Бер аяҡта сүкәйеп ултырып, ҡулдар менән иҙәнгә таянып, икенсе аяҡты артҡа тура итеп һуҙырға һәм аяҡ осон иҙәнгә терәргә.

Торған килеш тубыҡтан бөкләнгән аяҡтарҙы бер-бер артлы турайтып алға күтәреү (ҡул менән стенаға таянып).

Ҡорһаҡ һәм аяҡ мускулдарын ныҒытыуға күнегеүҙәр. Хәрәкәтле уйындар.

Аяҡтарҙы бер-бер артлы алға һуҙып, аяҡ остарына ҡуйыу. Ҡулдарҙы баш артына ҡуйып, сүкәйеү һәм тороу. Аяҡтарҙы бер-береһенән ситкәрәк ҡуйған торoштан сүкәйеү, кире күтәрелмәйенсә кәүҙәне бер аяҡтан икенсеһенә күсереү. Аяҡтарҙы бер-бер артлы алға табан һәм ҡабырғалай ситкә ҡуйып, сүкәйеү. Аяҡтарҙы бер-бер артлы алға тура һуҙып, ҡул устарына тейеү. Стенаға тотоноп, тура аяҡтарҙы алға, артҡа һелтәү.

Аяҡ табандары ярҙамында иҙәндә таяҡты тәгәрәтеү.

Эскәмйәлә тигеҙлек һаҡлап тороу: аяҡ остарында; һыңар аяҡта; күҙҙәрҙе йомоп; 3 кг ауырлығындағы тултырылған туп өҫтөндә.

Спорт күнекмәләре

Санала шыуыу. Шыуып төшкән ваҡытта алдан әҙерләп ҡуйылған предметты күтәреү (кегля, ҡар туп, байраҡ).

Төрлө уйын хәрәкәттәре башҡарып шыуыу: ҡапҡа аша шыуып үтеү; ҡар йомороһо менән сәпкә ташлау; шыуыу барышында кирегә боролоп;

Төрлө эстафеталарҙа ҡатнашыу.

Боҙ юлдан йүгереп барып аяҡ өҫтө (сүкәйеп, бер аяҡта, боролоп) шыуыу; бейек булмаған тауҙан шыуып төшөү.

Саңғыла йөрөү. Ҡулдарҙы арҡаға ҡуйып, саңғылы аяҡтарҙы бер-бер артлы шыуҙырып, саңғы юлынан барыу. Таяҡтарға таянып саңғыла йөрөү. 600 метр аралыҡты урта тиҙлектә, 2-3 км аралыҡты яй темпта саңғыла үтеү.

Шыуған ваҡытта саңғыларҙы бер-береһе эргәһенә ҡуйып, боролоу. «Баҫҡыс», «шыршы» яһап, тауға менеү. Тауҙан кәүҙәне алға эйеңкерәп тотоп һәм сүкәйеп шыуып төшөү һәм саңғының тиҙлеген кәметә һәм туҡтата белеү. Саңғыла йөрөп, төрлө уйындар уйнау.

Конькилә шыуыу. Коньки ботинкаһын үҙ-аллы кейергә өйрәнеү. Ҡарҙа, боҙҙа тигеҙлек һаҡлап, тора белеү. Шыуыу өсөн дөрөҫ кәүҙә торошон тотоу – аяҡтарҙы аҙ ғына бөгөп, кәүҙәне алға табан эйә биреп, башты төҙ тотоп алға ҡарау.

Ошо торошта бәүелгән хәрәкәттәр башҡарыу. Йүгереп, ике аяҡта шыуыу, уңға, һулға боролоу, туҡталыу. Бер-бер артлы уң, һул аяҡты этеп, шыуыу. Тура йүнәлештә, түңәрәктә дөрөҫ торош һаҡлап, шыуырға өйрәнеү.

Конькилә хәрәкәтле уйындар уйнау.

Велосипедта йөрөү. Ике тәгәрмәсле велосипедта, самокатта тура йүнәлештә, түңәрәк буйлап йөрөү, туҡтатып, төшә белеү. Хәрәкәтле уйындар уйнау.

Йөҙөү. Тын алыу һәм һыу аҫтында тын сығарыу (3-10 тапҡыр). Баштан ашҡансы һыу эсенә инеү һәм күҙҙәрҙе асыу. Аяҡтар менән этеп, арҡаға һәм эскә ятып, өҫкә һәм аҫҡа табан һыу эсендә шыуыу. Һыу эсендә ҡулдарҙа йөрөү. Һауа тултырылған түңәрәк йәки уйынсыҡ менән йөҙөү, йөҙөү хәрәкәттәрен башҡарыу. Ололар

ярҙамынан башҡа йөҙөргә тырышыу. 10-15 м аралыҡты үҙаллы төрлө ысул менән йөҙөп үтеү. Һыу эсендә хәрәкәтле уйындар уйнау.

Спорт уйындары менән таныштырыу

Бура һуғыу. Уйын ҡағиҙәләре менән таныштырыу һәм ябай ғына ҡоролмалар төҙөп уйнарға өйрәтеү.

Баскетбол. Бер-береһенә тупты ташлап биреү (түштән - ике ҡуллап, яурындан – бер ҡул менән). Хәрәкәт ваҡытында ике ҡуллап түштән тупты ташлау һәм тотоу (түш алдында, баш өҫтөндә, янбаш ҡырынан, арттан, иҙәндән).

Тупты кәрзингә ике ҡуллап баш артынан, яурындан ташлау.

Бер ҡул менән, ҡулдарҙы сиратлап, тупты иҙәнгә һуғып, төрлөсә хәрәкәтләнеү.

Сигнал буйынса туҡтау һәм хәрәкәтләнеү. Уйын ҡағиҙәләрен үҙләштереү.

Футбол. Уң, һул аяҡ менән тупты бер-бер артлы тибеп, торған урындан икенсе балаға биреү. Төрлөсә ҡуйылған предметтар араһынан тупты бормалы юлдан аяҡтар менән тибеп йөрөтөү. Ҡапҡаға туп тибеп индереү.

Хоккей конькиһендә ҡарҙа, үләндә шыуыу. Сәкән менән шайбаны, тупты бер-береһенә ташлап биреү. Шайбаны, тупты туҡтатыу, предметтар араһынан алып йөрөү, ҡапҡаға индереү (сәкәнде ике ҡуллап, бер ҡул менән тотоп, уңдан, һулдан).

Бадминтон. Ракетканы дөрөҫ тотоу. Воланды (тупты) селтәр аша, селтәрһеҙ иптәшенә һуғып осороп ебәреү, үҙенә ташланған воланды кире һуғыу. Майҙансыҡта иркен уйнау.

Өҫтәл теннисы. Ракетканы дөрөҫ тотоу. Ракетка менән теннис тубын иҙәнгә, стенаға һуғыу. Туп өҫтәлгә төшөп, бәрелеп, кире күтәрелгәс, селтәр (сетка) аша һуғыу.

Хәрәкәтле уйындар

Йүгереү менән: «Тупты уйынды алып барыусыға», «Ҡаршылыҡтар аша йүгереү!», «Ҡайһы төркөм тиҙерәк йыйылыр?», «Беҙ күңелле балалар!», «Энә, еп, төйөн», «Һәпәләк», «Футбол», «Баҫтырыш», «Тоҡ эсендә йүгереү», «Парлашып йүгереү», «Светофор», «Өсөнсө артыҡ!», «Тирмә», «Ике ҡыш бабай», «Үҙеңдең ишеңде ҡыуып ет!», «Бер саңғыла йүгереү», «Тыныс барһаң, алыҫыраҡ китерһең!», «Хоккей», «Төньяҡ боландары», «Аҡ айыуҙар», «Беренсе бул!», «Шайбаны ырғыт!», «Ҡармаҡтар», «Ҡарсыға һәм себеш баҫҡан тауыҡ», «Аҡ тирәк, күк тирәк», «Кемдәр яулыҡ күберәк йыйыр?», «Алдан теҙел!», «Икешәрләп эстафетаға!».

Һикереп: «Тәлмәрйен һәм торна», «Бүре ояһында», «Кем әҙерәк һикерер?», «Һыңар аяҡта бер юлдан», «Кем һикерә?», «Тотолма!», «Туп баҫтырыусы пингвин», «Һыңар аяҡ менән кем арыраҡ?», «Ҡыуып ет тә һикер!», «Кем тиҙерәк?», «Һыңар аяҡта һикереү», «Ҡоршау аша байраҡҡа», «Минең арттан ҡабатла!»

Ырғытып: «Кемдең исемен әйтәбеҙ - шул тота!», «Туҡта!», «Һунарсы һәм өйрәктәр», «Тик тормаған сәп», «Туп өсөн көрәш», «Туптар көрәше», «Биш тапҡыр ташла!», «Ҡайһы команда күберәк?», «Ҡарҙан яһалған тир», «Ҡар менән баҫтырыш», «Ҡолата һуҡ!», «Кем сосораҡ?», «Ҡоршаҡҡа тейҙер!», «Горизонталь сәп», «Кәрзингә төшөр!», «Ҡапҡаға индер!».

Шыуышып: «Ҡоштар ҡайтыуы», «Айыу һәм бал ҡорттары», «Ут һүндереүселәр һәм уларҙан өйрәнеүселәр», «Ҡыйыу гимнастар», «Ташбаҡа», «Ҡаршылыҡтар һыҙығы», «Маймылдарҙы тотоу», «Урмандағы тейендәр», «Айыу балалары».

Күңелле уйын: «Бына ниндәй мөғжизә!», «Беҙҙең ҡапҡа кеүек ҡапҡа янында», «Ситән»,«Йәшерәм яулыҡ», «Тауыштан таны!».

Халыҡ уйындары: «Энә менән еп», «Бесәй һәм сысҡан», «Йылым», «Себештәр һәм ҡарауылсы», «Беҙ күңелле балалар», «Ҡатырғыс», «Өйһөҙ ҡуян», «Хәйләкәр төлкө», «Буяу һатыу», «Табип һәм йылан», «Еҙ бүкән», «Аҡ тирәк, күк тирәк», «Борсаҡ», «Баҫтырыш».

Программаның эстәлеге буйынса нәшер ителгән методик ҡулланмалар, әсбаптар исемлеге

Аҙнабаева Ф. Г. Хеҙмәт - тормош сығанағы. Өфө: БМҮИ, 2007.

Аҙнабаева Ф. Г., Әминева Р. И., Йыһангирова Г. М., Йылҡыбаева Г. Р., Нарынбаева А. З., Харисова М. Р.Гөлбостан. Методик ҡулланма (беренсе кескәйҙәр төркөмө өсөн телмәр үҫтереү дәрестәре). Сибай, 2006.

Аҙнабаева Ф. Г., Әминева Р. И., Йыһангирова Г. М., Йылҡыбаева Г. Р., Нарынбаева А. З., Харисова М. Р. Гөлбостан. Методик ҡулланма (икенсе кескәйҙәр төркөмө өсөн телмәр үҫтереү дәрестәре). Сибай, 2006.

Аҙнабаева Ф. Г., Әминева Р. И., Йыһангирова Г. М., Йылҡыбаева Г. Р., Нарынбаева А. З., Харисова М. Р.Гөлбостан. Методик ҡулланма (уртансы төркөм өсөн телмәр үҫтереү дәрестәре). Өфө: БМҮИ, 2006.

Аҙнабаева Ф. Г., Әминева Р. И., Йыһангирова Г. М., Йылҡыбаева Г. Р., Нарынбаева А. З., Харисова М. Р. Гөлбостан. Методик ҡулланма (өлкән һәм мәктәпкәсә әҙерлек төркөмдәре өсөн телмәр үҫтереү дәрестәре). Сибай, 2008.

Аҙнабаева Ф. Г., Ҡаһарманова Ф. Ф. Кескәйҙәрҙе тәрбиәләүҙә этномузей. Методик ҡулланма. Өфө: БМҮИ, 2006.

Аҙнабаева Ф. Г., Нафиҡова З. Ғ. Тылсымлы өндәр. Өфө: БМҮИ, 2004.

Аҙнабаева Ф. Г., Шафиҡова Г. Р. Салауат Юлаев образы кескәйҙәр өсөн. Мәктәпкәсә йәштәге өлкән төркөм балаларына граждандыҡ-патриотик тәрбиә биреү программаһы (ике телдә). Өфө: БМҮИ, 2005.

Аҙнабаева Ф. Г, Шафиҡова Г. Р., Йыһангирова Г. М. Мин — шәхес. Өфө: Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының республика уҡыу- ғилми методик үҙәге, 2008.

Йәғәфәрова А. Ш., Юлмөхәмәтов М. Б. Йәйғор: балалар баҡсаһы өсөн хрестоматия (ике томда). Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1995, 2006.

Нафиҡова З. Ғ. Балалар баҡсаһында математика. Методик ҡулланма. Өфө: Китап, 2014.

Нафиҡова З. Ғ. Уйнай-уйнай үҫәбеҙ. Методик ҡулланма. Өфө: Китап, 2010.

Нафиҡова З. Ғ., Баймырҙина А. Ғ. Тыуған яҡ моңдары. Башҡорт балалар баҡсаһында мәктәпкәсә йәштәге балаларға музыкаль тәрбиә биреү буйынса программа. Сибай: БДУ нәшер итеү үҙәге, 2006.

Нафиҡова З.Ғ., Денисова З.М. Хәрәкәттә - бәрәкәт. Методик ҡулланма. Сибай: Башҡорт дәүләт университетының нәшер итеү үҙәге, 2000.

Нафиҡова З. Ғ. Һаумы, мәктәп! Здравствуй, школа! Кескәйҙәрҙе мәктәпкә әҙерләүгә күнегеүҙәр, эш төрҙәре, тестар һәм мәктәп һайлауға ҡайһы бер кәңәштәр. Өфө: Китап, 2014.

Нафикова З. Г. Афарин. Методическое пособие: критерии усвоения детьми башкирского языка в ДОУ и виды работ для их определения (на двух языках). Республиканский учебно-научный методический центр МӨ РБ, 2007, рисунки.

Нафикова З. Г., Березина А. Г. Башкирские календарные обрядовые праздники - детям. Методическое пособие на двух языках. Уфа: БИРО, 2009.

Нафикова З. Г., Валеева Ф. Ф. Наглядно-дидактическое пособие «Афарин» по развитию речи и диагностике речевого развития детей (на башк. и русск. языках). Уфа: ООО УМЦ «Эдвис», изд. «Башкортостан», 2008, 24 иллюстраций, 52 стр.

Нафикова З. Г., Гареева Н. А. Умные игрушки. Методическое пособие по изготовлению и использованию многофункциональных дидактических игрушек (на русском языке). Сибай: Редакционно-издательский центр Башкирского государственного университета, 2006.

Нафикова З. Г., Денисова З. М. Хәрәкәттә - бәрәкәт. В движении - сила. Методическое пособие по использованию башкирских народных подвижных игр на занятиях физвоспитания в ДОУ (на башкирском и русском языках). - 2-ое изд., дополненное. Уфа: Ред.-изд. отдел РУНМЦ МО РБ, 2006.

Раҡаева Ә. С. Уйнайыҡ уйлап ҡына (мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн). Өфө: Китап, 2008.

Сөләймәнов Ә. М. Бала-сағаның уйын фольклоры. Өфө: Китап, 2007.

Сәлимов Н. Б. Ҡояш -ҡошмы? Шиғырҙар. Өфө: Китап, 2006.

Әбуталипова Р. Ә. Мин үҫәм! Шиғырҙар, йомаҡтар, әкиәттәр, хикәйәләр. Өфө: Китап, 2006.

Әбуталипова Р. Ә., Әмирханова Г. И., Юлмөхәмәтов М. Б. Ләйсән: балалар баҡсаһында башҡорт телеп өйрәтеү дәреслеге. Өфө: Китап, 2002.

Методическое пособие по художественно-творческой деятельности дошкольников от 2 до 7 лет «Ильгам», Ф.Г.Азнабаева, Сибай, 1999г;

Программа обучения русской разговорной речи в башкирских дошкольных образовательных учреждениях, Ф.Г. Азнабаевой, Р.Г., Давлетбаевой, Уфа, 2002г;

Заманса педагогик советтар. Ф.Ғ. Аҙнабаева һ.б. - Өфө, БИРО, 2005.

Кескәйҙәрҙе тәрбиәләүҙә этномузей, Ф.Г. Аҙнабаева, Ф.Ф. Ҡаһарманова, - Өфө. БИРО, 2006.

Балалар баҡсаһында диагностика. Ф.Г. Аҙнабаева, Я.С. Кәримова, Т.Х. Таңғатарова, Сибай, 2007. (балалар баҡсаһы тәжрибәһенән).

«Илһам». Ф.Г. Аҙнабаева , Р.И. Әминева , Р.М. Аметова , А.З. Нарынбаева, Г.Р. Йылҡыбаева , Методик ҡулланма. - Уфа, 2-ое изд.,«Китап», 2008.

Балалар баҡсаһында театр эшмәкәрлеге. Ф.Г. Аҙнабаева, Г.М. Йыһанурова. - Өфө, БИРО, 2008.

Аҙнабаева Ф.Ғ. Хыялдағын-һүрәткә. Методик ҡулланма. - Өфө, «Китап», 2009.

Аҙнабаева Ф.Ғ. Хеҙмәт – тормош сығанағы. - Өфө. 2-ое изд. «Китап», 2010.

Аҙнабаева Ф.Ғ., Шафиҡова Г.Р. Тәбиғәт һәм кеше.- Өфө: Китап, 2012.

Азнабаева Ф.Г. и др. Русский язык в национальном дошкольном образовательном учреждении. Методическое пособие. - Уфа : Китап, 2010.

Русский язык в национальном дошкольном образовательном учреждении. Рабочая тетрадь, Ф.Г. Азнабаева, М.И. Фаизова, З.А. Агзамова, Уфа: Китап, 2012.

Дидактический материал по русской разговорной речи. - Уфа :Китап, 2010.

Азнабаева Ф.Г., Гасанова Р.Х., Хисматуллина Р.Р. Картинный словарь русского языка. - Уфа :Китап, 2010.

Аҙнабаева Ф.Ғ. һ.б. Уйындан - үçешкә. – Өфө: Китап, 2010.

Нафиҡова З.Ғ., Аҙнабаева Ф.Ғ. Осҡон: төрлө милләт балалары тәрбиәләнгән балалар баҡсаһында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеү буйынса программа-күрһәтмә һәм яҡынса дәрес өлгөләре. – Өфө: Китап, 2010.

Нафиҡова З.Ғ., Рәхмәтуллина Ф.З. Матур һөйләшәм: телмәрендә тел кәмселектәре булған балаларҙы өндәрҙе дөрөç әйтергә өйрәтеүгә дәрестәр өлгөһө. Методик ҡулланма. – Өфө: БР МҮИ нәшриәте. 2012.

Нафиҡова З.Ғ., Рәхмәтуллина Ф.З. Фонематика: бер йәштән өс йәшкә тиклемге балаларҙы өндәрҙе ишетергә һәм дөрөç әйтергә өйрәтеү. Методик ҡулланма. – Өфө: БР МҮИ нәшриәте. 2011.

Нафикова З.Г., Березина А.Г. Этноэкологические наблюдения природы на основе башкирских народных примет (картотечное планирование): Методическое пособие. – Изд. 2-ое, дополн. – Өфа: издательство ИРО РБ, 2017.

Ғөбәйҙуллина Ф.Х. Башҡортомдан батыр юҡ икән: шиғырҙар, хикәйәләр, әкиәттәр. – Өфө: Китап, 2007.

Парциаль программалар

Парциальная программа обучения русской разговорной речи

Объяснительная записка.

Обучение дошкольников башкирской национальности русскому языку - дело большой государственной важности. Дошкольную подготовку детей по русскому языку необходимо строить на основе четкой методической системы с учетом возрастных особенностей детей 4-6 лет и с опорой на родной язык.

Основной формой обучения являются занятия, которые прово дятся 2 раза в неделю. Чтобы добиться более эффективного обучения русскому языку, возрастные группы не должны превышать 12- 15 человек. Продолжительность занятий в старшей группе – 20-25, в подготовительной -30-35 минут.

Цель обучения русскому языку в башкирских детских садах- развитие разговорной речи детей в единстве с развитием их мышления и формированием дошкольника как личности.

Задачи обучения дошкольников русскому языку:

- формирование правильного произношения всех звуков и звукосочетаний в составе слова, произносительных и интонационных навыков речи;
- обеспечение лексическим объемом через соответствующие игровые ситуации;
- ознакомление детей с грамматическими формами, предназначенными для данного этапа обучения русских слов;
- научение конструированию и употреблению определенных предложений - речевых образцов с соответствующей нормам устной русской речи интонацией, соблюдением пауз, логического ударения;
- привитие умения связно излагать свои мысли в диалогической и монологической форме на базе усвоенной лексики;
- воспитание коммуникативной и лингвокультурологической личности;
- воспитание гражданских качеств;
- развитие познавательных интересов и языковых способностей, внимания, воображения, речевой реакции, наблюдательности относительно языковых явлений.

В период обучения устной форме общения, дети получают первоначальное представление о различных формах реального и условного общения человека с миром природы и вещей, уясняют значение жестов, мимики, выразительных движений в общении, уместность их использования в процессе общения.

Указанные в программе задачи выполняются при следующем **содержании** обучения;

- овладение конкретным языковым материалом (словами, необходимыми для элементарного общения);
- произношение слов в соответствии со звуковой действительностью русского языка, обращая внимание на звуки, представляющие трудность для детей-башкир;
- усвоение необходимых форм категорий русского языка: род, число и падеж имен существительных и прилагательных, времени и лица глаголов, значение предлогов;
- активизация в речи слов, отражающих национальные особенности культуры и

быта русского и башкирского народов.

Программа составлена с опорой на методические *принципы:*

- коммуникативная направленность: обучение аудированию и говорению;
- расположение лексического материала по тематическому принципу;
- системный подход к практическому овладению фонетическим, лексическим, семантическим, стилистическим уровнями языка;
- учет положительного и отрицательного влияния родного языка, последовательная отработка трудных для произношения звуков и звуковых различий в словах, которых нет в родном языке;
- соединение обучения, развития и воспитания в единый процесс.

Развитие устной речи

При обучении русскому языку детей-дошкольников используются два вида речевой деятельности: аудирование (слушание с пониманием) и говорение. Связь между ними устанавливается путем подбора разнообразных упражнений с учетом речевых возможностей и интересов детей данной возрастной группы.

Обучение аудированию (слушанию с пониманием) предполагает выработку навыков восприятия на слух (с опорой на наглядность) содержания небольших связных высказываний монологического, диалогического характера. В процессе аудирования дошкольники знакомятся с элементами образцовой звучащей речи.

Программа определяет содержание обучения аудированию, в процессе которого включаются образцы русской речи разных жанров -рассказов, сказок, стихов, загадок, считалок и т. п. Материал для аудирования озвучивается с голоса воспитателя, магнитофонной записи (в чтении мужского, женского, детского голоса).

Понимание текста детьми выясняется постановкой вопросов к нему.

Обучение говорению осуществляется одновременно с аудированием. Задача обучения говорению - привитие дошкольникам первоначальных навыков устной диалогической и монологической речи на основе воспринимаемых на слух образцовых текстов воспитателя.

В процессе обучения аудированию и говорению обращается особое внимание:

- на формирование звуковой культуры речи, т. е. приучение детей к восприятию звуковой стороны слышимой речи (своей и чужой), развитие слуховой памяти и адаптирование речевого аппарата к особенностям русского языка;
- на выработку общих речевых навыков с соблюдением темпа и ритма речи;
- на правильное произношение русских гласных звуков [а], [о], |у| [ы] и согласных звуков [ч’], [щ’], [ц] и на произношение слов сложных по своей звуковой структуре в соответствии с орфоэпическими нормами.

При работе **над словом** уточняется, обогащается и активизируется словарь детей. В программе предусматривается последовательность ввода слов: слов, обозначающих предметы, признаки по качеству, действий, признаков по действию, предлогов со значением места и направления и т. д.; проводится работа по приведению слов в **грамматически** верное сочетание с другими словами и ознакомлению со фразовыми средствами связи при составлении текстов.

При обучении детей-башкир русской разговорной речи необходимо опираться

на родной язык в процессе объяснения речевых ситуаций, постановки органов речи при произношении звуков, звукосочетаний, слов, при предупреждении и преодолении интерферирующего (отрицательного) влияния родного языка, при переводе некоторых трудных слов. Однако нужно постепенно ограничивать говорение на родном языке и пользоваться им в исключительных случаях.

В старшей группе предусматривается усвоение детьми примерно 400 - 450 слов, в подготовительной к школе группе - 450-500 слов.

В процессе работы над предложением и связной устной речью вырабатываются речевые умения: отвечать на вопрос воспитателя; составлять предложения при пересказе знакомых сказок, рассказов; придумывать элементарные тексты к сюжетным картинкам и иллюстрациям; случаям из жизни самих детей; пересказать стихи, считалки с соблюдением русской интонации.

Структура программы

Программа для изучения русского языка детьми старшего дошкольного возраста рассчитана на 72 часа в каждой возрастной группе. Содержание программы состоит из 4-х блоков: “Природа и мы”, “Я познаю себя”, “Солнечная система”, “Человек и земля”. Блоки распадаются на темы, темы - на подтемы.

Особое место в программе уделяется национально-региональному содержанию обучения: знакомство с государственными символами Башкортостана и России, культурой русского и башкирского народов и т. д.

В приложении к программе дан перечень слов для активного усвоения.

Требования к умениям и навыкам дошкольника-выпускника

Выпускник научится:

1) произносить все звуки русского язык как изолированно, так и в составе слов;
2) применять около 900 слов в практической речи;
3) строить фразы и предложения с правильной интонацией и ударением;
4) различать род, число, падежи, предлоги ***в, на, с, к, над, под, за, из-за, из-под, между, около;*** уметь употреблять местоимение ***он, она, они;*** применять глаголы настоящего и будущего времени по лицам, прошедшего-по родам и числам; употреблять формы родительного и винительного падежей существительных; согласовывать прилагательные с существительными в роде и числе; согласовывать числительные с существительными; правильно употреблять числительные; выражать принадлежность к определенному лицу, давая утвердительные и отрицательные ответы;
5) понимать русскую речь, давать элементарное описание предмета (явления, ситуации), указывая на существенные признаки;
6) рассказывать о себе, о семье, о друзьях, об играх и игрушках, о животных, о своей деятельности, о знакомых литературных произведениях;
7) знать культуру русского и башкирского народов через знакомство с безэквивалентными словами;
8) знать национальные символы Республики Башкортостан и Российской Федерации.

ПРОГРАММА

Старшая группа *(72 часа)*

Формирование первоначальных умений и навыков русской разговорной речи начинается в старшей группе.

Слова и типовые предложения даются по следующим лексическим темам с учетом возрастных особенностей детей старший группы, их интересов и возможностей.

1 блок ПРИРОДА И МЫ *(22 часа)*

I. Растительный мир *(5 часов)*

1. Овощи. Наш огород.
2. Фрукты. В саду.
3. Цветы.
4. Деревья.
5. Царство растений (обобщающее занятие).

Слова: огород, овощи, огурец, помидор, морковь, сад, фрукты, яблоня(-и), яблоко(-и), груша(-и), слива(-ы), ягоды, вишня, малина, цветы, ромашка, роза, мак, ирис, лес, береза, осина, дерево(-ья), ель, иголки, лист(-ья), зеленый(-ые), красивый(-ые), красный(-ые), белый (-ые), желтый(-ая), расти(-ет, -ут), собирать(-ет, -ют), это, что, какой.

Грамматические формы и типы предложений

Это огород (овощи, огурец, помидор).

Вот сад (яблоня, груша, вишня).

Красная роза (красивый ирис).

Белая береза (зеленая ель).

Растет белая ромашка.

Связная речь

- Это что? - Это цветы.
- Цветы какие? - Цветы красивые.

Пассивные слова: кустарник, смородина, лилия, елка, грядки кудрявый(-ая, -ые).

II. Животный мир *(7 часов)*

1. Домашние животные.
2. Дикие животные.
3. Домашние птицы.
4. Дикие птицы.
5. Рыбы.
6. Насекомые.
7. В мире животных.

Слова: двор, корова, теленок, собака, кошка, котенок, домашнее животное(-ые), лиса, заяц, волк, медведь, дикий(-ие), курица, петух, гусь(-и), утка, цыплята, воробей, ворона, грач, скворец, голубь, щука, карась, рыбы, акула, жук, бабочка, муравей, кузнечик, пчела, пушистый, умный, хитрый, злой, серый, бурый, давать(-ет), мычать(-ит), лаять(-ет), стоять(-ит, -ят), спать(-ит), плавать(-ет, -ют), жужжать

(ит), прыгать(-ет), летать(-ет, -ют), он, она, они.

Грамматические формы и типы предложений

1. Это двор (корова, медведь, голубь, жук).
2. Корова мычит. (Собака лает. Кошка спит.)
3. Она дает молоко.
4. Бабочка красивая. (Котенок пушистый.)
5. Красивая бабочка. (Умная собака.)

Связная речь

Это двор. Это корова.

Что делает корова? - Корова мычит.

Что она дает? - Она дает молоко.

Пассивные слова: щенок, кот, курица, утята, гусята, молоко, конура, сарай, баня, гараж, цыплята.

III. Неживая природа *(3 часа)*

1. Вода.
2. Воздух.
3. Явления природы (обобщающее занятие).

Слова: вода, воздух, солнце, молния, дождь, град, снег, облако, ветер, погода, чистый, свежий, крупный, ясный, дуть(-ет), светить (-ит, -ят), греметь(-ит, -ят), в, на.

Грамматические формы и типы предложений

Чистая вода, чистый воздух.

Гром гремит, молния сверкает.

В лесу свежий воздух.

На улице хорошая погода.

Связная, речь (монолог)

Мы вышли на улицу. Погода хорошая. Светит солнце. Свежий воздух. На небе белые облака.

Пассивные слова: холодный, сверкать(-ет, -ют), небо.

IV. Времена года *(7 часов)*

1. Осень.
2. Осенние работы.
3. Зима.
4. Новый год.
5. Весна.
6. Лето.
7. Путешествие во времена (обобщающее занятие).

Слова: осень, зима, весна, лето, день(-и), лед, лужа, осенний(-ие), зимний(-ие), весенний(-ие), летний(-ие), длинный(-ые), короткий(-ие), трава, почки, небо, Дед Мороз, Новый год, елка, дети, подарок(-и), снеговик, санки, лыжи, голый, веселый(-ые), богатый, наступать (-ил, -и, -о), желтеть(-ет, -ют), падать(-ет, -ют), лежать(-ит, -ат), кататься(-ется, -ются), принести, лететь(-ит, -ят), таять(-ет, -ют), бежать (-ит, -гут), зеленеть(-ет, -ют), около.

Грамматические формы и типы предложений

Наступила осень.

Листья желтые.

Птицы улетают.

Дед Мороз принес подарки.

Снег белый.

Связная речь

В детском саду красивая елка. Дети пришли нарядные. Дед Морон принес подарки. Дети пели, плясали, читали стихи около елки.

Пассивные слова: стихи, читали, плясали, нарядные, около.

2 блок. Я ПОЗНАЮ СЕБЯ *(27 часов)*

I. Наше тело *(3 часа)*

1. Мой организм.
2. Личная гигиена.
3. Органы вкуса.

Слова: человек, рука(-и), нога(-и), голова, шея, туловище, пальцы, колено, девочка, мальчик, глаза, уши, нос, рот, язык, зубы, губы брови, волосы, орган(-ы), черный, видеть(-жу, -ит), слышать(-у, -ит -ат), говорить(-ю, -ит, -ят), дышать(-у, -ит, -ат), я, он, ты.

Грамматические формы и типы предложений

Я человек. (Он мальчик. Она девочка.)

У меня есть руки, ноги, голова, туловище.

У нее глаза голубые.

Связная речь

Это мальчик. У него густые брови, черные волосы. А это девочка. У нее голубые глаза, белые зубы, чистые руки. Она смотрит на мальчика.

Пассивные слова: густой(-ые), голубой(-ые), слушать(-ет, -ют), ее, у нее.

II. Детский сад *(5 часов)*

1. Игрушки.
2. Наши игры.
3. В детском саду.
4. Мы отдыхали.
5. Праздники в детском саду (обобщающее занятие).

Слова: кукла, машина, пирамида, мяч, песок, лопатка, совок, ведерко, скакалка, прыгает, насыпает, кидает, бегает, быстро, высоко, весело, далеко, много, через, очень.

Грамматические формы и типы предложений

У детей много игрушек. Мальчик бегает быстро. Девочка прыгает через скакалку.

Связная речь

Дети играют во дворе. У них много игрушек: машина, лопатка, ведерко. Мальчики играют в мяч. Девочки прыгают через скакалку. Детям очень весело.

Пассивные слова: праздник, Сабантуй, Науруз.

III. Семья *(5 часов)*

1. Моя семья.

2. Я вежливый.
3. Мои друзья.
4. Правила поведения в детском саду.
5. Правила поведения в семье.

Слова: семья, мама, папа, дедушка, бабушка, брат (братишка), сестра (сестрёнка), друг, друзья, подруга, вежливый, дружный, добрый(-ая), хороший(-ая), старший(-ая), младший(-ая), пожалуйста, спасибо, извините, здравствуйте, добрый день, до свидания, до встречи, до завтра, помогать(-ю, -ет, -ют), и, а.

Грамматические формы и типы предложений

Это я (мама, папа, брат, сестра).

Это старшая сестра Салима.

Он мой друг.

Моя мама хорошая, добрая.

Связная речь

В нашей семье есть мама, папа, брат, сестра, бабушка и дедушки Мама работает в школе. Папа — инженер. Сестра учится в школе. Бабушка и дедушка на пенсии. Моя семья большая и дружная.

Пассивные слова: учиться, работать (-ет, -ют), на пенсии.

IV. Человек и труд *(14 часов)*

1. Домашний труд (6 ч.).
2. Профессия (4 ч.).
3. Мои вещи (3 ч.).
4. Человек красен трудом (обобщающий урок) (1 ч.).

Слова: дом, этаж, комната, кухня, крылья, посуда, шкаф, стол, стул, утюг, стиральная машина, лопата, грабли, топор, пылесос, курут, мука, тесто, хлеб, суп, белье, пальто, сарафан, рубашка, плиты, шапка, шарф, тапочки, туфли, сапоги, тарелка, чайная ложки, вилка, стакан, брюки, горячий, мягкий, полезный, высокий, кислый, вкусный, резиновые, новое, теплые, варит, печет, моет, стирает, гладит, одевает, надевает, месит, кушает, строит, рубит, профессия, шофер, учительница, воспитательница, телефон, с, по.

Грамматические формы и типы предложений

Я помогаю маме (папе).

Мы с сестренкой весело играем.

Папа говорит по телефону.

Связная речь

Наша семья любит труд. Мама печет вкусные пироги. Сестра гладит белье. Я помогаю папе. Он рубит дрова, я таскаю их в сарай. Дедушка убирается во дворе.

Пассивные слова: убирать(-ет, -ют), сарай, таскать(-ю, -ет), помогать(-ю, -ет).

3 блок. СОЛНЕЧНАЯ СИСТЕМА *(12 часов)*

I. Земля и Солнце *(8 часов)*

1.День и ночь.

2.Когда это бывает?

3.Наши леса.
4.На севере.
5.На юге.
6.Природные богатства родного края.
7.Вода на Земле (реки, озера, моря, океаны).
8.«Что? Где? Когда?» (обобщающее занятие).

Слова: земля, север, юг, олень, край, река(-и), озеро(-а), море(-я), океан(-ы), Башкортостан, яшма, золото, медь, нефть, газ, мёд, пальма(-ы), теплый(-ая, -ые), морозный(-ые), жаркий(-ое, -ая, -ие), входить, заходить, греть(-ет, -ют) добывать(-ет, -ют), ездить(-ят), богатый, светло, жарко, темно, тепло, утром, рано, под.

Грамматические формы и типы предложений

На юге солнце всходит рано.
На севере ездят на оленях.
Под землей есть нефть, газ.

Связная речь

Мы живем в Башкортостане. У нас много золота, яшмы, нефти, газа. Много лесов, зверей. Башкирский мёд очень вкусный.

Мы любим свой край.

Пассивные слова: пчелы, разводить, полярная ночь, мох, лишайник, горизонт.

II. Солнце — источник жизни *(4 часа)*

1. Солнце и жизнь.
2. Солнце и растения.
3. Солнце и животный мир.
4. Солнце и мы.

Слова: источник, свет, шар, жизнь, растения, кора, центр, люди, насекомые, огромный, огненный, яркий, солнечный, прятаться(-чутся), готовить(-ит, -ят), тянуться, расти, жить(-вет, -вут), сильно, слабо, беречь.

Грамматические формы и типы предложений

Солнце- это огромный огненный шар. Солнце дает свет и тепло.

Связная речь

Солнце- это источник жизни. Оно дает свет и тепло. Растения весной и летом растут. Они тянутся к солнцу. Зимой солнце мало греет. Звери прячутся в своих укрытиях. Люди готовят теплую одежду.

Пассивные слова: укрытия, готовить(-ит, -ят).

4 блок. ЧЕЛОВЕК И ЗЕМЛЯ *(11 часов)*

I. Люди на Земле *(3 часа)*

1. Древние люди.
2. Народы мира.
3. Народы Башкортостана.

Слова: народ(-ы), пещера, огонь, шкура, охота, лицо, цвет, Россия, башкир(-ка), русский(-ая), татарин(-ка), узбек(-чка), древний (-ие), смуглый, темный(-ая), светлый(-ая), разный, разговаривать (-ю, -ет, -ют), дружно, вместе, хорошо, другие, всегда, как одна семья.

Грамматические формы и типы предложений

Народы Башкортостана живут дружно. Мы разговариваем им русском языке.

Связная речь

Я - башкир. Живу в Башкортостане. Мой друг Коля. Он русский. Мы всегда играем вместе. В Башкортостане русские, башкиры татары и другие народы живут дружно.

Пассивные слова: разной национальности, говорит по-английски белорусы, украинцы.

I. Моя Родина *(3 часа)*

1. Мой родной язык.
2. Изучаем русский язык.
3. Национальный герой - Салават Юлаев.

Слова: Родина, герой, столица, Уфа, Агидель, поэт, певец, кураист, курай, воин, памятник, свобода, родной, башкирский, бороться (-лся), защищать (-ал), любить (-лю, -ит), гордиться (-жусь, -ится) свой, за, знаем, наша, национальный.

Грамматические формы и типы предложений

Салават Юлаев - герой башкирского народа.
Мой родной язык - башкирский.

Связная речь

Моя Родина - Башкортостан. Наша столица - Уфа. На берегу реки Агидель стоит памятник Салавату Юлаеву. Он национальный герой башкирского народа. Мой родной язык — башкирский. Я изучаю и русский язык.

Пассивные слова: широкий, высокий берег.

II. Народное творчество *(5 часов)*

1. Музыкальные инструменты.
2. Национальная одежда.
3. Народные праздники (заключительное занятие – праздник).

Слова: курай, кубыз, домбра, гармонь, балалайка, музыкальные инструменты, камзол, елян, калпак, сарафан, кушак, кофта, матрешка, косынка, рубашка, Сабантуй, Науруз, Масленица, гулянка, народный, нарядный(-ые), звучать(-ит, -ят), носить(-ит,-ят), проводить(-ит, -ят), сжигать(-ет, -ют), чучело, каждый, там, мелодия, знаменитый, известный, кураист.

Грамматические формы и типы предложений

У каждого народа есть свои музыкальные инструменты. Балалайка - русский народный инструмент.

Связная речь

Каждый народ проводит свои праздники. Сабантуй - праздник башкирского народа. Там проводят конкурсы. Поют песни, пляшут. Варят вкусный бишбармак. Пьют кумыс. Скачут на лошадях. Всем весело.

Пассивные слова: бишбармак, кумыс, скакать(-чет, -чут), конкурс.

Подготовительная группа *(72 часа)*

1 блок ОКРУЖАЮЩИЙ МЕНЯ МИР *(18 часов)*

I. Царство растений *(7 часов)*

1. На огороде.

2. В саду.
3. В поле.
4. В лесу.
5. Лекарственные травы.
6. Посев.
7. Родные просторы (обобщающее занятие).

Слова: лук, редис, чеснок, свекла, грядка, лопата, грабли, лейка, черная рябина, красная рябина, калина, поле, луг, колокольчик(-и), василек, подснежник, одуванчик, сосна, осина, дуб, липа, посевы, рожь, пшеница, овес, урожай, крапива, душица, зверобой, подорожник, ровная, хороший, широкий, синий, желтый, высокий, стройный, крепкий, густой, лекарственный, ухаживать(-ет, -ют), поливать(-ет, ют), полоть(-ит, -ят), радоваться(-ется, -ются), букет, собирать(-ет, ют), родной, природа, простор.

Грамматические формы и типы предложений

Умения употреблять в речи личные местоимения (я, мы, он, она, они) с глаголами настоящего времени, согласовывать имена существительные с прилагательными.

Я поливаю. Мы поливаем.

Он поливает. Они поливают.

Крепкий дуб, стройная сосна, лекарственные травы.

Связная речь

1) Составление диалогов.
2) Составление рассказа по схеме.

- Что это? - Это рябина
- Это дерево или куст? - Это дерево.
- Какие части есть у дерева? - У дерева есть ствол, корень, ветки, листья.
- Какую пользу приносит рябина? - Она дает ягоды.
- Ягоды какие? -Ягоды черные.

Пассивные слова: ствол, корень.

II. Мир животных и человек *(11 часов)*

1. Домашние животные.
2. Мир диких животных и зверей.
3. Домашние птицы и их польза для человека.
4. Перелетные птицы.
5. Зимующие птицы.
6. Жизнь на селе.
7. Жизнь в городе.
8. Насекомые.
9. Жизнь в водных просторах. Рыбы.
10. Путешествие в мир животных и человека (2 часа).

Слова: лошадь, жеребенок(-ята), овца, ягненок(-ята), козленок (-ята), кот (-ята), щенок(-ята), еж, лось, нора, берлога, петух, курица, гнездо, гусята, ласточка, лебеди, кит, дельфин, карп, муравейник, оса, пух, зверь, мышь, мех, рыбак, рога, яйца, мясо, кормушка, зерно, крошка, сено, колючий, перелетный, зимующий, жуёт, поить(-ит, -ят), кормить(-ит, -ят), доить(-ит, -ят), плавать(-ет, -ют), **се**рый, ловить (-ит, -ят).

Грамматические формы и типы предложений

Согласование словосочетаний в роде, числе и падеже с использованием предлогов **в, на.**

Употребление в речи существительных с суффиксами -онок, -енок,
-ата, -ята.

Лиса живет в норе.
Медведь спит в берлоге.
Птицы улетают на юг.
У лошади есть жеребенок.
Котята пьют молоко.

Связная речь

- Кто это?	- Это корова.
- А это кто?	- Это теленок.
- Что делает корова?	- Корова жуёт сено.
- Что дает корова?	- Корова дает молоко.
-Что делает теленок?	- Теленок лежит на сене.
- Кто дает сено корове?	- Корове сено дает папа.
- Где живет корова?	-Корова живет в сарае.

Пассивные слова: гусак, барсук, косуля, голубка, шмель, польза.

2 блок. Я - ЧЕЛОВЕК *(15 часов)*

I. Мой внутренний мир *(4 часа)*

1. Я и мои друзья.
2. Мои поступки.
3. Мои увлечения.
4. Все работы хороши — выбирай на вкус.
5. Каким я хочу стать (обобщающее занятие).

Слова: друзья, дружить (-у, -ит), вместе, поступок, уважать, любить, уступать, здороваться, ухаживать, убирать, слушать, сказка, смотреть, мультфильм, рисовать, петь, танцевать, умный, послушный, аккуратный, здоровый, художник, профессия.

Грамматические формы и типы предложений

Умение употреблять существительные в творительном падеже с предлогами **с** и **за** и местоимения **мой, твой**.

Я дружу с Азаматом. А я ухаживаю за сестренкой.

Связная речь (диалог)

- У тебя есть сестренка?	- У меня естьсестренка.
- Как ее зовут?	- Ее зовут Алия.
- Ты любишь сестренку?	- Да, я люблю сестренку.
- Что ты любишь делать?	- Я люблю рисовать (петь, танцевать).
- Кем ты хочешь стать?	- Я хочу стать художником.

Пассивные слова: хочу стать.

II. Солнце, воздух и вода — наши лучшие друзья *(3 часа)*

1. Чем пахнет воздух?
2. Вода — это жизнь.
3. Солнце, воздух и вода — наши лучшие друзья (обобщающее занятие).

Слова: воздух, туча, запах, движение, погода, люди, мутный, сильный, тихий, ясный, яркий, черный, польза, почва, влажный, влага, дуть, свежий, капля, крупный, частый, мелкий, испугаться.

Грамматические формы и типы предложений

Умение различать одушевленные и неодушевленные предметы и правильно употреблять вопросительные предложения с вопросами ***кто? что?***

Что?	Кто?
вода	друзья
ветер	дети
воздух	люди
дождь	человек

Связная речь (по картине)

Умение употреблять в речи предлог **от** и приставки **у-, вы-**.
Картина К.Е. Маяковского «Дети, бегущие от грозы».

- Что мы видим на картине?	- На картине мы видим дождь.
-Кто бежит от грозы?	- От грозы бегут дети.
- Ветер какой?	-Ветер сильный.
- А тучи какие?	- Тучи черные.
- Небо какое?	- Небо темное.
- Дети испугались грозы?	- Да, дети испугались грозы.

Пассивные слова: да, дети, испугаться, гроза, убежали, выбежали.

III. Скоро в школу *(3 часа)*

1. Мы играем.
2. Мы занимаемся.
3. Скоро в школу (обобщающее занятие).

Слова: конструктор, собирать, лото, шашки, кубик, мозаика, глина, пластилин, карандаш, цветной, бумага, тетрадь, книга, ручка, пенал, портфель, интересный, любимый, мягкий, ножницы, скоро, школа, ученик, ученица, форма, уже.

Грамматические формы и типы предложении

Употребление в речи утвердительных и отрицательных предложений и предложений с однородными членами.

Мы играем в лото, кубики, шашки.
Да, у меня есть портфель.
Нет, я не пойду в школу.

Связная речь (монолог)

Я скоро пойду в школу. У меня есть портфель, книги, тетрадь. Мне купили школьную форму. Я уже большой.

Пассивные слова: у меня, линейка, фломастер, клей.

IV. Взрослые и дети (5 часов)

1.Мои родные и близкие.
2.Я и люди.
3.Я в кинотеатре.
4.Я в автобусе.
5.Я на улице (правила дорожного движения).

***Слова*:** прабабушка, прадедушка, родные, внук, внучка, тетя, дядя, люди, кинотеатр, зал, артист, спектакль, автобус, водитель, кондуктор, пешеход, светофор, улица, место, дорога, тротуар, парк, уступить, не шуметь, не мешать, не кричать, не грубить, не сорить, не переходить, остановка, старенький, дорожный, знак, ждать, внимание, проходить, по, вязать(-ет, -ут), учить(-ит, -ат), печь(-ёт), смотреть(-ит, -ят), читать(-ет, -ют), убирать(-ет, -ют).

Грамматические формы и типы предложений

Употребление в речи глаголов повелительного наклонения с отрицательной частицей **не** и существительных в дательном падеже с предлогом **по.**

В кинотеатре не шуми.
На красный свет дорогу не переходи.
Пешеходы идут по тротуару.

Связная речь (диалог)

-У тебя есть бабушка (прабабушка)? -Да, у меня есть бабушка.
-А дедушка есть? -Нет у меня дедушки.
-А у меня есть и дедушка и бабушка.
-Юлай, ты пойдешь на улицу? -Да, пойду.
-Только на улице не сори, не кричи. - Ладно!

3 блок. МОЯ РОДИНА *(15 часов)*

I. Родина - мать *(10 часов)*

1. Россия - Родина моя.
2. Мой родной Башкортостан.
3. Символика Российской Федерации и Республики Башкортостан.
4. Малая Родина.
5. Уральские горы.
6. Озера, реки.
7. Заповедники.
8. Города России и Башкортостана.

9. Славные защитники Отчизны.
10. Широка страна моя родная (обобщающее занятие).

Слова: Россия, Москва, центр, город, широкий, высокий, дом, завод, фабрика, магазин, гимн, герб, флаг, президент, село, башкирский, заповедник, помнить, гордиться, протекать, санаторий, отчизна.

Грамматические формы и типы предложений

Умение различать существительные в единственном и множественном числе, образовывать и употреблять в речи существитель ные множественного числа.

гора- горы	дом - дома
улица -улицы	фабрика - фабрики
река -реки	магазин - магазины

Диалоги и связные высказывания

- Где ты живешь?	- Я живу в городе Сибае.
- В какой республике ты живешь?	- Город Сибай находится в Республике Башкортостан.
- На какой улице живешь?	- Я живу на улице Горняков.
-Назови столицу России.	- Столица России - Москва.
- А столицу Башкортостана знаешь?	- Да, столица Башкортостана - Уфа.
- Какой это город Уфа?	- Уфа - красивый город, Там широкие улицы, высокие дома.
-А заводы и фабрики есть?	- Да, заводов и фабрим в Уфе много.

Пассивные слова: республика.

II. Современные деятели культуры *(5 часов)*

1. Детские писатели.
2. Детские композиторы и песни.
3. Артисты.
4. Художники.
5. Путешествие в мир искусства.

Слова: писатель, песня(-и), певец(-ы), композитор, артист, художник, картина, сказка, стих, рассказ, былина, догадка, музыка, народный, музей, детский, выставка, посетить, сочинять, писать.

Грамматические формы и типы предложений

Умение употреблять в речи вопросительные предложения с вопросительными словами ***какой (ая, -ое, -ые).***

-Какие песни написала Альфия Зиннурова?
-Альфия Зиннурова написала песню «Кубаляк», «Маме».
-Какое стихотворение написал Мустай Карим?
-Мустай Карим написал стихотворение «Я - россиянин».

Связная речь (монолог)

У нас много композиторов, художников, писателей, артистов. Я знаю творчество Мустая Карима. Он написал много стихов. Знаю я и песни Альфии Зиннуровой. Люблю их петь. Они мне нравятся.

Пассивные слова: их, мне, нравятся.

4 блок. НАЦИОНАЛЬНАЯ КУЛЬТУРА *(25 часов)*

I. Башкирская культура *(12 часов)*

1. Жилище и его убранство.
2. Посуда.
3. Блюда.
4. Одежда.
5. Декоративно-прикладное искусство.
6. Занятия башкир.
7. Орудия труда.
8. Устное народное творчество.
9. Музыкальные инструменты и песни.
10. Народные игры и праздники.
11. Традиции и обычаи.
12. Путешествие в прошлое башкирского народа (обобщающее занятие).

Слова: юрта, палас, подушка, лоскутное одеяло, сундук, ковер, полотенце, самовар, кумган, поднос, тустак, бишбармак, блюда, катык, бульон, айран, талкан, буза, хакал, кашмау, тюбетейка, бишмет, сарык, узор, браслет, серебро, охота, скотоводство, рыболовство, бортничество, соты, топор, тирмэн, коса, станок, ткацкий, мандолина, тальянка, «Ак тирак», куряш, скачки, аулак ой, свадьба, исем, туй, молоть, вязать, варить, вышивать, ставить, музыкант, струны, струнный, играть - сыграть, плясовой.

Грамматические формы и типы предложений

Употребление в речи вопросительных предложений с вопросительными словами ***где? куда? чем?.***

-Куда они уезжали летом?	- Они уезжали на летовку.
-Где жили башкиры?	- Они жили в юртах.
-Чем занимались башкиры?	- Башкиры занимались скотоводством, охотой, бортничеством, рыболовством.

Связная речь (монолог)

Башкиры вели кочевой образ жизни. Они уезжали на летовку (джайляу). Там ставили юрты из войлока. На землю стелили паласы. Башкиры ели, сидели, спали на паласах.

Пассивные слова: кочевой строй, войлок, летовка, стелить, язычок.

II. Русская культура *(12 часов)*

1. Изба и ее утварь.
2. Блюда.
3. Посуда.
4. Одежда.
5. Декоративно-прикладное искусство.
6. Промыслы и занятия.

7. Орудия труда.
8. Устное народное творчество.
9. Музыкальные инструменты и песни.
10. Народные гуляния.
11. Традиции и обычаи.
12. Путешествие в прошлое русского народа в виде КВН.

Слова: губа, утварь, лавка, печь, полати, ухват, чугун, щи, блины, пельмени, шаль, каша, горшок, юбка, лапти, шуба, роспись, хохлома, промысел, плести, лыко, овощеводство, земледелие, серп, плуг, борона, былина, барабан, бубен, дудочка, гулянье, венок, хоровод, проводить, частушка, задорный.

Грамматические формы и типы предложений

Умение употреблять в речи числительные 2, 3, 4 с существительными в родительном падеже единственного числа и 5, 6 - с существительными родительного падежа множественного числа.

Один стол.	Одна печь.
Два дома.	Пять домов.
Три избы.	Шесть венков.
Четыре мальчика.	Семь девочек.

Связная монологическая речь

Русские люди жили в деревянных избах. Бедные люди жили и маленькой избе. Богатые строили большие дома. В крестьянской избе стоял посреди один стол и четыре лавки. В углу была печь. На больших лавках лежала постель. На полатях спали старики и дети.

Пассивные слова: посередине, крестьянский, темный, законченный, изба.

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы башҡорт халҡының көнкүреше, үткән тарихы, әҙәбиәте, сәнғәте, мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыуға парциаль программа

Ғәлиева Ғ. Ғ.

Аңлатма яҙыу

Балаларҙы тормошҡа әүҙем ҡараштa булған, кешелек донъяһының мәҙәни һәм рухи ҡиммәттәрен ыңғай ҡабул иткән ирекле һәм милләтенә тоғро булған, уны үҫтереүгә ынтылыусы шәхес итеп тәрбиәләү - беҙҙең мөһим бурысыбыҙ.

Был эште тормошҡа ашырыуҙа кескәйҙәрҙе башҡорт халҡының көнкүреше, үткән тарихы, ауыҙ-тел ижады, сәнғәте, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән таныштырыу ҙур һөҙөмтә бирә.

Тәрбиәселәр заман үҙгәрештәре менән бәйле педагогик асыштар, технологик алымдар ҡулланып, халыҡ тәрбиәүи ҡанундарына әүҙем таянып, фольклор, әҙәбиәт, сәнғәт, ауыҙ-тел ижады аша был бурысты үтәй ала. Әлбиттә, тыуған яҡты өйрәнеү халыҡтың аш-һыуы, кәсеп-һөнәре, кейеме, йолаларына ғына ҡайтып ҡалмай. Был эш башҡорт теле, музыка, һынлы сәнғәт дәрестәрендә, уйын

эшмәкәрлегендә, байрам иртәлектәрендә, һәр төрлө күңел асыу кисәләрендә киң һәм уйланылып алып барылырга тейешле.

Төп тәрбиәүи бурыстар

1. Тыуған илгә, тыуған ергә, уның тәбиғәтенә, туған телгә мөхәббәт хистәре тәрбиәләү.
2. Башҡорт халҡының көнкүреше, уның үткәне, булмышы менән ҡыҙыҡһыныу тойғолары тәрбиәләү.
3. Музыкаль сәнғәткә, йырға, бейеүгә, уйындарға ҡыҙыҡһыныу, уларҙы өйрәнеү теләге тәрбиәләү.
4. Халыҡтың йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу.
5. Башҡорт халҡына хас әхлаҡи сифаттар тәрбиәләү. Әхлаҡи һәм әҙәплелек ҡағиҙәләрен ҡыҙ һәм ир балаларға айырым рәүештә төшөн дөрөү һәм үтәргә ғәҙәтләндереү.
6. Ауыҙ-тел ижады, нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәре, сәсәндәр ижады менән таныштырыу.
7. Башҡорт биҙәктәре, декоратив-һөнәр һәм башҡа көнкүреш әйберҙәренең ябай төрҙәре менән таныштырыу.
8. Халыҡ календары һәм милли байрамдар тураһында төшөнсәләр биреү.

Кескәйҙәр төркөмө (3 йәштән 4 йәшкә тиклем)

Өс йәшлек баланың өлкәндәр тарафынан үҙенең яратылыуын белеүе мөһим. Ул түбәндәге төшөнсәләрҙе үҙләштерергә тейеш:

- Мин Азамат. Минең атайым, әсәйем бар. Был минең ғаиләм. Беҙҙең тирә-яҡта матур тәбиғәт. Бүлмәлә гөлдәр, баҡсала, урманда, туғайҙа ағастар, ҡыуаҡтар, үләндәр, сәскәләр үҫә. Йәшелсә баҡсаһында төрлө йәшелсәләр үҫә.

Тирә-яҡта ҡош-ҡорт, хайуандар. Ҡырағай хайуандар. Улар барыһы ла тәбиғәт балалары. Ҡояш барлыҡ тереклекте йылыта, нур һибә, йән бирә.

Беҙ - бәхетле балалар!

Халыҡ ижады

Әүрәткестәр, мауыҡтырғыстар, һөйҙөргөстәр, бармаҡ уйындары, йыуатҡыстар, сәңгелдәк йырҙары, әкиәттәр уҡыу. Башҡорт халыҡ әкиәттәренән: «Төлкө менән айыу», «Ҡуяндың ҡолағы ниңә оҙон булған?», «Кем көслө?», «Бүре менән кәзә» һ. б.

Тәбиғәт менән йыл миҙгелдәрендәге үҙгәрештәр, ҡоштар, өй һәм ҡырағай хайуандар, ағастар, гөлдәр, баҡса гөлдәре менәм таныштырыуҙы экскурсияларҙа һәм башҡа үҙаллы эшмәкәрлектә, дәрестәрҙә дауам итеү.

Һүрәт төшөрөү

Һүрәт төшөрөү, әүәләү, ҡорама йәбештереү (аппликация) дәрестәрендә ябай ғына алымдарҙы үтәү күнекмәләрен булдырыу талап ителә. Балаларҙа яҡын-тирәләге гүзәллекте, хозурлыҡты күреп, уны тасуирлау теләге тыуҙырыу. Ҡағыҙ, буяу, пластилин, балсыҡ менән эшләргә өйрәтеү. Тура һыҙыҡтар ярҙамында «балаҫ», «таҫтамал», «юл һыҙыу».

Әүәләү

Балсыҡты йомарлау хәрәкәттәре менән ус төбөндә әүәләп, туп, шар яһау.

Уларҙы йәйеп, йоҡартып ҡоймаҡ, көлсә һ. б. бешереү.

Ҡорама йәбештереү

Төрлө төҫтәге түңәрәк, өсмөйөш, дүртмөйөштәрҙе, әҙер башҡа элементтарҙы ҡағыҙға һалып теҙеп, төрлө биҙәктәр яһарға өйрәтеү. Элементтарҙы тәртип менән теҙеп, йәбештереү.

Уйындарҙа төҫө, ҙурлығы буйынса бер булған әйберҙәрҙе, элементтарҙы йыя белеү. Ҡурсаҡтарҙы, уларҙың күлдәктәрен биҙәү.

Һүрәт төшөргән ваҡытта төҫтәрҙең баҙыҡлығына, башҡорт рәссамдарының, һөнәрмәндәренең әҫәрҙәренә, предметтарына иғтибар итеү. «Балаҫ», «таҫма» төшөрөү. Вертикаль һәм горизонталь һыҙыҡтар һыҙырға өйрәтеү. Ҡурсаҡтарға «таҫтамал», «ҡулъяулыҡ» яһап биреү.

Тәбиғәттәге ябай күренештәрҙе һүрәтләү: ҡояш, болот, сәскәләр һ. б. Башҡорт халыҡ орнаменты менән танышыу.

Музыкаль ижад

Был төркөмдә төп иғтибар музыкаль фольклорға бирелә. Сәңгелдәк йырҙары, ҡумыҙ тыңлатыу. Ҡурсаҡ менән уйнағанда һамаҡтар, һикерткестәр, һөйҙөргөстәр көйләтеү.

Эшкәртелгән халыҡ бейеүҙәре менән таныштырыу. «Таҡмаҡ» - башҡорт халыҡ көйө. А. Ҡобағошов эшкәртеүендә. «Бейеү» - башҡорт халыҡ көйө. А. Ҡобағошов эшкәртеүендә һ. б.

Уйындар һәм күңел асыуҙар, байрам иртәлектәре.

Өйрәтелгән уйындар, шиғырҙар, йырҙар, бейеүҙәр ярҙамында «Уңыш», «Алтын көҙ», «Әсәйҙәр көнө», «Һабантуй» үткәреү.

Уртансы төркөм (4 йәштән 5 йәшкә тиклем)

Тәбиғәт һәм кеше араһындағы бәйләнештәргә иғтибар биреп, донъялағы барлыҡ тереклек, йән эйәләре, үҫемлектәргә лә йәнле кешегә ҡараған кеүек мөғәмәлә итергә кәрәклекте аңлатыу. Был эштә әкиәттәр, шиғырҙар, хикәйәләр ярҙамға килә.

Тәбиғәттәге үҙгәрештәр яҙ, йәй, көҙ, ҡыштың бер-береһенән нимә менән айырылыуын, ҡабатланмауын, һәр миҙгелдең үҙенә күрә матурлығын күрергә өйрәтеү, күҙәтеүсәнлекте үҫтереү.

Әкиәттәр аша балаларға әхлаҡи, рухи тәрбиә биреү. Яҡшылыҡ һәм яманлыҡты, изгелек һәм яуызлыҡты айыра белеү. «Кем көслө?», «Бишбармаҡ», «Һарыбай», «Ҡыҙыҡай менән айыу» әкиәттәре. Әкиәт геройҙары аша кешеләрҙәге кәмселектәрҙе, тиҫкәре холоҡ сифаттарын табып, уларҙы хупламау һыҙаттары тәрбиәләү.

Мәҡәлдәр, әйтемдәр, һанамыштар, алғыштарҙың ябайҙары менән таныштырыу.

Һынлы сәнғәт һәм көнкүреш әйберҙәре.

Балсыҡ, ҡағыҙ, тәбиғи материалдар (йүкө, тубырсыҡ һ. б.) ярҙамында төрлө уйынсыҡтар, предметтар яһарға өйрәтеү. Матурлыҡты, образлылыҡты таба, күрә белеү. Орнамент элементтарынан контраст төҫтәр нигеҙендә төрлө биҙәктәр яһау

(«балаç», «таçтамал» биҙәү).

Әүәләү

Балсыҡтан һәр төрлө һауыт, уйынсыҡ эшләү. Уларҙы йоҡа, нәҙек таяҡ менән биҙәкләү.

Ҡорама йәбештереү

Башҡорт орнаменты өçтөндә эш. Ритм, симметрия, форма, төç тойомлауҙы тәрбиәләү. Биҙәктең төҙөлөшөн аңлап, уны дөрөç йыя, төҙөй белеү. Ҡағыҙҙы икегә бөгөп, унан өсмөйөш, квадрат, тәре, баçҡыстар киçә белеү.

«Ҡарға буткаһы», «Нардуған», «Әсәйҙәр байрамы», «Кәкүк сәйе», «Һабантуй», «Аулаҡ өй», «Өй туйлау» һ. б.

Сәсәндәр бәйгеһе. Сюжетлы-ролле уйындар аша «Ҡунаҡ ҡаршы лау», «Исем ҡушыу» йолалары менән таныштырыу. Һынлы сәнғәт һәм көнкүреш әйберҙәре менән таныштырыу.

Өлкәндәр төркөмө (5 йәштән 6 йәшкә тиклем)

Тирә-йүн менән таныштырыу һәм телмәр үçтереү. Тәбиғәттәге булған үҙгәрештәрҙе кешеләр тормошо менән бәйләү.

Тыуған ил - Ватан, Башҡортостан. Башҡортостан иле - күп милләтле ил, төп халыҡ - башҡорт.

Республиканың гербы, флагы, гимны.

Башҡортостанда хужалыҡ эштәре. Малсылыҡ, игенселек, ҡош ҡорт үрсетеү, умартасылыҡ, солоҡсолоҡ, урмансылыҡ, йылҡысылыҡ эштәре. Халыҡтың боронғо кәсептәре.

Йәнлек, үçемлектәргә ҡарата һаҡ ҡараш тәрбиәләүҙе дауам иттереү. Башҡортостандың тәбиғәт ҡомарткылары: Талҡаç күле, Салауат мәмерйәһе, Янғантау, Ҡорғаҙаҡ, Усолка, Ирәмәл, Ирәндек, Ямантау, Шүлгәнташ.

Данлыҡлы кешеләребеҙ. Халҡыбыҙҙың батырҙары, ғалимдары, сәнғәт оçталары: Салауат Юлаев, Шәһит Хоҙайбирҙин, Зәки Вәлиди, Муса Мортазин, Жәлил Кейекбаев, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Йомабай Иçәнбаев һ. б.

Фәйзи Ғәскәров исемендәге бейеү ансамбле. Башҡортостандың цирк артистары. Ҡурай оçталары.

Башҡорт милли аштары. Төрҙәре (өлөш, һурпа, ыумас, ҡурмас, күмәс, бишбармаҡ, талҡан, бауырһаҡ, эремсек, сейәле май, буҙа, ҡаҙы, тултырма, бәлеш һ. б.).

Милли уйындар. «Тирмә», «Ҡапҡа сығышлы», «Гөлгөлдәк», «Аҡ тирәк, күк тирәк», «Ал кәрәкме, гөл кәрәкме?» уйындары.

Милли кейем. Ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат кейеме.

Балаларҙа хеҙмәткә әүәçлек, өлгөрлөк, уңғанлыҡ һыҙаттарын тәрбиәләү өсөн баҡсала тейешле шарттар тыуҙырырға кәрәк: бәйләү, сигеү, тегеү, юныу, ҡатыу һөнәрҙәренә өйрәтеү.

Йола, миҙгел һәм календарь байрамдарын үткәреү.

Музыкаль сәнғәт

Тыңлау өсөн: Урал. *Башҡорт халыҡ йыры*. Туған телем. А. *Ҡобағошов музыкаһы, З. Биишева һүҙҙәре*. Ураҙа мөнәжәте. *А. Ҡобағошов музыкаһы.* Урман иртәһе. *Р. Сабитов*

музыкаһы. Бәлли-бәү. *Р. Ҡасимов музыкаһы, Й. Гәрәй һүҙҙәре.* Бишек йыры. *Р. Сәхәуетдинова музыкаһы, Т. Миннулин һүҙҙәре***.** Ҡумыҙ, ҡурай моңон тыңлатыу.

Бейеү һәм музыкаль ритмик хәрәкәттәре

«Хәтирә», «Алты егет». Башҡорт халыҡ көйҙәре. *А. Ҡобағошов эшкәртеүендә.*

Түңәрәктә бейеү. *А. Кәримов музыкаһы.* Ҡулъяулыҡтар менән парлап бейеү. *Ш. Ҡолбарисов музыкаһы.* Яулыҡ һалыш. *Башҡорт халыҡ көйө.* Беҙ ун ике ҡыҙ инек. *М. Бикбова музыкаһы һәм һүҙҙәре.* Нардуған. *Башҡорт халыҡ көйө***.** Ебегән. *Башҡорт халыҡ көйө, А. Ҡобағошов эшкәртеүендә.* Баҡыр төп. *Ш. Ҡолбарисов музыкаһы.* Таһыл егет. *Ш. Ҡолбарисов музыкаһы.* «Ҡурай», «Наза».

Әкиәттәр

«Ирәндек», «Ҡурайсы», «Шаян бесәй», «Һаран менән йомарт» әкиәттәре. Уларҙың эстәлеге аша балаларға ғәҙеллек, намыҫлылыҡ, кешелеклек, батырлыҡ, азатлыҡҡа ынтылыш, йомартлыҡ, тыйнаҡлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ, сабырлыҡ, ышаныслыҡ сифаттары, тәүфиҡ тураһында төшөнсәләр биреү.

Ырыуҙар тураһында мәғлүмәт. Аралашыу традициялары, туғанлыҡ терминдары. Мөрәжәғәт, мөнәсәбәт терминологияһы *(апай, ағай, олатай, инәй, ҡартатай, әбей, ҡустым, һылыу, һеңлем һ. б.).*

Итәғәтлелеккә өйрәтеү. Кеше һөйләшкән ваҡытта һүҙен бүлдермәҫкә, ололарҙың алдынан уҙмаҫҡа, ир-аттан алда һүҙ башламаҫҡа, кешегә өндәшкән ваҡытта асыҡ йөҙлө, яғымлы булырға, кешеләргә һәр ваҡыт яҡшы теләктә булырға өйрәтеү.

Йола һәм миҙгел байрамдары

«Уңыш», «Нардуған», «Яңы йыл», «Науруз», «Ҡатын-ҡыҙҙар көнө», «Кәкүк сәйе», «Ҡарға бутҡаһы», «Һабантуй» үткәреү.

Ҡорбан һәм Ураҙа байрамдары тураһында мәғлүмәттәр биреү.

Хеҙмәт байрамдары, өмәләр: «Йөн тетеү», «Кейеҙ, тула баҫыу», «Һуғым һуйыу».

Һынлы сәнғәт

Рәсем төшөрөү. Башҡортостандың һынлы һәм декоратив сәнғәте менән таныштырыу.

Балаҫ һуғыу, сигеү алымдары менән таныштырыу. Башҡортостан орнаментының яңы элементтары менән танышыу, уларҙы һүрәтләй белеү, көнкүреш предметтарын алмаштырыусы шаблондарҙы биҙәй белеү (камзул, еләк, ашъяулыҡ һ. б.).

Әүәләү

Ҡымыҙ һауыты, ижау, башҡа кәрәк-яраҡтарҙы яһау, уларҙы биҙәү. Айыу, бүре һындарын әүәләү.

Ҡорама йәбештереү

Ҡағыҙ, елем ярҙамында күмәк эштәр башҡарыу. Һәр төрлө элементтар, формалар киҫә белеү. Ҡурсаҡтарҙың кейемен биҙәү. «Ағиҙел» берекмәһенең көнкүреш биҙәү әйберҙәре менән таныштырыу. Күргәҙмәләр ойошторою.

Мәктәпкә әҙерлек төркөмө (6 йәштән 7 йәшкә тиклем)

Тирә-йүн менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаларҙың һүҙлеген байытыу, бәйләнешле телмәр үҫтереү. Дөрөҫ, үҙ аллы эшмәкәрлек, уйын барышында һәм әңгәмәләр аша балаларға Башҡортостандың беҙҙең тыуған ил булыуын, Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы икәнлеген төшөндөрөү, республиканың символдары - герб, гимн, флаг менән таныштырыу.

Башҡортостан - күп милләтле республика. Унда рустар, татарҙар, сыуаштар, мариҙар, украиндар һәм башҡа халыҡтар ирекле йәшәй тигән төшөнсәне биреү.

Башҡорт халҡының милли батырҙары - Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов, Юлай Аҙналин һ. б. Граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандары Таһир Күсимов, Миңлеғәли Шайморатов, Муса Мортазин, Александр Матросов (Шакирйән Мөхәмәтйәнов) һ. б. - халҡыбыҙҙың ғорурлығы.

Башҡортостандың күренекле кешеләре, сәнғәт, әҙәбиәт оҫталары - Мәжит Ғафури, Рәшит Ниғмәти, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Рәми Ғарипов, Арыҫлан Мөбәрәков, Ғата Сөләймәнов, Фәриҙә Ҡудашева, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Әхмәт Лотфуллин, Йомабай Иҫәнбаев, Рәшиҙә Туйсина һ. б. Улар тураһында әңгәмәләр, кисәләр үткәреү, фильмдар ҡарау.

Башҡортостандың ҡалалары. Балалар йәшәгән ерҙәге халыҡтың төп кәсебе.

Милли кейемгә һөйөү, ҡыҙыҡһыныу тойғоһо тәрбиәләү.

Нәфис әҙәбиәт, ауыҙ-тел ижады менән таныштырыу. Ҡобайырҙар, йомаҡтар, һанашмаҡтар, тиҙәйткестәр, бармаҡ һанауҙар һ. б. менән таныштырыу һәм уларҙы өйрәтеү.

Әкиәттәр - «Ҡурайсы», «Ирәндек», «Төлкө менән әтәс», «Саҡ менән Суҡ», «Әбйәлил», «Урал батыр».

Һынлы сәнғәт

Тыуған илебеҙ Рәсәйгә, Башҡортостанға һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү, уларҙың геральдикаһына характеристика биреү.

Тамбурлы һәм ҡусҡарлы сигеү алымдары менән таныштырыу. Кейеҙ, балаҫ һуғыу. Уларҙың композицияһы һәм орнаменттары менән таныштырыу. Ағас эшкәртеү һөнәре менән таныштырыу. Йүкә, ҡайын ағастарының үҙенсәлектәре.

Коллектив эштәр башҡарыу (ашъяулыҡ, шаршау, ҡулъяулыҡ сигеү һ. б.).

Әүәләү

Уйынсыҡтар, сувенирҙар, һауыт-һаба, ҡурсаҡтар эшләргә өйрәтеү. Уларҙы биҙәү (бал һауыты, тәрилкәләр, сулпылар һ. б.).

Ҡорама йәбештереү

Биҙәктәрҙе, элементтарҙы ҡағыҙға йәки предметҡа дөрөҫ һалып, ҡырҡып йәбештереү. Төрлө шаблондарҙы орнамент менән биҙәү.

Һүрәт төшөрөү

Үҙ-аллы һүрәт төшөрөү һәләтен үҫтереү. Башҡорт халыҡ орнаменты биҙәктәрен ҡулланып, милли кейемдәрҙе, тирә-йүндәге предметтарҙы һүрәтләү.

Йыр һәм бейеү

Башҡортостан гимнын тыңлап таныу. Тыңлау өсөн - Туған телем. *А. Ҡобағошов музыкаһы, З. Биишева һүҙҙәре.* Ғәйет байрамында, *А. Ҡобағошов музыкаһы, Г. Юнысова*

һүҙҙәре. Кәкүк. *З. Исмәгилов музыкаһы, Ҡ. Даян һүҙҙәре.*

Бейеү һәм уйындар

«Ебегән», «Баҡыр төп» һ. б. өлкәндәр төркөмөндә өйрәнгән уйындарҙы нығытыу.

Бейеү. *Башҡорт халыҡ көйө. А. Ҡобагошов эшкәртеүендә.*

Егеттәр. *Р. Ҡасимов музыкаһы.*

«Аҡ тирәк», «Наза» һ. б. халыҡ уйындарын нығытыу, өйрәнеү.

Ҡулланылған әҙәбиәт:

Конституция Российской Федерации от 12.12.1993 (с учетом поправок, внесенных Законами РФ о поправках к Конституции РФ от 30.12.2008 № 6-ФКЗ, от 30.12.2008 № 7-ФКЗ), «Российская газета», № 7, 21.01.2009 - http://docs.cntd.ru/document/9004937.

Конституция Республики Башкортостан от 24.12.1993 № ВС-22/15, первоначальный текст документа опубликован в издании «Ведомости Верховного Совета и Правительства Республики Башкортостан», 1994, № 4 (22), ст. 146 - http://base.garant.ru/17700023/.

Декларация прав ребенка. Принята резолюцией 1386 (XIV) Генеральной Ассамблеи ООН от 20 ноября 1959 года - http://docs.cntd.ru/document/1901035.

Конвенция ООН о правах ребенка. Принята резолюцией 44/25 Генеральной Ассамблеи от 20 ноября 1989 года - http://www.un.org/ru/documents/decl_conv/conventions/childcon.

Закон РФ от 25.10.1991 N 1807-1 (ред. от 02.07.2013) "О языках народов Российской Федерации" - http://base.garant.ru/10148970/

Закон о языках народов Республики Башкортостан от 15 февраля 1999 №216-З, изменен 14 июля 2010 №289-З - http://www.morb.ru/law/rb/216.pdf

Федеральный закон от 24 июля 1998 г. N 124-ФЗ «Об основных гарантиях прав ребёнка в Российской Федерации» - http://base.garant.ru/179146/.

Закона РБ «Об основных гарантиях прав ребенка в Республике Башкортостан» от 31 декабря 1999 г. №44-з - http://www.morb.ru/law/rb/44.pdf

Долгосрочная целевая программа «Развитие образования Республики Башкортостан на 2013-2017 годы» - http://docs.cntd.ru/document/463509413

Республиканская целевая программа сохранения, изучения и развития языков народов Республики Башкортостан на 2012-2016 годы - http://docs.cntd.ru/document/463509921

Закон Российской Федерации «Об образовании в РФ» от 29.12.2012 года № 273 – ФЗ - http://www.rg.ru/2012/12/30/obrazovanie-dok.html.

Закон «Об образовании в РБ» от 27.06.2013 №696-з - http://www.morb.ru/projects/696.pdf

Федеральный государственный образовательный стандарт дошкольного образования. Приказ МОиН РФ № 1155 от 17.10.2013. http://www.rg.ru/2013/11/25/doshk-standart-dok.html

Карабанова О.А., Алиева Э.Ф., Радионова О.Р., Рабинович П.Д., Марич Е.М. Организация развивающей предметно-пространственной среды в соответствии с федеральным государственным образовательным стандартом дошкольного образования. Методические рекомендации для педагогических работников дошкольных образовательных организаций и родителей детей дошкольного возраста / О.А. Карабанова, Э.Ф. Алиева, О.Р. Радионова, П.Д. Рабинович, Е.М. Марич. – М.: Федеральный инсти-тут развития образования, 2014. – 96 с.

Концепция духовно-нравственного развития и воспитания личности гражданина России / под ред. А.Я. Данилюка, А.М. Кондакова, В.А.Тишкова. – М.: Просвещение, 2010.

Примерная основная образовательная программа дошкольного образования. Одобрена решением федерального учебно-методического объединения по общему образованию (протокол от 20 мая 2015 г. № 2/15).

От рождения до школы. Примерная основная образовательная программа дошкольного образования (пилотный вариант) / Под ред. Н.Е. Вераксы, Т.С. Комаровой, М.А. Васильевой. — 3-е изд., испр. и доп. — М.: Мозаика-синтез, 2017.